Рәшит Шәкүр

# Башҡорт диалектологияһы

*Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан тәҡдим ителде*

2-се баҫма

КИТАП
ӨФӨ · 2020

УДК 81'28
ББК 74.268 Баш-9
Ш91

Р е ц е н з е н т т а р:

| | |
|---|---|
| *И. Ғ. Ғәләүетдинов,* | филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты; |
| *Г. Һ. Бохарова,* | филология фәндәре докторы, профессор; |
| *Р. В. Әлмөхәмәтов,* | педагогия фәндәре кандидаты, профессор |

**Шәкүр Рәшит**

Ш91 Башҡорт диалектологияһы : уҡыу ҡулланмаһы / Рәшит Шәкүр. – 2-се баҫма. – Өфө : Китап, 2020. – 256 бит.

ISBN 978-5-295-07371-7

Китап башҡорт теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен өйрәнеүгә арналған. Ул нигеҙҙә юғары уҡыу йорттарының башҡорт филологияһы факультеттары һәм бүлексәләрендә төп предметтарҙың береһе һаналған «Башҡорт диалектологияһы» курсы программаһының йөкмәткеһен иҫәпкә алып яҙылды. Хеҙмәттең инеш өлөшөндә диалектология тураһында дөйөм төшөнсә бирелә, уның өйрәнеү объекты, бурыстары һәм маҡсаттары билдәләнә, диалектология һәм бүтән фән тармаҡтары, башҡорт теленең һәм диалекттарының бүтән төрки телдәргә мөнәсәбәте, диалект шарттарында милли әҙәби телде уҡытыу һ. б. мәсьәләләр ҡарап үтелә. Шулай уҡ башҡорт теленең диалекттарын өйрәнеү тарихы, диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе классификациялау проблемаһы, уның принциптары һәм критерийҙары яҡтыртыла.

Хәҙерге классификация буйынса, башҡорт телендә өс территориаль диалект (көньяҡ, көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар), ун алты һөйләш һәм ун туғыҙ һөйләшсә иҫәпләнә. Һәр бер диалектҡа һәм һөйләшкә ҡарата уларҙың биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы, тарихы, көнкүреше, хужалыҡ итеү ысулдары, рухи мәҙәниәте буйынса ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр бирелә, диалекттар һәм һөйләштәр фонетика, морфология һәм лексика кимәлендә әҙәби тел һәм, мөмкинлек булғанынса, бүтән төрки телдәр менән сағыштырып тасуирлана.

Китап башҡорт филологияһы факультеттары һәм бүлексәләре студенттарына, аспиранттарға, педучилищелар, педколледждар, мәктәп уҡытыусыларына һәм уҡыусыларға, тыуған төйәкте өйрәнеүселәргә тәғәйенләнә.

**УДК 81'28**
**ББК 74.268 Баш-9**

**ТП–143/2020**

© Шәкүров Р. З., 2012
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, 2020

**ISBN 978-5-295-07371-7**

# БАШ ҺҮҘ

Диалекттар һәм һөйләштәр һәр халыҡтың үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ рухи байлығы иҫәпләнә. Шуның өсөн дә юғары уҡыу йорттарының филология факультеттарында һәм бүлексәләрендә буласаҡ тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларына, милли әҙәби тел менән бер рәттән, диалектология буйынса ла төплө белем биреү планлаштырылған. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетында, мәҫәлән, башҡорт диалектологияһы буйынса бер семестр дауамында лекциялар уҡыла, практик дәрестәр үткәрелә, контроль эштәр яҙыла. Шулай уҡ йәйге айҙарҙа, райондарға сығып, диалектологик практика үткәреү ҡаралған. Бынан тыш, мәктәптәрҙә, педагогия училищелары һәм колледждарында уҡыусыларҙы диалектология буйынса белемдең нигеҙҙәре менән таныштырыу маҡсат итеп ҡуйылған. Диалектология тел тарихын, ҡәрҙәш телдәрҙең сағыштырма-тарихи грамматикаһын өйрәнеү өсөн дә бай материал бирә, бүтән фән тармаҡтары — топонимика, фольклор, текстология, тарих, этнография өлкәһендә эшләүселәр ҙә эленән-әле диалектологияға мөрәжәғәт итә. Германия, Венгрия, Көньяҡ Корея һымаҡ сит илдәрҙә төрки телдәрен, шул иҫәптән башҡорт телен өйрәнеүсе ғалимдар араһында ла башҡорт халҡының йәнле һөйләү теле менән ҡыҙыҡһыныусылар бар. Ә инде үҙебеҙҙә башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре мәсьәләһе киң ҡатлам йәмәғәтселектең, тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙең иғтибарын бик йыш йәлеп итә. Шуның өсөн дә «Башҡорт диалектологияһы» тигән был китаптың донъяға сығыуы бик ваҡытлы булыр, тип уйлайым.

Китапты яҙған ваҡытта беҙгә, башҡорт диалектология фәне өлкәһендә быға тиклем эшләнгән хеҙмәттәргә таянып, диалектологтарыбыҙ өлгәшкән ҡаҙаныштарҙы дөйөмләштереп, системалаштырып, төҙөк бер уҡыу китабы тәҡдим итеү бурысын үҙ өҫтөбөҙгә алырға тура килде. Юғары уҡыу йорттарында башҡорт диалектологияһын яңы классификация нигеҙендә уҡытыуҙы юлға һалыу эше лә ошо китаптың авторы иңенә төштө. 1999 йылда беҙ ул ваҡыттағы Башҡорт дәүләт педагогия институты нәшриәтендә был

предмет буйынса өр-яңы программа баҫтырып сығарҙыҡ. Артабан ул, тағы ла бер аҙ камиллаштырылып, нәшер итеүгә әҙерләнде.

«Башҡорт диалектологияһы» курсының яңынан эшләнгән программаһын милли диалектология фәне үҫешенең оҙон, ҡатмарлы һәм ғәйәт ҡаршылыҡлы үҫеш юлын дөйөмләштереү ынтылышы тип атарға була. Әйткәндәй, был программа үҙ ваҡытында юғары баһаланды. Күренекле ғалимә, педагогия фәндәре докторы, профессор, Борай районы башҡорто М. Х. Хәйруллина уның хаҡында «Башҡортостан» гәзитендә ҙур рецензия баҫтырып сығарҙы[1]. Программаны төплө анализлап, ошо фәнде өйрәнеүҙең әһәмиәтен билдәләп, һығымталар яһап, ул түбәндәге өс пункттан торған ошондай ғәйәт мөһим тәҡдимдәр ҙә индергәйне. Был тәҡдимдәр бөгөнгө көн өсөн дә мөһим, шуға күрә минең уларҙы әле һүҙмә-һүҙ килтереп үткем килә:

1. Программа юғары фәнни кимәлдә эшләнгән.

2. Оҙаҡҡа һуҙмай, уны яңы уҡыу йылында Башҡорт дәүләт университетының, шулай уҡ пединституттарҙың башҡорт теле факультеттарында, бүлексәләрендә дәүләт программаһы итеп индерергә кәрәк.

3. Программаның авторы Р. З. Шәкүров кисекмәҫтән студенттар өсөн башҡорт теле диалекттарының нигеҙҙәре тураһында яңы программаға яраҡлы уҡыу китабы әҙерләһен тигән тәҡдим индерәм.

Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәрен өйрәнеү башҡорт телен үҫтереү, милләтебеҙҙе бергә туплау маҡсатына хеҙмәт итергә тейеш. Программа нәҡ ошо маҡсатты үтәүгә йүнәлтелгән дә инде.

Арҙаҡлы ғалимәнең фекерҙәре һәм тәҡдимдәре мине китап өҫтөндә эшләргә илһамландырҙы, күңелемдә ышаныс тойғоһо тыуҙырҙы. Бигерәк тә уның диалекттарыбыҙҙы һәм һөйләштәребеҙҙе өйрәнеүҙең башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү, милләтебеҙҙе бер бөтөн итеп туплау маҡсатына хеҙмәт итеүе тураһындағы фекерҙәре айырыуса ҡиммәт һәм ҡәҙерле.

Элекке классификацияларҙан айырмалы рәүештә, башҡорт йәнле һөйләү теле системаһында беҙ хәҙерге ваҡытта өс территориаль диалект (көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар), 16 һөйләш һәм 19 һөйләшсә бар тип билдәләйбеҙ. Был классификацияла төньяҡ-көнбайыш диалект һәм быға тиклем бөтөнләй ситтә ҡалдырылып килгән асыуҙы, урта урал, өршәк, егән һөйләштәре урын алды. Дөрөҫ, һөйләштәр һәм һөйләшсәләр мәсьәләһендә һан яғынан артабан да үҙгәрештәр булыуы мөмкин. Ләкин теге йәки был һөйләште йә иһә һөйләшсәне исемен атау менән генә эш бөтмәй,

---

[1] *Хәйруллина М. Х.* Төп маҡсат — милләтебеҙҙе бергә туплау (профессор Р. З. Шәкүровтың «Башҡорт диалектологияһы» курсының программаһы баҫылып сығыуы айҡанлы) // Башҡортостан, 1999, 11 сентябрь.

ә ул, классификацияға индерер өсөн, махсус өйрәнелгән булырға тейеш. Әйтәйек, урта урал, өршәк һөйләштәре буйынса, айырым тикшеренеүҙәр үткәрелеп, кандидатлыҡ диссертациялары яҡланды. Асыуҙы һөйләшен 1950 йылда уҡ әле махсус өйрәнеп, буласаҡ күренекле төркиәтсе Ә. Ә. Юлдашев шулай уҡ кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған. Ә егән һөйләшен өйрәнеү маҡсатында 2010 һәм 2011 йылдарҙың йәйендә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты студенттары менән берлектә диалектологик экспедициялар ойошторолдо.

Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре өлкәһендә тикшеренеү эштәрен артабан да дауам итергә кәрәк. Билдәле диалектолог, филология фәндәре докторы Н. Х. Мәҡсүтова 1996 йылда уҡ әле, был фән алдында торған бурыстарға туҡталып, ошондай мөһим йүнәлештәрҙе билдәләгәйне. «Артабан, беҙҙеңсә, – тип яҙҙы ул, – диалекттарҙың формалашыу тарихына, диалект күренештәренең тарихын халыҡ тарихы менән бәйләп өйрәнеүгә иғтибар бүленергә тейеш. Башҡорт диалектология фәнендә төрки сығышлы, шулай уҡ төрки сығышлы булмаған төрлө компоненттар менән бәйле тел күренештәре әлегә өйрәнелмәгән; боронғо төрки һәм боронғо башҡорт ҡатламдарына ҡараған күренештәр һәм уларҙың трансформациялары асыҡланмаған, башҡорт теленең грамматик, лексик һәм синтаксик төҙөлөшөнөң спецификаһын барлыҡҡа килтереүсе күренештәрҙең, билдәләрҙең килеп сығышы аңлатылмаған[1]». Был идеялар хәҙер ҙә актуаль булып ҡала. Шуға өҫтәп, башҡорт диалектологияһы фәнендә йәнә бер мөһим йүнәлештә эшләү зарурлығын әйтеп үтергә мөмкин. Был – башҡорт теле һөйләштәрен фонетик, грамматик һәм лексик планда үҙ-ара сағыштырып өйрәнеү. Бындай тикшеренеүҙәр башҡорт теле диалекттарының һәм һөйләштәренең тәрәндәге тамырҙары менән бер-береһенә бәйле берҙәм система булыуын, башҡорт теленең бүтән телдәр араһында ҡабатланмаҫ һәм үҙенсәлекле урынын билдәләү өсөн ҙур әһәмиәт ҡаҙаныр ине.

Халыҡ теле – халыҡтың алтын хазинаһы. Халыҡтың йәнле һөйләү теле лә, милли әҙәби телебеҙ ҙә беҙҙең өсөн берҙәй ҡәҙерле. Милләттең берҙәмлеге – уның туған телендә. Уны өйрәнәйек, телебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереү өсөн йәнебеҙҙе фиҙа ҡылайыҡ!

Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре буйынса материалдарҙың бер өлөшө Рәсәй фундаменталь тикшеренеүҙәр фонды ярҙамында йыйылды (№ 11-06-97020-р_поволжье_а).

---

[1] *Максютова Н. Х.* Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. Уфа: Китап, 1996. 10-сы бит.

# ИНЕШ

## ДИАЛЕКТОЛОГИЯ ФӘНЕ ТУРАҺЫНДА ДӨЙӨМ ТӨШӨНСӘ. УНЫҢ ӨЙРӘНЕҮ ОБЪЕКТЫ, БУРЫСТАРЫ ҺӘМ МАҠСАТТАРЫ

Диалектология – тел белеменең айырым бер тармағы. Ул билдәле бер телдең диалекттарын һәм һөйләштәрен, йәғни халыҡтың йәнле һөйләү телен өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. **Диалектология** термины грек телендәге **диалектос** (*dialectos*) – «һөйләш» һәм лого (*logo*) – «фән», «тәғлимәт» тигән һүҙҙәрҙән алынған.

«Башҡорт диалектологияһы» курсын үткәндә башҡорт теленең диалекттар һәм һөйләштәр системаһын, уларҙың фонетик, грамматик һәм лексик үҙенсәлектәрен өйрәнеү күҙ уңында тотола.

Диалекттар һәм һөйләштәр – тарихи күренеш. Улар асылда башҡорт ырыу һәм ҡәбиләләренең теле булған, заманалар уҙыу менән ғәйәт ҡатмарлы үҫеш һәм үҙгәреш юлы үткәндәр. Дөйөм халыҡ теле барлыҡ диалекттарҙы, һөйләштәрҙе һәм һөйләшсәләрҙе үҙ эсенә ала. Телдең диалекттар системаһында шулай уҡ һөйләштәр төркөмө тигән төшөнсә лә бар. Һөйләштәр төркөмө ниндәй ҙә булһа үҙенсәлектәре менән бер-береһенә яҡын торған бер нисә һөйләште берләштерә. Башҡорт теленең диалекттар системаһында айырым һөйләштәр ошондай төркөмдәрҙе барлыҡҡа килтерә: төньяҡ-көнсығыш һөйләштәр төркөмө (арғаяш, салйоғот, әй һәм мейәс һөйләштәре), *көньяҡ-көнсығыш төркөм* (ҡыҙыл һәм эйек-һаҡмар һөйләштәре).

Әйтеп үтелгән тел берәмектәре бер-береһенән ниндәй билдәләр буйынса айырымлана һуң? Был һорауға ошолай тип яуап бирергә була. Иң ҙур берәмек – дөйөм халыҡ теле – грамматик төҙөлөшө һәм һүҙлек составы буйынса бөтөн халыҡ

өсөн дөйөм тел булып һанала. Шуның өсөн дә ул әҙәби телгә иң яҡын берәмек булып тора. Йәғни әҙәби тел һәм бигерәк тә башҡорт милли әҙәби теле үҙенең формалашыу осоронда, яҙма ҡомартҡылар теле менән бергә, иң беренсе сиратта дөйөм халыҡ теленә таянып үҫә. Диалекттарҙағы уртаҡ һыҙаттар дөйөм халыҡ теленең тәбиғәтен сағылдыра.

Диалекттар беҙҙә бер-береһенән, нигеҙҙә, фонетик һәм морфологик билдәләр буйынса айырымлана. Мәҫәлән, күплек, исем, ҡылым, сифат яһаусы ялғауҙар йәһәтенән көнсығыш диалект көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар менән сағыштырғанда айырымланып тора. Әҙәби телдә, әйтәйек, күплек ялғауҙарының, көнсығыш диалекттағыса, дүрт төрлө варианты норма итеп алынған: *-лар/-ләр, -тар/-тәр, -дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр*. Миҫалдар: *ҡалалар, китаптар, аттар, урмандар, болондар, тауҙар, ҡырҙар*. Көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙа иһә күплек ялғауҙары *-лар/-ләр, -нар/-нәр* формаһында ғына килә: *балалар, китаплар, атлар, урманнар, болоннар, көннәр, төннәр*. Ә инде **л** өнөнән башланған *-лы/-ле, -лыҡ/-лек, -лыҡлы/-лекле, -лаҡ/-ләк, -ла/-лә, -лай/-ләй* ялғауҙары әҙәби телдә көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙағыса билдәләнгән: *таулы, ташлы, ташлыҡ, данлыҡлы, эшлекле, ҡашлаҡ, эшләү, башлау, ташлау*. Көнсығыш диалектта был ялғауҙар, күплек ялғауҙары һымаҡ уҡ, дүрт төрлө килә: *тауҙы, ташты, болдо, ороло (оро ~ «ҡоҙоҡ»), сауҡалыҡ, ҡарттыҡ, дандыҡ, ҡырҙыҡ, таштыҡ, ҡаштаҡ, эштәү, баштау*. Был норма ер-һыу атамаларында ла әҙмә-әҙле күҙәтелә: *Атауҙы, Бағрышты, Ҡайраҡты, Ҡарабалыҡты, Ҡарағайҙы, Маныштты, Мауыҙҙы, Өйрәкте, Сабаҡты, Суртанды, Үләнде* (Белорет, Бөрйән, Әбйәлил һ. б. райондарҙағы күл һәм йылға исемдәре). Шул уҡ ваҡытта, профессор Н. Х. Ишбулатов билдәләүенсә, «башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш һөйләштәрендәге ҡайһы бер һыҙаттар төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрҙә лә ҡабатлана, шулай булғас, был ике төркөм һөйләштәр өсөн уртаҡ һыҙаттар бар»[1]. Бындай уртаҡ һыҙаттарҙы телдең бөтөн кимәлендә лә – фонетика, морфология өлкәһендә лә, лексикала ла – күҙәтергә мөмкин.

---

[1] *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 173-сө бит.

Шуның өсөн дә теге йәки был диалектты йәки һөйләште махсус өйрәнгән ваҡытта тикшеренеү эшен башҡа диалекттар һәм һөйләштәр менән сағыштырыу планында алып барырға, уларҙың үҙ-ара уртаҡ күренештәрен билдәләү менән дә шөғөлләнергә кәрәк.

Фонетика өлкәһендә башҡорт диалекттары бөтәһенән бигерәк бер-береһенән **ч—с, с—һ, ç, й—ж, з—ҙ** һымаҡ тартынҡылар линияһы буйынса айырымлана. Йәғни көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарҙа дөйөм төрки телендәге **ч** өнө **с** өнөнә, **с** өнө **һ, ç** өндәренә, **з** өнө **ҙ** өнөнә күскән. Ә инде төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡариҙел һөйләшенән башҡаларында боронғо **ч, с, з** өндәре шул көйөнсә тип әйтерлек һаҡланған. Мәçәлән, әҙәби телдә *сибәр*, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрҙә *ч'ибәр* (йомшаҡ **ч**), көнсығыш һәм көньяҡ диалектта – *сибәр*, шул уҡ тәртиптә: *һыйыр, һуçар, ҡыçтыбый, сыйыр/һыйыр, сусар/һуçар, ҡыçтыбый/ҡыçтыбый*. Һүҙ һәм ижек башында **й, ж, җ** өндәрен ҡулланыу һымаҡ күренеш тә башҡорт диалекттарының бер-береһенән айырымланыу критерийҙарының береһе тип ҡарарға була: *йәй – жәй – җәй, йер – жир – җир, йел – жил – җил*.

Билдәле булыуынса, **ҙ, ç, һ** өндәре башҡорт теленең милли үҙенсәлеген билдәләүсе өндәр иçәбенә инә. Был йәһәттән төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ буйы һөйләше иғтибарҙы йәлеп итә. Бында **ҙ** өнө бөтөн позицияларҙа ла актив ҡулланылыуы менән айырылып тора. Илеш районында иһә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә лә **з** өнө **ҙ** өнөнә күсә: *калхуҙ, ҙавут, Ҙакир, Ҙәкийә (Ҙаһира > Даһира* тигән исем был төбәктә яҙыуҙа **д** хәрефе менән бирелә). Шул уҡ ваҡытта төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡайһы бер зоналарында, бигерәк тә ғәйнә һәм танып һөйләштәрендә, **ҙ** өнө урынына **з** өнө тап килә: *без, сез, сүз, безнеке, сезнеке, изән* (әҙәби телдә: *иҙән*). Танып һөйләшендә хатта *Иҙел, Агиҙел, Ҡариҙел* гидронимдарының *Изел, Агизел, Ҡаризел* формаһында әйтелеше күҙәтелә. Ғәйнә башҡорттары үҙҙәренең йәнле һөйләү теленә (ғәйнә һөйләшенә) ҡарата ошондай фекерҙә торалар: *«Донжа йаратылганнан бирле безнеке шушы тел. Ата-баба ничек сүләшкән, бездә шул тел»* (хәҙерге Пермь крайының Уçы районы Ольховка ауылы. 1973 йыл).

Диалекттар беҙҙә фонетик һәм морфологик билдәләр буйынса айырымлана, тинек. Ә инде һөйләштәр *фонетик* һәм *лексик үҙенсәлектәргә* ҡарап бүленә. Йәғни алда күрһәтеп үтелгән ялғауҙарҙың варианттары – бер диалект эсендәге һөйләштәрҙең һәммәһе өсөн дә нигеҙҙә уртаҡ күренеш. Шуға күрә һөйләштәрҙең үҙ-ара айырымланыуы өсөн фонетик һәм лексик үҙенсәлектәрҙең булыуы төп критерий иҫәпләнә. Һөйләшсәләрҙең айырымланыуы өсөн дә шул уҡ үҙенсәлектәр нигеҙ итеп алына.

Диалекттар һәм һөйләштәрҙе айырымлау өсөн йәнә һүҙ башында **т–д**, һирәгерәк осраҡтарҙа **б–п** өндәренең сиратлашыуы һымаҡ һыҙаттар ҙа иҫәпкә алына.

Үҙ ваҡытында, мәҫәлән, тәүге быуын диалектологтарыбыҙҙың береһе Таһир Ғәлләм улы Байышев башҡорт һөйләштәрен классификациялауҙа иң элек фонетик билдәләрҙе төп критерий итеп алған. Һөйләштәрҙе ул, фонетик билдәләренә таянып, түбәндәгесә билдәләй: **һ–ç** һөйләше, **ç** һөйләше, **һ** һөйләше, **ҙ – ç** һөйләше, **с** һөйләше, **ҙ** һөйләше, **п – т** һөйләше (барлығы ете һөйләш бар тип күрһәтә) һәм уҙған быуаттың 50-се йылдар башында башҡорт теленең тулы диалектологик картаһын төҙөй. Был карта хәҙерге ваҡытта ла үҙенең ғилми әһәмиәтен юғалтмаған.

Диалекттарҙы классификациялауҙа өр-яңы критерийҙар күҙлегенән сығып ҡарағанда ла, әйтәйек, төп төрки һүҙҙәрендә **һ** өнө урынына **ç** өнөн әҙмә-әҙле ҡулланыу дим һөйләшенең төп үҙенсәлектәренең береһе булып тора: *çин, çигер, çыйыр, çарыҡ*. Был йәһәттән ул, ысынлап та, – Т. Ғ. Байышев классификацияһындағы **ç** һөйләше. Ә инде әй һөйләше һүҙ башында **т** өнө урынына даими рәүештә **д** өнөнөң ҡулланылыуы менән характерлы: *дамға* – әҙәби т. *тамға, дуғын* – әҙәби т. *туғын, дуғай* – әҙәби т. *туғай, дары* – әҙәби т. *тары*. Урта һөйләштең сиге *-нт, -ңт, -лт, -нҡ, -нк, -мҡ, -мк* диссимилятив өн ҡушылмаларына ҡарап билдәләнә: *анта* – әҙәби т. *унда, мынта* – әҙәби т. *бында, алты* – әҙәби т. *алды, килте* – әҙәби т. *килде*. Был фонетик күренеш ҡариҙел һөйләшенең дә мөһим бер үҙенсәлеге иҫәпләнә, ул егән һөйләше өсөн дә характерлы.

Диалектология фәне диалекттарҙың һәм һөйләштәрҙең лексик үҙенсәлектәрен, диалекталь һүҙҙәрҙең таралыу ареалдарын билдәләү менән дә шөғөлләнә. Диалекталь лексика

ырыу һәм ҡәбиләләрҙең боронғо тамырҙары, теге йәки был регионда халыҡтың традицион һөнәре, кәсебе, хужалыҡ итеү ысулдары, йәшәгән урындың тәбиғәт үҙенсәлектәре менән бәйле була. Мәҫәлән, Силәбе, Ҡорған өлкәләрендә башҡорттар күбеһенсә эреле-ваҡлы күл буйҙарында, ялан ерҙәрендә йәшәй. Ағастың да унда, ялан яғында, бер-ике генә төрө – ҡайын, һирәгерәк уҫаҡ таралған. Бындай тәбиғәт шарттарында, мәҫәлән, күл һәм күлдең төрлө өлөштәре, һыу ҡоштары менән бәйле терминдар үҫешкән. Күлдең үҙен генә түгел, уның ситен, уртаһын белдереүсе һүҙҙәр ҙә ҡулланыла. Күлдең иң тәрән, асыҡ урта өлөшө *әлтә* тип атала. Был һүҙ, башлыса, алыҫ Урал аръяғы төбәге (Ҡорған өлкәһенең Сафакүл, Әлмән, Щучан райондары) башҡорттарының, йәғни арғаяш һөйләшенең ялан-ҡатай һөйләшсәһендә айырыуса актив ҡулланыла. *Әлтә* һүҙе хатта өс томлы башҡорт һөйләштәре һүҙлегенә, һәм «Башҡорт теленең диалектологик һүҙлеге»нә лә (Өфө: Китап, 2002) кермәгән. Уны тик «Башҡортса-урыҫса һүҙлек»тә (М.: изд-во «Дигора», «Русский язык», 1996) һәм «Башҡорт теленең һүҙлеге»ндә генә (II том, М.: Русский язык, 1993) осратабыҙ. Тәүгеһендә ул, «иҫкергән» тигән билдә ҡуйып, урыҫсаға «полынья» тип тәржемә ителгән. Ә «Башҡорт теленең һүҙлеге»ндә «күлдең ҡыш көнө лә туңмай ятҡан урыны» тип аңлатылған һәм халыҡ йырынан ошондай миҫал килтерелгән: «Юлгилде лә күлдең аръяғында ялтырап та ята әлтәһе». Ләкин *әлтә* һүҙе ареал планда барыбер, әйтәйек, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар өсөн характерлы түгел. Тимәк, ул әҙәби телгә халыҡ ижады әҫәрҙәре аша һуңғы ваҡытта ғына индереп ебәрелгән диалекталь лексика өлгөһө.

Шулай итеп, ерле (йәки территориаль) диалекттарҙың үҙенә генә хас фонетик үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре, үҙҙәренең лексик составы була.

Халыҡ теленең ерле диалекттарынан һәм һөйләштәренән айырмалы рәүештә, тел белемендә диалектологияның *социаль диалекттар* тигән тармағы ла бар. Был термин иһә айырым һөнәр эйәләренең (мәҫәлән, балыҡсыларҙың, һунарсыларҙың, диңгеҙселәрҙең, алтын сығарыусыларҙың, мәғдәнселәрҙең) һөйләү теленә ҡарата ҡулланыла. Уларҙың һөйләү телендә үҙенә генә хас фонетик, грамматик үҙенсәлектәр булмай. Социаль диалекттар асылда ерле диалекттарға нигеҙләнә.

Шулай уҡ балаларҙың, төрлө кәсеп менән шөғөлләнеүселәрҙең, һөнәрселәрҙең үҙҙәренә генә хас тел үҙенсәлектәре була.

Диалекттар һәм һөйләштәрҙең барлыҡҡа килеүендә халыҡтың боронғо замандарҙан уҡ, ырыу-ырыу булып, күпмелер дәрәжәлә айырымланып йәшәүе төп ролде уйнаған. Төркиәтселек фәнендә башҡорттар ырыу-ҡәбилә төҙөлөшө (йәғни этник составы) йәһәтенән дә, һөйләштәр үҙенсәлектәренең күп төрлө булыуы менән дә электән ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итеп килә. Борон башҡорт ырыу һәм ҡәбиләләре башлыса йылға буйҙарына ултырыр булған. Шуның өсөн дә беҙҙең фәндә һөйләштәрҙе олораҡ йылға исемдәре менән атарға ынтылыш йәшәп килде. Әммә һуңғы быуаттарҙа, ырыу һәм ҡәбиләләрҙең бик ныҡ аралашыуы, бер-берећенә йоғонто яһауы арҡаһында диалекттар үҫеше территориаль характер алған. Ырыу һәм ҡәбиләләрҙең төрлө дәүерҙәрҙә төрлө тарафтарға күсеп ултырыуы ҡатнаш һөйләштәр формалашыуына алып килгән. Һөҙөмтәлә беҙҙең дәүерҙә башҡорт теленең диалекттар системаһында территориаль-географик һыҙаттар өҫтөнлөк итә. Был йәһәттән бары тик ғәйнә һәм салйоғот һөйләштәре генә айырылып тора. Ул һөйләштәрҙең һәр ҡайһыһы шул уҡ исемдәге боронғо башҡорт ҡәбиләләренең йәнле һөйләү теле булараҡ айырымлана.

Фәнебеҙ үҫешенең хәҙерге торошонан сығып, беҙҙең классификация буйынса, башҡорт телендә 3 диалект, 16 һөйләш һәм 19 һөйләшсә билдәләнә.

Шулай итеп, диалекттарҙың һәм һөйләштәрҙең дөйөм халыҡ теле системаһында тотҡан урынын, таралыу территорияһын, тикшерелеү тарихын һәм, ниһайәт, фонетик, грамматик, лексик үҙенсәлектәрен өйрәнеү «Башҡорт диалектологияһы» курсының мөһим маҡсаты булып тора.

## ДИАЛЕКТОЛОГИЯНЫ ӨЙРӘНЕҮҘЕҢ ӘҺӘМИӘТЕ. ДИАЛЕКТТАР ҺӘМ ӘҘӘБИ ТЕЛ. ДИАЛЕКТОЛОГИЯ ҺӘМ БҮТӘН ФӘН ТАРМАҠТАРЫ

Диалектология фәне бөтөнөһөнән дә бигерәк башҡорт теленең тарихын, уның бүтән төрки телдәренә һәм боронғо төрки теленә мөнәсәбәтен өйрәнеү өсөн ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Башҡорт теленең тарихи грамматикаһы өҫтөндә эшләгәндә бер юлы бер

нисә сығанаҡҡа таянып тикшеренеү алып барылырға тейеш. Мәҫәлән, беренсенән, иҫке яҙма ҡомартҡылар теле айырыуса мөһим сығанаҡҡа әйләнә. Шуныһы ҡыуаныслы, беҙҙә хәҙер инде күп кенә ғәйәт төплө ғилми хеҙмәттәр донъя күрҙе. Иҫке яҙма әҙәби телебеҙ тарихын өйрәнеү эшенә башҡорт тел белгестәренән Ҡ. З. Әхмәров, Р. Х. Халиҡова, Э. Ф. Ишбирҙин, И. Ғ. Ғәләүетдинов, Ә. М. Аҙнабаев, В. Ш. Псәнчин һымаҡ ғалимдар ғәйәт ҙур өлөш индерҙе.

Профессор Ҡ. З. Әхмәровтың 1972 йылда профессор Ж. Ғ. Кейекбаев мөхәррирлегендә нәшер ителгән «Башҡорт яҙыуы тарихынан» тигән монографияһында яҙма телебеҙҙең алыҫ быуаттар төпкөлөнән килгән үҫеү юлдары эҙмә-эҙле яҡтыртылды. Хеҙмәттә билдәләнеүенсә, башҡорт яҙыуының тарихы ғәрәп графикаһы нигеҙендә формалашҡан XI быуат төрки яҙма теленә барып тоташа. Элекке башҡорт яҙма ҡомартҡылары араһында ҡәбер таштарындағы яҙмалар (йәғни эпитафиялар), шәжәрәләр, боронғо башҡорт яҙыусыларының ҡульяҙма әҫәрҙәре, ҡағыҙға теркәп ҡалдырылған фольклор ҡомартҡылары, һалдат бәйеттәре, хаттар, мөрәжәғәттәр, иҫке төрки телендәге рәсми эш ҡағыҙҙары, күп төрлө документаль сығанаҡтар ҙур әһәмиәт ҡаҙана. Иҫке төрки теле XV–XVI быуаттарҙан, Ж. Ғ. Кейекбаев билдәләүенсә, әүәлге башҡорт йәмғиәтенең рәсми яҙма әҙәби теле, китап теле, башҡорт кәнсәләренең теле иҫәпләнгән. Салауат Юлаевтың хаттары, мөрәжәғәттәре, фармандары, Е. И. Пугачев исеменән башҡорттарға төбәп яҙылған манифестар нәҡ ана шул иҫке төрки теленең сағыу үрнәктәре булып тора.

Профессор Р. Х. Халиҡованың «XVIII–XIX быуаттарҙа башҡорт шәжәрәләре һәм актовый документтарының теле» («Язык башкирских шежере и актовых документов XVIII–XIX веков». М.: Наука, 1990) тигән монографияһы башҡорт халҡының яҙма ҡомартҡылар телен өйрәнеү эшендә мөһим ҡаҙаныш булды. Башҡорт тел белемендә тел тарихы өлкәһендәге тикшеренеүҙәрҙән шулай уҡ Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының (XIII быуат башы), Батыршаның батшаға яҙған хатының (XVIII быуаттың икенсе яртыһы), Тажетдин Ялсығоловтың «Тарихнамәи Болғар» әҫәренең (XIX быуат башы) телен өйрәнеү мөһим эштәр иҫәбендә. Профессор И. Ғ. Ғәләүетдиновтың «Башҡорт әҙәби теле үҫешенең ике

быуаты» («Два века башкирского литературного языка». Уфа: Гилем, 2000) XIX быуат – XX быуат башы әҙәби телебеҙ тарихын комплекслы тасуирлауҙа әһәмиәтле бер өлгө булды. Ниһайәт, уҙған быуаттың 80-се йылдар аҙағында Мәскәүҙең «Наука» нәшриәтендә һәм 90-сы йылдар башында Өфөлә башҡорт телендә башҡорт әҙәби теленең тулы тарихы баҫылып сыҡты[1].

Шул уҡ ваҡытта, икенсенән, боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларының телен хәҙерге әҙәби башҡорт теле һәм йәнле һөйләү теле менән сағыштырып өйрәнеү талап ителә. Телдең тарихын өйрәнгәндә башҡорт диалекттары һәм һөйләштәренең материалы ла ҡиммәтле сығанаҡ һанала.

Башҡорт яҙмаһының үҫешендә һәм уның *милли әҙәби тел булып формалашыуында ла* диалекттар һәм һөйләштәр ҙур роль уйнаған. XX быуаттың 20-се йылдарында элекке (иҫке) төрки-башҡорт яҙма әҙәби теле урынына милли әҙәби тел, йәғни тулыһынса башҡорт йәнле һөйләү теленә яҡын торған әҙәби тел тамам формалашып өлгөрә. Дәүләт әһәмиәтендәге был эш башҡорт диалекттарын һәм һөйләштәрен ентекле өйрәнеү, бөтөн халыҡ өсөн дөйөм милли әҙәби тел нормаларын эшләү планында бер-береһе менән бәйле рәүештә алып барыла. Нәҡ бына ошо 20-се йылдарҙа милли әҙәби телебеҙҙең фонетик, грамматик һәм лексик нормаларын тотороҡло хәлгә килтереү өсөн көсөргәнешле эш атҡарыла. Был мәсьәлә буйынса матбуғат биттәрендә бәхәстәр ҙә булып ала. Мәҫәлән, башҡорт милли әҙәби телендә күплек һәм килеш ялғауҙарын алыу йәһәтенән күренекле дәүләт эшмәкәре һәм публицист Шәһит Хоҙайбирҙин, нигеҙҙә, көньяҡ диалект нормаларын алыуҙы уңайлыраҡ күрә. Әммә, билдәле булыуынса, күплек ялғауҙары көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттағы *-лар/-ләр, -нар/ -нәр* формаһында түгел, ә көнсығыш диалекттағыса ҡабул ителә. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге әҙәби тел килеш ялғауҙары буйынса тулыһынса тип әйтерлек көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалект формаларына тап килә.

Милли әҙәби телдәр үҙҙәренең формалашыу осоронда теге йәки был халыҡтың тел үҙенсәлектәрен яҡшыраҡ һаҡлаған

---

[1] *Ишбирҙин Э. Ф., Ғәләүетдинов И. Ғ., Халиҡова Р. Х.* Башҡорт әҙәби теленең тарихы. Өфө: Китап, 1993. 320 бит.

төп, *терәк* диалектҡа, йәки диалекттарға ориентир тота. Был йәһәттән үзбәк әҙәби теле фәһемле. Башҡорт милли әҙәби теле лә үҙ тарихының тәүге осоронда фонетик һәм грамматик йәһәттән башлыса көньяҡ һәм көнсығыш диалекттарға нигеҙләнә. Милли әҙәби тел үҙенең артабанғы үҫеш тарихында һөйләштәр һәм диалекттар иҫәбенә байый, нормаларын камиллаштыра бара. Был процеста башҡорт диалектология фәненең ҡаҙаныштары мөһим роль уйнай. Башҡорт телендә өсөнсө – төньяҡ-көнбайыш йәки көнбайыш диалектты үҙаллы һәм үҙенсәлекле берәмек итеп билдәләү мәсьәләһе лә ошо уҡ фәндең үҫешендә, ниһайәт, оҙаҡҡа һуҙылған бәхәстәр төйөнөн сисеүҙең ыңғай бер күренеше булды. Был хаҡта һуңыраҡ, башҡорт диалектологияһының үҫеш тарихына туҡталған ваҡытта, ентеклерәк әйтеп үтелер. Әле иһә төп һығымта шуға ҡайтып ҡала: хәҙерге башҡорт әҙәби теле, әлбиттә, ике генә түгел, ә өс диалектҡа нигеҙләнеп үҫеүен дауам итергә тейеш. Икенсе яҡтан, башҡорт әҙәби теле барлыҡ һөйләштәр һәм диалекттар таралған территориялар өсөн дә дөйөм әҙәби тел, милли белем һәм тәрбиә биреү ҡоралы тип иҫәпләнә.

Диалектология фән тармағы булараҡ *тарих фәне* менән ныҡлы бәйләнешкә инә. Башҡорт һөйләштәрен һәм диалекттарын уңышлы өйрәнеү өсөн башҡорт халҡының тарихын яҡшы белергә кәрәк. Үҙ сиратында, диалект мәғлүмәттәрен халыҡ тарихы, шулай уҡ тарихи география өсөн ҡиммәтле сығанаҡ булараҡ файҙаланырға мөмкин.

Географик карталарҙа диалекталь элементтар, йәғни фонетик, морфологик, лексик диалектизмдар ареал пландағы тикшеренеүҙәр үткәргәндә, башҡорт халҡының милли территорияһының сиктәрен билдәләгәндә, *Башҡортостандың тарихи географияһының үҫеш этаптарын асыҡлағанда* ышанысллы аргумент һәм фактик материал итеп ҡулланыла. Бында беҙҙең Көньяҡ Урал һәм Урал алды башҡорт топонимдарының тарихи ҡатламдарын һәм Башҡортостандың тарихи географияһының үҫеш этаптарын билдәләүгә арналған монография ыңғай бер тәжрибә тип иҫәпләнергә хаҡлы.

Диалектология *этнография, фольклор менән тығыҙ бәйләнгән*. Этнография фәнендә, мәҫәлән, этнолингвистик берлек тигән төшөнсә бик актив ҡулланыла. Шул уҡ ваҡытта этнографик элементтарҙың тел, йәғни диалект үҙенсәлектәренә

ҡарағанда хәрәкәтсәнерәк булыуын да иҫтә тоторға кәрәк. Башҡорт халҡы этнографик планда күп йәһәттән юғарыраҡ ғилми кимәлдә өйрәнелгән, тип раҫларға мөмкин. Был фәндә диалектология менән сағыштырыу өсөн иң мөһим күренеш – башҡорттарҙың этнографик элементтар буйынса өлкәләргә (зоналарға) бүленеше. Профессор С. И. Руденко, академик Р. Ғ. Кузеев башҡорттарҙы дүрт этнографик зонаға бүлеп өйрәнделәр. Ә диалектологик планда беҙ хәҙер дүрт түгел, бәлки өс зонаны, өлкәне (өс диалект зонаһын) беләбеҙ. Бындай тап килеп бөтмәгәнлекте нисек аңлатырға? Беҙ уны башҡорт йәнле халыҡ теленең һуңғы быуаттарҙа этнографик процестарҙан айырмалыраҡ йүнәлештә үҫеүе, төрлө үҙгәрештәргә бирелеүенең һөҙөмтәһелер тип иҫәпләйбеҙ. Был осраҡта, бәлки, борон-борондан дүрт өлкәгә бүленеп йәшәгән башҡорттарҙың этнографик һыҙаттары тотороҡлораҡ һаҡланған, тип фараз итергә лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта, элегерәк тағы ла ентеклерәк өйрәнергә тура килгән хәлдә, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын, бәлки, ике диалектҡа (төньяҡ һәм көнбайыш диалекттарға) бүлеп ҡарарға ла булыр ине. Был урында Рәсәйгә ҡушылғандан һуң Башҡортостандың оҙаҡ ҡына дәүерҙәр буйы дүрт өлкәнән (даруғанан) торғанлығын да иҫкә төшөрөргә кәрәк. Был өлкәләр Себер юлы (даруғаһы), Нуғай юлы, Ҡаҙан юлы, Уҫы юлы тигән исемдәр менән тарихҡа кергән. Даруға һүҙе «өлкә» мәғәнәһендә монгол теленән алынған, тип фараз ителә. Тимәк, даруғаларҙың тарихы татар-монгол яуҙары дәүеренә, йәғни XIII–XIV быуаттарға барып тоташа.

Диалектологияның фольклор менән бәйләнеше бигерәк тә халыҡ ижады ҡомартҡыларының телендә фонетик, морфологик, лексик планда диалекталь үҙенсәлектәрҙең сағылыуы аша күренә. Фольклористика халыҡ ижады әҫәрҙәренең был һыҙаттарына иғтибарлы булырға, фольклорсылар халыҡ араһында материал йыйғанда диалект үҙенсәлектәрен әҙәби тел нормаһына ҡыуалап керетеү менән шөғөлләнмәҫкә тейештәр. Әгәр ҙә был талап һаҡланмаһа, халыҡ араһында яҙып алынған материалдың ғилми ҡиммәте бермә-бер кәмей. Ошо урында фәнебеҙ тарихындағы бер фактты иҫкә төшөрөп үтәйек: башҡорт тел белеменә нигеҙ һалыусы атаҡлы ғалим, профессор Н. К. Дмитриев XX быуаттың 20-се йылдар аҙағындағы үҙенең

тәүге диалектологик экспедицияларын бер яҡлы – диалектологик планда ғына түгел, бәлки диалектологик-фольклор экспедициялары итеп, комплекслы тикшеренеү маҡсатынан сығып ойоштորған. Бының фольклористика өсөн дә әһәмиәте ҙур булғандыр, тип иҫәпләргә мөмкин.

Шуның менән бергә фольклор әҫәрҙәре тел йәһәтенән тулыһынса һөйләш йәки диалект үҙенсәлектәренә генә нигеҙләнә икән, тип ҡарарға ла ярамай. Һүҙ бында һөйләшкә йәки диалектҡа хас үҙенсәлектәр, айырым элементтар тураһында бара. Ә дөйөм алғанда, башҡорт фольклор әҫәрҙәрендә, профессор Ж. Ғ. Кейекбаев өйрәткәнсә, башҡорт дөйөм халыҡ теленең, әҙәби телдең нормалары эшләнгән булған. Фольклор әҫәрҙәре – улар башҡорт сәсәндәренең, һүҙ оҫталарының, халыҡ рухын һаҡлаусы аҡыл эйәләренең, асылда, барлыҡ төбәктәр өсөн дә уртаҡ һыҙаттар өҫтөнлөк иткән һөйләү теле.

Диалектология фәненең ғәмәли әһәмиәте, шулай итеп, уның бүтән фәндәр менән бәйләнешен билдәләгән саҡта тағы ла асығыраҡ күренә. Әммә беҙҙе ул барыбер иң элек халыҡ теленең үҙенә генә хас фонетик, грамматик үҙенсәлектәрен, лексик составын сағылдырған бөтөн бер система буларак ҡыҙыҡһындыра. Диалектологияның айырым бер фән тармағы буларак төп маҡсаты ла ошо үҙенсәлектәр һәм уларҙың әҙәби телгә мөнәсәбәте менән билдәләнә. Шул нигеҙҙә милли әҙәби телде артабан да байытыу, уның нормаларын камиллаштырыу өсөн дә мөмкинлектәр асыла.

## ДИАЛЕКТ ШАРТТАРЫНДА ҺӘМ ХӘҘЕРГЕ ҠАЛА МӘКТӘПТӘРЕНДӘ ӘҘӘБИ ТЕЛДЕ УҠЫТЫУ

Мәктәп алдында милли әҙәби телдең дөрөҫ һөйләү һәм дөрөҫ яҙыу нормаларын әҙмә-әҙлекле үҙләштереү иң мөһим бурыстарҙың береһе иҫәпләнә. Дөрөҫ, был бурысты бойомға ашырыу тотош мәктәп коллективының даими хәстәрлегенә әйләнергә тейеш. Әммә иң элек шундай һорау ҡуйыйыҡ: хәҙерге осорҙа башҡорт әҙәби теле ниндәй шарттарҙа, ниндәй типтағы мәктәптәрҙә уҡытыла һуң?

1-се тип: милли мәктәп. Уҡыу-уҡытыу һәм тәрбиә биреү процесы, нигеҙҙә, башҡорт телендә алып барыла.

2-се тип: урыҫ телле мәктәп. Уҡытыу – урыҫ телендә, башҡорт теле иһә предмет булараҡ өйрәнелә. (Республика эсендә был эш башҡорт теленең дәүләт теле статусын бойомға ашырыу планында хәл ителһә, сит өлкәләрҙә ул урыҫ мәктәптәрендә башҡорт балаларын туған тел менән таныштырыу рәүешен ала.) Республикабыҙҙа башҡорт телен, дәүләт теле булараҡ, урыҫ мәктәптәрендә һәм бүтән милли мәктәптәрҙә өйрәнеү мәсьәләһендә лә күпмелер дәрәжәлә ыңғай тәжрибә тупланды.

Милли мәктәптә уҡытыу һәм тәрбиә эштәренең барлыҡ төрҙәрендә лә берҙәм орфоэпик һәм орфографик нормаларҙы үтәү талап ителергә тейеш. Йәғни дәрестәрҙә һәм кластан тыш эштәрҙә балаларҙы әҙәби тел өлгөһөндә тәрбиәләү тел уҡытыуҙың уңышын хәл итеү өсөн төп шарт булып тора. Был хаҡта күренекле педагог Абдрахман Ғәлләмовтың ошондай һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп үтеү урынлы булыр: «Мәктәптә әҙәби тел солғанышы булдырылһа ғына, – тип яҙҙы ул, – уҡыусыларҙы дөрөҫ һөйләргә һәм яҙырға өйрәтергә, шул нигеҙҙә уларҙың дөйөм мәҙәниәтен үҫтерергә һәм камиллаштырырға мөмкин. Шуға күрә, мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эштәре ниндәй телдә алып барылһа, шул телдә дөрөҫ һөйләү һәм яҙыу, уҡыусыларға әҙәби тел ҡанундарына ярашлы үрнәк биреү бөтөн фән уҡытыусыларының, бөтөн педагогик коллективтың төп бурысы ул».

Шул уҡ ваҡытта бик күп мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенең күп йылдар буйы предмет булараҡ ҡына уҡытылыуы хаҡында ла иҫтә тоторға кәрәк. Был осраҡта инде әҙәби телгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, уның нормаларын үҙләштереүгә өлгәшеүҙә иң ҙур бурыс туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһының өҫтөнә төшә. Педагогик коллективта, ата-әсәләр араһында туған телгә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт булған хәлдә лә, был бурысты үтәүҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы барыбер төп фигура булып ҡала. Сөнки телде өйрәнеүҙә тел асҡысы уның ҡулында, сөнки ул тел белгесе һәм телде ғилми нигеҙле итеп өйрәтә белеүсе. Шуға күрә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары үҙ фәненең, йәғни туған телдең, туған халыҡтың оло патриоттары, уның мәнфәғәттәрен яҡлаусылар булырға тейештәр. Диалект шарттарында әҙәби телде өйрәтеү уҡытыусы өсөн, бер яҡтан, белем биреү, йәғни дөрөҫ һөйләү һәм дөрөҫ яҙыу нормаларын үҙләштереүгә өлгәшеү

маҡсатын күҙ уңында тотһа, икенсе яҡтан, уҡыусыларҙа телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу сараһы итеп тә ҡаралырға тейеш. Ә быны өсөн уның үҙенән диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе яҡшы белеү талап ителә. «Уҡыусы балаларҙың ерле һөйләшен өйрәнгән һәм белгән саҡта ғына, – тип билдәләне профессор Ж. Ғ. Кейекбаев, – балаларҙың һөйләү (һәм яҙыу) телендәге һөйләш хаталарын күрһәтеп, уларҙы әҙәби телдә һөйләргә өйрәтеү мөмкин». Бер ыңғай ошондай һорау ҙа ҡуяйыҡ: ә ни өсөн һөйләштәрҙең һәм диалекттарҙың әҙәби тел нормаларына тап килмәгән үҙенсәлектәре хата тип ҡарала? Был – бер. Икенсенән, әҙәби тел нормалары менән ярашмаған был ерле һөйләш үҙенсәлектәрен тура мәғәнәһендә хата тип иҫәпләргәме, әллә һөйләш һәм диалект үҙенсәлектәрен телдең үҫеш тарихына хас сәбәптәр менән аңлатып буламы? Тәүге һорауға яуап бирер өсөн профессор Рафаэль Ғәйнетдин улы Аҙнағоловтың «Диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу методикаһы»[1] тигән китабына мөрәжәғәт итәйек. Китапта ул Әбйәлил районы уҡыусыларының, йәғни көнсығыш диалекттың ҡыҙыл һөйләше вәкилдәренең, яҙма эштәренән ерле һөйләшкә генә хас лексик берәмек ҡулланыуға ошондай миҫал килтерә: *«Колхозыбыҙҙа Зиннәт апа, Әҡсән апа, Шәрәфетдин апа кеүек хеҙмәт алдынғылары бар»*. Бында апа һүҙе әҙәби телдәге «бабай («дядя») мәғәнәһендә ҡулланыла (урыҫсаға «старший брат отца или матери» тип тәржемә ителә) һәм ул күпселек бүтән һөйләш вәкилдәренә бөтөнләй аңлашылмай. Шуның өсөн дә был һүҙ әҙәби телдең лексик нормаһы күҙлегенән хата иҫәпләнә. Йәнә килеп, ҡыҙыл һөйләшендәге апа һүҙенең әҙәби телдә электән үк дөйөм халыҡ теле кимәлендә ҡулланылған эквиваленты булғанлыҡтан, уны әҙәби телгә индереү мохтажлығы ла юҡ. Ерле һөйләш үҙенсәлектәренең бүтән төрҙәренә ҡарата ла шул уҡ принциптан сығып фекер йөрөтөргә мөмкин. Ләкин, шуның менән бергә, диалектҡа хас үҙенсәлектәр әҙәби тел үҫеше өсөн, бигерәк тә лексика өлкәһендә, мөһим сығанаҡтарҙың береһе булып ҡала. Башҡорт әҙәби теленең лексик составында, айырыуса һуңғы

---

[1] *Аҙнағолов Р. Ғ.* Диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991; 2-се баҫмаһы: Ерле һөйләш шарттарында башҡорт телен өйрәтеү методикаһы. Өфө: Китап, 2006.

50–60 йыл эсендә, диалекталь һүҙҙәр иҫәбенә бик ныҡ байығыу процесы күҙәтелде. Был хәл бөтөнөһөнән дә бигерәк башҡорт әҙәбиәтенең йылдам үҫеүе менән бәйле.

Икенсе һорау – һөйләш һәм диалект үҙенсәлектәренең әҙәби тел нормаларынан айырымланыу сәбәптәре хаҡында. Һөйләш йәки диалект үҙенсәлектәре – тарихи күренеш. Диалект, һөйләш, дөйөм халыҡ теле һымаҡ уҡ, ерле телдең тарихи үҫеш емеше, ундағы барлыҡ күренештәр ҙә берҙәм системаның айырылғыһыҙ өлөшө. Мәҫәлән, дим һөйләшенә хас фонетик үҙенсәлек – төп төрки һүҙҙәрендә һүҙ һәм ижек башында **һ** өнө урынына системалы рәүештә **ҫ** өнөнөң ҡулланылыуы. Бында бер ниндәй ҙә осраҡлылыҡ юҡ. Дим һөйләшенең был үҙенсәлеге башҡорт телендә тартынҡы өндәрҙең тарихи үҫеше менән аңлатыла. Күпселек башҡорт һөйләштәрендә боронғо төрки телендәге **с** өнө башта **ҫ** өнөнә, артабан **ҫ** өнө аша **һ** өнөнә күскән тип иҫәпләнелә. Боронғо төрки телендә, мәҫәлән, *сығыр,* дим һөйләшендә – *ҫыйыр,* әҙәби телдә – *һыйыр*. Уҡытыусы бер үк ваҡытта әҙәби телдең барлыҡ һөйләштәр һәм диалекттарҙан өҫтөн торған, дөйөм халыҡ теле өсөн уртаҡ һыҙаттарҙы берләштереүсе, шуның менән халыҡты тел йәһәтенән консолидациялаусы юғары бер система булыуынан сығып та эш итергә һәм шул хаҡта уҡыусыларға ла аңлатырға тейеш.

«Башҡорт теле уҡытыусылары, – тип күрһәтә Рафаэль Аҙнағолов, – ерле һөйләштең фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәрен ныҡлы күҙәтергә, дәрестәрҙә уларҙы иҫәпкә алырға һәм уҡыусыларҙы әҙәби тел үрнәктәренә өйрәтергә бурыслылар». Ошо талаптан сығып, ул башҡорт һөйләштәренең һәр береһенә ҡыҫҡаса характеристика биреп, уларҙың үҙенсәлектәрен әҙәби тел нормалары менән сағыштырып өйрәнеү өлгөһөн дә эшләгән. Башҡорт теле уҡытыусыһына был хеҙмәтте ҡулланыу мотлаҡ.

Мәктәп программаларында, диалект шарттарында уҡытыу йәки уҡытмауға ҡарамаҫтан, уҡыусыларға диалекттар һәм һөйләштәр тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреү күҙ уңында тотола. Бындай темалар 6-сы, 8-се, 9-сы кластарҙың дәреслектәрендә ҡаралған. Мәҫәлән, 8-се класта «Әҙәби тел һәм диалект тураһында дөйөм төшөнсә», «Башҡорт теленең диалекттары» тигән темаларҙы өйрәнеү планлаштырылған. 9-сы класта иһә

«Йәнле һөйләү теленең стиле» һәм «Башҡорт теле стилистикаһында лексик ҡатламдар» тигән темаларҙы үткәндә уҡыусылар диалекттар һәм һөйләштәр буйынса алған белемдәрен яңынан иҫкә төшөрәләр. Дөйөм алғанда, туған телде уҡытыу методикаһы ерле һөйләш шарттарында башҡорт теленән белем биреү эшен яҡшыртыу бурысын ҡуя. Диалекттар һәм һөйләштәрҙең үҙенсәлектәрен, уларҙың әҙәби телгә мөнәсәбәтен белеп эш итеү бер үк ваҡытта туған телгә ҡыҙыҡһыныу, уға мөхәббәт тәрбиәләү сараһы итеп тә ҡулланылһа, айырыуса яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин.

Шуны ла иҫтә тоторға кәрәк: диалект шарттарында әҙәби тел нормаларын өйрәткәндә диалектҡа ғына хас үҙенсәлектәр хаҡында «хата» тип билдәләүгә һағыраҡ булыу үҙен аҡлаясаҡ. Һүҙҙе күберәк диалект хатаһы түгел, бәлки диалект айырмалығы тураһында алып барыу дөрөҫөрәк булыр. Сөнки, әйткәнебеҙсә, диалектҡа йәки һөйләшкә генә хас фонетик, грамматик, лексик үҙенсәлектәр (йәғни айырмалыҡтар) тарихи күҙлектән ҡарағанда һис тә осраҡлы түгел. Әгәр ҙә, әйтәйек, дөйөм халыҡ телен йәки унан юғарыраҡ торған милли әҙәби телде берҙәм система итеп ҡараһаҡ, һөйләштәр ҙә һәм уларҙы үҙ эсенә алған диалект та барыбер системалы күренеш, йәғни әҙәби тел менән сағыштырғанда кесерәк кимәлдәге система тип ҡаралырға тейеш.

Диалект айырмалыҡтарын билдәләй барып, әҙәби тел нормаларына өйрәтеүҙе, тел дәрестәренән тыш, әҙәбиәт дәрестәрендә лә, кластан тыш эштәрҙә лә дауам итергә мөмкин. «Башҡорт теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен ентекле өйрәнеү, уларҙың әҙәби тел менән уртаҡ һәм айырмалы яҡтарын тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә иҫәпкә алыу уҡыусыларҙың телмәр культураһын үҫтереүҙә мөһим роль уйнаясаҡ», – тиеүе менән Р. Ғ. Аҙнағолов, һис һүҙһеҙ, хаҡлы. Бер юлы мәсьәләнең бигерәк тә хәҙерге дәүер өсөн характерлы икенсе яғына ла туҡталып үтәйек. Беренсенән, күпселек ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу, әлбиттә, диалект шарттарына тура килмәй. Бына, мәҫәлән, Өфө мәктәптәрендәге башҡорт балаларының ата-әсәләре үҙҙәренең сығышы менән төрлө диалект һәм һөйләш вәкилдәре, уларҙың әҙәби телде һәм, ғөмүмән, туған телде белеү йәки белмәү кимәле лә төрлөсә. Балаларҙың күбеһе урыҫлашыуға дусар ителде. Телдәре

урыҫса асылған балалар бик күп. Бындай шарттарҙа балаларҙың әҙәби башҡорт телен үҙләштереүе уҡытыусы алдына ғәҙәттән тыш ауыр һәм яуаплы бурыс булып килеп баҫа. Был һынауҙы үтеү өсөн уға алдан уҡ әҙерләнергә кәрәк, уҡытыусынан төплө һәм киң белем, төрлө яҡтан да һәләтле һәм отҡор, тырыш, эрудициялы булыу талап ителә.

Башҡорт әҙәби теле, үҙ сиратында, диалекттарға һәм һөйләштәргә ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Башҡортостанда, башҡорт телендә уҡытыу юғары кимәлдә бойомға ашырылған төбәктәрҙә, һөйләштәрҙең үҙенсәлектәре аҡрынлап юйыла бара. Әммә республиканан ситтә йәшәүсе башҡорттар араһында әҙәби телдең йоғонтоһо әлегәсә бик йомшаҡ булды. Ә инде иң мөһиме, мәктәптәрҙә башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы, башҡорт телендә уҡытыуҙы тергеҙеү артабан әҙәби телдең йоғонтоһон арттырыуға, диалекталь айырмалыҡтарҙың шымара барыуына килтерәсәк.

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ урыҫ телле мәктәптәрҙә уҡытыуҙың үҙенең бик ҙур спецификаһы һәм ҡатмарлылыҡтары бар. Бындай мәктәптәрҙә, бүтән милләт балалары менән бергә, башҡорт телен күп ваҡыт башҡорт балалары ла, ҡатнаш ғаиләләрҙә үҫкән балалар ҙа өйрәнә. Улар, ғәҙәттә, урыҫ теле мөхитендә йәшәйҙәр, телдәре лә күп ваҡыт урыҫ телендә асыла. Бындай шарттарҙа уҡытыусы алдына иң элек башҡорт теленә, әҙәбиәтенә, сәнғәтенә, мәҙәниәтенә, Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының тарихына ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, был халыҡтың традициялары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән аҙмы-күпме таныштырыу бурысы килеп баҫа. Өҫтәүенә, уҡыусылар ғына түгел, педагогик коллективтың, мәктәп директорының, урындағы мәғариф органдары етәкселегенең, йәмәғәтселектең, ата-әсәләрҙең башҡорт теленә мөнәсәбәте төрлө ерҙә төрлөсә булыуын да күҙ уңында тотоп эш итергә кәрәк. Методик планда иһә башҡа милләт балаларына һәм башҡортса белмәгән башҡорт балаларына башҡорт телен билдәле кимәлдә сит ил теле булараҡ уҡытырға, сит телдәрҙе уҡытыу алымдарын ҡулланырға тура килә. Бында төп маҡсат – уҡыусыны башҡортса аралашырға, һөйләргә, уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү, тип билдәләй Башҡортостандың мәғарифты үҫтереү институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире З. М. Ғәбитова һәм ошондай мәсьәлә лә күтәрә: бының айырым

уҡытыу методикаһы, программаһы, махсус дәреслектәре, уҡыу ҡулланмалары булырға тейеш, ти ул[1]. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы урыҫ уҡыусыларына ла башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре тураһында аҙмы-күпме мәғлүмәт бирергә мөмкин, сөнки көндәлек тормошта төрлө диалект вәкилдәре менән аралашҡан саҡта балаларҙа әҙәби тел һәм айырым һөйләш үҙенсәлектәре араһындағы айырмалыҡтар айҡанлы һорауҙар тыуыуы ихтимал. Шул уҡ ваҡытта бындай мәғлүмәттәр, ғөмүмән, телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу йәһәтенән дә әһәмиәтле.

Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу менән бергә, әйтәйек, әгәр ҙә был мәсьәлә бойомға ашырылһа, татар, сыуаш һ. б. төрлө милли мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙың да үҙенә генә хас алымдарын ҡулланыу зарурлығы тыуасаҡ.

Дөйөм алғанда, мәктәптә туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһының роле ғәйәт ҙур. Башҡорт теле уҡытыусыһы һәр ваҡыт үҙ халҡының, тыуған республикабыҙҙың, илебеҙҙең оло патриоты, телебеҙҙе, рухиәтебеҙҙе яҡлаусы һәм һаҡлаусы булырға бурыслы.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ҺӘМ ДИАЛЕКТТАРЫНЫҢ БҮТӘН ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНӘ МӨНӘСӘБӘТЕ

Хәҙерге төркиәтселек фәнендә ҡабул ителгән классификация буйынса, башҡорт теле төрки телдәренең көнбайыш һун тармағы эсендәге ҡыпсаҡ телдәре төркөмөнә ҡарай. Ҡыпсаҡ телдәре төркөмө, башҡорт теле менән бергә, татар, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай, ҡумыҡ, ҡарасай-балҡар, ҡарайым, шулай уҡ төньяҡ ҡырым-татар телдәренән тора. Был төркөмдә башҡорт һәм татар телдәре, бер-береһенә яҡыныраҡ торған телдәр булараҡ, ҡыпсаҡ-болғар төркөмсәһен барлыҡҡа килтерә.

[1] *Ғәбитова З. М.* Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре // Актуальные проблемы башкирского национального образования в инновационных образовательных учреждениях: Тезисы и материалы республиканской научно-практической конференции 20–21 февраля 2001 г. Уфа, 2001. 112–114-се биттәр.

Әммә, бер-береһенә яҡын һыҙаттар күп булыуға ҡарамаҫтан, был ике тел араһында ҙур ғына айырмалыҡтар ҙа бар.

Башҡорт һәм татар телдәренең икеһе өсөн дә характерлы һыҙаттар иң элек һуҙынҡы өндәр системаһына һәм морфология өлкәһенә ҡарай. Был телдәрҙең икеһендә лә һуҙынҡылар системаһы туғыҙар өндән тора һәм тулыһынса тиерлек бер-береһенә тап килә. Башҡорт һәм татар телдәренең вокализмы ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡараған бүтән телдәрҙең вокализмынан айырылып тора. Мәҫәлән:

башҡорт һәм татар телдәрендәге **и, у, ү** өндәре бүтән ҡыпсаҡ телдәрендә **э, о, ө** өндәренә тура килә:

башҡортса, татарса *кил-*, нуғай телендә *кэл-* «приходить»;

башҡортса, татарса *ҡул*, нуғайса *ҡол* «рука»;

башҡортса, татарса *күл*, нуғайса *көл* «озеро».

Башҡорт һәм татар телдәрендә **ы, е, о, ө** өндәре киңерәк яңғырашлы, ә бүтән ҡыпсаҡ телдәрендә тарыраҡ яңғырашлы булыуҙары менән бер-береһенән һиҙелерлек хәлдә айырымлана. Мәҫәлән:

башҡортса, татарса *ҡы̂ҙ , кы̂з,* нуғайса *ҡы̆з* «девушка»;

башҡортса, татарса *те̂л*, нуғайса *тйл* «язык»;

башҡортса, татарса *то̂р*, нуғайса *тўр* «стоять»;

башҡортса, татарса *кү̂л*, нуғайса *кө̆л* «озеро».

Башҡорт һәм татар телдәре өсөн, бүтән ҡыпсаҡ телдәренән айырмалы рәүештә, иренләшкән (лабиализацияланған) **а°** өнө характерлы. Мәҫәлән: ҡа̊лды, а̊лды[1].

Шул уҡ ваҡытта консонантизм өлкәһендә, бигерәк тә тартынҡы өндәрҙең тарихи үҙгәреше планында, башҡорт теле татар теленән һәм, ғөмүмән, ҡыпсаҡ төркөмөндәге бүтән телдәрҙән ғәйәт ныҡ айырылып тора. Профессор Н. А. Баскаков билдәләүенсә, «башҡорт теленең консонантизм системаһы, күрәһең, үҙендә ғәйәт боронғо һыҙаттарҙы һаҡлайҙыр һәм ошо йәһәттән ул хәҙерге ҡайһы бер һун тармағы төрки телдәре (хакас, тыва, яҡут йәғни саха һ. б. телдәр) менән яҡыная»[2].

---

[1] *Баскаков Н. А.* Введение в изучение тюркских языков. М.: Просвещение, 1969. 284-се бит.

[2] *Баскаков Н. А.* Шул уҡ хеҙмәт. М., 1969. 285-се бит.

Башҡорт теле был телдәр менән бик боронғо дәүерҙәрҙә, сама менән VII быуатта бәйләнешкә кергәндер тип фараз ителә[1].

Консонантизм өлкәһендә башҡорт теленең төп айырмалыҡтары:

бүтән ҡыпсаҡ төрки телдәрендәге **ч/ш**, боронғо төрки телендәге **ч** өнөнә һәм татар әҙәби телендәге **ш'** (яҙылышта **ч**) өнөнә башҡорт телендә **с** өнө тура килә: баш. тел. *бысаҡ*, тат. тел. *пычак* «нож»; баш. тел. *сал*, тат. тел. *чал* «седой»; *салғы – чалгы* «коса». Башҡорт әҙәби телендә **ч** фонемаһы фәҡәт үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла;

бүтән төрки телдәрендәге һәм татар әҙәби телендәге һүҙ һәм ялғау башында **с** өнө урынында башҡорт телендә **һ** өнө килә: *сыйыр – һыйыр* «корова»; *сыусыз – һыуһыҙ* «без воды»;

һүҙ һәм ижек аҙағында әҙәби телдә **с** өнө **ҫ** өнөнә күсә: *бас – баҫ* «вставать»;

бүтән төрки телдәренең һүҙ аҙағындағы **з** өнө урынына башҡорт әҙәби телендә **ҙ** өнө ҡулланыла: *сүз – һүҙ, каз – ҡаҙ*; һүҙ уртаһында ла шундай уҡ күренеш күҙәтелә: *кызыл – ҡыҙыл*. Был үҙенсәлек, йәғни күрһәтелгән позицияла **ҙ** өнөнөң ҡулланылыуы, күпселек башҡорт һөйләштәре һәм татар теленең минзәлә һөйләше өсөн дә характерлы, сөнки ул һөйләш, асылда, Минзәлә башҡорттарының һөйләү теле нигеҙендә формалашҡан;

башҡорт теленең арғаяш һәм салйоғот һөйләштәрендә һүҙ аҙағындағы **ҙ** өнө **ҫ** йә иһә **һ** өндәренә күсә: *ҡыҙ – ҡыҫ* һәм *ҡыһ, ҡыҙҙар-ҡыҫтар* һәм *ҡыһтар*;

башҡорт әҙәби телендә һүҙ башында татар әҙәби телендәге **җ** өнө урынына **й** өнө килә: *җир – йер* «земля, место», *җил – йел* «ветер». Башҡорт теленең был үҙенсәлеге боронғо төрки телендәгесә һаҡланып ҡалған: *jer – ер, jer-суб – ер-һыу.*

Башҡорт телендә, татар теленән айырмалы рәүештә, ирен гармонияһы үткәрелә: *тормош – тормошоноң, төҙөлөш – төҙөлөшө, ҡоролош – ҡоролошоноң*. Татар телендә: *тормыш, төзелеш, корылыш.*

---

[1] *Киекбаев Дж.* Программа курса «Историческая грамматика башкирского и татарского языков». Уфа, 1967. 6-сы бит.

Башҡорт теленә тулыраҡ һуҙынҡылар хас. Татар телендә һуҙынҡыларҙың ҡыҫҡарыуы һәм төшөп ҡалыуы йышыраҡ күҙәтелә.

Башҡорт теленең көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарында, татар телендә **л** өнөнән башланған һүҙ яһаусы һәм күплек ялғауҙары бер үк төрлө – **-л** һәм **-н** өндәре менән килә: *таш-лыҡ, ҡайын-ныҡ; тау-лар, урман-нар*. Башҡорт әҙәби теле һәм көнсығыш диалект өсөн күплек ялғауының дүрт төрлө варианты хас: *тауҙар, урмандар, ҡоштар, далалар*.

Башҡорт һәм татар телдәренең диалекттары, айырыуса Башҡортостандың көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш һәм Татарстандың көнсығыш райондарында элекке замандарҙан бирле бер-береһенә ғәйәт һиҙелерлек йоғонто яһаған. Татар теленең минзәлә һөйләшендә **з** урынына **ҙ** өнө ҡулланылыуы был һөйләштә, әлбиттә, башҡорт теле үҙенсәлегенең һаҡланыуы менән аңлатыла: *ҡыҙ, ҡыҙыл, быҙау*. Элекке Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙендә башҡорттар һан яғынан беренсе урында торған.

Башҡорт теленә ҡаҙаҡ теле яҡын телдәр иҫәбендә. Консонантизм өлкәһендә башҡорт телендәге **ш** өнөнөң ҡаҙаҡ телендә **с** өнөнә тап килеүе характерлы: башҡортса *баш, аш, таш* – ҡаҙаҡса *бас, ас, тас*. Ҡаҙаҡ телендә һүҙ башында башҡорт телендәге **й** өнө урынына **ж** өнө килә: *йәш – жас, йеҙ – жез, йурға – жорға*. Ҡаҙаҡ телендә һуҙынҡыларҙың ирен гармонияһы характерлы түгел. Башҡорт теленең көньяҡ һәм көнсығыш һөйләштәрендә ҡаҙаҡ теленә яҡынлыҡ күҙәтелә. Күплек ялғауҙары буйынса башҡорт теленең көнсығыш диалекты ҡаҙаҡ теленә яҡыныраҡ тора. Ҡаҙаҡ телендә: *балалар, ауылдар, китаптар,* башҡорт теленең көнсығыш диалектында: *балдар, ауылдар, тауҙар, китаптар*. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәренең лексика өлкәһендә яҡынлыҡтары бар.

Арғаяш һөйләшендәге **ҫ – ҙ** өндәренең ҡаршы ҡуйылышын (*ҡаҙ* урынына *ҡаҫ*, ләкин ике һуҙынҡы араһында үҙгәрешһеҙ ҡала: *ҡаҙы*) себер төрки телдәренә хас **с – з** ҡаршы ҡуйылышы менән сағыштырырға мөмкин. Ғөмүмән, башҡорт теленең көнсығыш диалекты һөйләштәре менән себер төрки телдәре араһында бер-береһенә яҡынлыҡ һыҙаттары күберәк күҙәтелә.

Телдәрҙе һәм диалекттарҙы сағыштырма планда өйрәнеү тел тарихын, тарихи грамматиканы өйрәнеү өсөн бай һәм үҙенсәлекле сығанаҡтарҙың береһе булып тора.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫН ӨЙРӘНЕҮ ТАРИХЫ

Башҡорттарҙы X быуат баштарында уҡ ғәрәп сәйәхәтселәре төрки халыҡ тип атағандар. 921 йылда Волга буйындағы Булғар дәүләтенә сәйәхәт ваҡытында ғәрәп миссионеры Әхмәд ибн-Фаҙлан Урта Волганың һул яҡ яр буйҙарында боронғо Башҡорт иленең көньяҡ-көнбайыш төбәктәре аша үтә, һәм «бына беҙ әл-Башгирд тип аталған төрки халыҡтың иленә килеп еттек» («...и вот мы прибыли в страну народа турок, называемого аль-Башгирд») тип хәбәр итә. Был төбәктә ул Ырғыҙ (Ирхиз формаһында), Һамур (Самур), Кинәле (Кинель), Суҡ (Сух, хәҙерге урыҫса карталарҙа Сок) йылғаларының исемдәрен атап үтә. Шул айҡанлы үҙ дәүерендә билдәле булған башҡорт гидронимдары тураһында ла ҡиммәтле мәғлүмәттәр теркәп ҡалдыра.

XI быуатта йәшәгән мәшһүр тел белгесе Мәхмүд Ҡашғариҙың «Диуану лөғәт әт-төрк» («Төрки телдәр һүҙлеге») тигән атаҡлы китабында иһә башҡорт теле тураһында тағы ла анығыраҡ мәғлүмәттәр осратабыҙ. Был хеҙмәттә ул егерменән артыҡ төрки ҡәбиләләре биләгән ерҙәрҙең картаһын урынлаштырған. Башҡорттарҙы автор Ағиҙел – Яйыҡ – Иртыш йылғалары араһында һәм Или йылғаһы буйында йәшәгән халыҡ тип күрһәтә. М. Ҡашғари уларҙың телен, йәмәктәрҙең теле менән бергә, ҡырғыҙҙарҙың (йәғни ҡаҙаҡтарҙың), ҡыпсаҡтарҙың, уғыҙҙарҙың, йағмаларҙың, чигилдәрҙең, саруҡтарҙың телдәренә яҡын тип иҫәпләй. Ә инде башҡорт теленең диалекттары тураһында иң тәүге мәғлүмәтте академик В. В. Радлов хеҙмәттәрендә осратабыҙ. Был күренекле ғалимдың 1882 йылда Лейпцигта немец телендә донъя күргән «Төньяҡ төрки телдәренең фонетикаһы» (*«Phonetik der nordlichen Turkshprachen». Leipzig,* 1882) тигән монографияһында, башҡорт телендә ул ваҡытта тау һәм дала диалекттары бар, тип күрһәтелә.

XIX быуаттың 90-сы йылдар аҙағында Ҡаҙан университетының профессоры Николай Федорович Катанов башҡорт диалекттары буйынса материалдар йыйыу эше менән шөғөлләнә. 1897 йылдың 1 апреленән алып 20 августына һәм 1898 йылдың 20 майынан 20 августына ҡәҙәр ул Өфө губернаһының




Мәхмүд әл-Ҡашғари картаһы.
*1072–1074 йылдар*

Бәләбәй һәм Минзәлә өйәҙҙәрендә ғилми командировкала булып, башҡорттар, мишәрҙәр, аҙмы-күпме керәшендәр араһында этнографик һәм көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле буйынса материалдар йыя. Өфө губернаһы башҡорттарының телен, асылда, көнбайыш һәм көнсығыш һөйләштәренә бүлеп ҡарай. Губернаның көнбайыш өлөшөндә йәшәүсе башҡорттарҙың телен керәшен татарҙары теленә бер аҙ оҡшаш, көнсығыш һөйләштең Дим буйы башҡорттарының теленә оҡшаш булыуын билдәләй.

1893 һәм 1899 йылдарҙа Ырымбурҙа Василий Владимирович Катаринскийҙың «Ҡыҫҡаса урыҫса-башҡортса һүҙлек» («Краткий русско-башкирский словарь») һәм «Башҡортса-

урыҫса һүҙлек» («Башкирско-русский словарь») тигән лөғәттәре, 1892, 1898 йылдарҙа «Башҡорттар өсөн әлифба» («Букварь для башкир») тигән китабы баҫылып сыға. Был лөғәттәрҙә һәм «Әлифба»ла башҡорт теленең көньяҡ диалектының һәм Инйәр буйы башҡорттарының һөйләү теле үҙенсәлектәре сағылыш тапҡан. Әле телгә алынған «Башҡортса-урыҫса һүҙлек» революцияға тиклем донъя күргән һүҙлектәр араһында иң ҙурыһы иҫәпләнә. Уның күләме 14–15 самаһы баҫма табаҡ (237 биттән тора) һәм лөғәткә 15 меңгә яҡын башҡорт һүҙҙәре тупланып, улар урыҫсаға тәржемә ителгән. В. В. Катаринскийҙың һүҙлектә бирелгән баш һүҙенән күренеүенсә, уны төҙөүҙә башҡорт уҡымышлыһы, уҡытыусы Мөхәмәтғәли Ҡыуатов ҡатнашҡан. Грамматик формалар һәм һүҙьяһалыш күҙлегенән ҡарағанда, В. В. Катаринскийҙың һүҙлегендә, тип күрһәтә Ж. Ғ. Кейекбаев, хәҙерге көнсығыш диалект һәм көньяҡ диалекттың урта һөйләшенең фонетик үҙенсәлектәре өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, күплек ялғауҙары һәм һүҙ яһаусы ялғауҙар дүрт төрлө алынған: *ҡыҙҙар, аттар, аҡылды* «умный», *аяҡты* «имеющий ноги», *ағастыҡ, алмаҫтыҡ, аҙҙыҡ, аҙымды, айҙаныу* (Мин урманды айҙанып килдем). Ләкин был һүҙҙең көньяҡ диалекттағы формаһы ла килтерелгән: *өй айланаһына*. Хәҙерге урта һөйләшкә хас фонетик үҙенсәлектәр ҙә осрай: *диңкеҙ, яланҡа, бороңҡо, гәҙәттәнкән, данҡа сыҡты, зәңкәр, игенкә, ямҡыр, янҡан, көнкә.*

Күренеүенсә, был хеҙмәттә башҡорт теле лексикаһының диалекталь үҙенсәлектәре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмаған. Әммә шулай ҙа башҡорт телен диалект күҙлегенән махсус өйрәнеү эше XX быуаттың тәүге йылдарында башлана. Был эште талантлы телсе, этнограф һәм фольклорсы Александр Григорьевич Бессонов башлап ебәрә. А. Г. Бессонов (1848–1917), профессор Ж. Ғ. Кейекбаев һүҙҙәре менән әйткәндә, башҡорт диалекттарын беренсе булып өйрәнеүсе һәм башҡорт диалектологияһының ғилми нигеҙен һалыусы булып тора. Үҙ алдына шөғөлләнеп, ул башҡорт, ҡаҙаҡ, удмурт телдәрен үҙләштергән. Фән тарихында башҡорт халыҡ әкиәттәрен тәү башлап йыйыусы булараҡ та сағыу эҙ ҡалдырған. 1909 йылда башҡорт әкиәттәренең ҡулъяҙма йыйынтығы өсөн ул Урыҫ география йәмғиәтенең кесе алтын миҙалы менән бүләкләнә.

1906 һәм 1908 йылдарҙа Ҡаҙанда А. Г. Бессоновтың башҡорттар өсөн ике уҡыу китабы нәшер ителә: «Первая после букваря книжка для чтения и практические первоначальные уроки для северо-восточных башкир» һәм «Первая после букваря книжка для чтения и практические первоначальные уроки для юго-восточных башкир». Был китаптарҙы автор башҡорт теленең ике диалект зонаһында – төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының наречиеһында (шиүәһендә) һөйләшеүселәргә төбәп яҙған. Ә инде 1907 йылда шулай уҡ Ҡаҙанда баҫылған «Башҡорттар өсөн әлифба» («Букварь для башкир») тигән китабында ул бер үк тексты өс диалектта биргән. Диалекттарҙы *көньяҡ* башҡорттары диалекты, *төньяҡ* башҡорттары диалекты һәм *ҡатай* башҡорттары диалекты тип атай. Китаптың аҙағында авторҙың ошондай илһамлы һүҙҙәре бар: «...башкирские дети... не стыдились бы своего родного языка, а полюбили бы этот чудный, благозвучный язык».

Башҡорт телен өйрәнеү тарихында билдәле ғалим һәм дәүләт эшмәкәре, атаҡлы врач Мстислав Александрович (Мөхәммәтхан Сәхипкирәй улы) Ҡулаевтың (1873–1959) исеме лә яҡшы билдәле. 1912 йылда Ҡаҙанда уның «Башҡорттар өсөн өндәрҙе өйрәнеү нигеҙҙәре һәм азбука» («Основы звукопроизношения и азбука для башкир»), 1919 йылда Өфөлә «Әлепей» тигән китаптары нәшер ителә. «Азбука»һында ул: «Һәр кем үҙ телендә уҡый-яҙа белергә тейеш» тигән маҡсат ҡуя. М. Ҡулаев үҙенең башҡорт теленә арналған тикшеренеүҙәренә, асылда, көньяҡ диалект үҙенсәлектәрен нигеҙ итеп ала.

Революциянан һуң башҡорт телен һәм диалекттарҙы өйрәнеү эше 20-се йылдарҙың башында уҡ юлға һалына. 1922 йылда Башҡортостанда Академүҙәк ойошторола, был Үҙәк башҡорт телен өйрәнеү өлкәһендәге мөһим темаларҙы ла көн тәртибенә ҡуя. Мәҫәлән, 1920 йылдар башында Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте тарафынан Арғаяш кантонына ғилми командировка ойошторолоуы һәм уның эшендә билдәле тел белгесе, педагог һәм мәғрифәтсе З. Ш. Шакировтың (1881 – 1970) ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәттәр бар.

1928–1929 йылдарҙа башҡорт диалекттарын өйрәнеүҙә өр-яңы осор башлана. Был иһә СССР Фәндәр академияһының комплекслы Башҡортостан экспедицияһын ойоштороуы менән

бәйле. Ошо экспедиция составында профессор Н. К. Дмитриев (1898–1954) етәкселегендә лингвистик-фольклор кесе отряды республиканың Тамъян-Катай кантонында һәм төньяҡ-көнсығыш төбәгендә йәнле халыҡ теленән материалдар йыйыу эше менән шөғөлләнә. Башҡорт тел белемен ғилми нигеҙҙә үҫтереү йәһәтенән Н. К. Дмитриевтың ошо уҡ ваҡытта баҫылып сыҡҡан «Башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһенә» тигән мәҡәләһе («Белем» журналы. Өфө, 1928, № 7–9) мөһим роль уйнай. Башҡорт һәм, ғөмүмән, төрки телдәре буйынса күренекле белгес был мәҡәләлә башҡорт телен һәм уның диалекттарын өйрәнеү программаһын төҙөп бирҙе, был эштең методикаһын, алдағы йылдарға маҡсаттарҙы билдәләне. Ошо осорҙан башлап башҡорт диалектологияһы фәне киң планда һәм ысын мәғәнәһендә юғары ғилми кимәлдә үҫеш юлына баҫты. Диалектологик материалдар йыйыу төплө эшләнгән программаларға таянып, һораулыҡтар ҡулланып үткәрелә, фронталь планда ойошторола башлай. Һуңғы һигеҙ тиҫтә йыл эсендә тиҫтәләрсә диалектологик экспедиция, бик күп ғилми командировкалар үткәрелде. Хәҙерге Башҡортостандың һәм күрше региондарҙың башҡорттар йәшәгән төбәктәренең барыһында ла тип әйтерлек йәнле халыҡ теленең материалдары йыйып алынып, теркәп ҡуйылған.

XX быуаттың 30-сы йылдарында Ғәббәс Йәғәфәр улы Дәүләтшин, башҡорт диалекттарын өйрәнеп, беҙҙә алты диалект бар тигән һығымтаға килә. Уларҙы түбәндәгесә атай: ҡыуаҡан, юрматы, әйле, салйоғот (салйот), табын һәм дим. Шул уҡ осорҙа фәндә, үкенескә ҡаршы, башҡорт телен ике генә – ҡыуаҡан (тау) һәм юрматы (ялан) диалекттарына ғына бүлеп өйрәнеүҙе алға һөргән ҡараштар ҙа урын ала. Шуның менән ғәмәлдә башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын танымау тенденцияһына юл ҡуйыла. Өсөнсө диалект мәсьәләһе оҙаҡ ваҡыттарға хәл ителмәй ҡалдырыла. Башҡорт теленең диалекттар системаһына арналған дискуссияларҙа артабан нәҡ ошо мәсьәлә бер нисә мәртәбә көн тәртибенә индерелә. Мәҫәлән, 1940 йылда Өфөлә Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты тарафынан күренекле төркиәтсе, профессор Н. К. Дмитриев ҡатнашлығында үткәрелгән 2-се Бөтөн башҡорт лингвистик конференцияһында башҡорт теленең диалекттарға бүленеше тураһында доклад тыңлана

һәм унда өс (көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш) диалект булыуы тураһындағы тезис һыҙыҡ өҫтөнә алып үтелә.

1953 йылда көнбайыш диалект тураһындағы мәсьәлә СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында был юлы ла Н. К. Дмитриев ҡатнашлығында һәм уның ярҙамында уҙғарылған ғилми семинарҙың көн тәртибенә яңынан ҡуйыла. Семинарҙа ҡатнашыусылар төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү телен башҡорт теленең өсөнсө диалекты тип таныйҙар һәм был диалектты ғилми өйрәнеү буйынса эш башлап ебәрергә тәҡдим итеlә. Тема Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының планына индерелә. Шулай итеп, 1954 йылда төньяҡ-көнбайыш регионға тәү башлап диалектологик экспедиция ойошторола. Уның маршруты Асҡын, Балтас, Борай, Яңауыл райондары буйлап үтә. Таһир Ғәлләм улы Байышев етәкселегендә уҙғарылған был экспедицияла ошо зона башҡорттары һөйләү теленең лексикаһы, фонетикаһы һәм грамматикаһы буйынса бай материал йыйыла, шул нигеҙҙә көнбайыш диалектының башҡорт теленең өсөнсө үҙаллы диалекты булыуы тураһында һығымта яһала[1].

Күренекле диалектолог һәм лексикограф Т. Ғ. Байышевтың башҡорт диалекттарын һәм һөйләштәрен өйрәнеүгә, шулай уҡ төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле буйынса материалдар туплауға индергән хеҙмәте айырыуса юғары баһаға лайыҡ. 1955 йылда уның «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың әҙәби телгә мөнәсәбәте»[2] тигән монографияһы баҫылып сыға. Т. Ғ. Байышев башҡорт телен иң элек фонетик үҙенсәлектәренә ҡарап классификациялай һәм, башҡорт телендә ете һөйләш бар, тип күрһәтә. Ә инде морфологик билдәләрҙән сығып, башҡорт телен өс диалектҡа бүлеп өйрәнә.

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка: Формирование и современное состояние. Уфа, 1991, 13-сө бит; Шулай уҡ ҡарағыҙ: Баишев Т. Г. Научный отчет диалектологической экспедиции 1954 года // Научный архив УНЦ РАН, ф. 3. оп. 12. д. 450; «Башҡорт теленең көнбайыш диалекты» темаһына 1954 йылғы диалектологик экспедицияның отчеты. Өфө: Ғилем, 2008. 372 бит.

[2] *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Под редакцией чл.-корр. АН СССР Н. К. Дмитриева. М.: Изд-во МГУ, 1955. 112 бит; 2-е стереотипное издание. Уфа: Гилем, 2006. 132 бит.

Уларҙы автор көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш диалекттар тип атай. Башҡорт теленең диалекттар системаһы өсөн, тип иҫәпләй ул, ете фонетик, өс морфологик билдә характерлы, әммә был билдәләрҙең таралыу сиктәре тап килеп кенә тормай. Һөйләштәрҙе ул, фонетик билдәләренән сығып, түбәндәгесә атай: **h – ç** һөйләше, **ç** һөйләше, **h** һөйләше, **ҙ – ç** һөйләше, **с** һөйләше, **ҙ** һөйләше, **п – т** һөйләше. Әммә был классификацияла фонетик һәм морфологик билдәләр комплекслы ҡулланылмай, лексик билдәләр иһә бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Билдәле булыуынса, башҡорт диалекттары беҙҙә хәҙерге ваҡытта бер-береһенән фонетик һәм морфологик билдәләргә һәм үҙенсәлектәргә ҡарап айырымлана, һөйләштәр иһә фонетик һәм лексик үҙенсәлектәрҙән сығып бүлеп йөрөтөлә. Әммә шуныһы айырыуса әһәмиәтле: Т. Ғ. Байышев тәү башлап башҡорт теленең тулы диалектологик картаһын төҙөй. Был карта, уның үҙенең алда телгә алынған хеҙмәтенән тыш, шул уҡ 1955 йылда профессор С. И. Руденконың «Башҡорттар» (Башкиры: Историко-этнографические очерки. М.-Л.: изд-во АН СССР, 1955) тигән атаҡлы хеҙмәтендә лә, этнографик карталар менән йәнәш, ҡушымта итеп баҫып сығарыла. Ул ике картаны сағыштырып ҡарау ошондай мөһим һығымта яһарға мөмкинлек бирә: Т. Ғ. Байышевтың диалектологик картаһында, этнографик карталарҙағы һымаҡ уҡ, башҡорттар йәшәгән барлыҡ территориялар ҙа солғап алынған.

Уҙған быуаттың 50-се йылдар аҙағында профессор Ж. Ғ. Кейекбаев башҡорт теленең диалекттар системаһын классификациялауҙың яңы методикаһын тәҡдим итә. 1958 йылда ул Башҡорт дәүләт университетының Ғилми яҙмаларында «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш» тигән күләмле мәҡәлә баҫтырып сығара. Автор һөйләштәрҙең таралыу ареалдарын ғәйәт аныҡ билдәләй, быны уларҙың фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәренең характерлы билдәләре күҙлегенән сығып, комплекслы хәл итә. Был принцип беҙҙең диалектология фәнендә һөйләштәрҙе һәм диалекттарҙы билдәләүҙә хәҙер ҙә төп критерий булып тора.

Ж. Ғ. Кейекбаев һөйләштәрҙе күбеһенсә йылға исемдәре менән атарға ынтыла. Быны ул башҡорт ырыу һәм ҡәбиләләренең борон-борондан ҙурыраҡ йылға буйҙарын биләп ултырыуы менән аңлата. Әммә артабан был критерийҙың һөйләш

сиктәрен билдәләгәндә тап килеп бөтмәгәнлеге асыҡлана. Сөнки тарихи үҫеш процесында ырыу-ҡәбилә сиктәре менән һөйләштәр һәм диалекттарҙың сиктәре араһында тап килмәү күренештәре торған һайын нығыраҡ урын ала барған.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАР СИСТЕМАҺЫ ҺӘМ УНЫ КЛАССИФИКАЦИЯЛАУ МӘСЬӘЛӘҺЕ

Башҡорт диалектологияһы фәнендә телдең диалекттар системаһын классификациялау үҙ заманы өсөн ғәйәт ҡатмарлы мәсьәләгә әйләнә. Ж. Ғ. Кейекбаев, башҡорт телендә ике – көньяҡ һәм көнсығыш диалекттар бар, тип раҫлау яғында торҙо, ә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү телен көньяҡ диалект составында айырым һөйләш тип кенә күрһәтте. Был классификация буйынса, башҡорт теле түбәндәге диалекттарҙан һәм һөйләштәрҙән тора тип билдәләнә[1].

I. *Көньяҡ диалект* һәм уның һөйләштәре:
1) төп көньяҡ йәки эйек-юшатыр һөйләше,
2) урта һөйләш,
3) дим-ҡариҙел һөйләше,
4) төньяҡ-көнбайыш һөйләш,
5) егән буйы һөйләше.

II. *Көнсығыш диалект* һәм уның һөйләштәре:
1) әй-яйыҡ йәки төп көнсығыш һөйләше,
2) һаҡмар-ҡыҙыл һөйләше,
3) һәнәр-ҡараболаҡ һөйләше.

Күренеүенсә, Ж. Ғ. Кейекбаев төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү телен айырым диалект итеп түгел, ә көньяҡ диалект составындағы һөйләш тип кенә иҫәпләй, шулай ҙа төньяҡ-көнбайыш һөйләштәренең төп үҙенсәлеген билдәләп үтә. «Был һөйләш, асылда, башҡорт һәм татар телдәре араһында аралыҡ бер һөйләш булып, – тип күрһәтә Ж. Ғ. Кейекбаев, – уға Башҡортостандың төньяғындағы Асҡын, Ҡариҙел, Яңауыл, Байҡыбаш, Балтас, шулай уҡ Дүртөйлө, Саҡмағош һ. б. районтарында йәшәгән башҡорттарҙың

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш // Ғилми яҙмалар. Башҡорт дәүләт университеты / Башҡорт филологияһы серияһы. III сығарылыш, № 2. Өфө, 1958. 27 – 81-се биттәр.

һөйләше инә. Үҙенең фонетик, морфологик яҡтары менән был һөйләш көньяҡ башҡорт диалекты һәм татар теленең урта диалекты араһындағы урта бер позицияла тора». Күренекле ғалим, дөйөм алғанда, һөйләштең иң мөһим, характерлы фонетик, морфологик үҙенсәлектәрен бик асыҡ билдәләй. Айырыуса уның Ҡариҙел һәм Асҡын райондары һөйләшендә, урта һөйләштәге һымаҡ, **-лт, -мт, -нт, -ңт** һәм **-мҡ, -нҡ, -ңҡ, -мк, -нк, -ңк** фонетик ҡушылмаларының булыуын билдәләүгә ҙур әһәмиәт ҡаҙана. «Был типтағы ҡушылмалар һаҡланған һөйләштең вәкилдәрен элгәре бала ҡатай башҡорттары һәм кирәйҙәр тип атағандар», – тип күрһәтә автор. Ғөмүмән, профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш» тигән был хеҙмәте, әлбиттә, башҡорт диалектология фәнен үҫтереүҙә йүнәлеш биреүсе ғилми мәҡәлә булды. Шул уҡ ваҡытта башҡорт теленең диалекттар системаһын өйрәнеүҙе бөтөн тулылығында хәл итеү, артабан да төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрен үҙаллы диалект итеп таныу-танымау мәсьәләһенә бәйле булып ҡалды. Был йәһәттән телселәрҙең бер төркөмө (мәҫәлән, Т. Ғ. Байышев, К. З. Әхмәров, Н. Н. Поппе, Т. М. Ғарипов, С. Ф. Миржанова) өсөнсө диалектты таныу яғында торҙолар. Николай Николаевич Поппе, мәҫәлән, Т. Ғ. Байышев һымаҡ уҡ, башҡорт телендә өс диалект – *тау диалекты* (төньяҡ, көньяҡ-көнсығыш), *ялан* (көньяҡ, көньяҡ-көнбайыш, үҙәк) һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар булғанлығын раҫланы[1].

Башҡорт диалектологтары Н. Х. Ишбулатов, Н. Х. Мәҡсүтова үҙҙәренең хеҙмәттәрендә оҙаҡ ваҡыттар буйы ике диалект – көньяҡ һәм көнсығыш диалекттар, ә инде көньяҡ диалект составында төньяҡ-көнбайыш һөйләше тигән билдәләмәнән сығып эш иттеләр. Н. Х. Ишбулатов көнсығыш диалект составында – 4 (әй-мейәс, ҡыҙыл, арғаяш, салйот), көньяҡ диалектта ла шулай уҡ 4 (эйек-һаҡмар, урта, димҡариҙел һәм төньяҡ-көнбайыш) һөйләштәр бар тип күрһәтте[2].

---

[1] *Н. Н. Поппе (1897–1991)* – беҙҙең илдә йәшәгән осорҙа – СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты. 1944 йылда сит илдәргә эмиграцияға китә. Вашингтон университетының профессоры була. 1964 йылда Блумингтон ҡалаһында инглиз телендә «Башҡорт грамматикаһы» («Bashkir manual») тигән хеҙмәте баҫылып сыға.

[2] *Ишбулатов Н. Х.* Диалекты и говоры башкирского языка // Вопросы башкирского языкознания. Уфа, 1972. 52–130-сы биттәр.

КАРТА ДИАЛЕКТОЛОГИЧЕСКИХ ЭКСПЕДИЦИЙ И КОМАНДИРОВОЧНЫХ ВЫЕЗДОВ 1972 - 1982 ГГ.




1972–1982 йылдарҙа үткәрелгән диалектологик экспедициялар һәм командировкалар картаһы

Төньяҡ-көнбайыш һөйләште ул һуңыраҡ аралыҡ һөйләш тип атаны.

Н. Х. Мәҡсүтова үҙенең 60–70-се йылдарҙа баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәрендә шулай уҡ ике диалектты – көнсығыш (ҡыуаҡан) һәм көньяҡ (юрматы) диалекттарын билдәләй. Көнсығыш диалектты ул – 5 (әй, мейәс, арғаяш, ҡыҙыл, салйот) һәм көньяҡ диалектты 4 (ҡариҙел, урта, дим, эйек-һаҡмар) һөйләштәренә бүлеп өйрәнә. Шул уҡ ваҡытта «Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедияһы»нда (Өфө, 1996) баҫылып сыҡҡан «Башҡорт теленең диалекттары» тигән мәҡәләһендә башҡорт теленең өс диалекттан (көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш диалекттарҙан) торғанлығын күрһәтә, уларҙың һәр

береһенең фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәренә ентекле туҡталып үтә. Шулай уҡ «Башҡорт һөйләштәре һүҙлеге»нең уның мөхәррирлегендә 1987 йылда баҫылып сыҡҡан III томын ул, дөйөм алғанда, көнбайыш диалект һүҙлеге тип атай.

Туған телебеҙҙең өсөнсө – төньяҡ-көнбайыш диалекты мәсьәләһендә ҡаршылыҡлы ҡараштарҙы асыҡлауҙа һәм, фәндең үҫешендәге яңы ҡаҙаныштарҙан сығып, ғилми нигеҙле хәл итеүҙә филология фәндәре докторы С. Ф. Миржанованың «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» («Северо-западный диалект башкирского языка». Уфа, 1991) тигән монографияһы айырыуса мөһим роль уйнаны. Автор төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теленең, йәғни төньяҡ-көнбайыш диалекттың дүрт һөйләштән торғанлығын билдәләй, уларҙың һәр береһен фонетик, морфологик һәм лексик планда тасуирлап бирә. Был һөйләштәр: ҡариҙел һөйләше, танып һөйләше, түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше (нижнебельско-ыкский говор), ғәйнә һөйләше.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ ДИАЛЕКТТАРЫНЫҢ ҺӘМ ҺӨЙЛӘШТӘРЕНЕҢ ХӘҘЕРГЕ КЛАССИФИКАЦИЯҺЫ

Хәҙерге башҡорт тел белемендә, диалектология фәненең беҙҙең осорҙағы торошонан сығып, башҡорт теленең өс диалекттан һәм шул диалекттар составында ун алты һөйләштән (йәнә ун туғыҙ һөйләшсәнән) тороуын раҫларға мөмкин. Был классификацияны түбәндәгесә күҙ алдына килтерәбеҙ:

I. Көнсығыш (йәки төньяҡ-көнсығыш) диалект һәм уның һөйләштәре:

1) әй һөйләше,
2) мейәс һөйләше,
3) ҡыҙыл һөйләше,
4) асыуҙы һөйләше,
5) арғаяш һөйләше,
6) салйоғот (салйот) һөйләше.

II. Көньяҡ диалект һәм уның һөйләштәре:

1) эйек-һаҡмар (йәки төп көньяҡ) һөйләше,
2) дим һөйләше,
3) өршәк һөйләше,

4) урта һөйләш,
5) егән һөйләше.

III. Төньяҡ-көнбайыш (йәки көнбайыш) диалект һәм уның һөйләштәре:
1) ҡариҙел һөйләше,
2) урта урал һөйләше,
3) ғәйнә һөйләше,
4) танып һөйләше,
5) түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше.

Был параграфты йомғаҡлап, диалектология фәнен үҫтереүҙә әһәмиәт ҡаҙанған бер нисә хеҙмәтте күрһәтеп үтергә кәрәк.

Башҡорт теле диалекттарының лексикаһын өйрәнеү тарихында «Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге» тигән өс томлы баҫма мөһим урында тора. Был һүҙлектең һәр бер томы айырым бер диалекттың лексик материалын үҙ эсенә ала. Беренсе том (1967) көнсығыш диалектҡа, икенсе том (1970) – көньяҡ, өсөнсө том (1987) көнбайыш диалектҡа һәм Куйбышев (хәҙерге Һамар), Пермь крайы, Ырымбур, Һарытау, Свердловск өлкәләре башҡорттарының һөйләү теленә арналған. Был томдарҙың тәүгеһе – 1967 йылда, аҙаҡҡыһы 1987 йылда донъя күрә, йәғни башҡорт теле һүҙлектәренең тулы баҫмаһын нәшер итеү егерме йылға һуҙыла. Хәҙерге ваҡытта ошо өс томлыҡтың материалдарын берләштергән ҙур күләмле бер томлы диалектологик һүҙлек төҙөлөп бөтөп, нәшер ителде (Башҡорт теленең диалектологик һүҙлеге. Өфө: Китап, 2002. 432 бит). 1988 йылда Н. Х. Мәҡсүтова мөхәррирлегендә «Башҡорт һөйләштәренән үрнәктәр» («Образцы башкирской разговорной речи») тигән йыйынтыҡ баҫылып сыҡты. Китап башҡорт йәнле һөйләү теленең яҙма өлгөләре һәм, ғөмүмән, рухи мәҙәниәт ҡомартҡыһы булараҡ ҡиммәтле баҫма иҫәпләнә. Унда башҡорт теленең өс диалектына ҡараған һөйләштәр буйынса телмәр өлгөләре оригиналда һәм урыҫ теленә тәржемә итеп урынлаштырылған. Был текстарҙың ғилми ҡиммәте, диалектологиянан тыш, фольклористика, этнография, тыуған яҡ тарихы күҙлегенән дә юғары баһаға лайыҡ. Сөнки унда йола фольклоры өлгөләренә, ауыл тарихтарына, риүәйәттәргә, легендаларға ҙур урын бирелгән. Үкенескә ҡаршы, китапта

ғилми мөхәрририрләү йәһәтенән етешһеҙлектәр бик нығ күҙгә ташлана, шул сәбәпле күп кенә хаталарға юл ҡуйылған. Өҫтәүенә, **э** өнөн хеҙмәттең мөхәррире һүҙ башында **е** хәрефе аша яҙыуҙы норма итеп алған. Шул сәбәпле *эш* урынына *еш, эт* урынына *ет, элекке* урынына *елекке, эшкәртеү* урынына *ешкәртеү* тип уҡырға мәжбүрбеҙ. Китаптың яңы баҫмаһын әҙерләргә тура килһә, бындай етешһеҙлектәрҙән ҡотолорға кәрәк буласаҡ.

Ниһайәт, «Башҡорт теленең диалектологик атласы» (БТДА) тураһында бер нисә һүҙ. Был капиталь хеҙмәт өҫтөндә тикшеренеү эштәре 1970 йылдар башында йәйелдереп ебәрелә. 1973 йылда БТДА өсөн материалдар йыйыу программаһы әҙерләнеп, баҫтырып сығарыла. БТДА-ны төҙөү Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 90-сы йылдар уртаһына тиклем – йәмғеһе сирек быуат самаһы алып барыла. Үкенескә ҡаршы, быуаттарға бер генә була торған был ҙур хеҙмәтте әҙерләп донъяға сығарыу бик оҙаҡҡа һуҙылды. 2005 йылда ул Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының «Ғилем» нәшриәтендә айырым том булып баҫылып сыҡты. «Башҡорт теленең диалектологик атласы»н[1] ғилми йәмәғәтселек халҡыбыҙ теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен өйрәнеүҙә ғәйәт ҙур ҡаҙаныш булараҡ юғары баһаланы.

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ДИАЛЕКТТАРҘЫ ҺӘМ ҺӨЙЛӘШТӘРҘЕ АЙЫРЫМЛАЙ ТОРҒАН ҮҘЕНСӘЛЕКТӘР

Башҡорт телендә түбәндәге фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәр диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе бер-береһенән айырымлай торған иң мөһим билдәләр (критерийҙар) иҫәпләнә:

1. Күплек ялғауҙары, килеш, сифат һәм ҡылым яһаусы ялғауҙар, һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, төрлөсә килә;

а) көнсығыш диалектта күплек ялғауҙары, тартынҡылар ассимиляцияһы буйынса, дүрт төрлө ҡулланыла: *-тар/-тәр, -дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр, -лар/-ләр,* көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш

[1] Диалектологический атлас башкирского языка. / Составители: *Н. Х. Максютова, С. Ф. Миржанова, У. Ф. Надергулов, М. И. Дильмухаметов, С. Г. Сабирьянова, Г. Г. Гареева.* Уфа: Гилем, 2005, 234 с., 169 карт.

диалекттарҙа иһә был ялғауҙар ике төрлө килә: *-лар/-ләр, -нар/-нәр;*

б) исем яһаусы ялғауҙар көнсығыш диалектта: *-тыҡ/-тек, -дыҡ/-дек, -ҙыҡ/-ҙек, -лыҡ/-лек,* көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙа: *-лыҡ/-лек һәм -ныҡ/-нек;*

в) сифат яһаусы ялғауҙар – көнсығыш диалектта: *-ты/-те, -ды/-де, -ҙы/-ҙе, -лы/-ле,* көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙа: -лы/-ле,-ны/-не;

г) ҡылым яһаусы ялғауҙар – көнсығыш диалектта: *-та/-тә, -да/-дә, -ҙа/-ҙә, -ла/-лә,* көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙа: *-лы/-ле, -ны/-не.*

2. Күпселек бүтән төрки телдәрендә һүҙ һәм ялғауҙар башындағы **с** өнө урынында көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарҙың икеһендә лә **һ** өнө (мәҫәлән: *һары, һыйыр; алһа, килһә; алһын, килһен; алаһы, киләһе*), көньяҡ диалекттың дим һөйләшендә иһә **ç** өнө килә (*çаҙ, çары, çыйыр, алçын, килçен* һ. б.). Төньяҡ-көнбайыш диалектта был позицияла дөйөм төрки **с** өнө ҡулланыла. Башҡа төрки телдәрҙең һүҙ аҙағындағы **с** өнө урынында тәүге ике диалектта **ç** өнө килә: *өç, аç, төç, алмаç, килмәç*. Төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшендә был позицияла үткән тарихи осорҙа **ç** өнө ҡулланылған булһа ла, хәҙер унда **с** өнө характерлы.

3. Күпселек бүтән төрки телдәрендәге **ч** өнө көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарҙа эҙмә-эҙле **с** өнөнә тап килә. Мәҫәлән: *суҡ, сыбар, сүбәк, сибәр, сүкеү, асы /әсе, сөсө, асыу; ус, үс, кис, ҡас, агас*. Төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәрендә был урында **с** йә йомшаҡ **ч'** өндәре ҡулланыла: *суҡ/ч'уҡ, сыбар/ч'ыбар, сибәр/ч'ибәр, ус/уч', үс/үч'* һ. б.

4. Һүҙ һәм ижек башында **й – ж – җ** өндәренең сиратлашыуы. Көнсығыш диалектта күпселек осраҡта әҙәби телдәге **й** өнө урынында ҡаты **ж** өнө ҡулланыла *(жәй, жәйрәү, жыйыу, мәржен)*. Төньяҡ-көнбайыш диалектта ошо уҡ позицияла йомшаҡ яңғырашлы **ж'** өнө килә (*җауын* – әҙәб т. *ямғыр, җәй – йәй, җир – ер, җил – ел, җылы – йылы* һ. б.).

5. Көнсығыш диалекттың арғаяш һәм салйоғот һөйләштәрендә һүҙ һәм ижек аҙағында **ҙ** өнө **ç** йәки **һ** өнөнә күсә. Мәҫәлән: *беҙ – беç, беҙҙең – беçтең, һеҙ – һеç, һеҙҙең – һеçтең, ҡыҙ – ҡыç, ҡыҙҙар – ҡыçтар, йондоҙ – йондоç, йондоҙҙар – йондоçтар, еҙнә – еçнә, барабыҙ – барабыç, киләбеҙ – киләбеç,*

*киләһегеҙ – киләһегеҫ* һ. б.; *беҙ – беһ, беҙҙең – беһтең, һеҙ – һеһ, ҡыҙ – ҡыһ, ҡыҙҙар – ҡыһтар, еҙнә – еһнә, барабыҙ – барабыһ, киләбеҙ – киләбеһ, киләһегеҙ – киләһегеһ*. Салйоғот һөйләшендә шулай уҡ һүҙ йәки ижек аҙағында **ҫ** өнөнөң дә **h** өнөнә күсеүе күҙәтелә: *Кәҫле – Кәһте* (Силәбе өлкәһендә *Оло Кәһте, Бәләкәй Кәһте күлдәре, Кәһте ҡалаһы*) – урыҫ телендә: город *Касли*.

6. Диалекттар шулай уҡ **о, ө** һуҙынҡылары буйынса ирен гармонияһының һаҡланыуы йәки һаҡланмауы йәһәтенән дә айырымлана. Мәҫәлән, көньяҡ диалектта: *бойоҡ, бөйөк, борон, боронғо, боронғолоҡ*, көнсығыш диалектта: *бойыҡ, борын, бөйек*.

7. Урта һәм егән һөйләштәре өсөн, бүтән һөйләштәрҙән айырмалы рәүештә, *-лт, -мт, -нт, -ңт, -мҡ, -мк, -ңҡ, -ңк* диссимилятив өн ҡушылмаларын, ә ҡариҙел һөйләше өсөн *-лт, -мт, -нт, -мҡ, -ңҡ, -рт* өн ҡушылмаларын ҡулланыу характерлы.

Һөйләштәрҙең сиктәре, нигеҙҙә, фонетик, лексик күренештәр, шулай уҡ күпмелер дәрәжәлә морфологик үҙенсәлектәр буйынса билдәләнһә лә, айырым осраҡтарҙа уларҙың күрше һөйләштәргә булған мөнәсәбәтен йә иһә халыҡтың ниндәй тәбиғәт-географик шарттарҙа ғүмер итеүен, йолаларын, традицияларын, көнкүрешен, хужалыҡ итеү ысулдарын да иҫәпкә алып эш итергә кәрәк.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫ ҺӘМ ҺӨЙЛӘШТӘРЕ

## I бүлек

## КӨНСЫҒЫШ ДИАЛЕКТ

### Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы

Уҙған быуаттың 20–30-сы йылдарында, ҡыуаҡан ҡәбиләһенең исеме менән, ҡыуаҡан диалекты тип атап йөрөтөлгән. Әммә диалектты бер ырыу йәки ҡәбилә исеме менән генә атау ысынбарлыҡты тулы сағылдыра алмай.

Таралыу территорияһы: Башҡортостан Республикаһының көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш регионы – Белорет районында (көнсығыш өлөшө), Баймаҡ районында (төньяҡ-көнсығыш), Бөрйән районында (шулай уҡ төньяҡ-көнсығыш төбәге), Әбйәлил, Учалы, Салауат, Балаҡатай, Мәсетле, Ҡыйғы, Дыуан райондарында, Силәбе өлкәһендә (Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка, Сыбаркүл, Уй, Ҡыҙыл, Ҡуҫа, Нязепетровск, Йәткүл, Кәҫте һ. б. райондар), Ҡорған өлкәһендә (төп ике районда – Әлмән, Сафакүл райондары, шулай уҡ Щучан районы), Свердловск өлкәһендә (Түбәнге Һирге, Әртә, Красноуфимск райондары) йәшәгән башҡорттарҙың һөйләү телен берләштерә. Ошо өлкәләрҙең, айырыуса Силәбе өлкәһенең күп һанлы ҡалалар һәм ҡасабаларында яңыраҡ осорҙа формалашҡан ҡала халҡының күпселек өлөшө тел йәһәтенән шулай уҡ көнсығыш диалектта һөйләшеүсе башҡорттар. Мәҫәлән, Силәбе, Магнитогорск, Мейәс, Златоуст, Ҡарабаш, Һатҡы, Баҡал, Йүрүҙән, Ҡатау-Ивановск, Усть-Ҡатау, Әҫем, Минйәр,

Әшә, Сыбаркүл, Копейск, Еманжелинск, Кәçле һымаҡ тиçтәләрсә эреле-ваҡлы ҡалаларҙа ошо төбәктең төп халҡы – аçаба башҡорттар ҡала халҡының билдәле бер өлөшөн тәшкил итә. Силәбе, Ҡурған, Свердловск өлкәләренең ауыл һәм ҡалаларында, 2002 йылғы халыҡ хисабын алыу мәғлүмәттәре буйынса, 219 мең башҡорт иçәпләнә. Шуның 166 меңдән артығырағы – Силәбе өлкәһенә, 1534 кеше – Ҡурған, 37296 кеше Свердловск өлкәһенә тура килә. Был территория боронғо замандарҙан уҡ әйле, ҡатай, табын, ҡыуаҡан, тамъян ҡәбиләләренең төйәге булған, унда шулай уҡ бөрйән, ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең ҡайһы бер ырыуҙары төйәкләнгән. Айырым ырыу һәм ҡәбиләләр ырыу-ҡәбилә төркөмдәрен барлыҡҡа килтергән. Мәçәлән, бында беҙ әйле ҡәбиләләр төркөмөн, ҡатай, табын ырыу-ҡәбилә төркөмдәрен билдәләйбеҙ[1].

Әйле ҡәбиләләр төркөмө үҙе генә лә ете ҡәбиләнән тора: әйле, көҙөй, дыуан, ҡошсо, мырҙалар, һыҙғы, өпәй. Ә инде әйле ҡәбиләһе үҙе йәнә тырнаҡлы, ҡаратаулы, төрөкмән, һарт-әйле ырыуҙарын берләштергән.

Көҙөйҙәр биш ырыуҙан тора: шайтан-көҙөй, ҡыр-көҙөй, урман-көҙөй, төрөкмән-көҙөй, бүләкәй-көҙөй.

Ҡатай ырыу-ҡәбилә төркөмөндә төп ҡатай ҡәбиләһе, салйот (салйоғот), мәкәтин, һеңрән, терһәк, ҡалмаҡ ырыуҙары һәм башҡорт казактары билдәле. Ҡатай ҡәбиләһе үҙе йәнә алты ырыуҙан тора: инйәр-ҡатай, ҡоҙғон-ҡатай, иҙел-ҡатай, оло ҡатай, бала ҡатай, ялан-ҡатай. Ялан-ҡатайҙар – оло һәм бала ҡатайҙарҙың Уй һәм Тубыл буйҙарына күсеп ултырған бер тармағы. Хәҙерге ваҡытта Ҡурған өлкәһендәге Әлмән һәм Сафакүл райондары башҡорттарының күпселеге – ошо ырыу вәкилдәре. Салйоғоттар боронғо башҡорт ерҙәренең төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә, Силәбе өлкәһенең Һәнәр һәм Ҡараболаҡ йылғалары, шулай уҡ ошо төбәктәге тиçтәләрсә, хатта йөҙҙәрсә эреле-ваҡлы күл буйҙарында урынлашҡан. XVIII быуат баштарында салйоғоттарҙың биләмәләре хәҙерге Екатеринбург ҡалаһының көньяғында – Уҡтөҙ (урыçса Уктус) йылғаһы буйында һалынған Уҡтөҙ заводы (Уктусский завод) эргәһенә үк барып еткән. Профессор Р. З. Янғужин билдәләүенсә,

---

[1] Был хаҡта ҡарағыҙ: *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа: Этнический состав, история расселения. М.: Наука, 1974. 194–298-се биттәр.

әүәлгерәк дәүерҙә салйоғоттар Ҡариҙелдең урта ағымында, Чусовая һәм Сылва йылғаларының үрге ағымында урынлашҡан. «Кама, Сылва һәм Чусовая йылғалары буйлап күсенеп йөрөгән салйоғоттарҙың ул тирәнән китеүе Ермактың походтары менән бәйләнгән, – тип күрһәтә ул… – Салйоғоттар Урал аръяғына беренсе булып күсенгән һәм бында буш ятҡан бик ҙур майҙандарҙы биләгән. Артабан улар Урал аръяғына күсеп килгән терһәк һәм һеңрән ырыуҙарын һыйындырған»[1].

Салйоғоттарҙың килеп сығышын Р. Ғ. Кузеев һәм Р. З. Янғужин монголдарҙың салжиут тигән ҡәбиләһенә барып тоташа тип иҫәпләйҙәр. Салйоғот һөйләшенең фонетик системаһының төп үҙенсәлеге – барлыҡ позицияларҙа ла **ҙ** һәм **ҫ** өндәре урынына **һ** өнөнөң ҡулланылыуы – нәҡ ана шул салжиуттарға боронғо ҡәрҙәшлек менән бәйле күренеш тип ҡарарға мөмкин.

Силәбе өлкәһендә салйоғот ҡәбиләһенә ҡараған өс тиҫтә ауыл билдәле. Улар Оло Ҡыҙыл, Кескәй Ҡыҙыл, Байғусҡар, Маян (Муры), Ҡунаҡбай, Ҡаҙаҡбай, Солтанай (Ыҫҡайҙы), Сәркә, Ихсан, Ҡарасур, Ҡобағош, Зәбер һ. б. ауылдар. Салйоғоттарҙың абсолют күпселеге хәҙерге Ҡоншаҡ районында йәшәй. Ошо уҡ райондың ҡайһы бер ауылдары ҡатнаш ырыу-ҡәбилә вәкилдәренән тора. Бүре ауылында, мәҫәлән, салйоғоттар һәм һеңрәндәр, Мансур ауылында табындар менән салйоғоттар йәшәй.

Әйткәндәй, республикабыҙҙың Мәсетле һәм Ҡырмыҫҡалы райондарында ла Салйоғот тигән ике ауыл бар. Ҡырмыҫҡалы районындағы Салйоғот ауылы рәсми документтарҙа тәү башлап 1600 йылда теркәлгән.

Табын ырыу-ҡәбилә төркөмө эсендә алты ҡәбилә иҫәпләнә: төп табын ҡәбиләһе, ҡыуаҡан, һырҙы, бишул, баҙраҡ, ҡумрыҡ (ҡумырыҡ). Табын ҡәбиләһе үҙе туғыҙ ырыуҙы берләштерә. Уларҙың дүртәүһе – көнсығыш табын ырыуҙары – башлыса Урал аръяғында урынлашҡан. Был ырыуҙар: ҡара табындар, барын-табындар, тиләүҙәр, күбәләктәр.

Көнсығыш диалектта һөйләшеүселәрҙең күпселеге сит өлкәләрҙә йәшәгәнлектән, ул территорияла халыҡтың йәнле һөйләү теленә башҡорт әҙәби теленең йоғонтоһо республика-

---

[1] *Янғужин Р. З.* Башҡорт ырыуҙары: Ҡыҫҡаса тарихи-этнографик очерктар. Өфө: Китап, 1998. 87 – 88-се биттәр.

ның үҙендә йәшәгән халыҡтың һөйләү теленә ҡарағанда йомшағыраҡ булып килде. Шул сәбәпле был өлкәләрҙә һөйләш үҙенсәлектәре хәҙергә тиклем тотороҡлораҡ һаҡланған. Был диалекттың һөйләштәрен берләштерә торған төп үҙенсәлектәрҙе билдәләп үтәйек.

## Диалекттың төп фонетик үҙенсәлектәре

Фонетика өлкәһендә күплек ялғауҙары һәм **л** өнөнән башланған килеш аффикстары, ҡылым һәм сифат яһаусы ялғауҙар, һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, дүрт төрлө килә. Был ялғауҙар һуҙынҡыларҙан һуң **л** өнөнән башлана: мәҫәлән, күплек ялғауҙары һуҙынҡыларҙан һуң – *-лар/-ләр,* бүтән осраҡтарҙа *-тар/-тәр, -дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр* формаһында ҡулланыла. Ошо үҙенсәлек әҙәби тел нормаһы итеп алынған: *аттар, һыйырҙар, болондар, урмандар, ҡалалар*. Исем, ҡылым һәм сифат яһаусы ялғауҙарға миҫалдар: *таштыҡ, утындыҡ, тауҙыҡ, балалыҡ; таштау, йырҙау, ямандау, ҡаралау, ташты ер, йүнде геше, тоҙҙо аш, балалы ҡатын*. (Салйоғот һәм арғаяш һөйләштәрендә иһә һүҙ һәм ижек аҙағында **ҙ** өнө **һ** йә иһә **ҫ** өндәренә күсә: *тоһто, тоҫто* – әҙәби телдә *тоҙло*.)

Һүҙ һәм ижек башында йыш ҡына **й** өнө урынына **ж** өнө ҡулланыла: *жите* (әҙәби телдә *ете*), *жәйәү* (әҙәби телдә *йәйәү*), *жыйыу* (әҙәби телдә *йыйыу*), *мәржен* (әҙәби телдә *мәрйен*). Әммә, шул уҡ ваҡытта, әҙәби тел менән уртаҡ ҡулланылыш күҙәтелә: *йелкән, йөн, йәнәш, йөмлә.*

Һүҙ башында **т–д** өндәренең сиратлашыуы характерлы: *дамға* (әҙәби телдә *тамға*), *дуғай* (әҙәби телдә *туғай*), *дулҡын* (әҙәби телдә *тулҡын*), *домыра* (әҙәби телдә *томра*), *дән* (әҙәби телдә *тән*). Төрки сығанаҡлы һүҙҙәрҙәге **с** өнө (йәғни әҙәби телдәге **һ, ҫ** өндәре) урынында барлыҡ позицияларҙа ла – һүҙ һәм аффикстар башында, һүҙ эсендәге һуҙынҡылар уртаһында **һ** өнө килә: *һыуһар* йәки *һуһар, һаһы, яһы, һоһоу* һ. б.

Көнсығыш диалектта ялғау ҡушылғанда һүҙ аҙағындағы **л** өнөнөң төшөп ҡалыуы киңерәк урын ала. Был өн, мәҫәлән, *ма* киҫәксәһе алдынан да төшөп ҡалыусан: *аманы* (әҙәби т. *алманы*), *һаған* (әҙәби т. *һалған*), *киһен* (әҙәби т. *килһен*), *ҡаһа* (әҙәби т. *ҡалһа*). Был үҙенсәлек буйынса ул үзбәк теленең ҡыпсаҡ һөйләштәренә яҡын тора.

Көнсығыш диалектта **о, ө** өндәре буйынса ирен гармонияһы күп ваҡыт һаҡланмай: *бойыҡ* (әҙәби т. *бойоҡ*), *борыс* (әҙәби т. *борос*), *йондыҙ* (әҙәби т. *йондоҙ*), *соҡыр* (әҙәби т. *соҡор*). Шул уҡ ваҡытта: *бөгөм*.

Бер төркөм һүҙҙәрҙең тамырында һәр ваҡыт артҡы рәт һуҙынҡылары ҡулланыла: *асы, аҡрын, сас, айҙаныу, һалмаҡ, шайҙау, арсыу, шиша.*

## Морфологик үҙенсәлектәре

Морфологик йәһәттән бүтән диалекттарҙа һирәк ҡулланылған *-ҡаҡ/-кәк, -ғаҡ/-гәк; -шыҡ/-шек, -маҡ/-мәк* һүҙ яһаусы аффикстарҙың продуктив булыуы күҙәтелә: *йарғаҡ* «грязный», *ҡайышҡаҡ* «сильно загрязненный», *ҡатҡаҡ* «твердый», *ҡыҫҡаҡ* «короткий», *һуғышҡаҡ* «драчун», *һоҙғаҡ* «совок»; *ҡыйшыҡ* «кривой, кривобокий», *лыпшыҡ* «толстяк», *кәмшек* «с загнутым подбородком»; *йырмаҡ* «устье реки», *һикелтмәк* «ухабы», *шылмаҡ* «скользкое место». Шулай уҡ *-тылыҡ/-дылыҡ/-ҙылыҡ* һымаҡ ҡушма һүҙ яһаусы аффикс та ҡулланыла: *барҙылыҡ* «достаток», *уңғандылыҡ* «деловитость».

Көнсығыш диалект бойороҡ һөйкәлешенең *-ың/-ең* формаһындағы боронғо (һәм ҡыҫҡа) вариантын актив ҡулланыу йәһәтенән дә бик үҙенсәлекле: *барың, ҡайтың, килең, көтөң, төшөң*. Әҙәби телдә был һүҙҙәрҙә бойороҡ һөйкәлеше *барығыҙ, ҡайтығыҙ, килегеҙ, көтөгөҙ, төшөгөҙ* формаһында ҡулланыла.

## Лексик үҙенсәлектәре

Көнсығыш диалектта лексика бай һәм оригиналь булыуы менән айырылып тора. Бында, мәҫәлән, малсылыҡ менән бәйле, аш-һыу, кейем-һалым, йола, тәбиғәт үҙенсәлектәрен, үҫемлектәр, йәнлектәр донъяһын билдәләүсе һүҙҙәр ҡатламы ныҡ үҫешкән. Мәҫәлән, Н. Х. Мәксүтова был диалекттың һөйләштәрендә *бәпембә* һүҙенең һигеҙ варианты булғанлығын билдәләй. Ә инде арғаяш һөйләшендә боламыҡтың (ондан ҡаймаҡ ҡушып бешерелгән ашамлыҡтың) ун ике төрлө

атамаһын килтерә: *боламса, боламсыҡ, боламыҡ, мазума, саламай, саламат, сукәмәй, әжәмәт, әүмәлә, хәлеүә, ызмыҡ, ылыш.*

Лексик диалектизмдарға йәнә ошондай миҫалдарҙы килтереп үтергә мөмкин:

*балға* I (төньяҡ-көнсығышта, урта урал һөйләшендә) 1 – *сүкеш* «молоток»; 2 (әй һөйләшендә) – *салғы сүкеше;* (ҡыҙыл һөйләшендә) – *ҙур сүкеш* «молот, кувалда»;

*балға* II (көньяҡ диалекттың урта һөйләшендә) – *солоҡ соҡой торған бәләкәй балта* («топорик для долбления борти»). *Солоҡ соҡомаға балға һорап килгәйне Ғәфүрҙең малайы;*

*тумар, түмәр* (ҡыҙыл, мейәс, урта, урта урал) 1 – *түңгәк* («кочка»); 2 (урта) – *солоҡ умарта* («борть»); 3 – күсерелгән мәғәнәлә – *тупаҫ* («грубый»);

*дегәнәк* (арғаяш, ғәйнә, мейәс, салйоғот, урта урал, шулай уҡ ырғыҙ-кәмәлек) – *гөлйемеш ағасы* («кустарник шиповника»); әҙәби телдә – «репейник, репей; лопух»; *дунала* (арғаяш, мейәс, әй) – *ҡамырйемеш, энәлек* («боярышник»);

*иген турғайы* (арғаяш, мейәс) // *буҙ турғай* (арғаяш, әй, шулай уҡ урта, эйек-һаҡмар) – *һабан турғайы* («жаворонок»); *мауыҙ* (мейәс) – *мәскәй* («обжора»);

*тырҡыш* (арғаяш, урта урал, әй, шулай уҡ ғәйнә, ҡариҙел) – *бысраҡ* («грязный, нечистоплотный; грязно»). *Тырҡыш тотона* (әй).

Ҡош-ҡорт төрҙәрен билдәләүсе һүҙҙәр:

*сарҙаҡ* (арғаяш, салйоғот) – *аҡсарлаҡ* («чайка»), (көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләшендә шул уҡ мәғәнәлә – *сарлаҡ*). Уның төрҙәре: *кәрелдәк сарҙаҡ, мауыҙ сарҙаҡ, ҡарабаш сарҙаҡ;*

*күгәл өйрәк* (арғаяш, мейәс) – *һуна өйрәк* («кряква»), *боған* (арғаяш, мейәс, салйоғот) – *башы ҡара, муйыны ҡыҙыл өйрәк* («гоголь»).

Фонетик үҙенсәлектәр менән бәйле (йәғни һүҙҙәрҙең ҡалын варианттарын ҡулланыу юлы менән барлыҡҡа килгән) лексик диалектизмдар:

*сас* (арғаяш, салйоғот) – *сәс* («волосы»). *Сасымды ҡырҡтығыҙ тип һыҡтай* (арғаяш);

*сасмау* (арғаяш, мейәс) – *сәсбау* («косоплетка»);

*сасрау* I – сәсрәү («брызгать»), II – *дөмөгөү* («околеть»);

*сасыу* – *сәсеү* («сеять»). *Һуғанды яңы сасҡан* (арғаяш).

Профессор Н. К. Дмитриев көнсығыш диалектты башҡорт теленең характерлы һыҙаттарын һаҡлаған бик үҙенсәлекле диалект тип иҫәпләгән. Шуның өсөн дә 1928 йылда ул башҡорт халҡының йәнле һөйләү телен өйрәнеү эшен нәҡ ошо көнсығыш, йәғни ҡыуаҡан диалектынан башларға кәрәк тигән фекерҙә тора. Н. Х. Мәҡсүтова үҙенең «Башҡорт теленең көнсығыш диалекты» тигән монографияһында, шул уҡ фекерҙе ҡеүәтләп, көнсығыш диалектын башҡорт теленең бик боронғо нигеҙе, ядроһы тип атай. Быны ул тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияһы, һүҙ башында һаңғырау тартынҡыларҙың килеүе, *ана, инә, әкә, әкәй* һымаҡ дөйөм төрки туғанлыҡ терминдарының һаҡланыуы һ. б. күренештәр менән дәлилләй.

Көнсығыш диалект үҙенең айырым үҙенсәлектәре менән (бигерәк тә боронғолоҡ һыҙаттарын һаҡлау планында) көнсығыш төрки телдәренә (мәҫәлән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, себер төрки, алтай, шор, тыва, тофалар йәки ҡарағас, хакас, яҡут йәки саха телдәренә) яҡын тора. Мәҫәлән, Н. Х. Мәҡсүтова билдәләүенсә, тартынҡы өндәрҙең ассимиляцияһы планында ошондай күренештәр характерлы:

1. Һаңғырау **п, т, с, ҫ, ш, ф, к, ҡ, х** тартынҡыларына бөткән тамыр һүҙҙәрҙән һуң аффикстар әҙәби телдәге **л** өнө урынына **т** өнө менән башлана: *ҡарт-тыҡ* – әҙәби т. *ҡарт-лыҡ, баш-тыҡ* – әҙәби т. *баш-лыҡ, азат-тыҡ* – әҙәби т. *азат-лыҡ, ас-тыҡ* – әҙәби т. *ас-лыҡ* һ. б.

Был күренеш ҡаҙаҡ, күпмелер дәрәжәлә әзербайжан, алтай, шор, телеут телдәрендә лә күҙәтелә. Ҡаҙаҡ телендә, мәҫәлән: *аҙыҡты* «имеющий съестные припасы», *бастыҡ* «глава»; әзербайжан телендә: *азаттых* «свобода».

2. Көнсығыш диалектҡа хас күплек ялғауҙары (*ат-тар* «кони», *китап-тар* «книги», *ҡыр-ҙар* «поля», *үҙән-дәр* «долины») шулай уҡ ҡаҙаҡ, тыва, уйғыр телдәре менән оҡшаш. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ телендә: *ат-тар* «кони», *китап-тар* «книги», *жең-дер* «рукава», тыва телендә: *ҡас-тар* «гуси», *от-тар* «огни», *эш-тер* «товарищи», уйғыр телендә: *ҡыз-зар* «девушки».

Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев һаҡмар-ҡыҙыл һөйләшендәге (хәҙер уны ҡыҙыл һөйләшенең бер зонаһы тип ҡарарға була)

**ç** өнөнөң һуҙынҡылар уртаһында **h** өнөнә күсеүен хәҙерге яҡут (саха) теленә яҡын күренеш тип күрһәтә. Билдәле булыуынса, төрки сығанаҡлы һүҙҙәрҙә **h** өнө башҡорт һәм яҡут телдәрендә генә бар, ти ул. Яҡут телендә ябыҡ ижек аҙағындағы **с** өнө һуҙынҡылар уртаһында тороп ҡалһа, спирант **h** өнө менән алмашына. Мәҫәлән, яҡутса *быс*, ләкин *быһах* (башҡортса: *бысаҡ*), *ас* һәм *аһаа* (башҡортса: *аш* һәм *аша*), *ҡыыс* (башҡортса: *ҡыҙ*), ләкин *ҡыыһ-ы, ҡыыһы-быт* (башҡортса: *ҡыҙы, ҡыҙыбыҙ*). «Шулай итеп, – ти Ж. Ғ. Кейекбаев, – яҡутса *быс – быһах* һүҙҙәрендәге **с** һәм **h** өндәренең мөнәсәбәте тап һаҡмар-ҡыҙыл һөйләшендәге *киç – киһәк* һүҙҙәрендәге **ç** һәм **h** өндәренең мөнәсәбәте менән бер төрлө. Айырма тик шунда – яҡут телендә **ç** өнө юҡ»[1].

Ж. Ғ. Кейекбаев телдәге боронғолоҡ йәһәтенән йәнә бер ҡыҙыҡлы күренешкә иғтибарҙы йүнәлтә: һаҡмар-ҡыҙыл һөйләшендә туғанлыҡ мөнәсәбәтен аңлатҡан *атай, әсәй, ағай, апай, инәй, олатай, өләсәй* һүҙҙәре, өндәшеү, мөрәжәғәт итеү планында, *атый, әсей, ағый, апый, иней, олатый, өләсей* формаһында килә. «*Атый, әсей, ағый, апый* формалары уларға туранан-тура өндәшкән саҡта ғына ҡулланылғас, – ти Ж. Ғ. Кейекбаев, – был форманы иҫке башҡорт йәки хатта боронғо башҡорт телендәге өндәш килештең (звательный падеж) ҡалдығы тип ҡарарға кәрәк. Ғөмүмән, звательный падеж боронғо Европа телдәре өсөн характерлы. Ул боронғо урыҫ телендә лә булған»[2]. Йәғни атый, әсей тигәндәге **а – ы, ә – е** тап килеүе һуҙынҡыларҙың ябай ғына сиратлашыуы (йә иһә фонетик күренеш кенә) түгел, ә бер үк ваҡытта килеш категорияһы менән бәйле морфологик күренеш тә ул. Был морфологик үҙенсәлек көньяҡ диалекттың урта һөйләше өсөн дә характерлы. Шунан сығып, Ж. Ғ. Кейекбаев һаҡмар-ҡыҙыл һөйләшендә һигеҙ килеш булған тигән фекергә килә: төп килеш, өндәш килеш, эйәлек килеш, төшөм килеш, төбәү килеш, сығанаҡ килеш, урын-ваҡыт килеш, ҡораллыҡ-берғәлек килеш.

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш // Ғилми яҙмалар. Башҡорт филологияһы серияһы / Башҡорт дәүләт университеты, III сығарылыш, № 2. – Өфө, 1958, 57-се бит.

[2] Шунда уҡ. 58-се бит.

## Көнсығыш диалект составындағы һөйләштәр

Көнсығыш диалект составында түбәндәге алты һөйләш һәм улар эсендәге һөйләшсәләр билдәләнә (беҙ уларҙы иң элек Н. Х. Мәҡсүтованың алда телгә алынған монографияһы буйынса күрһәтәбеҙ; шуға өҫтәп, йәнә асыуҙы һөйләшен ошо уҡ диалект системаһына индерәбеҙ):

1) әй һөйләше (уның эсендә – дыуан-мәсетле, лағыр, лапаҫ, петрушка йәки бөтөрөшкән һөйләшсәләре),

2) мейәс һөйләше,

3) ҡыҙыл һөйләше (уның эсендә – күбәләк, ҡарағай-ҡыпсаҡ һәм бөрйән һөйләшсәләре),

4) асыуҙы һөйләше,

5) арғаяш һөйләше (уның эсендә – ялан-ҡатай һөйләшсәһе),

6) салйоғот (йәки салйот) һөйләше.

### 1. Әй һөйләше

*Биләгән территорияһы,*
*халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы*

Әй һөйләше Башҡортостан Республикаһының Мәсетле районы (көньяҡ өлөшө), Дыуан, Ҡыйғы, Салауат, Балаҡатай райондары, Силәбе өлкәһенең Ҡуҫа районы башҡорт ауылдары халҡының йәнле һөйләү телен үҙ эсенә ала. Был һөйләш вәкилдәре тарихи-этнографик планда әйле, түбәләр, тырнаҡлы, мырҙалар, дыуан, ҡошсо, һарт ырыу-ҡәбилә төркөмдәренән тора. Һөйләш, үҙ сиратында, ниндәй ҙә булһа фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәр буйынса, алда әйткәнебеҙсә, йәнә дүрт һөйләшсәгә бүленә.

*Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре*

Һуҙынҡылар линияһы буйынса: айырым осраҡтарҙа **а** өнө бүтән һөйләштәрҙәге һәм әҙәби телдәге алғы рәт **ә** өнө урынында ҡулланыла: *асы* «горький» – әҙәби т. *әсе, һалмаҡ* «увесистый» – әҙәби т. *һәлмәк*. Һөйләштә шулай уҡ **а – ы** өндәренең

сиратлашыу осраҡтары ла бар: *һабай* «верхом» – әҙәби т. *һыбай, һарыу* «стегать» – әҙәби т. *һырыу*;

өсөнсө зат алмашы килеш менән үҙгәргәндә һәм күплек формаһында эҙмә-эҙле **а** өнө аша әйтелә: *ул, ләкин аны, анан, аңа, анда; алар, аларҙы, аларҙан;*

бында, көнсығыш диалекттың арғаяш, мейәс, салйоғот һөйләштәрендәге кеүек үк, **о, ө** өндәре линияһы буйынса ирен гармонияһы һаҡланмай: *бойыҡ* «грустный» – әҙәби т. *бойоҡ, борын* «прежде, издревле» – *борон, бөйек* «великий» – бөйөк;

һүҙҙең башында һәм уртаһында **о** өнө йыш ҡына – **у**, ә инде **ө** өнө **ә, ү** өндәренә тап килә: *ҡолданыу* «применение, применять» – әҙәби т. *ҡулланыу, тоҡмас* «лапша, туҡмас» – әҙәби т. *туҡмас, офтаныу* «вздыхать» – әҙәби т. *уфтаныу, мөхтәж* «нуждающийся» – әҙәби т. *мохтаж*, гөмер «жизнь» – *гүмер, көҙәтеү* «наблюдение» – *күҙәтеү, өлкөгөн* «позавчера» – әҙәби т. *элекке көн*;

**у** өнө һүҙҙең беренсе ижегендә, ғәҙәттә, әҙәби телдәге **о** өнөнә тура килә: *һурау* «вопрос» – *һорау, бушыныу* «тосковать» – *бошоноу*;

**ы** өнө күбеһенсә һүҙҙең беренсе ижегендә **у** өнө урынында ҡулланыла: *ҡылйаулыҡ* «платочек» – әҙәби т. *ҡулъяулыҡ, быйау* «краска» – әҙәби т. *буяу, ҡышйаулыҡ* «платок-покрывало» – әҙәби т. *ҡушъяулыҡ*;

**ы** өнөнөң әҙәби телдәге **а** өнө менән сиратлашыу осраҡтары ла күҙәтелә: *һыуа* «воздух» – әҙәби т. *һауа, ыҡый-шыҡый* «всякая-всячина» – әҙәби т. *аҡый-шаҡый*;

**ә** өнө, ғәҙәттә, беренсе ижектә артҡы рәт **а** өнө урынында килә, һөҙөмтәлә һүҙҙең ҡалған ижектәре лә йомшаҡ әйтелә: *ҡәгеҙ, кәйгеҙ* «бумага» – әҙәби т. *кағыҙ, әтей* «отец» – әҙәби т. *атай, әйрән* – әҙәби т. *айран*. Ғөмүмән, көнсығыш диалекттың бүтән һөйләштәренән айырмалы рәүештә, әй һөйләше өсөн һүҙҙәрҙең йомшаҡ вариантын ҡулланыу характерлы.

Дифтонгоидтар:

Һүҙ башындағы **өй** дифтонгыһы һөйләштә монофтонгка әйләнә: *үрҙәк* «утка» – әҙәби т. *өйрәк, үрә* «похлебка» – *өйрә, үрәнсек* «ученик, подмастерье» – *өйрәнсек, һүрәтеү* «волочить» – *һөйрәтеү*;

Шул уҡ ваҡытта әҙәби телдәге **ы** монофтонгы һөйләштә **ый** дифтонгыһына әйләнә: *ҡыйланыу* «рисоваться, кокетничать» – *ҡыланыу; ҡыйлансыҡ* «щеголь, кокетка» – әҙәби т. *ҡылансыҡ*, һөйләштә **ыу** дифтонгыһы әҙәби телдәге **ы, у** монофтонгыларына тап килә: *һыуған* «лук» – әҙәби т. *һуған, һыуҫар* «куница» – әҙәби т. *һуҫар, тыуған* «родной» – әҙәби т. *туған*.

Тартынҡылар өлкәһендә:

айырым һүҙҙәрҙә һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында дөйөм төрки характерлы **б – м** сиратлашыуы күҙәтелә: *майтаҡ* «довольно много» – әҙәби т. *байтаҡ, билмау* «пояс» – әҙәби т. *билбау, сәсмәү* «косоплетка» – әҙәби т. *сәсбау*;

төрки телдәрендә һүҙ башында **п** өнөнөң ҡулланылыуы, боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларынан күренеүенсә, бик боронғо дәүерҙән ҡалған архаик үҙенсәлек иҫәпләнә, ә инде әй һөйләшендә был күренештең күҙәтелеүе тел тарихы өсөн әһәмиәтле һанала: *пысаҡ* «нож» – әҙәби т. *бысаҡ, песән* «сено» – әҙәби т. *бесән, пәпәй* «ребенок» – әҙәби т. *бәпәй, пешектәү* «ошпаривать» – әҙәби т. *бешекләү*; был күренеш башҡорт теленең йәнә урта һәм егән һөйләштәре өсөн характерлы;

әҙәби телдә һүҙ башындағы һаңғырау **т** өнө бында эҙмә-эҙле яңғыраулана: *дулҡын* «волна» – әҙәби т. *тулҡын, дуғай* «лут» – әҙәби т. *туғай*;

һөйләштә, алда әйтеп үтелгәнсә, һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында **й – ж** сиратлашыуы характерлы: *жил* «ветер» – әҙәби т. *ел, жәй* «лето» – әҙәби т. *йәй, мөржә* «труба» – *мөрйә, энже* «жемчуг» – әҙәби т. *ынйы*.

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Исемдәрҙең төбәү килеш формаһы урынына билдәһеҙ килеш формаһы ҡулланыла: Баҙар сыҡтымың? (Баҙарға сыҡтыңмы?), *Уфа киттемең?* (Өфөгә киттеңме?)

Һүҙьяһалыш өлкәһендә *-ҡаҡ/-кәк, -ҡыс/-кес, -ҡас/-кәс* һымаҡ аффикстар ҡулланыла: *һуғышҡаҡ, алдатҡыс*.

*Лексик үҙенсәлектәре*

Әй һөйләше һүҙлек составы буйынса бүтән һөйләштәрҙән ғәйәт ныҡ айырыла. Был айырымланыу һөйләшсәләр араһында ла үҙен һиҙҙерә. Һөйләшкә хас һүҙҙәр: *сөңкә* – сынаяҡ өҫтө («чашка»), *жәйпәк* – сынаяҡ аҫты, *балға* – сүкеш, *дыуыш* – шәре (дим һөйләшендә – тыуыш), *ҡынйыраҡ*// *ҡиндырак* – тиренән тегелгән аяҡ кейеме («обувь, сшитая из шкуры»), *бетәү* – һарыҡ ояһы, *аяҙ* – аҡлан, *бешә* – бала ҡарағай, *дуғай* – 1) йылға бөгөлө, 2) туғай, сабынлыҡ, *ҡыйшандаҡ* – көрөҫ үҙәге («блок ниточки»), *ҡыйыр* (әй һәм ҡыҙыл һөйл.) – сит («край»).

Алда әйткәнебеҙсә, әй һөйләше дүрт һөйләшсәне берләштерә. Улар – дыуан-мәсетле, лағыр, лапаҫ, петрушка (бөтөрөшкән) һөйләшсәләре. Һәр бер һөйләшсә һөйләш эсендә ниндәй ҙә булһа фонетик, лексик, һирәкләп морфологик үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Һөйләшсәләрҙең ошо үҙенсәлектәрен ҡыҫҡаса ғына күрһәтеп үтәйек.

### Дыуан-мәсетле һөйләшсәһе

Был һөйләшсә Дыуан районының Әри, Әбдрәшит, Мәсетле районының Әйүп, Әбдрәхим, Ләмәҙтамаҡ, Мәржәмғол, Мишәр, Тайыш, Йонос, Балаҡатай районының Айҙаҡай, Айғыръял, Яңыбай, Һандалаш, Ҡурғаш, Монас, Йосоп ауылдарын үҙ эсенә ала.

Фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәре:

1) һүҙҙең беренсе ижегендә әҙәби телдәге **у** өнө **ы** өнөнә әйләнә: *ҡылъяулыҡ* «платочек» – әҙәби т. *ҡулъяулыҡ, ҡышйаулыҡ* «платок-покрывало» – *ҡушъяулыҡ, ыҡтау* «скалка» – *уҡлау, шынан* – «после того» – *шунан*;

2) тамыр һүҙҙең аҙағындағы **л** өнө ялғау ҡушылған саҡта төшөп ҡала: *киһә* – әҙәби т. *килһә, амау* – әҙәби т. *алмау, ҡамау* – әҙәби т. *ҡалмау, буған* – әҙәби т. *булған*;

3) оҡшатыу мәғәнәһендәге **-ҡас** элементы киң ҡулланыла: *ата-ҡас* – әҙәби т. *атаһына оҡшаған, инәкәс* – *инәһенә оҡшаған, ҡарттаҡас* – *ҡарттаһына оҡшаған;*

4) *эйеү* модаль һүҙе киң ҡулланыла: *баҡырыб эйҙем – ҡысҡырып ебәрҙем, көлеб эйҙе – көлөп ебәрҙе.*

Лексик диалектизмдар: *сөңкә – сынаяҡ өҫтө* «чашка чайная», *жәйкә, жәйпәк – сынаяҡ аҫты* «блюдце», *кәктәй – башалтай* «шерстяные носки-самовязки».

## Лағыр һөйләшсәһе

Салауат районының Лағыр, Шәрәк, Ҡыйғы районының Яуын ауылдарының һөйләү теле.

Фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәре:

1) күп кенә һүҙҙәрҙә артҡы рәт һуҙынҡылары алғы рәт һуҙынҡыларына әйләнә: *ҡәгеҙ* – әҙәби т. *ҡағыҙ, тәрих* – әҙәби т. *тарих, этәй* – әҙәби т. *атай*;

2) һүҙ башында д өнө күп ваҡыт һаңғыраулана: *тонъя* – әҙәби т. *донъя, тәүмәл* – әҙәби т. *дәүмәл, тошман* – әҙәби т. *дошман*;

3) *-ҡай/-кәй, -ғынам/-генәм* иркәләү аффиксы һәм киҫәксәһе әүҙем ҡулланыла: *йаманҡай* – әҙәби т. *яман, матурҡай* – әҙәби т. *матур, ҡыҙғынам* – «доченька моя», *улғынам* – «сыночек мой».

Лексик диалектизмдар: *сайан – һаран, шәлдәү – ҡамыр баҫыу.*

## Лапаҫ һөйләшсәһе

Ҡыйғы районының Түбәнге Лапаҫ ауылы халҡының һөйләү теле. Ауыл кешеләре хәҙерге Ғәфүри һәм Кушнаренко райондарынан күсеп барып ултырған. Бында көнсығыш диалекттың бүтән һөйләштәренән айырмалы ошондай үҙенсәлектәр характерлы:

1) әҙәби телдәге **ҫ** өнө урынына **с** өнө ҡулланыла: *оста* – әҙәби т. *оҫта, арыслан* – әҙәби т. *арыҫлан*;

2) **ҙ** өнө әҙәби телдәге **з** өнө урынында килә: *Ҙакир* – әҙәби т. *Закир, Ҙәкей* – әҙәби т. *Зәки, ҙаман* – әҙәби т. *заман, ҙат* – әҙәби т. *зат*;

3) күплек ялғауҙары көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙағыса: *ат-лар, урман-нар.*

## Петрушка (бөтөрөшкән) һөйләшсәһе

Башҡортостандың Ҡыйғы районы Аҫылғужа, Абзай, Ҡолбаҡ ауылдары, Силәбе өлкәһе Ҡуҫа районы Петрушка (Бөтөрөшкән) ауылы халҡының һөйләү телен берләштерә.

Үҙенсәлектәре:

1) әҙәби телдәге **ә** өнө **а** өнөнә күсә: *шал* – әҙәби т. *шәл, арсыу* – әҙәби т. *әрсеү, айҙаныу* – әҙәби т. *әйләнеү*;

2) һирәкләп **h** өнө урынына **ç** өнө ҡулланыла: *ҫөйөү* – әҙәби т. *һөйөү, ҫип* – әҙәби т. *һип, ҫары* – әҙәби т. *һары*;

3) ҡылымдың үткән заман хәбәр һөйкәлеше формаһында элизия (һуҙынҡы өндәрҙең ҡыҫырыҡлап сығарылыу күренеше) күҙәтелә: *баргайым* – бүтән һөйләштәрҙә *барган инем, күргәйем* – бүтән һөйләштәрҙә *күргән инем*;

4) эйәлек төшөнсәһен белдереүсе аффикстарҙа **ң** өнө урынына **н** өнө ҡулланыла: *мин-ен* – әҙәби т. *минең, аны-н* – әҙәби т. *уның*.

Лексик диалектизмдар: *балаһар* «кустик, роща»; *остаган* «гуляш».

### *Әй һөйләшенең йәнле һөйләү теле өлгөһө*

### *Туй йолаһы*

Умбиште уҙғас, мейә ғоҙа гилә баштаны. Мейә ун ике ғоҙа гилде, ун өсөнсөһенә бирелдем. Ҡоҙа гигәс, быҙауҡай, йарты бот бал, гөрәңкә сәй, инә туны, күшәгәбаш күлмәк, әбейемә күшәгәбаш күлмәк, мейә ике ос әҙерәс, күлмәк мәһәр, ҡыҙ мәһәре, ҡалын шәл, ситек, эрзинкә мейә. Шун дүрт ағайымды дүрт кис ҡундырып, мал ағалы саҡырҙы. Мал алыу туйы үткәрҙе. Хәҙер беҙгә гиләләр бирәнә гейәргә, бирәнә туйына.

Эйберҙе китереп бөтмәйсә, никах уҡытмайҙар, шуңа хәҙәре кейәүҙе китертмәйҙәр. Никах тауышын эшеткәле халыҡ жыйыла, тыш тулы. Кейәүҙе иңесе өйгә йабалар, туйҙы иңесе өйҙә үткәрәләр. Инде бирәнә һала инәйем, дүрт ҡат кейәүгә. Ике запун, ике гейем сылғау, айаҡ сылғауы, дүрт ҡат күмәк, дүрт ҡат ыштан, суптарҙы гүмәк. Фис үҙем эштәгәм, үҙ ғулым гөсө. Нәҫел-заттарына бөтәһенә ҡылйаулыҡ. Алар аҡса һала. Әгәр ҙа мәгәр ун ике тәңкә аҡса төштенейһә, бирәнәһе күп

буған, тейҙәр. Шуҙа туҫтаҡ, сынайаҡтар ала, тәңкәләтә төштөмә, аны ҡыҙ ҡулына ала, аныһын ҡыҙ һумдығы тейҙәр. Кейәү ҡыҙға бартәңкә китерә, ике гөмөш һумдыҡ, Микулай (Николай II) һумдығы, тәүге гис усына һала.

Бирәнә туйынан ҡайтып китәләр. Әйбер-йыһаз әҙерҙәнем бик күп итеп. Ҡайыным бүлйал ҡуйарға гилә. Көймә белән ҡуш ҡыңғырау тағып килә. Туй гилә, ҡәйнәм тереләтә тәкә китерә, йабыҡ буһа, туй тартмай тора, туйҙы ҡайтарам күткире, тей минең инәйем. Туй тартылмаһа, кейәү асыуҙана ла инде, аңа ойатсылыҡ килә, ҡыҙға ла ауыр була. Ике гис ҡунаҡ булып, ҡыҙҙы оҙаталар. Сеңдәйҙәр, ҡыҙ гитәр гөндө сеңдәйҙәр:

Бурҙат ҡына шаршау,
Күләгәһе биттәреңә төшәр, инәкәйем,
Минең генә тиңе ғыҙҙы гүрһәң,
Иҫтәреңә төшәр, инәкәйем.
Шылтыр-шылтыр ғына аттар йегеп,
Шылтыратыб әпкитәһең, ағасайым,
Шылтыратыб итеп таштап китеп,
Нисек йөрәгең йанмай, ағасайым.

Ҡапҡанан сыҡҡанда, йегет аҡса һибеб эйә, кейәү аҡсаны күберәк һипмәһә, аны өс-дүрт кеше ҡамсы менән жаралар. Дәне аҙман буһа, ауырып йата ҡайһы бере. Үсеккән һыбайҙар аттарын ҡапҡаға баштан гитереб бәйҙәп ҡуйалар, ҡойырығын төйнәп. Аны гурҙемә, ҡыҙҙың атаһы сөсө бал сығара, эсәргә сығара лапаҫҡа. Әпкереб аҡса бирә төгөләргә, һый үтеб, үҙҙәренә гитһә китеп ҡалалар, китмәһәләр, йәнә кейәү артынан сабалар, кейәүгә хана була анан. Аҙаҡ ҡарт менән ҡарсыҡ әйтемдәшеп китәләр, һин майыңды, балыңды ҡыҙғанып, ғуж, сығарманың, тип. Кейәүҙе ҡанға ла туҙҙыралар. Шулай булды әүәле туйҙар. Ул ҡоҙағыйға эләгә. Аны әрҙәйҙәр, ҡоҙағый ҡаршы әйтешһә, сәнсем икән, ҡыҙын тотмаҫ, тейҙәр.

Көфәй ғәртнәйем семдәүгә әүәҫ буған, алйап үлдеүел, шундый булды хәлдәр. Тахы таҡыйа уйнаталар, өйөрсек күк өйөртеп, килендең биленә ҡәйнә ҙур фырансус йауҙыҡ бәйҙәй. Аны төбәккә апсығалар, өйөрмәс уйнарға йә арпа тапат-

маға сығыу тейҙәр. Ҡыҙҙы өйертәләр, иртәгә күсә туған көндө. Аны тапашыб бөткәс, ҡәйнәһе сисеп биленән, ҡыҙҙың башына бәйҙәб эйә.

*1960 йылда Башҡорт АССР-ы Мәсетле районы Һөләймән ауылында 59 йәшлек Шәмсетдинова Шәһәр Хөсәйен ҡыҙынан яҙып алынған (Образцы башкирской разговорной речи. Уфа: Баш. кн. изд-во, 1988. 31–32-се биттәр).*

*Тәржемәһе*

*Свадебный обряд*

Как минуло пятнадцать лет, меня стали сватать. Ко мне двенадцать сватов приходили, тринадцатому отдали. Когда пришел сват, принес полпуда меда, теленка, фунт чая, шубу матери, платье мне, бабушке платье, мне два куска материи из адраса, платье как калым, выкуп за невесту, теплую шаль, галоши мне. Потом, пригласив четырех моих братьев за выкупом, угощал четверо суток, провел церемонию передачи скота. Сейчас к нам идут за приданым. Пока они не закончили передачу калыма, никах (венчание) не начинается, до этого и не приводят жениха. Услышав о венчании, собирается народу полный двор, полная улица. Жениха запирают в одну избу, а в другой проводят свадьбу. Преподносит матушка мое приданое – подарки жениху: четверо штанов, четыре рубахи из полотна узорнотканого, два передника, пару портянок. Все сама сделала, приготовила собственными руками, родственникам его всем платочки. При получении они в чашку бросают деньги. Если соберется двенадцать рублей денег, говорят, много приданого было. На эти деньги посуду, чашки покупают, если выпали монеты, то берет девушка сама, говорят, это «девичья монета». Жених приносит невесте пару рублевых николаевских монет и кладет в первую ночь ей на ладонь. После этого уезжают обратно. Вещей всяких приготовила я очень много.

Приезжает назначать время свадьбы свекор на коляске с двумя колокольчиками. Свадьба едет, свекровь приводит живого барана, если баран тощий, то свадьбе не быть, мать

невесты ее откладывает. В таком случае жених сердится, ему позор, и неудобно бывает невесте. Два дня угощают, потом провожают невесту. В день отъезда причитают:

Сандаловый занавес, маменька,
Упадет тень на лицо твое,
Увидишь девушку, подобную мне,
Вспомнишь маменька, меня.

Увозишь, меня, браток,
Только повозки прогремят.
Оставишь меня где-то,
Как не болит сердечко твое.

При выезде из ворот жених высыпает деньги; если мало, то три-четыре человека порют его плетью. Если тело слабое, иные долго болеют. Затаившие зло всадники (односельчане невесты) заранее привязывают коней у ворот, хвосты коням подвязывают, плети наготове. Увидев это, отец невесты выносит им навстречу медовуху, пируют под навесом. Если угощением удовлетворены и пьяные, то расходятся по домам, если нет, то скачут за женихом, жениху тогда не сдобровать. Старуха корит старика, что пожалел масла, меду, обжора, не вынес всего что надо было. Жениха избивают до крови. Так проходили раньше свадьбы. Попадает и свахе. Ее ругают, если что скажет против, говорят, сваха колкая, невесту не будет держать.

Моя бабушка Куфай была мастером причитания, умерла она глубокой старухой, с затуманенным сознанием, такие бывали дела.

Еще играют в тюбетейку, вращая невестку как колобок, свекровь обвязывает ее талию большим французским платком. Выводят ее на луг, играют в круг. Эта церемония проводится накануне дня отъезда девушки из родительского дома. Когда кончают игру, свекровь, сняв с талии платок, повязывает им её голову.

## 2. Мейәс һөйләше

*Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар*

Был һөйләш Силәбе өлкәһе Мейәс буйы башҡорт ауылдарының, Башҡортостан Республикаһы Учалы районының төньяҡ һәм көньяҡ өлөшө, шулай уҡ Әбйәлил һәм Белорет райондарының ҡайһы бер ауылдары халҡының һөйләү телен үҙ эсенә ала. Уның составына табын, ҡатай, ҡыуаҡан, тамъян ырыу-ҡәбилә берекмәләре, тиләүҙәр, күбәләк-тиләүҙәр, әйләләрҙең бер өлөшө инә.

Мейәс һөйләшендә ҡыҙыл һәм урта урал һөйләштәре менән уртаҡ һыҙаттар күҙәтелә. Башҡорт теленең диалекттар системаһында, тип яҙа Н. Х. Мәҡсүтова, мейәс һөйләше һымаҡ үтә ныҡ ҡатнаш характерҙағы бүтән һөйләште күрһәтеүе ҡыйын. Шуға күрә, уның ҡатнаш характерҙа булыуын иҫәпкә алып, һөйләште айырым бер ырыу йә ҡәбилә исеме менән атау мөмкин дә түгел. Ә инде мейәс тигән исем уның Мейәс йылғаһы буйында таралыу үҙенсәлеген бик тапҡыр билдәләй.

Н. Х. Мәҡсүтованың «Башҡорт теленең көнсығыш диалекты» (М.: Наука, 1976) тигән монографияһында Белорет, Учалы, Әбйәлил, Арғаяш һәм Сыбаркүл райондарында Мейәс һөйләшенә ҡараған башҡорт ауылдарының 50 атаманан торған ошондай исемлеге бирелгән: Һөйөндөк, Сөләймән, Ихсан, Нурәле, Шәрип, Аҙнаш, Әбсәләм, Абҙаҡ, Муйнаҡ, Татлыөмбәт, Түләк, Буранғол, Байһаҡал, Көсөк, Урта Телмәй, Көҙйылға, Ҡарағужа, Татлы, Ҡаҙаҡкол, Ҡобағош, Сатра, Әзекәй, Баттал, Аслай, Рәхмәт, Түбәнге Сермән, Аҙнағол, Абзан, Үткәл, Йәнекәй, Мораҡай, Ғәбдин, Яңы Балапан, Иҫке Балапан, Байым, Бикҡол, Яратҡол, Ҡәҙер, Ҡолой, Дәүләтбай, Сәләм, Байғаҙы, Ташауыл, Әлеш, Туҡтыбай, шулай уҡ Ҡоҙашман, Шығай, Ҡоҙғон-Әхмәр һ. б.

*Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре*

Һуҙынҡылар өлкәһендә:

1) әҙәби телдәге артҡы рәт **а** һуҙынҡыһы урынына алғы рәт **ә** өнө ҡулланыла: *бәребер* – әҙәби т. *барыбер, хисәп* – әҙәби т. *хисап, хәт* – әҙәби т. *хат, хәтен* – әҙәби т. *ҡатын, әрле-бирле* – әҙәби т. *арлы-бирле*;

2) айырым осраҡтарҙа **а–ы** өндәренең сиратлашыуы күҙәтелә: *һау* – әҙәби т. *һыу, маҡты* – әҙәби т. *мыҡты, айарыу* – әҙәби т. *айырыу, уҡата* – әҙәби т. *уҡыта, алйау* – әҙәби т. *алйыу*;

3) **о – у, ө – ү, е (э)** өндәренең сиратлашыуы: *доға* – әҙәби т. *дуға, зор* – әҙәби т. *ҙур, ҡоҙ* – әҙәби т. *ҡуҙ, соҡ* – әҙәби т. *суҡ* («кисть»), *мойон* – әҙәби т. *муйын; көрмөш* – әҙәби т. *күр* – тамырынан («видеть»), *йелге – йел* тамырынан (*йелге, йелеп үтеү*), бәйгелә беренсе приз;

**өй** дифтонгыһы **ө** өнөнә тап килә: *өрәк* – әҙәби т. *өйрәк, өрәтеү* – әҙәби т. *өйрәтеү*;

4) һөйләштә **ы** өнө һирәклэп **а, у, о** өндәре урынында ҡулланыла: *быуаҙ* – әҙәби т. *боғаҙ* («горло»), *быуаҙҙау* – әҙәби т. *боғаҙлау* («грызть, загрызть»), *дыуа* – әҙәби т. *тоба* («омут»);

**ы** өнө бер йәки ике ижекле һүҙҙәрҙә **е (э), у** өндәре урынына килә: *мың* – әҙәби т. *мең, йыҡ* – әҙәби т. *йуҡ, быйҙ* – әҙәби т. *буй, ҡыуат* – әҙәби т. *ҡеүәт*; **ы** өнө һүҙҙең икенсе ижегендәге **а** өнөнә тура килә: *тургый* – әҙәби т. *тургай, сыныйаҡ* – әҙәби т. *сынаяҡ*;

5) айырым осраҡтарҙа һүҙ аҙағында киң әйтелешле **ә** өнө урынына тар **е (э)** өнө ҡулланыла: *теңке* – әҙәби т. *теңкә* («терпение»), *келем* («шерстяной платок с узорами») – әҙәби т. *келәм* («ковер»), *кескей* – әҙәби т. *кескәй, тәңке* – әҙәби т. *тәңкә* («монетка, рубль»);

6) ҡайһы берҙә алғы рәт **ә, ү** өндәренә **и** өнө тап килә: *сискә* – әҙәби т. *сәскә, сисән* – әҙәби т. *сәсән, бире* – әҙәби т. *пәрей, киҙҙәү* – әҙәби т. *күҙләү* «родник», *әңгиш* – арғаяш һөйләшендә *әңгүш* («шмель»);

7) эргәләге **ә** өнө йоғонтоһонда **е (э)** өнө урынына **ә** өнө ҡулланыла: *мәндәр* – әҙәби т. *мендәр, әрәкмән* – әҙәби т. *әрекмән* («лопух»), *бәләк* – әҙәби т. *беләк, кәһәл* – әҙәби т. *кеҫәл*.

Тартынҡылар өлкәһендә:

1) һүҙ башында **т** өнө **д** өнөнә әйләнә: *дарих* – әҙәби т. *тарих, дүңәрәк* – әҙәби т. *түңәрәк, дәгәрмәс* – әҙәби т. *тәгәрмәс*;

2) һүҙ һәм ижек башында көнсығыш диалект һөйләштәренә хас **й–ж** сиратлашыуы мейәс һөйләшендә һирәк күренеш

иҫәпләнә. Миҫалдар: *жарыу* «бить» – *йарыу, жан* «йән, любовь» – әҙәби т. *йән, жирек* – әҙәби т. *ерек*;

3) **ҡ, к** өндәре интервокаль позицияла айырым осраҡтарҙа яңғырауланмай, йәғни **ғ, г** өндәренә күсмәй: *аҡай, әкәй* – әҙәби т. *ағай, бороңҡо* – әҙәби т. *боронго, эркә* – әҙәби т. *эргә, туҡарыу* – әҙәби т. *туғарыу, ҡараңҡы* – әҙәби т. *ҡараңғы*.

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

1) исем һәм сифат яһаусы аффикстарҙың бик продуктив булыуы:

төбәү килештәге *-ҡа/-кә, -ға/-гә* аффиксы ҡайһы бер осраҡтарҙа *-ҡы/-ке, -ғы/-ге* формаһында килә: *тышҡы* – әҙәби т. *тышҡа, һыугы* – әҙәби т. *һыуға*;

*-ма/-мә* аффиксының бүтән һөйләштәргә ҡарағанда һүҙьяһалыш функцияһының киңерәк булыуы күҙәтелә: *шаҡма* – *бысаҡ һабы ҡулсаһы* «кольцо на рукоятке ножа», *тешекмә* – *ҡарышма* «капризный (о ребенке)», «молчун», *үсекмә* – *үсегеүсән* «капризный, обидчивый»;

исемгә *-са/-сә* аффиксы ҡушып, исем яһала: *һыбайса* – *менге ат* «верховая лошадь», *орҙоҡса* – «приплод», *ҡотоҡса* – *агас һауыт* «деревянная посуда»;

*-ым/-ем, -м* аффикстары менән нигеҙҙә оноҡшаш һүҙҙәрҙән исем яһала: *шылҡым* – *шаян* «балагур», *былҡым* – йомшаҡ «мягкий», «толстяк», *тылҡым* – «человек, любящий повторять одно и то же», *түләм* – «налог», *барым* – «ход»;

исемдәр шулай уҡ *-амыш, -мыш/-меш, -ыш/-ош/-өш, -сын, -сыл/-сел* аффикстары ҡушып яһала: *ҡорамыш* – *ҡорама* «покрывало, сшитое из клинышков», *бөгөш* – «сустав», *һырмаҡсын* – «липучий (человек)», *һунарсыл* – «охотник»;

*-тыҡ/-тек, -дыҡ/-дек, -ҙыҡ/-ҙек, -лыҡ/-лек* аффикстары һүҙ яһауҙа бик актив ҡулланыла: *түштек* «наковальня» – әҙәби т. *түш, әрелек* «отруби» – әҙәби т. *көрпә, ҡартайыуҙыҡ* «старость» – әҙәби т. *ҡартлыҡ*;

*-ҡай/-кәй* иркәләү аффиксы, аҙыҡ-түлек атамаларына ҡушылып, ризыҡ-ниғмәтте ҡәҙерләп, ололап әйтеүҙе белдерә: *һөтөкәй* «молочко», *әпәкәй* «хлебушко»;

*-сай/-сәй* аффиксы менән исемдәрҙән һәм сифаттарҙан сифат яһала: *бүресәй* «похожий на волка», *үгеҙсәй* «похожий

на быка», *йыуансай* «толстый», *оҙонсай* «длинный», *һылтыҡсай* «хромой»;

сифаттың сағыштырыу дәрәжәһенең *-раҡ/-рәк* аффиксын өҫтө-өҫтөнә ҡабатлап ҡулланыу юлы менән яһалған осраҡтары бар: *ҙурырағыраҡ, туғрырағыраҡ* – әҙәби т. *ҙурыраҡ, тоғрораҡ*. Мәҫәлән: *Ағас табаҡ ағас тәгәстән ҙурырағыраҡ.*

*Лексик үҙенсәлектәре*

Лексик үҙенсәлектәргә ҡайһы бер миҫалдар: *мауыҙ – мәскәй, иген – баҫыу, игәнәһеҙ – һөйкөмһөҙ, ирте – кәртә сыбығы, яйпын – йылғаның киң урыны, йур* (мейәс, ғәйнә, урта, ырғыҙ һөйл.) – *ҙур* («большой»): *Симейәм йур булды* (ғәйнә); *Бер йур йаҙыусыны һөйләй ине* (ырғыҙ); *Йүрүҙән* (гидроним) – *йур* «большая» + *үҙән* «долина»; *Юрғамыш* (Ҡорған өлкәһендә гидроним һәм ойконим – йылға һәм ауыл исеме) – *йур* «ҙур, оло» + *ҡамыш*.

*Һөйләү теле өлгөһө*

*Туй йолаһы*

Димсе була, димдәй. Шанан йәрәшә. Мәһер һала, мәһер инде шул хаҡы була. Күрше-ҡолан бара, ҡалын һала дүрт доға булып барып. Туйға кигәс, мулла алып ҡушалар. Иртәгәһенә туй һуйалар, һарыҡма, башмаҡма, хәҙер йуғ ул. Беҙ ҙә остоғон ғына күреп ҡалдыҡ. Бер-берен йараша, мәзлис бөттө (Йаҙып сығар, беҙҙен тел бигерәк йалпаҡ, систай башҡурт). Тахын нәмә һөйҙәйем? Киткәндә ҡыҙ күсеп, һамаҡ әйтәләр:

Ҡуңысым шулай боролған,
Китабым шулай йаҙылған.
Йылама, туған, йылама,
Мөҡкәҙәрҙә шулай йаҙылған.
Тәҙрәләрҙән уғ аттым,
Аҡкий тәңкә йуғаттым,
Аҡкий тәңкәләргә урап ҡуйып,
Ата-инәйемде йуғаттым.

(Булды инде, минән һурама инде. Иршеп әйтәләрмә тиһәм, сын икән, эшеттеңмә?)

Һапты ла төймә ҡәҙерҙе,
Һапһыҙ ҙа төймә ҡәҙерһеҙ,
Аталы ла бала бик ҡәҙерҙе,
Атаһыҙ ҙа бала ҡәҙерһеҙ.
Утырҙым да сана төбөнә,
Дилбегәкәйҙәрҙе тик тотоп,
Минән генә ҡаған бер инәкәйем
Утырыр ғына микән ут йотоп.

Бибейәсмәгә бар, абый, ул сутырҙатыр ине, ул бик шалҡым инде мындай лаҡабҡа.

*1962 йылда Силәбе өлкәһе Сыбаркүл районы Дәүләтбай ауылында 58 йәшлек Йомагужина Гөльямалдан яҙып алынган (Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 247–248-се биттәр).*

*Тәржемәһе*

*Свадебный обряд*

Обычно свадьба начинается со сватанья. Уговариваются, назначается цена выкупа; если устраивает, то происходит уговор, соглашаются. Для назначения выкупа едут на четырех тележках, участвуют в этом и близкие соседи. Определяется день свадьбы. Мулла духовно скрепляет молодых, молодые сходятся. Начинается свадьба, режут овец, телок. Сейчас нет такой свадьбы. Нам тоже долго не приходилось быть свидетелями такой свадьбы. Самое основное, чтоб молодые любили друг друга. Ну и кончился меджлис (свадьба) (Ты публиковать хочешь; конечно, язык наш настоящий, башкирский, со всеми его особенностями.) Еще о чем сказать? Когда девушка покидает родительский очаг, припевают от ее имени:

Голенище моего сарыка так украшено,
Книга о моей судьбе так написана,
Не плачь, дорогая, не плачь,
При рождении тебе так предписано.

Из окна стрелу пустила,
Монету серебряную потеряла,
Завернутыми в эту монету,
Родителей своих растеряла.

(Все, теперь больше меня не расспрашивай; я думала, что говорят в шутку, но, оказывается, они по-настоящему, слышала?)

Монета с колечками почитаема,
Монета без колечек не считаема,
При отце девушка уважаема,
Девушка без отца не почитаема.

Ухватившись за вожжи,
Села я в сани.
Кто по мне, кроме матери,
Будет слезы проливать?

Иди к Бибиасме, уй-уй, она тебе все выложит, она большая охотница до подобной беседы.

## 3. Ҡыҙыл һөйләше

*Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар*

Был һөйләш Башҡортостан Республикаһының Әбйәлил районында, Баймаҡ районының төньяҡ, Бөрйән районының төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә таралған. Йәнә Белорет районының көньяҡ-көнсығыш өлөшө, шул иҫәптән Ҡаһарман ауылы халҡының һөйләү теле ошо уҡ һөйләшкә ҡарай. Территория башлыса Ағиҙел менән Урал (Яйыҡ) йылғалары араһында ята. Күп өлөшө Оло һәм Кесе Ҡыҙыл йылғалары бассейнына тура килә. Һөйләштең исеме Ҡыҙыл йылғаһы атамаһынан алынған. Һөйләш нигеҙҙә күбәләк, ҡарағай-ҡыпсаҡ, бөрйән ырыу һәм ҡәбиләләре башҡорттарының йәнле һөйләү телен үҙ эсенә ала.

Ҡыҙыл һөйләше составында, филология фәндәре докторы Н. Х. Мәҡсүтова билдәләгәнсә, *ҡыпсаҡ* һәм *бөрйән һөйләшсәләре* айырымлана. *Ҡыпсаҡ һөйләшсәһе* вәкилдәре – башлыса ҡарағай-ҡыпсаҡтар. Уларҙың ауылдары һөйләш территория-

һының көньяҡ өлөшөндә урынлашҡан. Был ике һөйләшсә әлегә бик аҙ өйрәнелгән. Н. Х. Мәҡсүтова үҙенең «Башҡорт теленең көнсығыш диалекты»[1] тигән монографияһында ҡыпсаҡ һөйләшсәһенең фонетик үҙенсәлектәренә ҡыҫҡаса ғына туҡталып үтә. Мәҫәлән, бында бүтән һөйләштәрҙәге **ҫ** өнө урынына **һ** өнөнөң ҡулланылыуы (*аһыл* «драгоценный» – әҙәби телдә: *аҫыл, уһал* «злой» – *уҫал, иһке* «старый» – *иҫке, таһма* «лента» – *таҫма, бармаһ* «не пойдет» – *бармаҫ, иһән – иҫән, Талҡаһ – Талҡаҫ* (күл һәм ауыл исемдәре), шулай уҡ һүҙ башында ҡайһы бер тартынҡыларҙың һаңғыраулаңыуы (*тауыл* «буря» – әҙәби телдә: *дауыл, түрт* «четыре» – *дүрт, кел* «всегда» – *гел, ҡәрип* «калека» – *ғәрип*) характерлы.

*Бөрйән һөйләшсәһе* иһә монографияла атап ҡына үтелә (255-се бит).

Н. Х. Мәҡсүтованан айырмалы рәүештә, профессор Н. Х. Ишбулатов, ҡыҙыл һөйләше составында өс һөйләшсә бар, тип күрһәтә. Был һөйләшсәләрҙе ул түбәндәгесә атаған: *тамъян һөйләшсәһе, ҡарағай-ҡыпсаҡ* һөйләшсәһе һәм *иҙел башы һөйләшсәһе*. Һәр бер һөйләшсәнең ул таралыу ерлеген билдәләй, фонетик үҙенсәлектәренә туҡталып үтә. Мәҫәлән, тамъян һөйләшсәһендә һүҙ һәм ижек аҙағында **ҫ** өнө, бүтән осраҡтарҙа **һ** өнө ҡулланыла: *наҡыҫ, ҡыҫҡа, һайыҫҡан, аһыл, баһыу, киһәк, бурһыҡ, һыуһаһа;* ҡарағай-ҡыпсаҡ һөйләшсәһендә һүҙҙең бөтөн позицияларында ла **ҫ** өнөн **һ** өнө алмаштыра: *ҡыһҡа, ҡыһыҡ, аһыл, баһыу* («огород»), *баһырау, өһтөндә;* иҙел башы һөйләшсәһендә Инйәр буйы ҡатайҙарының ҡайһы бер тел үҙенсәлектәре ҡабатлана: **а** өнө тамаҡ төбө менән әйтелә, **м** йәки **ғ** өндәренә башланған ялғауҙар алдынан ҡылым нигеҙендәге **л** өнө төшөп ҡала: *аманы* (алманы), *аған* (алған), *һаған* (һалған), *кимәне* (килмәне)[2].

Башҡорт һөйләштәре араһында, ти Н. Х. Мәҡсүтова, ҡыҙыл һөйләше үҙенең географик урыны һәм тел үҙенсәлектәре йәһәтенән айырымланып тора. Сөнки ул, беренсенән, көнсығыш һәм көньяҡ диалекттар сигендә урынлашҡан һәм унда, икенсенән, ошо ике диалект өсөн дә характерлы һыҙаттар

[1] *Максютова Н. Х.* Восточный диалект башкирского языка (В сравнительно-историческом освещении). М.: Наука, 1976. 254 – 255-се биттәр.

[2] *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 167–168-се биттәр.

күҙәтелә. Был һөйләш яйлап көньяҡ диалектҡа күсеү стадияһын кисерә. Ҡыҙыл һөйләшендә, нигеҙҙә көньяҡ диалект һөйләштәрендәге кеүек үк, инфинитивтың *-ыу/-еү, -у/-ү* формалары йышыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән: *Ҡайтыуға йыйынып йатабыҙ, тигән* «Пишет, что собираются приехать». Шулай уҡ, әҙәби телдәгесә, *-арға/-әргә* формаһы ла актив ҡулланыла: *Шунан мал алырға баралар егеттән* «Затем едут к жениху за калымом». Лексика өлкәһендә, көнсығыш диалекттың бүтән һөйләштәре менән сағыштырғанда, көньяҡ диалект һәм айырыуса эйек-һаҡмар һөйләше менән яҡынлыҡ тағы ла нығыраҡ. Мәҫәлән, туғанлыҡ терминдары өлкәһендә ҡыҙыл һөйләшендә тулыһынса тип әйтерлек эйек-һаҡмар һөйләше менән уртаҡлыҡ характерлы. Был терминдар түбәндәгесә килә: *атай* «отец», *әсәй* «мать», *ағай* «родной брат», *инәй* «пожилая женщина», *олатай* «дедушка», *өләсәй, өләс, өләпсәй* «бабушка», *ҡарындаш* «сестренка», *бабай, олатай* «дедушка».

Беҙ алда ҡыҙыл һөйләше һәм уның составындағы һөйләшсәләр тураһында Н. Х. Мәҡсүтова менән Н. Х. Ишбулатовтың ҡараштарына туҡталып үттек. Күреүегеҙсә, һөйләш эсендәге бәләкәйерәк берәмектәрҙе – һөйләшсәләрҙе – улар икеһе ике төрлө билдәләй. Ә инде йәнә бер билдәле диалектолог С. Ф. Миржанова үҙ ваҡытында (1967 йылда) фәндә үҙенең тәүге ҙур хеҙмәтен – кандидатлыҡ диссертацияһын «Башҡорт теленең күбәләк һөйләше» тип атаған булыуын иҫкә төшөрһәк, мәсьәлә тағы ла ҡатмарлана төшә, сөнки уның күбәләк һөйләше тигәне хәҙерге ваҡытта шул уҡ ҡыҙыл һөйләшенең бәләкәйерәк бер зонаһы тип кенә иҫәпләнә. Ә бына күренекле шағир һәм прозаик Мәүлит Ямалетдин күбәләк ырыуы башҡорттарының һөйләү телен «мейәс һәм ҡыҙыл һөйләштәре араһындараҡ ятҡан һөйләшсә» тип атай. Йәғни, дөйөмләштереп әйткәндә, ҡыҙыл һөйләше, классификациялау күҙлегенән (һөйләшсәләргә бүлеү йәһәтенән) ҡарағанда, ғәйәт ҡатмарлы күренеш булараҡ күҙ алдына баҫа. Был ҡатмарлылыҡтан ҡотолор өсөн уны артабан монографик планда махсус өйрәнеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Ә инде был хеҙмәтебеҙҙә беҙ, алда әйтелгән ҡараштарҙы дөйөмләштереп, ҡыҙыл һөйләше составында өс һөйләшсә – *күбәләк, ҡарағай-ҡыпсаҡ, бөрйән* һөйләшсәләре бар тип күрһәтәбеҙ.

Ошо урында Мәүлит Ямалетдиндең, уның үҙ һүҙҙәре менән әйткәнсә, бала саҡтан тойоп, татып үҫкән йәнле һөйләү теле –

күбәләк һөйләшсәһе хаҡында «Хәтер төбө – хәтирә» тигән иҫтәлектәренән түбәндәге бер өҙөктө килтереп үтеү урынлы булыр тип уйлайым:

«Тел яғынан ҡарағанда, беҙ көнсығыш диалекттың мейәс һәм ҡыҙыл һөйләштәре араһындараҡ ятҡан күбәләк һөйләшсәһенә ҡарайбыҙ. Күп йылдар тел менән ҡыҙыҡһынған кеше булараҡ, мин был үҙенсәлекле һөйләшсәнең тамырҙары бик тәрәндә икәнлегенә инанғанмын. Мәҫәлән, «бот» тигән һүҙ. Уның, үлсәү берәмеге менән кешенең йәки малдың ағзаһын белдергән төшөнсәһенән тыш, йәнә бер мәғәнәһе бар. «Бод» һүҙе боронғо төрки телендә ырыу, ил халҡы тигәнде аңлата. Уның тәү мәғәнәһе күбәләк һөйләшсәһендә һаҡланып ҡалған. Әгәр кемдер теге йәки был кешегә ҡәрҙәшлеге булмауын белдерергә теләһә: «Ул минең затым түгел, ботом түгел», – тип ебәрә. Йәнәһе, беҙҙең ырыу башҡа, тоҡом башҡа.

Шул уҡ боронғо төрки телендәге «шире» һүҙе лә тап беҙҙең һөйләшсәлә һаҡланған. Сыңғыҙ Айытматовтың «Буранлы полустанок» романын уҡыусылар хәтерләйҙер: был һүҙ әсирҙәрҙе маңҡортҡа әүерелдерер өсөн уларҙың баш тиреһенә кейҙерелгән дөйә елене тигәнде аңлата. Ябайыраҡ итеп әйткәндә – ҡойҡа. Беҙҙә үҙ-үҙен ҡарамаған, тәрбиәһеҙ, бите-башы бысраҡ кешегә ҡарата: «Ҡалай ултыра ҡара ширеһе әйләнеп», – тиҙәр.

«Орҙомша» һүҙен өләсәйемдән – инәйемдең инәһе Мәрфуғанан ишетеп, ҡағыҙға теркәп ҡуйғанмын. Ярҙам тигәнде аңлата ул. «Яҡы» тигән боронғо һүҙҙе лә, унан ишетеп, ҡағыҙға теркәгәнмен. Уныһы ла, тартылған ярма менән он йыйылһын өсөн, ҡул тирмәненең аҫтына түшәй торған мал тиреһе була. Шулай уҡ «үлән ир еткән» тигән ғәжәп образлы һөйләм дә өләсәйемдең ауыҙынан сығып, минең күңелгә һеңеп ҡалған...

Белеүебеҙсә, беҙҙең яҡ телендә туғанлыҡ мөнәсәбәтен белдергән һүҙҙәрҙең өндәш формаһы бар. Мәҫәлән, мин үҙемдең иң яҡын туғандарыма былай тип өндәшәм: олатый, өләсей, атый, иней, аҡый, апый. Ҡағиҙә булараҡ, был форма фәҡәт берлектә ҡулланыла»[1].

---

[1] *Ямалетдинов М.* Ҡуласа: Тарихи роман, эссе. Өфө: Китап, 2007. 236 – 237-се биттәр.

Бына шундай тапҡыр һәм фәһемле күҙәтеүҙәр. Әҙиптәребеҙҙең туған телебеҙгә, халыҡтың йәнле һөйләү теленә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыуының һәйбәт бер өлгөһө был.

### *Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре*

Һөйләштең төп фонетик үҙенсәлектәре:

**ҡ, к** өндәренән алда **ç** өнө **h** өнө аша **х** өнөнә күсә: *аçҡа (>аhҡа) – ахҡа, ҡыçҡа (>ҡыhҡа) – ҡыхҡа, баçҡыс (>баhҡыс) – бахҡыс, ҡыçҡа (>ҡыhҡа) – ҡыхҡа, иçке (>иhке) – ихке;*

айырым һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы **ç** өнө төньяҡ-көнсығыш һөйләштәрҙәге **h** өнөнә тап килә: *сөйәл, сөлгө, сүмес, сарымсаҡ, сынйыра* (ат ауырыуы);

һүҙ башындағы **ç** өнө һүҙ аҙағындағы **ш** өнө йоғонтоһонда **ш** өнөнә күсә: *себеш-шебеш, сүкеш-шүкеш, сыуаш-шыуаш, сырыш-шырыш;*

ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы **ғ, г** өндәре һаңғырау **ҡ, к** өндәренә, **х, ф** өндәре **h** өнөнә күсә: *ғариза > ҡариза, гәҙәт > ҡәҙәт, гел > кел, Ғәзиз > Ҡәзиз, Гөлнур > Көлнур; хат > һат, хужа > һужа, файҙа > һайҙа, фәҡир > һәҡир, Фирҙәүес > Һирҙәүес, ләкин Фатима > Батима;*

айырым һүҙҙәрҙең ҡалын варианты ла, нәҙек варианты ла ҡулланыла: *сағыр – сәгер, лапаҡ – ләпәк, сыйҙым – сейҙем, айҙаныу – әйҙәнеү, ышаныу – эшәнеү;*

кесерәйтеү интонацияһы менән әйтелгәндә һүҙҙәге өндәр төрлө үҙгәрештәр кисерә: *саҡ ҡына > сиҡ ҡына, бәләкәс кенә > белекес кенә/ битикис кенә, аппаҡ ҡына > аппасыҡ ҡына.*

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Ата-әсәгә, яҡын туғандарға өндәшкәндә, алда әйтелгәнсә *-ай/-әй* өндәренә бөткән һүҙҙәр, *-ый/-ей* формаһын алып, мөрәжәғәт төшөнсәһендә ҡулланыла: *әсәй – әсей, аға – ағый, апа – апый.* Мәçәлән: *Атый, мин дә бесәнгә барам. Әсей, иртәгә мәктәптә ата-әсәләр йыйылышы үткәрелә.* Был һүҙҙәр өндәшеү формаһында ҡулланылмағанда, *-ай/-әй* үҙгәрешһеҙ

ҡала: *Әсәйем менән еләккә барҙыҡ. Ағайым быйыл университетҡа уҡырға инде.*

Эйәлек килеш һәм эйәлек заты ялғауҙарының аҙағында **ң** өнө **н** өнөнә күсә: *атамдарҙын, үҙемден, анын, һинен, атынды.*

*-дай* һәм *-с* ялғауҙары ҡушылып, үтә ныҡ кесерәйтеүҙе белдереүсе *-дис* ялғауы барлыҡҡа килгән (*-дай* + *-с* /*-дис*): *энә күҙендис кенә – бигерәк бәләкәй, ошондис кенә – ошондай ғына, ҡайһындис ҡына – ҡайһындай ғына;*

*-йығыҙ (-айығыҙ, -эйегеҙ)* ялғауы, бүтәндәрҙе эшкә өндәп, эшкә өндәүсенең үҙенең дә ҡатнашыуын белдерә: *Әйҙәгеҙ, тиҙерәк башлайығыҙ.*

*-уға/-үгә, -ыуға/-еүгә, -а/-ә, -й* ялғауҙары, *-(ы)рға/-(е)ргә* ялғауҙары кеүек үк, ҡылымдарҙан инфинитив яһау өсөн ҡулланыла: *Алып барыуға ҡушҡандар. Өй күтәреүгә өмә йыйғандар. Бесән саба киттеләр. Кәбән ҡойа башланылар. Картуф утай барабыҙ.*

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Ҡыҙыл һөйләшенең төп лексик составы көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләше лексикаһы менән бер бөтөндө тәшкил итә. Шуға күрә һөйләшкә хас күп кенә диалектизмдар бер үк ваҡытта, әйтәйек, Эйек, Һаҡмар, Юшатыр, Өршәк, Дим буйы башҡорттары һөйләштәре өсөн дә характерлы. Мәҫәлән: *бытбылдыҡ* – әҙәби телдә *бүҙәнә, ҡабартма – майҙа бешкән йәймә, тейәк – итте эләктереп элеп ҡуя торған таяҡса, ләпәк – ваҡ һуҡыр себен, йалтырса – ваҡ сабаҡ, сөйөлдөрөк – ҡамыт бауы, бол – байлыҡ, тилбер – егәрле, бөтмөр – эшен ҡалдырмай атҡарып йөрөүсе кеше, шәре – бәләкәй йылғаларҙа боҙ өҫтөнә сыҡҡан шыя* «наледь», *илек – ҡоралай, ҡылтайыу – үсегеү, яндырай – тиҙ генә ҡыҙып китә торған кеше, кәрһеҙ – көсһөҙ, ҡыуал – баҡан, һырғауыл, терелеү – һауығыу, селтәр – һаҡал* «женский нагрудник, украшенный монетами, кораллом», *бүлтерек – сибек мал,* дим, өршәк, урта һөйләштәрҙә, төньяҡ-көнбайыш диалектта: *көҙгө бәрәс, шыпа – бөтөнләй, ыҡҡа килеү – ыңғайға килеү, аңҡы-тиңке булыу – баш ҡаңғырыу.*

Шул уҡ ваҡытта нигеҙҙә ҡыҙыл һөйләшенең үҙенә генә хас лексик ҡатлам да бар. Миҫалдар: *айаҡ – ағас сеүәтә,*

*алаңғырт – сабырлыҡ булмаған, үләне һирәк урын, алғыр-теш – эстән икенсегә сыҡҡан теш, апа – ата-әсәнән оло ир кеше;* мейәс һөйләшендә: *ҡайны, бағындырыу – буйһондороу, балапан – бөркөттөң йә ҡарсығаның ирәбе себеше, бала-йан – ҡарсығаның уртансы себеше, йалтыраҡ – ялтырауыҡ, йекәт, йелкәт – талғын ел, йемһәк – ашамһаҡ, йәй ташы – биҙәге йәйғорға оҡшаған һыу эсендә ятҡан тылсымлы таш* «камень, по окраске напоминающий радугу (по преданию, волшебный»), *йыртаныс – әҙәпһеҙ ҡыҙ бала* «невоспитанная девочка», *йәләүкәр – ялҡау, кикел – аттың маңлай ялы, күгелйем – күкен, ҡомаҡ – юшҡын, ҡонт – эшһөйәр, ҡупым – маҡтансыҡ, ҡәрендәш – үҙеңдән кесе ҡатын-ҡыҙға өндәшеү, маҡам – ата йорто* (урта һөйләштә: *милек*), *маҡым – алйот, һамай – сикә, һарҡаш – һаран, һимеү – тәндәге мускулдың кәмеүе, урындыҡ – һике, һәрпәк – билдә йөрөтөлә торған еңел балта, бағындырыу – буйһондороу, башһыныу – буйһоноу, шып-шымтыҡ – шып-шым (Һәмдейә белән Нәгемйән булмағас, өй эсе шып-шымтыҡ), шылҡыу – бүлкелдәү. Май эреп китә лә шылҡылдап ҡайта икән.*

### *Һөйләү теле өлгөһө*

### *Туй йолаһы*

Ҡыҙ биргән кеше биш-алты кешене саҡыра. Иң тәүҙә ҡыҙ-ҙы әйттерәләр. Шунан мал алырға баралар йегеттән. Саҡы-рыуҙы йомға көнгә тап килтерергә тырышыңкырайҙар шәт. Саҡырыусыға күлдәк, таһтамал бирәләр.

Ҡоҙалар килә. Ҡоҙаларҙы ҡаршы алыу өсөн бәйгесе бара йөрөк атта. Бәйгесе ҡыҙыл сепрәк тағып бара. Ҡаршы барып алған бәйгесене йулда эсереп әпкиләләр шәт. Һыйҙаусылар йегелеп, санала ике-өс кеше бара. Кейәү шул көндө килә кис. Эргәһендә кейәү үҙәре була. Килгән ҡоҙалар ашам-эсем алып киләләр, йыуаса. Әғәйнеләр ҡатнаша туйға. Һәр бер саҡырған кеше ҡабат саҡыра бит инде. (Уй, ҡорғор, онотоп бөткәм.)

Туйҙың ахырғы көнөндә «сыбыртҡы ите» бешерәләр. Бе-рәү һыйҙап бөткәс, сыбыртҡы менән арҡаларына әкрен генә һуға. (Ай, Мөхтәр апаң шәб ине «туй сыбыртҡыһына».)

Арҡа буйына һуғылған ҡунаҡ аҡса һала. Ҡәйнеттин шәпте йыраусы буған. Уға эсәргә алып, тағы иҫерешеп ҡолайҙар.

Йегет яғына һәҙер ҡыҙ йағынан баралар. Ҡыҙ йағынан барғандар бүләкте һатып бирәләр аҡсаға. Һарауыс, йансыҡ, ҡыйбатты таҫмаларҙан ҡушып тегәләр. Аҡса йегет белән ҡыҙға була. Ҡунаҡтар киткәнсе, ҡайныһы менән, батыр буһа кейәү, күрнис биреп күрешә.

Киленде оҙатып алып ҡайтҡас та, билен сисәләр йеңгәләр, әйтәгүр, мәҙәк ине бороңғо ғөрөфтәр. Тәүге ҡоҙа килгәндә килен һөйәләр һамаҡтап:

Селтәрең тойаҡтарың, балаҡай,
Ҡойоп йергә түшәмә.
Төһөң боҙоп теш ыржайтып, балаҡай,
Йәмәғәтеңде үртәмә.
Һағынғанда тау саҡыр, балаҡай,
Һарғайғанда һыу саҡыр, балаҡай.

Ҡыҙға беләҙек, көмөш балдаҡ бирәләр. Күсеп килгәс, киленде икенсе көн һыу баштаталар. Ике йаҡтан да ата-әсәләре, ҡарындаш, нәсәб булһа, йоланы ололап үтәргә тырышалар. Ат(а)-инәһе булмағанға бик туры килмәй.

Ижәт иттерәләр әле. Һәҙер туй, ғөрөфтәр икенсегә әйҙәнеп киткән мында.

*1963 йылда Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында*
*70 йәшлек Әхмәтҡужина Гөлсаранан яҙып алынған*
*(Максютова Н. Х. Восточный диалект башкирского языка.*
*М.: Наука, 1976. 288–289-сы биттәр).*

*Тәржемәһе*

*Свадебный обряд*

Выдавший дочь приглашает на свадьбу пять-шесть пар людей. Сначала сватают, затем за калымом едут к жениху. Обычно свадьбу начинали в пятницу. Ходит глашатай свадьбы, ему дают рубашку, полотенце. Приезжают на свадьбу. На хорошем скакуне один встречает приезжающих. К вечеру приезжает жених со своим другом, который выручает его во всем. Собирается родня. (Уй, проклятие, из памяти вышло.) Последний день свадьбы особо примечателен. При последнем угощении в доме невесты гостей тихонько похлопывают по

спине кнутом. Каждый принимающий удар дает деньги. На эти деньги покупают хмельное и опять напиваются. (Эх, мастером был в применении «свадебного кнута» дед Мухтар.) Свадьба играется и у жениха. Взамен подарков невесты преподносятся монеты в пользу молодоженов.

В первый свой приезд отец невесты ласкает ее, приговаривая:

Береги монетные подвески, доченька,
Береги любовь своего жениха, доченька.
Станет грустно – обратись к горе, доченька,
Станет душно – обратись к воде, доченька.

Невесте дарят браслет, серебряное колечко.

На другой день после приезда ее ведут к речке. Если родители живы и здоровы, обе стороны приложат все усилия для того, чтобы исполнить установившиеся обычаи. Сейчас обычаи, традиции свадьбы не такие, как были раньше.

## 4. Асыуҙы (йәки Учалы) һөйләше

*Типтәрҙәр тарихынан мәғлүмәттәр.*
*Асыуҙы (Учалы) типтәр-башҡорт ауылдарының килеп сығышы*

Асыуҙы һөйләше республикабыҙҙың Учалы районы типтәр-башҡорт ауылдарының йәнле һөйләү телен берләштерә. Был төбәктә төп ун ике типтәр-башҡорт ауылы урынлашҡан: Учалы (Асыуҙы, Митрәй), Иманғол (Ташкисеү), Илсе, Илтабан, Ҡалҡан (Шамар), Ҡунаҡбай (Ҡандыболаҡ), Мансур (Ирәндек), Мулдаш (Өргөн), Рысай (Аҡбулат), Сәфәр (Һәйет), Ураҙ (Миндебай), Юлдаш (Аҡҡужа). Революцияға тиклем ул ауылдар Ырымбур губернаһы Үрге Урал (Верхнеурал) өйәҙе Типтәр-Учалы улусы булып торғандар.

1974 йылдың йәйендә ошо китаптың авторы тарафынан Асыуҙы типтәрҙәре араһында яҙып алынған тарихи риүәйәт буйынса, улар үҙҙәрен Ҡаҙан артынан, йәғни боронғо Болғар дәүләтенән сыҡҡан башҡорттар тип атайҙар. Был ваҡиға XV быуат урталарында, Болғар дәүләте емерелеп, ул төбәктә

Ҡаҙан ханлығы барлыҡҡа килгән һәм ханлыҡта татарҙар өҫтөнлөк алып киткән дәүергә тура килә. Нәҡ шул дәүерҙә Ҡаҙан артындағы башҡорттарҙың бер өлөшө татарҙарҙың ҡыҫырыҡлауы арҡаһында, үҙҙәренең йәшәгән ерҙәрен ҡалдырып, Уралға килеп һыйынырға мәжбүр була. Ҡаҙан ханлығында башҡорттар типтәр яһағы, йәғни ҡиммәтле йәнлек тиреләре менән яһаҡ түләүсе халыҡ булғанлыҡтан, типтәр тип аталғандар. Ә *типтәр* < *дебтәр* < *дәфтәр* термины, яһаҡтың бер төрө булараҡ, дәфтәргә теркәлеп барыу менән бәйле айырым халыҡ төркөмөнә ҡарата ҡулланылған тип фараз итергә мөмкин. Ҡаҙан артынан сыҡҡан был төркөм, Урал аша үтеп, башта Түргеяҡ күле буйында туҡтала, артабан хәҙерге Ҡаҙағстандағы Әүлиәкүл һәм Аман-Ҡарағай тигән ерҙәргә барып урынлаша. Бер аҙ өлөшө Урал аръяғының Бәгәрәк йылғаһы буйҙарында төйәкләнә. Һуңыраҡ ҡабат көнбайыш тарафҡа, Асыуҙы күле буйҙарына килеп, барын-табындар һәм күбәләк-тиләүҙәр менән күрше булып, ошо төбәктә нығынып ҡала.

Типтәрҙәр, дөйөм алғанда, Башҡортостан (дөрөҫөрәге, Тарихи Башҡортостан) өсөн генә характерлы һәм төрлө халыҡ вәкилдәре ҡатнашлығында формалашҡан социаль сословие булараҡ билдәле. 1946 йылда «Ҙур совет энциклопедияһы»ның 54-се томында уларҙың дөйөм иҫәбе 300 мең кеше тип күрһәтелгән. Типтәрҙәрҙе формалаштырыуҙа башҡорттар менән бергә татарҙар, сыуаштар, шулай уҡ мари, удмурт һымаҡ фин-уғыр халыҡтары вәкилдәре лә ҡатнашҡан. Улар, ерһеҙ ҡалып, төрлө юлдар менән аҫаба башҡорт ерҙәренә килеп ултырған төркөмдәрҙән барлыҡҡа килгән. Типтәрҙәр араһында, Асыуҙы типтәрҙәре һымаҡ, үҙҙәренең боронғо төйәктәренән күсеп китеп, ерһеҙ ҡалған башҡорттар күпселек булған. Әммә, үҙҙәренең сығышы менән төрлө этник компоненттарҙан ойошҡан булыуына ҡарамаҫтан, татар тарихсылары уларҙың башҡортҡа яҡын булыуын танымаҫҡа тырышалар. Шул сәбәпле, айырыуса Башҡортостандың көнбайыш райондарында, типтәрҙәрҙең билдәле бер өлөшө халыҡ иҫәбен алыу ваҡыттарында татарҙар тип теркәлде. Әммә Асыуҙы типтәрҙәре үҙҙәренең тарихи сығышына тоғро булып ҡалдылар.

Асыуҙы типтәрҙәренән тыш, республика территорияһында типтәрҙәрҙең тағы бер нисә төркөмө билдәле: Егән буйы

типтәрҙәре (Ғәфүри һәм Ишембай типтәрҙәре), Ауырғазы, Туймазы, Бүздәк, Шаран, Илеш һ. б. райондарҙағы типтәр ауылдары. Көнбайыш төбәктә (шул уҡ Туймазы, Бүздәк райондарында) йәшәүсе типтәрҙәрҙең һөйләү теле хәҙерге ваҡытта урындағы башҡорттарҙың һөйләү теленән бер ни менән дә тиерлек айырылмай. Әммә Асыуҙы һәм Егән буйы типтәрҙәренең һөйләү теле был йәһәттән ғәйәт үҙенсәлекле. Һәр хәлдә, был урында беҙ башҡорт теленең диалекттар системаһында үҙаллы һөйләштәр тураһында һүҙ алып барырға тейешбеҙ. Профессор Ә. Ә. Юлдашев билдәләгәнсә, «типтәрҙәр өсөн типик булған теге йәки был материалдар йыш ҡына икенсе, яҡыныраҡ йәки алыҫыраҡ урындарҙа йәшәгән типтәрҙәр өсөн характерлы булмай»[1].

XIX быуат аҙағында Бәләбәй өйәҙе типтәрҙәренең телен өйрәнеү менән шөғөлләнгән күренекле төркиәтсе профессор Н. Ф. Катанов уларҙың һөйләшендә бары тик башҡорт теленә генә хас теш-ара спиранты – ҙ өнөнөң ҡулланылыуын күрһәткән: *беҙҙә, хәҙер, киләбеҙ, ҡайтабыҙ*. Был иһә хәҙерге ваҡытта башҡорт теленең түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенең характерлы үҙенсәлектәренең береһе булып тора. Шул уҡ XIX быуат аҙағында, 1893–1894 йылдарҙа, урыҫ музыка белгесе С. Г. Рыбаков Асыуҙы типтәрҙәре араһында йыр-көй өлгөләрен яҙып ала, уларҙың музыкаль фольклор өлгөләрен үҙенең «Урал мосолмандарының музыкаһы һәм йырҙары» («Музыка и песни уральских мусульман» СПб., 1897) тигән мәшһүр китабында баҫтырып сығара.

Асыуҙы һөйләше – башҡорт диалектологияһында ғәйәт ентекле өйрәнелгән һөйләштәрҙең береһе. 1950 йылда уҡ әле Ә. Ә. Юлдашев, махсус тикшеренеү үткәреп, «Типтәрҙәр һөйләше» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай (беҙҙең диалектология фәнендә был иң тәүге диссертацияларҙың береһе була). Ул шулай уҡ ғилми йыйынтыҡта алда телгә алынған «Учалы районы типтәрҙәренең һөйләше» тигән мәҡәләһен баҫтыра. Ә. Ә. Юлдашев Асыуҙы типтәрҙәренең материаль культураһына (хужалыҡ, аш-һыу, көнкүреш үҙенсәлек-

---

[1] *Юлдашев А. А.* Говор тептярей Учалинского района // Академику Владимиру Александровичу Гордлевскому. К его семидесятипятилетию. М.: Издательство АН СССР, 1953. С. 333.

тәре), фольклорына ҡыҫҡаса характеристика бирә, һөйләш үҙенсәлектәрен анализлай. Әммә ул йыш ҡына ҡаршылыҡлы һығымталар яһай. Мәҫәлән, материаль культура өлкәһендә башҡорттарға хас элементтар ғәйәт ҙур урын алып тороуына, шулай уҡ типтәрҙәрҙең үҙҙәре өсөн генә характерлы һыҙаттарҙың булыуына ҡарамаҫтан, автор был үҙенсәлектәрҙе күберәк татарҙар менән бәйләргә ынтыла. Типтәрҙәрҙең һөйләү теле хаҡындағы һығымталарында ла шундай уҡ тенденция урын алған. Әммә хеҙмәттә тел өлкәһенә ҡараған характеристика үҙе үк асыуҙы һөйләшенең һәр йәһәттән дә, бөтөн позициялар буйынса ла, башҡорт теленең көнсығыш диалект системаһында ҡаралырға тейешле булыуын раҫлап тора. (Тел материалдарын автор Сәфәр, Ураҙ, шулай уҡ Илсе, Мансур, Учалы йәки Асыуҙы ауылдарында, йәнә Һәйтәк исемле башҡорт ауылында, мишәр ауылы Ахунда һ. б. йыйыуы тураһында әйтә.)

Ә. Ә. Юлдашев асыуҙы һөйләшенең төп үҙенсәлектәрен түбәндәгесә билдәләй.

*Төп фонетик үҙенсәлектәре*

Һүҙ һәм ялғау башында – **һ** өнө урынына, һүҙ уртаһында һәм аҙағында **ҫ** өнө урынына ҡайһы бер ауылдарҙың һөйләү телендә **с** өнө тура килә: *сыйыр* (һыйыр), *арыслан* (арыҫлан), *семәк* (һемәк), *сөйәк* (һөйәк), *мескен* (меҫкен), *ҡайтсын* (ҡайтһын), *өс* (өҫ), *ас* (аҫ), *хәлсерәү* (хәлһерәү), *сөйҙәшеү* (һөйләшеү), *сиксән* (һикһән), *туҡсан* (туҡһан). Йәғни һөйләштә **һ** һәм **ҫ** өндәре бөтөнләй тип әйтерлек ҡулланылмай. (Бары тик Өргөн ауылының һөйләү телендә һирәкләп **һ** өнө урынында **ҫ** өнөн ҡулланыу осраҡтары күҙәтелә.)

Башҡорт әҙәби телендәге һымаҡ уҡ, һуҙынҡыларҙың ирен гармонияһы характерлы: *өйөм, өйөбөҙ, күҙ йомоу, ҡомом, ҡомобоҙ, төҙөү, төҙөлөш*. Ләкин *тотонды, өйегеҙ, ҡомығыҙ*. Күренеүенсә, ирен гармонияһы һуҙынҡыларҙың ирен тартынҡылары менән бергә килгән осраҡта ғына һаҡлана.

Ә. Ә. Юлдашев, асыуҙы һөйләшенең төп үҙенсәлектәрен билдәләп, фонетика өлкәһендә татар теленән айырмалы егерме үҙенсәлеге бар тип күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта, «был һөйләштең фонетик системаһы тулыһынса татар теленең фонетик

системаһына тап килә» тигән фекере бөтөнләй ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Киреһенсә, һүҙ бында асыуҙы һөйләшенең тулыһынса башҡорт теле системаһына тап килеүе тураһында барырға тейеш ине. Быны беҙ, фонетика менән бергә, морфология һәм лексика өлкәһендә лә күҙәтәбеҙ.

*Морфологик үҙенсәлектәре*

Күплек ялғауҙары, исем, сифат һәм ҡылым яһаусы ялғауҙар, башҡорт теленең көнсығыш диалектындағы бүтән һөйләштәрҙәге һымаҡ, дүрт төрлө килә:

*-лар/-ләр, -тар/-тәр, -дар/-дәр, -ҙар/-ҙәр: балалар, аттар, егеттәр, урамдар, малайҙар;*

*-лыҡ/-лек, -тыҡ/-тек, -дыҡ/-дек, -ҙыҡ/-ҙек: йүкәлек, батҡаҡтыҡ, сабындыҡ, матурҙыҡ, айҙыҡ;*

*-лы/-ле, -ты/-те, -ды/-де, -ҙы/-ҙе: тамғалы, ташты (ташлы), ҡомдо (ҡомло), айҙы (айлы); Юшалы (күл исеме), Асыуҙы/ Оло һәм Бәләкәй Асыуҙы* (ауыл һәм күл исемдәре);

*-ла/-лә, -та/-тә, -да/-дә, -ҙа/-ҙә: башта, эштә, аңда* (аңла), *тыңда* (тыңла), *йырҙа* (йырла).

Һөйләштә бит раҫлау киҫәксәһе менән параллель рәүештә, көнсығыш диалекттың арғаяш һөйләшендәге, ялан-катай һөйләшсәһендәге һымаҡ уҡ, *ҡуй* киҫәксәһе ҡулланыла: *әйттем ҡуй, барҙым ҡуй.*

*Йыуыу* ҡылымының уртаҡлыҡ йүнәлеш формаһы ҡайтым йүнәлеше формаһында ҡулланыла: *йыуышам* – әҙәби телдә: *йыуынам*. Был үҙенсәлек көнсығыш диалекттың бүтән һөйләштәре өсөн дә характерлы.

*Кисәге* («вчерашний») тигән шартлы сифат бында рәүеш функцияһында ҡулланыла: *кисәге әйттем* (*кисә әйттем* «вчера сказал»).

Ҡылымдың хәҙерге заман 2-се заты берлек формаһының башҡорт әҙәби телендәге *-һың/-һең* ялғауы урынына уның ҡыҫҡартылған *-ң* вариантын ҡулланыу киң таралған: *йылытаң* (йылытаһың), *сығараң* (сығараһың), *китәң* (китәһең), *йөрөмәйең* (йөрөмәйһең), *алаң* (алаһың), *ҡуйаң* (ҡуяһың), *утыраң* (ултыраһың), *нәмә һатаң?* (нимә һатаһың?), *урманға бараңмы?* (урманға бараһыңмы?)

Үткән, хәҙерге һәм киләсәк заман хәбәр ҡылымының икенсе зат күплек аффиксының ике варианты ла ҡулланыла: *-һыҙ/-һеҙ, -сыҙ/-сеҙ, -һығыҙ/-һегеҙ, -сығыҙ/-сегеҙ: белгәнһеҙ/белгәнһегеҙ, ҡарарсыҙ/ҡарарсығыҙ, күрерсеҙ/күрерсегеҙ, күрәсеҙ/күрәсегеҙ*[1].

*Лексик үҙенсәлектәре*

Ә. Ә. Юлдашевтың хеҙмәттәрендә килтерелгән материалдарҙан күренеүенсә, асыуҙы һөйләшенең төп һүҙлек составын дөйөм башҡорт йәнле һөйләү теленә, айырыуса уның көнсығыш диалекты һөйләштәренә һәм уның үҙенә генә хас лексик ҡатламдар билдәләй.

Башҡорт теленең төп һүҙлек фонды менән уртаҡ һүҙҙәр ҡатламы: *сапсаҡ* «ушат», *килбәт* «облик», *текмә* «частокол», *көрәгә* «деревянная посуда для кумыса», *тәртешкә* «кочерга», *һоҙғаҡ* «совок», *балға* «молоток», *уттыҡ* «ясли», *бәрәкәй* «ягненок», *тапсыҡ* «щепка», *күҙелдерек* «наглазник» (арғаяш һөйләшендә – «очки»), *тумрау* «полено», *мышар* «рябина», *сауыл* «лес (с преобладанием березы)», *огро* «вор», *мәсекәй* «обжора», *сапсан* «проворный», *ҡыпсыуыр* «клещи».

Һөйләштең үҙенә генә хас һүҙҙәр ҡатламы: *адйор* (телега, предназначенная для перевозки снопов), *тос* «зерно», *сағаулыҡ* «слега», *ҡорҙыш* «вспаханное поле», *таба* «ток», *ҡыртынҡы* «объедки корма», *төбер* «ошейник с поводом», *шабала* «сосок», *кәмә* «колода», *май соңғырыу* «растопить масло, сало», *сыбыртҡы* «пастух, пасущий овец», *ингеж/энгеж* «пчела», *ғоморзая* (әҙәби телдә: *умырзая* «подснежник»), *аралыҡ* «переулок», *шалдырма* «задвижка», *әшәк* «плита», *ҡылдыҡай* «котел», *төтәнәк* «коптилка», *кешке* «нарядный», *ҡытай* «ожерелье», *таралғы* «пряжка», *ҡаҙан бөккәне* «вареники», *кинерҙәк* «горло», *пышҡырыу* «чихать», *сиҡаҡ тотоу* «икота», *саңғы* «коньки», *кәнтәй* «найдёныш», *тума* «найдёныш-мальчик», *алтылы* «обманщик», *ҡаштаҡ* «упрямец», *ҡыртыш* «скупой», *ҡысмыр* «скупец», *нәкес* «ленивый», *ситаҡа* «неряха», *тубылғы* «неловкий», *тәләкә*

---

[1] *Юлдашев А. А.* Язык тептярей: Автореферат диссертации на соискание ученой степени кандидата филологических наук. М., 1950. 8-се бит.

«горе-работник», *шалтыр* «болтун», *шәмән* «нерадивая хозяйка, дура», *хупырыу* «надуть, обмануть».

Башҡорт теленең көнсығыш, шулай уҡ көньяҡ диалекттың бүтән һөйләштәре менән уртаҡ һүҙҙәр ҡатламына миҫалдар: *аш* «хлеб» (зерно, растение), *сыйғыс* «спички», *шешә* «стекло», *килеү* «возвращаться, приехать» (әҙәби телдә: *ҡайтыу*), *мәрәкә* «занимательный», *алдыр* «миска», *сеүәтә* «чашка», *әнәк* «хлеб (печеный)», *әжегәй* «творог», *йәймә* «лепешка», *һармаҡ* «глупец, бестолковый», *апсын* «жены двух или нескольких братьев», *баҡырыу* «ҡысҡырыу».

Асыуҙы һәм көнсығыш диалекттың башҡа һөйләштәрендә себер татарҙарының теле менән уртаҡ лексик ҡатламға ошондай миҫалдар килтерергә була: *аш* «хлеб» (зерно, растение), *сәңгелсәк* «колыбель», *сеүәтә* «чашка», *мәсекәй* «обжора», *шешә* «стекло» (арғаяш һөйләшендә: *шиша*), *йорсы* «брат мужа».

Асыуҙы типтәр-башҡорттарының йәнле һөйләү теле фонетик, морфологик һәм лексик планда ла, грамматик төҙөлөшө, телмәр методикаһы йәһәтенән дә башҡорт теленең көнсығыш диалекты составында бик үҙенсәлекле, оригиналь, үҙаллы бер һөйләш булып формалашҡан. Әйткәндәй, был һөйләштең төп үҙенсәлектәре Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районындағы бер төркөм мишәр ауылдарының (мәҫәлән, Мөслим ауылының), Ҡорған өлкәһе Сафакүл районының Сафакүл, Ҡаҡсырҙы, Һөлөктө, Ҡараһыу һымаҡ мишәр һәм Мансур, Атжитәр кеүек башҡорт-мишәр ауылдарының һөйләү теле өсөн дә характерлы.

Асыуҙы һөйләшендә бик күп оригиналь йырҙар ижад ителгән. Халыҡ бында йыр-моңға бай булыуы, музыкаллеге, поэтик ижадҡа маһирлығы йәһәтенән дә Урал аръяғы, Учалы төбәге башҡорттары менән бер бөтөндө тәшкил итә. Асыуҙы һөйләше хәҙерге ваҡытта ғәйәт интенсив рәүештә башҡорт әҙәби теленә күсеү процесын кисерә. Быға уның, дөйөм алғанда, әҙәби телгә яҡын булыуы ла булышлыҡ итә. Әммә ололар телендә һөйләш үҙенең төп үҙенсәлектәрен һаҡлай әле. Бына, мәҫәлән, 2003 йылда Башҡорт дәүләт педагогия университетының Белорет вәкиллеге студенты Ринат Кужаҡов тарафынан Учалы районы Ҡалҡан ауылында яҙып алынған

халыҡ ижады өлгөһө – «Арыҫлан менән төлкө» тигән ҡыҫҡа ғына экиәт-притча:

*«Бер көндө төлкө, нәмә эштәргә белмәй йөрөп, урманда шырлыҡҡа барып кергән. Ҡараса, ҡаршысына арыслан килеб ултыра икән. Төлкө ҡурҡышынан ҡаса баштаған. Арыслан аның артынан бастыра. Бына тоттом инде тигәндә, аларҙың юлын тәрән соҡор бүлгән. Шунан төлкө туҡтай ҙа баҡырып илай баштай. Арыслан аптырап киткән.*

*– Ништәп илай баштаның суң, төлкө? – тип сораған арыслан.*

*– Эй, сеҙҙе күрҙем дә, әтейегеҙ искә төштө ҡуй, – тигән төлкө. – Әтейегеҙ бик шәп арыслан була торғайны. Ул ҙур-ҙур соҡорҙарҙы сикереп сыға ала ине. Уф, башҡаса бер ваҡытта ла андый шәплеккә соҡлана алмасмын инде...*

*Арыслан шул сүҙҙәрҙе ишеткәс, төлкө алдында үҙенең шәплеген күрсәтеп маҡтанғысы килә. Соҡор аша сикерә, ләкин икенсе яҡҡа сыға алмай асҡа йығылып төшә.*

*– Алай булырын белдем дә, – тигән төлкө. – Сеҙҙең әтейегеҙгә етергә хәлегеҙҙән киләме суң? – тип сығып киткән».*

Тексты уҡып, һөйләштең төп фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәрен ап-асыҡ күрһәтеп бирергә мөмкин. Һөйләш өлгөһө булараҡ диалектологтар яҙып алған тағы бер текст килтереп үтәйек.

*Һөйләү теле өлгөһө*

*Талҡан һәм ҡамыр аштары*

Һәйбәт бойҙайҙы ҡыҙҙыраң. Әүәле ҡаҙанда ҡыҙҙыралары йы. Тандыр ғына ут яғаң да ҡыҙҙыраң. Ҡул тирмәнендә тартаң, икөс ҡат тартаң. Он булғас, сөт салып ҡайнатып бешерәң. Шыйығыраҡ итеп болғатаң. Бутҡа итеп соҙоп алаң да, баҡан маймы, сары маймы, салыб ашайың.

Ҡамырҙан әпәк бешерәбеҙ, күмәс, ҡоймаҡ бешерәң инде. Бөккәнде йеләктән, муйылдан бешерәбеҙ. Иттән билмин эштәйбеҙ, борондан булған ул.

*1980 йылда Башҡорт АССР-ы*
*Учалы районы Имангол ауылында Мөхәммәтшина Сәкинә*
*Төхбәт ҡыҙынан (1920 йылғы) яҙып алынған.*

*Тәржемәһе*

*Толокно и мучная пища*

Поспелую пшеницу поджариваем в котле на слабом огне. Измельчаем на ручной мельнице почти до образования муки. Эту муку варим в молоке и едим со сливочным или топленым маслом.

Из муки готовим хлеб, булки, оладьи. Беляши готовим из ягод, черемухи, а также из картофеля, пельмени же – из мяса. Пельмени готовили еще в старые времена.

## 5. Арғаяш һөйләше

*Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы*

Силәбе өлкәһенең төньяҡ-көнбайыш тарафында (Арғаяш районының үҙәк һәм көнсығыш өлөшө, Ҡоншаҡ районының көньяғы), Башҡортостандың Балаҡатай районының көнсығыш өлөшө, Ҡорған өлкәһенең Әлмән һәм Сафакүл райондарында урынлашҡан башҡорт ауылдарының күпселеге ошо һөйләш территорияһын барлыҡҡа килтерә. Һөйләштең вәкилдәре – барын-табындар, оло-ҡатайҙар, бала-ҡатайҙар, ҡара-ҡатайҙар, өлөшләтә әйлеләр. Ҡорған өлкәһенең Сафакүл районында ете ауылда мишәрҙәр йәшәй. (Ҡайһы берҙәрендә башҡорттар менән ҡатнаш урынлашҡандар.) Был ауылдар – Сафакүл, Һөлөктө, Ҡараһыу, Мансур, Атжитәр, Ҡубаҡай, Ҡаҡсырҙы. (Хәҙерге ваҡытта Ҡубаҡай һәм Ҡаҡсырҙы ауылдары бөткән.) Сафакүл районы мишәрҙәренең һөйләү теле тулыһынса тиерлек башҡортлашҡан һәм уны башҡорт теленең көнсығыш диалекты системаһында ҡарарға мөмкин. Арғаяш һөйләше составында ялан-ҡатай һөйләшсәһе айырымлана.

*Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре*

Һүҙ һәм ижек аҙағында ҙ өнө, һаңғырауланып, ҫ өнөнә күсә һәм был күренеш башҡа фонетик үҙгәрештәрҙе барлыҡҡа

килтерә. Мәҫәлән: әҙәби телдә *беҙ, һеҙ, беҙҙең, һеҙҙең, беҙҙә, һеҙҙә, үҙебеҙҙә, яҙ, көҙ, ҡыҙ, ҡыҙҙар, тоҙ, тоҙло, йондоҙ, йондоҙҙар, ҡуҙғалаҡ, ҡыҙғылт*, ә һөйләштә: *беҫ, һеҫ, беҫтең, һеҫтең, беҫтә, һеҫтә, үҙебеҫтә, яҫ, көҫ, ҡыҫ, ҡыҫтар, тоҫ, тоҫто, йондоҫ, йондоҫтар, ҡуҫҡалаҡ* (ҡуҙғалаҡ), *ҡыҫҡылт* (ҡыҙғылт). Шул уҡ ваҡытта һүҙ уртаһында интервокаль позицияла (ике һуҙынҡы араһында) **ҫ** өнө **ҙ** өнөнә күсә, шулай уҡ ошо позицияла **ҙ** өнө үҙгәрешһеҙ ҡала: әҙәби телдә – *аҫыл, баҫыу, иҫән-һау, кеҫә, кеҫәл, әҫе, яҫы, ҡыҫыу, ҡыҫылыу*, ә һөйләштә – *аҙыл, баҙыу, иҙән-һау, кеҙә, кеҙәл, әҙе, яҙы, ҡыҙыу, ҡыҙылыу;* әҙәби телдә лә, һөйләштә лә – *ҡыҙыл, ҡыҙыҡ, үҙем, үҙемдең*.

Һүҙ һәм ижек аҙағында **ҙ** өнөнөң һаңғыраулаһыуы, йәғни **ҙ – ҫ** күсеше, себер төрки, хакас телдәрендә шул уҡ позицияла **ҙ – ҫ** күсеше менән тап килә.

Һөйләштә әҙәби телдәге һәм бүтән һөйләштәрҙәге алғы рәт **ә** өнө артҡы рәт **а** өнөнә тура килә: әҙәби телдә *сәс*, һөйләштә – *сас, әсе – асы, сәсәк – сасаҡ, сәсрәтеү – сасратыу, әрсеү – арсыу*, әммә был күренеш регуляр күҙәтелмәй. Мәҫәлән, әҙәби телдә лә, һөйләштә лә: *әҙәм, ҡеүәт*.

Әҙәби телдәге һәм бүтән һөйләштәрҙәге һүҙ һәм ижек башында **у**, **а** өндәре **а** өнөнә күсә: *ул – ал, шул – шал, шуға – шаңа*.

Һүҙ башында һәм ижек башында **й** өнө **ж** өнөнә күсә: *йемтек – жимтек, йәймә – жәймә*. Ҡайһы бер осраҡтарҙа һүҙ башында **й** өнө урынына **ш** өнө килә: *йышыу – шышыу, йышҡы – шышҡы*.

Һүҙ башында **т** өнө яңғыраулана: *туғай – дуғай, тары – дары, түмәр – дүмәр*.

Һөйләштә өй дифтонгыһы монофтонгка (йәғни ябай һуҙынҡыға) әйләнә: *өйрә – өрә, өйрәк – үрәк*.

Һөйләштә **о** өнө **у** өнөнә һәм, күреһенсә, **о** өнө **у** өнөнә күсә: *һорау – һурау, торғайны – турғайны, уңайһыҙланыу – оңайһыҙланыу, һуң – һоң, ҡурмас – ҡормас, алатоба – аладуба, һуҡ – һоҡ, суртан – сортан, ҙур – зор*.

Был күренеш ҡаҙаҡ, үзбәк, әзербайжан, сыуаш теленең диалекттарында, Көнбайыш Себер татарҙарының телендә лә күҙәтелә. Бындай законлылыҡ буйынса төрки телдәрен о-*телдәренә* һәм у-*телдәренә* бүлеп ҡарарға мөмкин. Ә инде башҡорт теле о-телдәре төркөмөнә керә, унда **о** һәм **ө** өндәре йәһәтенән ирен гармонияһы эҙмә-эҙлерәк үткәрелә.

## *Морфологик үҙенсәлектәре*

Яңғыҙлыҡ исемдәрҙә һәм ҡәрҙәшлек терминдарында төркөм күплеге *-алар* элементы аша бирелә. Мәҫәлән: *Сәғиталар* (әҙәби телдә: Сәғиттәр), *Азаталар* (әҙәби телдә: Азаттар), *еңгәңалар, еңгәңаларҙың* (әҙәби телдә: *еңгәңдәр, еңгәңдәрҙең*), *быуайымалар, быуайымаларға* (әҙәби телдә: *бабайымдар, бабайымдарға*). Килтерелгән миҫалдарҙа *-алар* элементы тик ҡалын әйтелә, ул үҙенең составы буйынса ҡушма ялғау иҫәпләнә: Н. Х. Ишбулатов яҙғанса, *-а* – ғәрәп теленән иҫке үзбәк теле аша килеп ингән күплек ялғауы, *-лар* – өҫтәмә рәүештә ҡулланылған төрки күплек ялғауы. Ғәрәп һүҙҙәрендә аңҡау гармонияһы үткәрелмәгәнлектән, тип билдәләй Н. Х. Ишбулатов, был һүҙҙәргә ҡалын *-лар* ялғауы ҡушыла торған булған. Шулай уҡ, күп кенә яңғыҙлыҡ исемдәр ғәрәп сығышлы булғанлыҡтан, *-алар* күплек ялғауы яңғыҙлыҡ исемдәргә ҡушылған, артабан уларға яҡын торған ҡәрҙәшлек терминдарында ла ҡулланыла башлаған. Әммә *-алар/-әләр* тибындағы күплек күрһәткесенең *-а* элементы хаҡында төрки телдәренең үҙҙәренә хас тарихи күренеш тигән версия ла бар. Н. Х. Мәҡсүтова, мәҫәлән, салйоғот һөйләшенә хас *-а(-ә)* күплек аффиксының телдең алыҫ боронғо тамырҙарына – алтай теле дәүеренә барып тоташыуын, йә иһә монгол теленән килеп ингән булыуын фараз итә. Салйоғот һөйләшендә уның *Фәритәләр* формаһындағы йомшаҡ варианты ла ҡулланыла. Ошо уҡ *-алар* ҡушма ялғауы себер татарҙары телендә лә урын алған. Ә салйоғот һөйләшендә уның *-әләр* формаһында йомшаҡ варианты ла ҡулланыла: *Нигмәтәләр* (әҙәби телдә: *Нигмәттәр*).

Һөйләшкә хас рәүештәр: *тәйән* – әҙәби телдә: *һәр ваҡыт, мыҡты – бөтөнләй, бағанаҡ – бая ғына, бер тырай – бер юлы, иртәнгелә – иртәнсәк, төшкөлә – төшөн, йаҙалата – яңылыш*. Һөйләштең үҙенә генә хас көсәйтеүсе һүҙҙәр: *тыма ярҙы* – әҙәби телдә: *бөтөнләй ярлы, төптө иҙерек кеше – бөтөнләй иҫерек кеше.*

Ҡылымдың *-ҡалы, -ҡаны* формаһы күберәк эш-хәрәкәттең үтәлеү маҡсатын сағылдыра, шулай уҡ инфинитив хеҙмәтен дә үтәй: *балыҡ баҡҡалы китте – балыҡ тоторға китте, алғалы мөмкин – алырға мөмкин, барғалы ҡушалар – барырға ҡушалар.*

Бойороҡ һөйкәлешенең күплек формаһы *-ң (-ың/-ең, оң/-өң)* ялғауы менән белдерелә: *барың, ҡайтың, ашаң, уйнаң* – әҙәби телдә: *барығыҙ, ҡайтығыҙ, ашағыҙ, уйнағыҙ.*

Йөкмәтеү йүнәлеше *-ғыҙ/-геҙ, -ҡыҙ/-кеҙ* ялғауы менән бирелеүсән: *кейгеҙ* – әҙәби телдә: *кейҙер, меңгеҙ – мендер, туйғыҙ – туйҙыр.*

*Әйеү* ярҙамсы ҡылымы *ебәр* ҡылымы урынына ҡулланыла: *йырҙап әйең* – әҙәби телдә: *йырлап ебәрегеҙ.*

Яғымлылыҡ *утырыу (ултырыу)* ҡылымын ҡулланыу аша бирелә: *Мине лә Арғаяшҡа алып барып утыр әле.*

Һөйләштә *сәре, тәре, тиксем, түмән, ахыры* бәйләүестәре ҡулланыла: *күлгә сәре* – әҙәби телдә: *күлгә тиклем, ағасҡа тәре – ағасҡа тиклем, бөгөндән түмән – бөгөндән түбән, бөгөндән алып.* Раҫлау һәм башҡа модаль төшөнсәләрҙә *ҡуй* киҫәксәһе ҡулланыла: *әйттем ҡуй – әйттем дә баһа.* Был киҫәксә ҡаҙаҡ һәм себер татарҙары теле өсөн дә характерлы.

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Һөйләштең лексикаһы бай һәм үҙенсәлекле. Йәнлек, ҡош-ҡорт исемдәре күп төрлө булыуы менән айырылып тора. Ундағы күп кенә һүҙҙәр күршеләге салйоғот, әй, мейәс һөйләштәре менән уртаҡ. Ареал планда һөйләштең лексикаһы себер төрки телдәре, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, алтай телдәре, ҡайһы берҙәре иһә монгол һәм тунгус-манжур телдәре менән ауаздаш.

Арғаяш һөйләшенә хас лексик берәмектәргә миҫалдар:

| *Һөйләштә* | *Әҙәби телдә* |
|---|---|
| салҡыу | баш ташлау (ат тураһында) |
| ағымсылау / ахымсылау | ваҡ һүҙлеләнеү, ваҡланыу |
| алғаҙау | дәрт итеү |
| асан | сибек, көсһөҙ |
| атҡыс | мәргән |
| баҙыҡ | оялсан |
| боған | өйрәк төрө (башы ҡара, муйыны ҡыҙыл өйрәк) |
| бүкән | ултырғыс |
| үлисә | урам |
| йәблөк | картуф |

| | |
|---|---|
| әрекмән | дегәнәк |
| дегәнәк | гөлйемеш ағасы |
| баҡырыу | ҡысҡырыу |
| һәңгүрсәк | сәңгелдәк |
| шайҙау | әҙерләү |

*Һөйләү теле өлгөһө*

*Ҡыҫ күсереү*

Ҡоҙалыҡҡа киләң. Шайҙанып ятабыҫ. Ике геше килә ҡоҙалыҡҡа таҫтамал алыуға. Шуның балаһы дан, тей, килендеккә алһаң, нисек булар, тей. Мәһәр йағын, ҡалын йағын һөйҙәшәбеҫ, риза буһа, таҫтамал бирәбеҫ. Ун сана ҡалын, ун баш малға күнһәң, тей. Ун баш мал, йөҫ тәңкә аҡса мәһәр була. Ун сана ҡалын инде барған кеше. Ҡоҙа күнһә, ҡыҫтың атаһы таҫтамал һала. Килешеп ҡайталар ҡоҙалар былар хәҙер. Ҡоҙа таҫтамалды ҡулына алғас, аҡса бырғай тахы ла биш тәңкәмә анта, таҫтамалына ҡарата. Тахы ла аҡса бырғай бер өстәңкәмә, ҡыҫҡа бырғай. Был «ҡолаҡ һөйөнсөһө» була.

Шанан инде ун санаға ун ир геше әйттергән йергә «ҡоҙа төшәргә» гилә. Бөгөн гиләләр ҙә иртән көндөккә йөрөп ҡунаҡ булып ҡайталар. Шанан алар китерә бер һарыҡ, аныһы «һөйһөн» була. Һөйһөн һуйалар шал ҡоҙа төшәргә кигәндә. Шал һарыҡ ман ҡоҙаларҙы ҡунаҡтайҙар. Ҡоҙалар ҡайтты. «Ҡыҫ күтәреүгә» йеңгәләр шайҙайҙар. Ҡоҙаларҙан ҡалған һарыҡтың ҡарын-ғоронон һалып бешерәләр, ҡыҫтарға самауыр ғайнаталар. Ҡыҫ күтәреүгә сыҡтылар. Ҡыҫты атаһының өйөнә йеңгәләре күтәреп китерәләр. Шанан еңгәләргә шанау һалманы эсерәләр, ҡыҫтарға сәй эсерәләр. Йеңгәләргә ҡоҙа ҡалдырған аҡсаны әҫтәп бүлеп бирәләр, ҡоро сығармайҙар. Аныһы «йеңгәләр аҡсаһы» була.

Ҡоҙа дауар гитерә ҡыҫҡа. Ҡыҫҡа йауҙыҡ, йелән, камзул, күлмәк – өҫтө-башты китерә. Ике инәһе барма, ике инә тун китерә. Аны гитергәндә инде туй билгеләп ҡайталар. Шан әлеге ун санаға ун сана мында туйға киләләр. Килен апҡайталар хәҙер. Туйға кигәндә китерәләр борон тыу бейә. (Минә шаны, шал хатынды мин кигән йылда тыу бейә мән апҡайттылар.) Туй булды. Шанан никах ҡойҙоралар мулланан. Кейәү килә, кейәү мән ҡыҫты ҡушалар.

Кейәү бер йыл буйы кейәүҙәп йөрөй, кесе йома һайын. Ҡыҫтар арҡала уйнап, ал килгән йулға сығып көтөп алалар. Ҡайны тейеш кеше кейәүгә «кейәү аты» бирә. Инәнән тыума кейәүҙе кейендерәләр. Әле кәзәкей, теүәтәй, ойоҡ, билғау бәйҙәйҙәр, өс митыр бурҙаттай тегеп нағаштап тороп. Остары йәлберҙәп тора. Сергеһе суҡты була кейәү атының.

Ҡыҫты күсерәбеҫ инде. Ҡыҫты күсергәндә йауҙыҡ йабындыралар, түпәһенә күп итеп суҡ баҙалар. Һамаҡтайҙар, сеңдәйҙәр, ҡыҫ йылай инде. Кейәүҙе баҫтыралар, таҫтамалын апҡалалар. Шаны «ҡот апҡалыу» тейҙәр. Шандай ҡайаҫ була, ҡайаҫтың эсенә ике ғалаҡ ҡаймаҡ һалалар. Аныһын ҡаймаҡ ҡайаҙы тип әйтәләр инде. Ҡайаҫтың эсенә ҡаймаҡ, өҫтөнә икмәк һалалар тутырғансы, шаны өйҙөң башына йуғары бырғайҙар. Шал йуғарынан түңкәрелеп килеп төшә, шаны балдар сүптәп алып ашайҙар. Былар ҡыҫты күсереп йатҡан болала ҡоҙалар ҡапҡанан сығар саҡта була.

Ҡоҙағый ҡыҫты апҡайтыр алдынан сөйгә таҫтамал – сөлгө элеп китә. Сөйө буш ҡалмаһын ҡыҫтың. Шанан киленде утыртып апсығалар урамдан. Төп ҡоҙа ҡоҙаһының урамына сығар саҡта аҡса һибеп китә. Бала-сағалар сүптәй шаны. Шанан быларҙы ун саҡрымға хәтте бөтөн ғәләм ат ман: «Ҡоҙағый, ҡот бир, ҡоҙағый, ҡот бир», – тип сабалар. Йауҙығын да тартып апҡалалар. Балдар тапала ҡот сапҡанда, әҙәмде әҙәм белмәй туғайны. Ҡоҙағый ике иллеләй, өс иллеләй генә сепрәк бирә.

Туйҙы эшеттемә, бөтөн йерҙән киләләр. Тыу бейәне бөтөн ауыл кешеһе ашайҙар. Шал була «туй ашау».

Ҡыҫты төшөрәбеҫ. Анда тахы ла ҡыҫтар, бөтөн ауыл көтөп тора. Киленде ҡулға алалар ҡайынһеңлеләре ҡаршы гилеп. Ишек быуыуҙа ике малай була, ике малайға ике ҡулйауҙыҡ була. Килен китереп утырған кешенең дуғаһында сөлгө була. Шаны кем йетешә ҡаршы алып, шул ала. Морондоҡ инәй килендең биленән билгәү алып, бер ҡайынһеңдеһенә бәйҙәй. Шаңа «һылыу» исем бирә килен. Хәҙер ҡалын гитте, ҡунаҡташыу гитте, әҙәмде әҙәм белмәй.

Киленде һыу гүрендереүгә апаралар. Анда тәңкә таштай килен, тәүелә йыуғышып ағас. Шанаһың алалар килендең йаңы биҙерәһе менән. Тахы ла ҡот тараталар, сиҡса йыртып.

Ҡалын ҡараған кеше, килендең ҡайныһы, ҡалынға ингән ун ир гешегә, ун хатынға күлмәк кейҙерә.

Эскегә кейәүҙе гитереп керетәләр. Кейәү бөтөнөһө менән дә күрешеп сыға. Кейәүгә күвәтә оштаталар. Бөтәһе лә аҡса һалалар, кейәү ҡоро сыҡмай. Биргән берен кейәү бөр өҙө эсеп тормай, йәштәше мән керә, икәүҙәп эсәләр, шал «кейәү күвәтәһе» була, «кейәү күвәтәһе» эскәс, ҡайныларына кейәү күренә. Шан ҡалындан ҡайталар, кейәү оҙатып ҡала. Кейәүҙең усына аҡса йомдораһың, ҡоро ҡамай. Ҡыҫ өйҙә шаршау артында тороп ҡала, инәләрен оҙатырға сыҡмай.

Шанан оҙаттылар хәҙер. Бер йылһыҫ ҡунаҡҡа саҡырмағандар борон. Ҡыҫ тәү ғунаҡҡа ҡайтырға сыҡҡанда урамдан утырып сыҡмай атҡа. Бер талай йер жейәү барғас, утыртып йебәрәләр. Шанан кейәү барып ала. Иң тәү алдыла ҡыҫ үҙе генә килә, йә әкәйе, йә үҙенең йаҡыны барып ала. Ҡыҫҡа атаһы ҡунаҡҡа кигәндә игәт әйтә: «Менә, балам, һиңә шандай-шандай мал тейә», – тей. Бай буһа, күп бирә. Бәребер мал урынына мал ғайта анда.

Ҡыҫ игәт малын апҡайта. Ҡалын эскән кешеләр китереп-китереп игәт малына бөтә суҡ бәйҙәйҙәр. Игәт китергәс, «йеңгәм игәт китерҙе» тип, бөтә ауыл ҡыҫтары, йегеттәре жыйыла. Суҡтарҙы сисеп алып биреп торалар.

*1962 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Субыл ауылында Бикбулатова Хөбәйрәнән (1892 йылғы) яҙып алынған (Образцы башкирской разговорной речи. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1988. 33–34-се биттәр).*

### *Тәржемәһе*

### *Свадебный обряд*

Готовимся. Приезжают двое сватать. У них дочь хорошая, в невесты годится, говорят. Условимся насчет калыма: если обе стороны согласны с калымом, то родители невесты дарят вышитое полотенце главному свату, а он взамен дарит деньги, да еще сват оставляет рубля три (по старым деньгам) невесте.

Приезжают на один день на обильное угощение десять пар со стороны жениха. Они привозят барана, хорошим мясом угощают приезжих, а оставшейся частью мяса угощают

подружек невесты. Невеста с подружками выходит проститься с родной природой – лесами, горами, степями. Ее оттуда до дома несут на руках.

Приезжают на свадьбу. Сходятся невеста и жених. Жених целый год украдкой (не показываясь ее родителям) ходит к невесте один раз в неделю по четвергам. Отец невесты дарит ему хорошего коня, одевает жениха. По истечении срока невеста должна покинуть дом отца. Сваха, перед тем, как выходить, оставляет полотенце дома, чтоб не пустовал гвоздь девушки, перед выходом из ворот главный сват (отец жениха) бросает деньги.

В ауле жениха их приезда ожидают все. Невеста, войдя в дом жениха, снимает с себя вышитый пояс и подвязывает его одной из сестер жениха. Она становится самым близким человеком в новом доме. Невесте показывают речку, куда она должна будет ходить за водой. Она сначала моет лицо и в воде оставляет монету.

После угощения хмельным (кейәү күвәтәһе) жених показывается родителям своей невесты. Отъезжают сопровождающие, родители невесты. Она не выходит их провожать, – таков обычай.

Через год дочь приглашает отец. Первый раз она едет одна, без мужа. Потом приезжает отец невесты и назначает своей дочке ее долю из хозяйства. Дает скот. Украшают животных красивыми тесемками, лентами, односельчане жениха их разбирают.

## 6. Салйоғот (салйот) һөйләше

*Биләгән территорияһы, халыҡтың этник составы*

Силәбе өлкәһенең төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә – Ҡоншаҡ районында (Һәнәр, Ҡараболаҡ, Тинис йылғалары һәм Маян күле буйҙарында), бер ни тиклем Кәҫле (Кәһте) һәм Йәткүл райондарында, Ҡорған өлкәһенең төньяғындағы Шадрин, Шатров райондарында (Исәт йылғаһының һул яҡ яр буйында) йәшәүсе салйоғот ҡәбиләһе башҡорттарының һөйләү телен берләштерә. Салйоғот этнонимының һөйләштә ошондай варианттары бар: *салйут, салжот, һалйут, һалыйут, һалйоғот,*

*һалйыугут, салйыугут, салйыугыт, халйот*. Был һөйләшкә тәү башлап 50-се йылдар аҙағында Ж. Ғ. Кейекбаев шаҡтай тулы тасуирлама биргән. Һөйләште ул, йылға исемдәре менән, һәнәр-ҡараболаҡ һөйләше тип атаған. Әммә артабанғы тикшеренеүҙәр ваҡытында уны салйот (салйоғот) тип, ҡәбилә исеме менән атау уңышлыраҡ тип табылды. Салйоғот этнонимының килеп сығышын фәндә салжиут тигән төркиләшкән монгол ҡәбиләһе менән бәйләп аңлаталар. Найман-ҡатай ҡәбиләләре составында салйоғоттар Алтайҙан һәм Көньяҡ Себерҙән башта Дәште Ҡыпсаҡ далаһына күсенәләр һәм төрки ҡәбиләләр араһында таралып бөтәләр. Әммә уларҙың бер өлөшө башҡорттар араһына һыйынып, хәҙерге көнгә тиклем һаҡланып ҡала. Салйоғоттар XIII–XIV быуаттарҙа Ағиҙел менән Ыҡ йылғалары араһында күсмә тормошта йәшәйҙәр, XIV быуат аҙағында, Аҡһаҡ Тимер яуҙарынан ҡасып китеп, улар Тарихи Башҡортостандың төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш өлөшөнә – Сылва, Чусовая һәм Исәт йылғалары буйҙарына барып сығалар. Артабан, Ермак походтары осоронда, урыҫтарҙың ҡыҫымы аҫтында, салйоғоттар көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш йүнәлештә күсенеп, хәҙерге ерҙәренә – Һәнәр, Ҡараболаҡ, Тинис буйҙарында, шулай уҡ өлөшләтә Исәттең урта ағымындағы һул яҡ яр буйында урынлашып ҡалалар. Салйоғот һөйләшендә Кәҫле күленең исеме (Оло һәм Бәләкәй Кәҫле), Кәҫле ҡалаһы һәм районының атамаһы *Кәһте* формаһында әйтелә. Шунан сығып, беҙ был гидронимды Көньяҡ Себерҙәге, алыҫ Байкал аръяғындағы *Кяхта* ҡалаһының атамаһы менән сағыштырырға мөмкин тигән ҡараршта торабыҙ. Йәғни *Кяхта* тигән атаманың этимологияһын да, салйоғот һөйләше үҙенсәлектәренән сығып, *кәһте* «дерновый, дерновое» һүҙе менән аңлатып була. Шул фекерҙән сығып ҡарағанда, салйоғоттар Сыңғыҙхан яуҙарына тиклем үк төркиләшкән булған тип ҡарарға һәм *Кәһте* исемен Байкал аръяғында улар ҡушҡан тип фараз итергә мөмкин. Салйоғоттарҙың ырыу-ара исемдәре араһында аҡсура, иҙәпсура, мөстөк, иштәк, турғай һымаҡ этнонимдар менән бергә, төрөкмән, ҡалмыҡ, ҡаҙаҡ этнонимдарының булыуы уларҙың элекке дәүерҙә бүтән төрки һәм монгол халыҡтары менән тығыҙ аралашыуҙары хаҡында һөйләй. Салйоғоттарҙың элекке заманда яҡын бәйләнештә торған ҡатайҙар менән күршеләш

урынлашыуы ла боронғо тарихи бәйләнештәр менән аңлатыла. Улар шулай уҡ һеңрән, терһәк, мәкәтин ырыуҙары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәйҙәр. Һеңрәндәр, Урал аръяғынан тыш, Ырымбур өлкәһе Туҡ (Тоцкий) районының бер нисә ауылында (Тәлеймәҫ, Ҡыҙрас, Ҡойоҡ), Башҡортостандың Илеш районында Һеңрән ауылында йәшәйҙәр. Ә инде Урал аръяғында улар Һеңрән, Ҡомғол-Һеңрән һәм Сүкер ауылдарының төп халҡы булып тора һәм, салйоғоттар составына керeп, шулай уҡ ошо һөйләш вәкилдәре иҫәпләнә. Ә инде Күсем хан дәүерендә улар Төмәнгә яҡын ерҙәрҙә себер төркиҙәре менән бергә йәшәгәндәр.

Терһәк башҡорттары иһә XIX быуат башында Шадрин өйәҙендә биш ауыл булып йәшәгән. Уларҙың бер аҙы Екатеринбург өйәҙендә йәшәгән булыуы ла билдәле. Салйоғоттар төбәгендә Ҡоншаҡ районының Хәлит, Терһәк, Әләмә, Берһәк, Ғәшер, Мәсәй һәм Мәхмүт ауылдарының халҡы – терһәк башҡорттары. Боронораҡ улар Чусовая йылғаһының үрге ағымында йәшәгән.

Мәкәтин ырыуы башҡорттары Алабуғаты, Һаттыҡ, Бирҙәнеш һәм Кирпәсте ауылдарында йәшәй. Улар тарихи яҡтан ҡатайҙар менән яҡын туғандар иҫәпләнә.

Төп салйоғот ҡәбиләһе башҡорттарының утыҙ ауылы билдәле. Уларҙың иң эреләре: Бүре, Оло Ҡыҙыл, Бәләкәй Ҡыҙыл, Байғусҡар, Маян, Ҡунаҡбай, Ҡаҙанбай, Солтанай, Сәркә, Ихсан һ. б.

## *Һөйләштең иң мөһим фонетик үҙенсәлектәре*

Башҡорт әҙәби телендә һәм күпселек башҡорт һөйләштәрендә һүҙ уртаһында һәм һүҙ аҙағында **ҙ** һәм **ҫ** өндәре урынында системалы рәүештә **һ** өнө килә, **ҫ** өнө бөтөнләй тиерлек ҡулланылмай (һүҙ аҙағында **рҫ** ҡушылмаһы булған бик һирәк осраҡтарҙы ғына күҙәтә алабыҙ: *тирҫ* «север», *дөрҫ* «правда», *көрҫ* «ниточка»): *беҙ, беҙҙең – беһ, беһтең; тоҙ – тоһ; ҡыҙ, ҡыҙҙар – ҡыһ, ҡыһтар; йондоҙ, йондоҙҙар – йондоһ, йондоһтар; ҡуҙғалаҡ – ҡуһҡалаҡ; барабыҙ, киләбеҙ – барабыһ, киләбеһ; бараһығыҙ, киләһегеҙ – бараһығыһ, киләһегеһ; ҡыҙыл, быҙау – ҡыһыл, быһау; яҙыу, яҙыныу – яһыу, яһыныу.* Ләкин һирәкләп һүҙ уртаһында ике һуҙынҡы араһында **ҙ** өнө

килгән осраҡтар ҙа бар: *һөҙөү, ҡоҙағый, кеҙә* (әҙәби телдә *кеҫә*); ҙ өнө шулай уҡ ялғау башында ҡулланыла: *тимерҙек* (әҙәби телдә *тимерлек*), *сейҙәй (сейләй), ҡыйҙалыу (ҡыйланыу), барҙы, ҡарҙар.*

Ж. Ғ. Кейекбаевтың башҡорт диалекттарына арналған хеҙмәтенән ошондай һөйләмдәргә иғтибар итегеҙ: «Оло *Ғыһыл*, Бәләкәй *Ғыһыл*, Ҡунаҡбай ауылдары *утыһынсы* йылдарҙа гилеп утырғандар. Алар Әрәмил яғынан килгәндәр. Әлгәре *беһ* шал өс ауыл бер убщества булып турғайныҡ; Беһтә аш дан быйыл – арпалар, бойҙайҙар *күһтең* яуын алып утыра» (1950 йылдар уртаһында 70 йәшлек Шәкүр Вахитовтан яҙып алынған).

Килтерелгән текстарға ҡарап, һөйләштең, алда әйтелгәндән тыш, бүтән үҙенсәлектәрен дә билдәләп үтә алабыҙ. Мәҫәлән, фонетика өлкәһендә, **һ** өнөнөң актив ҡулланылыуы менән бергә, ошондай үҙенсәлектәр характерлы:

артҡы рәт **а** һуҙынҡыһы урынына алғы рәт **ә** өнөнөң ҡулланылыуы: *хисәп* – әҙәби телдә: *хисап, хәтен* – ҡатын, *әгәле-энеле – ағалы-энеле;*

ҡайһы бер осраҡтарҙа **и** өнө **э** өнөнә күсә: ишетеү – *эшетеү*, иреү – *эреү*;

**о–у** өндәренең сиратлашыуы: әҙәби телдә: йоҡлау – һөйләштә: *йуҡтау*, тотоноу – *тутыныу*;

һүҙҙең тамырында һуҙынҡылар гармонияһының һаҡланмауы: әҙәби телдә: нахаҡ – һөйләштә: *наһаҡ*, ҡояш – *ҡөйаш*;

**а, ы, о, ө, е** һуҙынҡыларының сонор тартынҡы өндәр эргәһендә тулы редукцияһы күҙәтелә: әҙәби телдә: балыҡ – һөйләштә: *балҡ*, дөрөҫ – *дөрҫ*, тиреҫ – *тирҫ*. Шулай уҡ морон – *морн*, тыныс – *тынс*, ыйыҡ – *ыйҡ*.

## *Морфологик үҙенсәлектәре*

Йүнәлеш килештә, *-ҡа/-кә* аффиксы менән бергә, *-ҡы/-ке* аффикстары ла характерлы: *киске табай* – әҙәби телдә: кискә табан, *тышҡы сыҡты – тышҡа сыҡты, беһке килде* – әҙәби телдә: *беҙгә* килде;

башҡа төньяҡ-көнсығыш һөйләштәрҙәге кеүек үк, *-ҡай/-кәй* иркәләү-кесерәйтеү ялғауы һүҙ яһауҙа актив ҡатнаша:

*сипекәй* – әҙәби телдә: себеш, *кендекәй* – кендек инәһе, *бәрәкәй* – бәрәс, *ҡолоҡай* – ҡолон, *асалыҡай* – асалы ҡойроҡ;

башлыса яңғыҙлыҡ исемдәргә ҡушыла торған -а(-ә) күплек аффиксының ҡулланылыуы: *Фәритә төнөн гиткән шол Ысбарлау* – Фәриттәр Свердлауға төнөн киткән шул;

шулай уҡ *-а + -лар/-ә + -ләр* күплек ялғауы ҡулланыла: *Сәгитәләр сумка аһып йөрөйҙәр – Сәгиттәр сумка аҫып йөрөй; Заһиталарҙың балдыҙы* – Заһиттарҙың балдыҙы; *Йеңгәмалар кисәге милитсиәгә ызванит иттеләр* – Еңгәмдәр кисә милицияға звонить иттеләр.

Изафет бәйләнешенең 1-се төрө күберәк осрай: *ер бетәү – ерҙән эшләнгән оя, иләк симбәр – иләк тирәсе.*

Һөйләштә *алайыгың, бирәйегең* тибында күмәк эшкә өндәү формаһы ҡулланыла. Был типтағы *-йыгың/-йегең (-айыгың/-әйегең)* форманты буйынса салйоғот һөйләше ҡыҙыл һәм көньяҡ диалекттың эйек-һаҡмар һөйләштәренә яҡын тора. Сағыштырығыҙ:

| Салйоғот һөйләше | Ҡыҙыл һөйләше | Эйек-һаҡмар һөйләше | Әҙәби телдә |
|---|---|---|---|
| *алайыгың* | *алайыгыҙ* | *алайыҡлар* | *алайыҡ* |
| *киләйегең* | *киләйегеҙ* | *киләйекләр* | *киләйек* |

*Сәре* бәйләүесе, арғаяш һөйләшендәге кеүек үк, урын һәм ваҡыт буйынса сикте белдерә: *күлгә сәре* – күлгә тиклем, *ауылга сары* – ауылға тиклем.

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Лексик үҙенсәлектәре, дөйөм алғанда, көнсығыш диалекттың бүтән һөйләштәре, айырыуса арғаяш һөйләше менән уртаҡ. Һөйләш лексикаһының үҙенә генә хас һыҙаттары салйоғоттар йәшәгән ерҙәрҙең колоритлы тәбиғәте, халыҡтың тормошо, көнкүреше, һөнәр-кәсептәре менән бәйле. Тарихи Башҡортостандың алыҫ был төбәге, йәғни хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы, күрше Арғаяш районы һымаҡ уҡ, күлдәр, ҡайындар төбәге, бында ҡара тупраҡлы тигеҙлектәр ҙә, һаҙлыҡлы урындар ҙа бар. Халыҡтың традицион хужалыҡ итеү ысулдары – башлыса малсылыҡ һәм игенселек.

Һөйләштә диалектизмдарҙың күпселеге көнкүрешкә, йолаларға, кейем-һалымға, аш-һыуға, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһына, ландшафтҡа мөнәсәбәтле. Н. Х. Мәҡсүтова лексик диалектизмдарҙың түбәндәге төрҙәрен билдәләй:

тәбиғәт күренештәренә, ландшафтҡа ҡараған һүҙҙәр: *дова* «омут», *дәрәндек* «водоворот», *йереккән йер* «долголетняя целина», *керпек, туржаҡ* «пороша», *күндәк* «трясина», *күң* «болото», *ҡыйпыҡ* «мягкий снег», *ләшә* «болотистая местность», *манташа* «наледь», *томгөл* «чаща», *һыуһеңеш* «слякоть»;

үҫемлектәр донъяһы: *асабалан* «рябина», *буләтәй* «овсюг», *урыһ ҡымыһтығы* «свербига», *урыһ сасы* «ковыль»;

йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр: *аҡсейә* «коршун», *асалығорт, асалытараҡан* «уховертка», *беһәлек* «овод коровий», *һарытурғай* «жаворонок»;

өндәш исемдәр, туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен белдереүсе һүҙҙәр: *йалған инәй* «посаженная мать», *йорсо* «деверь», *ҡандаш* «родная сестра», *ҡәртнәй* «женщина старше матери», *уҡылостай* «искусственный (названый) отец», *укелинәй* «искусственная мать»;

аҙыҡ-түлек, эсемлектәр: *бора* «закваска для кислушки», *күкһыу* «сыворотка», *һалат* «пшеница для приготовления бузы», *онаш* «тонко нарезанная лапша»;

кейем-һалым, биҙәүестәр: *бәйҙәмес* «повязка под платок», *дөл* «бархат», *инһәлек* «широкий вышитый пояс», *көмөшйеп ҡалпаҡ* «женский головной убор из позумента», *мәреүәт* «мелкая перламутровая пуговица», *тамаҡтун* «шуба из шейной части шкуры лисы», *төйөнбүрк* «шапка с оторочкой», *һәптеркә* «широкая однорядная оборка снизу»;

туй йолаһы менән бәйле һүҙҙәр: *йеңгә йауҙығы* «платок, подаренный невестой», *күрнис* «подарки невесте от матери (платье, передник, нагрудник, куски материи)»;

транспорт төрҙәре: *алас* «телега», *һуһыҡ* «тарантас».

### *Һөйләү теле өлгөһө*

### *Туй йолаһы*

Ҡышҡы туй, йәйге туй үһе башҡа була. Мәһәренә килешәбеһ, уҡалы камзул, сирек мәржен. Йегет кейәүҙәп йөрөй,

рөхсәт менән күсереп апҡайта. Күсерәләр. Киткәндә быуайҙар мән күрешә ҡыһ, йауҙығына тәңкә баһа... Һамаҡтай:

Ҡуштап ҡуштап баһарға
Ҡуш төймәкәйем йуҡ минең.
Ҡуштап та ғуштап һаҡтар инем,
Үһ атаҡайым йуҡ минең.
Ағаҡайымдың өйөндә йәшел дә
Сыуал буһасы.
Ағаҡайымдың өйөнән китмәһ тә
Йола буһасы.

Аттан төшмәһ борон айағына йаһтыҡ бырғайҙар, бер башмаҡ терәйҙәр (Ниғмәтәләр былтыр ғына шолай төшөрҙөләр ҡыһ). Ҡыһ яһтыҡҡа баһа, танаға тайана. Игенсе көнө сәйгә саҡыралар, инәһе күрнис китерә, тараталар. Көйаш ҡунғас килә, ҡыһ тора, һөҙөлөп тора, һаһынды йаҡҡа ғына ҡарап тора. Һыу күргәткәнсе апаралар. Морондоҡ инәһе билен сисә лә һылыуының биленә бәйҙәй. Һыуға бүләкәйгә тәңкә таштай. Ҡыһ билгәүен һылыуынан һатыб ала, алйапҡыс бирә. Ҡайынһеңдеһе бумаһа, ҡәйнәһе мән һөйҙәшә, ашауҙыҡ биреп һөйҙәшә. Балдарға ҡысмау, йорсоларға ҡулйауҙыҡ бирә. Киленде китергәс, туған ҡәйнеләр ҡапҡа быуа. Ҡоҙағый кеҙә ҡутара, ҡулйауҙыҡ биргәс, йебәрәләр. Шаны билеб тейҙәр. Һуһыҡ арба ман күсә. Ҡыһ бала, төшкәстәһен, таш буһын, ни хәҙәре бурсығаһың, йахшы буһын, тип өгөттәй. Ҡыһ ғүмере алдыға ағып китә. Шан китәләр инде: «Күһәнәк икмәк бешергән, күһең сыҡһын, инәкәй, ҡайраҡ икмәк бешергән, ҡайҙа минең жанышым», тип.

*1962 йылда Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Ҡунаҡбай ауылында 60 йәшлек Ғәлимова Саранан яҙып алынған.*

*Тәржемәһе*

*Свадебный обряд*

Зимняя свадьба и летняя свадьба бывают разными. Сговариваются на дорогую шубу с позументом, камзол с позументом, на четверть фунта коралла. Походив с месяц к невесте, жених

по согласию увозит ее. Невеста прощается со стариками, к платку своему пришивает монеты, причитая:

На пару пришить,
Нет у меня парных монет,
Еще в девушках пожить,
Отца родного нет.
В доме дядюшки моего
Была бы печурка зеленая.
Не уходить из дома дяди
Была бы причина подходящая.

Пока не сошла с коня, к ногам невесты бросают большую подушку, телку подводят (у Нигматов в прошлом году еще так сыграли свадьбу). Невеста наступает на брошенную подушку, опирается руками на телку. На следующий день организуют чаепитие. Мать привозит подарки, их дарят всем.

Невеста вступает в дом жениха лишь после захода солнца. Стоит она в углу и смотрит в одну точку. Водят ее к речке. Посаженная мать, отвязав ее пояс, привязывает девушке – родственнице жениха. Невеста свой пояс выкупает у этой девушки, дарит ей передник вышитый. Невеста приносит дар речке, бросает в речку монету. Если нет золовки в доме, то она вступает в разговор со свекровью. Свекрови за первый разговор дарит она скатерть вышитую. Детям дарит тесемочки рубашечные, братишкам мужа – платочки. Когда свадебный обоз подходит к воротам, то его перегораживают юноши – братья жениха. Мать невесты начинает шарить по своим карманам, вытаскивает платки и дает им. Юноши их сопровождают до крыльца. Невеста должна сесть на лучшую тележку. Вот невеста стала замужней женщиной, пусть как камень, несмотря на невзгоды, погрузится в семью, жизнь ее так и продолжается.

II бүлек

# КӨНЬЯҠ ДИАЛЕКТ

## Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы

Башҡортостан Республикаһының көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш һәм үҙәк райондарында (54 райондың 25-дә) һәм ҡалаларында, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләрендә йәшәгән башҡорттарҙың һөйләштәрен берләштерә. Көньяҡ диалект вәкилдәренең дөйөм һаны хәҙерге ваҡытта сама менән 600 меңдән ашыу тип иҫәпләргә була. Шуның 53 меңе Ырымбур өлкәһенең ауыл һәм ҡалаларына тура килә. Һамар өлкәһендә башҡорттар Оло Черниговка һәм Оло Глушица райондарында, Оло Ырғыҙ һәм Кәрәлек буйҙарында төп һигеҙ ауылда, шулай уҡ ҡайһы бер ҡатнаш ауылдарҙа, Һарытау өлкәһендә иһә Перелюб һәм Пугачев райондарының ете ауылында йәшәй.

Көньяҡ диалект бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, түңгәүер, юрматы, табын, ҡатай (инйәр-ҡатай), мең ҡәбиләләренең урындағы һөйләү телен берләштерә.

С. Ф. Миржанова билдәләүенсә, көньяҡ диалект бүтән диалекттарҙан фонетик һәм фонетик-морфологик принциптар нигеҙендә айырымлана. Фонетик үҙенсәлектәр бында грамматик (йәки морфологик) һәм лексик үҙенсәлектәрҙе барлыҡҡа килтерә. Диалектҡа хас үҙенсәлектәрҙе түбәндәгесә билдәләп үтергә мөмкин:

1. Күплек ялғауҙары ике төрлө – *-лар/-ләр* һәм сонор өндәргә **(м, н, ң** өндәренә) бөткән һүҙҙәрҙән һуң *-нар/-нәр* формаһында килә: *атлар, һыйырлар, ауыллар, таулар, илләр, күлләр,* ләкин *урманнар, көннәр, төннәр.* Исем, сифат, ҡылым

яһаусы ялғауҙар шул уҡ тәртиптә ҡулланыла, йәғни: *-лыҡ/-лек, -ныҡ/-нек (йыллыҡ, муллыҡ, шырлыҡ, ҡомноҡ, утынныҡ, сабынныҡ, бесәннек, иркеннек), -лы/-ле, -ны/-не (атлы, ташлы, болло, түлле, ләкин ҡомно, йүгәнне), -ла/-лә, -на/-нә (башла, яҡла, һаҡла, аңна, тыңна), -лау/-ләү: йарлау* («крутой обрыв»), *ҡарлау* – әҙәби телдә: *мәләү* («лопаточка для выкапывания чего-либо»). Был йәһәттән көньяҡ диалект көнсығыш диалекттан һәм әҙәби телдән айырымлана, ә инде төньяҡ-көнбайыш диалект менән бер үк позицияла тора.

2. **Һ, ç, ҙ** өндәренең ҡулланылышы йәһәтенән көньяҡ диалект ҡалған ике диалекттан һәм, һүҙ эсендә уларҙың урынына ҡарап, әҙәби телдән айырыла. Көньяҡ диалекттағы **һ, ç** өндәре – бүтән төрки телдәрендәге **с** өнөнә, **ҙ** өнө **з, д (т)** өндәренә тап килә. Ә дим һөйләшендә **ç** өнө төрки сығышлы һүҙҙәрҙә барлыҡ позицияларҙа ла әҙәби телдәге **һ** өнө урынында ҡулланыла: *çыу* – әҙәби телдә *һыу, çыуçау – һыуһау, çыуçаçа – һыуһаһа, çыуçаған – һыуһаған, бурçыҡ – бурһыҡ, туҡçан – туҡһан, тупçа – тупһа; çыу буйында çуғаным, çыу çипçәнә, туғаным!; Алла çаҡлаçын! – Алла һаҡлаһын!* Урта һөйләштә һәм эйек-һаҡмар һөйләшенең эйек-юшатыр зонаһында, әҙәби телдәгесә, һүҙ һәм ялғау аҙағында ла, һирәкләп, дим һөйләшендәгесә, ялғау башында **ç** өнө ҡулланыла: *бурһыҡ – бурçыҡ, тупһа – тупçа, туҡһан – туҡçан, түмһә – дүмçә.* Эйек-һаҡмар зонаһының һаҡмар зонаһында, киреһенсә, барлыҡ позицияларҙа ла **ç** өнөнә **һ** өнө тура килә: *һыуһаһа* – әҙәби телдә *һыуçаһа, баһ – баç, баһма – баçма, баһмаһ – баçмаç, ҡыһыҡ – ҡыçыҡ, һаһыҡ – һаçыҡ.*

3. Көньяҡ диалект һөйләштәрендә, уның көнсығыш диалект һәм ҡаҙаҡ теле һөйләштәре менән аралашып йәшәгән зоналарынан тыш, көнсығыш диалекттан айырмалы рәүештә, һүҙ һәм ижек башында **й** өнө килә: *йай* – «медленно», *йәй* – «лето», *йәйләү* – «летовка», *йел* – «ветер», *йете* – «семь», *мәрйен* – «коралл, бусина», *ынйы (энйе)* – «жемчуг, перламутр». Һүҙ башында **й** өнөнөң килеүе башҡорт телендә боронғо төрки теле дәүеренән һаҡланып ҡалған мөһим фонетик күренеш иçәпләнә һәм ул әҙәби тел нормаһы итеп алынған.

4. Һүҙ башында һаңғырау **т** өнөнөң яңғыраулаyыуы (йәғни **т** – **д** өндәренең сиратлашыуы) күҙәтелә: *тамға – дамға, тауар – дауар, тулҡын – дулҡын, тәзе – дәзе, тән – дән, түңәрәк – дүңәрәк, тәгәрмәс – дәгәрмәс, тәҡәт – дәҡәт* («терпение»).

5. **О, ө** өндәре буйынса ирен гармонияһы көньяҡ диалект һөйләштәрендә эҙмә-эҙле һаҡлана: *бойоҡ – бойоғоу* «грустный, загрустить», *өҙлөкһөнөү* «получить осложнение после болезни», *өҫтөлө ҫөт* (дим һөйләше) «неснятое молоко».

6. Көньяҡ диалект һөйләштәрендә аңҡау һәм ирен гармонияһы законы эҙмә-эҙле күҙәтелә. Был закон айырым һөйләштәрҙә ҡушма һүҙҙәргә лә тарала. Мәҫәлән: *әбин<алып ин* «занеси», *әпир<алып бир* «подай, поднеси», *әсмәйел<ас мәйел* «ненасытный», *әсәмәк<ас әмәк* (?) «обжора», *мынағайыш! мына, ағай, эш* «вот, брат, дела!», *ҡәртнәй, ҡәрсәй<ҡарт инәй, ҡарт әсәй* «бабушка».

Айырым һүҙҙәрҙең нәҙек һәм ҡалын варианттары көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙы көнсығыш диалекттан айырымлай торған билдә иҫәпләнә. Тәүге ике диалектта һәм әҙәби телдә, мәҫәлән, *сәс*, көнсығыш диалектта *сас* «волосы», шул уҡ тәртиптә: *сәсмәү – сасмау* «косоплетка», *сәс – сас* «сеять», *сәсрәт – сасрат* «брызгать».

7. Көньяҡ диалект һөйләштәрендә *бара йата* «идет (туда)», *килә йата* «идет (сюда)», *ҡасып китебара* «убегает» тибындағы ҡатмарлы ҡылым формалары ныҡ үҫешкән. Был формалар эш-хәлдең тамамланмағанын, оҙайлы булыуын белдерә һәм телмәрҙең һығылмалығына, музыкаллегенә өлгәшергә булышлыҡ итә.

Көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттар өсөн *бeлән/ белә* «вместе, с», көнсығыш диалект өсөн иһә *менән/ мән/ ман* бәйләүесе, шулай уҡ *да баһа/ҙа баһа/ла баһа/та баһа, даһа/ ҙаһа/ лаһа/таһа* киҫәксәләре һәм уларҙың йомшаҡ варианттары характерлы.

8. Диалекттар һәм һөйләштәр араһында лексика өлкәһендә лә күп кенә айырмалыҡтар бар. Был айырмалыҡтар тарихи-этнографик, иҡтисади һ. б. факторҙар менән бәйле. Айырыуса тормош-көнкүреш, тәбиғәт үҙенсәлектәре, йола һәм традицияларға ҡараған лексика өлкәһендә айырмалыҡтар ғәйәт колоритлы. Мәҫәлән: *йамайаҡ, йамыйаҡ* (дим, минзәлә һөйләштәре, көньяҡ-көнбайыш диалект, урта урал, эйек-һаҡмар, әй) – *ағас ороһонан яһалған сеүәтә; мырҙа* (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) – *ҡусты, эне; мысый* (һаҡмар) – *кәзә тиреһенән тегелгән һауыт; баҡрас* (дим, түбәнге ағиҙел-ыҡ, һаҡмар) – *ижау* «половник», *абзый* (көньяҡ, төньяҡ-көнбайыш диалект-

тар, әй һөйләше) – *бер туған ағай* «старший брат», урта һөйләштә *ҡайнаға* «старший брат», әҙәби телдә: *абыҙ – уҡымышлы, белемле кеше; мырҙа* (ҡыҙыл, урта, һаҡмар) – *ҡусты, эне* «братишка». Ш. Бабич: *Эй, мулла абзый, ант итәмен Алла менән.* Кеше исеме: *Киньябыҙ – Кинйә абыҙ.* Шулай уҡ ауыл исеме: *Кинйәабыҙ ауылы* (Көйөргәҙе районы). Кинйә абыҙ Арыҫлановтың исеме менән аталған. «Башҡорт теленең диалектологик һүҙлеге»нә диалектизм булараҡ индерелгән. Ике томлы «Башҡортса-урыҫса һүҙлек»тә иһә (М., 1996), төп мәғәнәләренән тыш (*«юғары ҡатлам кешеһенә бирелгән дәрәжә»* һ. б.), *«кесе ир туған, ҡусты, эне»* мәғәнәһендә лә әҙәби тел нормаһы итеп алынған. Шакир Янбаев әҫәренән ошондай миҫал килтерелә: *Мин буҫлығып илайым, мырҙаларым аптырашып киткән.* Тимәк, *«ҡусты, эне»* мәғәнәһендә элегерәк диалектизм тип йөрөтөлгән был һүҙ художестволы әҙәбиәттә актив ҡулланыу арҡаһында әҙәби телгә килеп ингән тип иҫәпләй алабыҙ.

Көньяҡ диалект составында хәҙерге ваҡытта ошондай һөйләштәр билдәләнә:

1) әйек-һаҡмар (йәки төп көньяҡ) һөйләше;

2) дим һөйләше. Уның эсендә – инйәр, еҙем, ҡырмыҫҡалы һөйләшсәләре;

3) өршәк һөйләше;

4) урта һөйләш;

5) егән һөйләше.

## 1. Әйек-һаҡмар (йәки төп көньяҡ) һөйләше

### *Дөйөм мәғлүмәттәр*

Әйек-һаҡмар һөйләше көньяҡ диалект составында төп һөйләш булып тора. Башҡорт һөйләштәре араһында ул иң ҙур территорияны биләүе һәм һөйләшсәләрҙең күп булыуы менән айырылып тора. Һөйләш Башҡортостан Республикаһының Көйөргәҙе, Ейәнсура, Йылайыр, Хәйбулла, Күгәрсен, Мәләүез, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Стәрлебаш райондарында, Баймаҡ һәм Бөрйән райондарының көньяғында, Ырымбур (Ҡыуандыҡ, Гай, Төйлөгән, Һарыҡташ, Александровка, Красногвардейск, Новосергиевка райондары) өлкәһендә, Һамар (Оло

Черниговка һәм Оло Глушица райондары) һәм Һарытау (Перелюб һәм Пугачев райондары) өлкәләрендә йәшәгән («яңылар» йәки «сәҙеләр» тип йөрөтөлгән) башҡорттарҙың йәнле һөйләү телен үҙ эсенә ала. Был һөйләшкә бөрйән, үҫәргән, түңгәүер (дүңгәүер), юрматы, тамъян һ. б. башҡорт ҡәбиләләре ҡарай.

Н. Х. Ишбулатов, С. Ф. Миржанованан айырмалы рәүештә, эйек-һаҡмар һөйләшендә өс һөйләшсә бар, тип күрһәтә һәм уларҙы түбәндәгесә билдәләй: *һаҡмар-һүрәм, эйек-ашҡаҙар, көйөргәҙе-юшатыр*. Әммә беҙ һөйләштең классификацияһы мәсьәләһендә көньяҡ диалектты монографик планда махсус өйрәнгән диалектолог С. Ф. Миржанова хеҙмәтенә таянып эш итәбеҙ. Ул үҙенең «Башҡорт теленең көньяҡ диалекты» тигән китабында был һөйләште ошондай һөйләшсәләргә бүленә тип раҫлай: *юшатыр, нөгөш, юрматы, соран-ырғыҙ* һәм *үрге һаҡмар, һүрәм, түбәнге һаҡмар* һөйләшсәләре. Тәүге дүрт һөйләшсә – көньяҡ-көнсығыш, йәғни *һаҡмар-һүрәм зонаһына*, ҡалған өсәүһе көньяҡ-көнбайыш, йәғни *эйек-юшатыр зонаһына* берләшә. Тәүге зонала **һ** спиранты һүҙҙең барлыҡ позицияларында ла ҡулланыла: *аһ* (әҙәби телдә: *аҫ*) «горностай», *баһыу (баҫыу)* «поле».

Эйек-юшатыр зонаһында иһә **һ** өнө һүҙ башында ғына килә, ҡалған осраҡтарҙа ул **ҫ** өнөнә алмашына: *һуҫар, аҫ, баҫыу*. Был зоналар, тимәк, **һ** спирантының һәм аҙмы-күпме **ҫ** һаңғырау интердентал тартынҡыһының ҡулланылыуына ҡарап бүленә. Ошо ике зона араһында йәнә уларҙың икеһенә лә яҡын торған һәм әҙәби тел нормаларына айырыуса яҡын маргиналь бер һыҙат – эйек һөйләшсәһе бар[1].

С. Ф. Миржанова, Н. Х. Ишбулатов, Э. Ф. Ишбирҙин хеҙмәттәрендә эйек-һаҡмар һөйләшенең йәнә түбәндәге төп фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәре билдәләнә.

### *Фонетик үҙенсәлектәре*

Һөйләштең һаҡмар-һүрәм зонаһында **а** һуҙынҡыһының тамаҡ төбө менән әйтелә торған варианты бар. Мәҫәлән: *а*ъ*ҡ, а*ъ*ғара, а*ъ*хыры*. Был вариант урта һөйләштең инйәр һөйләшсәһе

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 24-се бит.

һәм унының менән күршеләш күбәләк һөйләшсәһендәге **а** өнөнә тап килә. Эйек-юшатыр һөйләшсәһендә иһә был урында иренләшкән **а** өнө ҡулланыла. Һаҡмар-һүрәм зонаһында шулай уҡ **ҡ** өнөнөң тамаҡ төбөндә яңғыратыбыраҡ әйтелеүе күҙәтелә: *ҡъайнай, ҡъара әле, туҡъал һыйыр*. Тамаҡ төбө менән әйтелгән **ҡ** һәм **а** өндәренең үҙ-ара йоғонтоһо барҙыр, ахыры, ти Н. Х. Ишбулатов.

Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә **ж** өнө урынына **з** өнө ҡулланыла: *ҡоназын* – әҙәби телдә *ҡонажын, дүнәзен – дүнәжен, азда – аждаһа, издиһат – иждиһат, ызыҡа – ыжыҡа, мөнәзәт – мөнәжәт, гоз булыу – гож булыу, мөхтәз – мохтаж, әзәл – әжәл, Мәзит – Мәжит* (ауыл һәм кеше исеме).

Бында ла, көнсығыш диалекттың ҡайһы бер һөйләштәрендәге һымаҡ, һүҙ башында **т** өнөнөң **д** өнөнә күсеү осраҡтары күҙәтелә: *дәрән* – әҙәби телдә тәрән, *дулҡын – тулҡын, дамға – тамға, дөйлөгән – төйлөгән, дөйтә – төйҙә, дүмгәк – түңгәк*.

Айырым һүҙҙәрҙә һүҙ башында әҙәби телдәге **б** өнө **м** өнөнә күсә: *боҙ – моҙ, бағана – мағана, бешә – мешә, биртенеү – миртенеү, бызлау – мызлау*.

Ғәрәп һәм фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы **ғ, ҡ** өндәре урынына **г, к** өндәрен ҡулланыу осраҡтары бар: *гәжәп – ҡәжәп, гәләмәт – ҡәләмәт, гел – кел, гонаһ – конаһ, Гөлсирә – Көлсирә*.

Һөйләштә һүҙ аҙағында әҙәби телдәге һәм бүтән һөйләштәрҙәге **ы** өнө урынына **а** өнөн ҡулланыу күҙәтелә: *саңғы – саңға; Саңғаға шәп булған бороңго ғыҙлар* «На лыжах были проворными девушки в старину», *таҡы – таҡа* «нисколько, ни крошки», *бағры* «форель» – *бағара* «пескарь, вьюнок», *таңныҡ – таңнаҡ* «утренняя заря». Күгәрсен районында Оло Эйектең уң ҡушылдығы Наҡаҫ йылғаһының исеме (шунда уҡ *Наҡаҫ һырты* ла бар) *наҡыҫ* («малый, короткий, куцый») һүҙенән ошо уҡ ***ы–а*** сиратлашыуы буйынса *«Наҡаҫ»* булып киткән.

Һөйләштә шул уҡ ваҡытта, киреһенсә, айырым һүҙҙәрҙә **а – ы** сиратлашыуы күҙәтелә: аңҡау «твердое нёбо» – һөйләштә *ыңҡау* (юшатыр һөйләшс.); *тамшаныу* «глотать слюни» – *тымшаныу; маҙаһыҙлау* «беспокоить» – *мыҙаһыҙлау; юрау*

«истолковывать» – *юрыу; Аралбай – Арылбай* (Күгәрсен районындағы ауыл исеме).

Бынан тыш, бүтән һөйләштәрҙәге һымаҡ, **е – ә** (*кеҫәртке – кәҫәртке, әтлек – әтләк*), **и – ә** (*тиҫтә – тәҫтә*), **ә – и** *сәскә – сискә, мәскәй – мисекәй* (һаҡмар һөйләшс.), *мәсекәй* (әйек һөйләшс.), **у–о** *тупаҫ – топаҫ* (юшатыр һөйләшс.), **ү–ө** *сүрәгәй өйрәк – сөрәгәй өйрәк, Мәҡсүт – Мәҡсөт* (Күгәрсен районындағы ауыл исеме) сиратлашыуы ла бар.

Күп кенә һүҙҙәрҙең нәҙек һәм ҡалын варианттары ҡулланылып, сингармоник варианттар барлыҡҡа килә: *сос/сөс, йылғыр/йелгер, ҡорайыш/көрәйеш, Йырғайыш/Йергәйеш* (Ейәнсура районындағы йылға исеме). Дөйөм алғанда, һөйләштә һүҙҙәрҙең нәҙек варианттары өҫтөнлөк итә: *кәсә – каса, тәрих – тарих, мөхтәзлек – мохтажлыҡ, мәтәштерер – маташтырыу, сәйер – сайыр* «живица».

*Морфологик үҙенсәлектәре*

Эйәлек килеш ялғауында, әҙәби телдәге ***-дың, -ҙың, -ның, -тың*** формалары менән бергә, һөйләштә ялғау аҙағында ***-н*** өнө ҡулланыла: *Йете һыуҙын буйына йете ырыу башҡорттары утырған; Иҙелден аръяғы – һыуын ҡыпсағы* (һүрәм һөйләшс.); *Апайымдын тамағы тәмне – Апайымдың ашы тәмле* (түбәнге һаҡмар һөйләшс.); алмаштар бәйләүестәр менән бергә килгәндә *ң* өнө бөтөнләй төшөп ҡалырға мөмкин: *аны белән* – әҙәби телдә: *уның менән, ошоно шикелле – ошоноң шикелле, һине геүек – һинең кеүек.*

*-ла, -мала, -ҡалаҡла* ялғауҙары эш-хәрәкәттең ҡабатланыуын белдерә: *Мал тапаламаһа, үҫтерем үҫә. Йүгермәләп йөрөй. Ҡар һымаҡ ялтыр нәмә осҡалаҡлап тора.*

Ҡылымдың ***-айыҡ/-әйек*** ялғауына бөткән бойороҡ һөйкәлешенең 1-се зат күплек формаһына ***-лар*** күплек ялғауын ҡушып, эшкә өндәү һәм шул эште башҡарыуҙа өндәүсе заттың үҙенең дә ҡатнашыуы белдерелә: *Барайыҡлар!* «Пойдемте!», *Ҡуҙғалайыҡлар!* «Пора отправиться!». Бынан тыш, ***-лар*** аффиксы ***-ғыҙ/-геҙ*** ялғауы менән яһалған модаль һүҙҙәргә һәм үҙләштерелгән һүҙҙәргә лә ҡушылырға мөмкин: *Әйҙәгеҙләр!* «Айдате!», *Давайығыҙлар!* «Давайте!». Шул уҡ ***-лар*** аффиксы

ҡылымдың ***-дыҡ/-дек, -ҙыҡ /-ҙек*** ялғауына ҡушылып, бойороҡ һөйкәлешенең ҡәтғилек мәғәнәһе барлыҡҡа килә: *Киттекләр!* «Пойдемте!»[1].

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Эйек-һаҡмар һөйләшенең лексикаһы нигеҙҙә милли әҙәби тел өсөн норма итеп алынған. Ул, бүтән һөйләштәр менән бергә, хәҙерге ваҡытта ла әҙәби телде байытыуҙа ҙур роль уйнай. Быға көньяҡ башҡорттарының Көньяҡ Уралдың административ һәм мәҙәни үҙәге – Ырымбур ҡалаһына яҡын булыуы, уларҙың араһынан бик күп уҡымышлы кешеләрҙең, дәүләт һәм фән эшмәкәрҙәренең, атаҡлы һүҙ оҫталарының – шағирҙарҙың, яҙыусыларҙың үҫеп сығыуы, халыҡтың үҙендә тарихи хәтеребеҙҙең, рухи байлыҡтарыбыҙҙың, йола һәм традицияларыбыҙҙың яҡшыраҡ һаҡланыуы ғәйәт ныҡ булышлыҡ итә.

Һөйләш лексиканың барлыҡ төрҙәрендә лә диалектиль синонимдарҙың күп булыуы менән айырылып тора. Айырым һүҙҙәрҙең синонимдары ҡайһы берҙә тиҫтәнән артып китә. Мәҫәлән: әҙәби телдә – *бәпембә,* һөйләштә һәм һөйләшсәләрҙә: *бәмтәкә, мәмтәкә, бәмбәкә, бәпкә үләне, бәпембәүек* (юшатыр һөйләшс.), *ләпләм, ләпләүек, кәпләм, көнөнөк* (һүрәм һөйләшс.), *бөгәм, бөгәрләк, һарсәскә, бәпембә* (һаҡмар һөйләшс.); әҙәби телдә *еҙәй*, һөйләштә – *йеҙәй, йеҙем, йөҙөм ағасы, энағас, йәмшегән, энәлек.*

Лексик һәм фонетик үҙенсәлектәре буйынса һөйләш ике зонаға бүленә: һаҡмар-һүрәм һәм эйек-юшатыр зоналары. Һаҡмар-һүрәм зонаһына хас үҙенсәлекле диалекталь лексика Урал аръяғы башҡорттары – көнсығыш диалекттың арғаяш, салйоғот һөйләштәрендә һәм унан ары көнбайыш себер татарҙарының, шулай уҡ көнсығыш төрки телдәренән алтай телендә лә ҡабатлана. Мәҫәлән: *аша* «игла для вязания сети», *һүгән/һеүән* «рыболовная морда», *ҡамтарыу* «привязать лошадь, высоко подняв голову» и др.

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. 65–66-сы биттәр.

Эйек-юшатыр зонаһы өсөн урта, ҡыҙыл һәм дим һөйләштәре менән уртаҡ лексик ҡатлам характерлы: *йеҙәй* «боярышник», *ҡарҙы* «хлев», *мәреү* «таять (о снеге)», *мәретке* «слякоть», *йыбытҡы* «медлительный», *бабай* «дядя, родственник старше родителей».

### *Һөйләү теле өлгөләре*

### *Эйек-һаҡмар һөйләшенең һаҡмар зонаһы*

### *Боронғоларҙың ҡыҙ биреү йолаһы*

Кейәүҙең аталары гилә, ҡыҙ әйттерергә һөйләшәләр. Бат(а) уҡыталар. Әйттереп, бат(а) уҡытып, мәһәрен һала, йаҫтығ аҫтына һалыр өсөн йаулыҡлар һалып, алты-йете баш мал һала. Ике ирекәй аҙағ апкилә ул малды. Тирмей ғороп ишеғалдына, ғинуар айында бейә һыймалы ҡаҙан ғуйып, тыу бейәне бешерҙеләр. Әпләтиф ҡарттың һур ғаҙаны була торғайны. Анан уналты туға ҡоҙа гилде Айсыуағ араһына, минең атама гилде. Байағы, ултырырға урын да йуҡ. Ун ғыҙҙы йәшереп ташөйгә йаптылар, һәҙер усаҡлыҡ, ҡаҙанныҡ тейләр. Бер генә тәҙрә. Шуға кейеҙ ғороп, бер йаҡлы ғалдырмай. Анан, шунда эҙләргә гиләләр. Ҡоҙалар ит ашап-ништәп, байағы, йатыбөткәс, йәшләр гилә эҙләп, кейәү үңгәре кейәү белә бергә гиләләр. Ун өстә бирҙеләр. Атам, йаңғыҙ ғыҙ булғас, киленнеккә йарамай тине атам. Түрт йыл ултырҙым. Мине ун өстә бирмәҫләр ине, әғәйнеләр: уҡып китә лә бара, йетәләшеп китә лә бара, тейләр.

Анан, байағы, шунан һуң, байағы йәшләрҙе йеңгәй башлаб апара. Ишекте асмайлар. Сауҙалашалар. Фәлән саҡлы, фәлән саҡлы! Кейәү үңгәре түләй аҡсаны. Баралар ишеккә. Ишекте асыбәрҙеһинә, мына ҡыҙлар йәбешә! Йеңгәй айырыб алып тора. Ә-ә-ә-әй! Ул бер тәрих инде. Йеңгәйләр йетәкләп, ике ғулдан тотоп әпкитеб ултырталар. Кейәүгә ғысҡырылар:

«Үксәһенә баһ, үксәһенә баһ!» Үксәһенә баһа ла еңә була инде. Түрт йыл ултырғас, оҙатылып барып бер йыл торҙом да кире ғайттым. Йүткеректән, һыуығ үтеб үлде гейәүем. Кеше һөйләй: Әхмәткариф йаңғыҙ ғыҙын күҙе һуҡырға биргән! Атам ат йекте лә, бер олатамды ултыртып, сапты ҡоҙаһына.

Атамдар барыбинһә, ҡултығ аһтынан берәү сығып ҡасҡан. Аптыранышып киткән тегеләр. Берәү барып баһҡас ней! Һарай артына инеп киткән теге кейәү бала.

Атам бахыр әйткән: «Һөт һорағас, сеүәтәңде йәшермә, тигәннәр. Кейәү бала һуҡыр тейләр. Шулай булһа, бирмәйем. Кейәү булыр гешене индерегеҙ!»

«Ҡайным, һиңә бер тай, ҡайнаға, һиңә бер гүлмәк!» – тип килеб инеп күрешкән теге бахыр. Күренеш була инде. Атам: «Сыҡма, сыҡмале», – тиб ултыртҡан. Самауырҙың артына инеп кенә, ышыҡланып сәйҙе лә йоталмай, тей. Уҡығам буған, биг укытканнар. Мөсһөҙ була бит инде уҡыған геше! «Үрәтник ҡоҙа! Йарар, үпкәләштән булмаһын. Хәрендәш булыштыҡ», – тип ризалығын биреп ҡайтып киткән атам.

*Башҡорт АССР-ының Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында Биктимерова Һәҙиә Әхмәтғариф ҡыҙынан (1908 йылда тыуған, төркисә уҡый-яҙа белә) магнитофон таҫмаһына яҙып алынған (Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 251 – 252-се биттәр).*

### *Тәржемәһе*

### *Старинный обычай выдачи девушки замуж*

Для сватания девушки приезжают отец жениха и его родственники. Договариваются. Мулла читает никах. В качестве выкупа называют платки, чтобы под подушку класть, шесть-семь голов скота. Двое мужчин потом (после свадьбы) приводят этот скот. В январе, построив на дворе юрту, поставив туда казан, вмещающий тушу яловой кобылицы, сварили (эту тушу). Был такой огромный казан у старика Абдуллатифа. Шестнадцать пар сватов-гостей приехало к моему отцу, в Айсуваков род. Сидеть места совсем не было. Десять девушек спрятали в каменную лачугу (сейчас эта лачуга называется местом очага, казана), т. е. в летнюю кухню. Одно только окно. Завесив его кошмой, не оставили там света. Потом туда идут искать (невесту). Когда гости, поев мяса и т.д., кончив все дела, ложатся спать, молодежь идет искать вместе с шафером, женихом. Выдали меня в тринадцать лет. Так как я была единственной дочерью, мой отец сказал, что еще не

пригодна стать снохой. Четыре года ждала. Меня бы не выдали в тринадцать лет, родственники уговорили отца, что выучится и уйдет с кем-нибудь, взявшись за руки.

Потом, после этого, давешнюю молодежь ведет на поиски енгэй (невестка невесты). Девушки дверь не открывают. Торгуются. Столько-то, столько-то. Шафер платит. Подходит к двери. Как только дверь открыли, девушки, скучившись, на меня набросились, оставив меня внизу, схватили за руки. Енгэй, хватая каждую, отбрасывает в сторону.

Э-э-эй! Это же настоящая история! После этого невестки, схватив меня за обе руки, ведут, жениху кричат: «Наступи ей на пятку!» Наступит на пятку и якобы верх возьмет, как будто будет главой. Четыре года просидев, поехала в дом жениха; один год пожила там и уехала обратно. От воспаления легких, простудившись, умер мой жених. После свадьбы люди начали болтать: Ахметгариф единственную дочь выдал за слепого (на один глаз). Мой отец запряг коня, взял с собой моего дядю и помчался к своему свату. Отец мой (они) неожиданно входят в дом, из его рук кто-то, вырвавшись, выскочил во двор. Те все в полном недоумении. Вот какая неожиданная напасть! Жених тот совсем под сарай спрятался.

Отец, покойный, сходу сказал: «Есть выражение: если пришел просить молока, чашку свою не прячь. Говорят, жених слепой. Если так, не выдам. Будущего зятя приведите!»

«Тесть мой, тебе один стригунок-жеребенок, кайнаға (старший брат тестя), тебе одну рубашку!» – войдя и сказав так, поздоровался тот бедняжка. Этот обычай куренешем называется (подарок, дающий право молодым показаться и говорить со старшими). Мой отец: «Не уходи! Не уходи-ка!» – сказав, посадил его. Сел за самовар, спрятавшись, говорят, чаю даже не может глотнуть. Очень образованный был, оказывается, много обучали его. Слабым бывает ведь ученый человек!

– Сват-урядник! Ладно. Не будем обижаться друг на друга. Считай, породнились! – сказал довольный отец, дал свое согласие и уехал.

*Эйек-юшатыр зонаһы*

*Киндер һуғыу*

Киндерҙе күңгә генә сәсәләр. Күң иҫке гәртә урыны, тиреҫлек була. Киндер бер аршиндай була, йомшаҡ, уаҡ була. Тарма буһа, үҙе үҫкән киндер. Сәсмәһәң дә, икенсе йылына үҙе үҫә оҙон булып. Баҫаның башы аҡ була, тиҙ генә өлгөрә. Сискәһе остониһә, баҫаны йергә йәйәләр. Шунда ысыҡта йатып серей ул. Киндерҙе һыуға батырып сереткәс, киптереп талҡыла талҡыйлар. Тәрәшләп үҙәген, сүбәгенән айыралар. Шунан ҡабаға бер тәрәш киндер ҡуйып иләйләр. Йепте кәләпкә һалалар. Бер ҡарала ун аршин йеп була. Йепте оҙа-талар буйлыҡ өсөн, арҡаулығын әҙерләйләр. Урын ағасында һуғалар киндерҙе. Көрөҫкә теҙәһең бер бөртөгөнә берәр йеп. Тараҡта йөҙ илле бөртөк йеп. Ул була биш баҫма, илле әйтем. Бер баҫмала ун әйтем, бер әйтемдә өс бөртөк. Ирещ буйы тараҡтан, көрөҫтән үткәрелгән була. Тараҡтың һәр бер тешенә икешәр йеп үткәрелһә, теүәл була. Теүәййалан – бер тешкә бер, бер тешкә ике була. Шубыр – теш һайын берәр була.

Сүпләп һуғыу ҙа була. Аның өсөн сүпләм таҡтаһы, шәп кәрәк ике ғат йепте бутамаҫ өсөн.

*1966 йылда Башҡорт АССР-ының Мәләүез районы Танып (Арыҫлан) ауылы Бураканова Ҡолзирәнән (1988 йылғы) яҙып алынған (Образцы разговорной речи башкир. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1988. 148-се бит).*

*Тәржемәһе*

*Ткание холста из конопли*

Коноплю сеют на кун. Кун – это место, где был хлев, загон, т. е. место скопления перегноя. Конопля бывает **с** аршин длиной, мягкая, мелкая. Если тарма, это – конопля самосей. Если ее даже не сеешь, на следующий год вырастает сама. У поскони головка белая, быстро созревает. Как только цветы отпадут, посконь расстилают на землю. Там, лежа на росе, она преет. Коноплю держат в воде, высушивают и мнут. Прочесав, отделяют волокно и очес. Потом пучок волокна привязывают к прялке и прядут. Пряжу на мотушку. В одну **ҡара** десять

аршинов пряжи наматывают. Пряжу нужно складывать для основы, готовят также уток. Холст ткут на ткацком станке. Нанизываешь пряжу на ниточку, каждую берешь нитку по одной. В берде сто пятдесять штук (зубчиков) ниток. Это будет 5 басма (30 ниток), 50 эйтем (3 нитки). В 1 басма 10 эйтем. В одном эйтем – 3 нитки. Основа пропускается через бердо, через ниточку. Через бердо если на каждый зуб по две нитки пропустить, то это будет считаться полным. Тувей йалан – это на один зуб приходится одна нитка, на другой зуб – две нитки. Шубыр – это когда через каждый зуб бердой пропускается по одной нитке. Также тканье бывает узорчатым. Для этого нужна лучинка, чтобы не спутать двойной слой ниток.

## 2. Дим һөйләше

*Биләгән территорияһы, халыҡтың этник составы*

Дим һөйләше бик ҙур территорияла – Тарихи Башҡортостандың Дим, Өфө йәки Ҡариҙел (түбәнге ағымы), Эҫем, Сәрмәсән, Туҡ һәм Кәмәлек йылғалары буйҙарында йәшәгән башҡорттарҙың йәнле һөйләү телен берләштерә. Административ-территориаль йәһәттән ул Башҡортостан Республикаһының Нуриман һәм Иглин, Благовещен, Өфө (хәҙерге ваҡытта меңлеләрҙең бер нисә генә ауылы тороп ҡалған), Шишмә, Дәүләкән, Бүздәк (көнбайыш өлөшө), Әлшәй, Миәкә, Бишбүләк, Ырымбур өлкәһенең Красногвардейск һәм Александровка райондарының башҡорт ауылдарын үҙ эсенә ала. Һарытау өлкәһенең Пугачев һәм Перелюб райондарындағы ете башҡорт ауылының, шулай уҡ Һамар өлкәһе Оло Глушица һәм Оло Черниговка райондарының башҡорт ауылдарындағы «иҫкеләр» тип аталған төркөмдәренең һөйләү теле шулай уҡ дим һөйләшенә ҡарай.

Был территорияла элек-электән мең һәм көҙөй ҡәбиләләре йәшәгән. Мең ҡәбиләһе нигеҙҙә ете ырыуҙан торған: күл илемең, ҡырҡ өйлө-мең, ҫыбы-мең, меркет-мең, ҡобау-мең, төп мең, ҫарылы (ҫарайлы)-мең[1]. Әммә ырыуҙар һаны һәр ваҡыт

---

[1] *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа: Этнический состав, история расселения. М.: Наука, 1974. 300-сө бит.

бер төрлө генә булып тормаған. Мең ҡәбиләһе составында йәнә илекәй-мең, яйыҡҫыбы-мең, өршәк-мең ырыуҙары бар. Ә бына мең башҡорттарының Алексей Михайлович батшаға 1671 йылда яҙылған ер бүлеү тураһындағы хатынан күренеүенсә, меңлеләр ул дәүерҙә үҙҙәренең дөйөм аҫаба биләмәләрен ун бер ырыу араһында бүлешеп, ырыу биләмәләренең сиктәрен билдәләп, ҡағыҙға теркәп ҡуйғандар[1].

Меңлеләрҙең хәтерендә бик үҙенсәлекле тарихи легендалар һәм риүәйәттәр һаҡланған. Боронғо ырыу шәжәрәләренең береһендә әйтелгәнсә, мең башҡорттары үҙҙәренең нәҫел тамыры һун башлыҡтарының береһе Баламирға барып тоташа тип иҫәпләй[2]. Төп мең ырыуы шәжәрәһе һәм риүәйәттәрендә иһә XIV быуатта йәшәгән Мең һаҙаҡлы Ураҙас бей ырыуҙы башлап ебәреүсе тип күрһәтелә. Меңлеләр араһында үҙҙәренең нәҫел ағасын төҙөүсе күп кенә ауылдар, аралар шәжәрәләрен ғәҙәттә нәҡ ана шул алыҫ олаталары Ураҙас бейҙән башлап ебәрәләр. Был йәһәттән Благовар районында йәшәүсе күренекле тыуған яҡ белгесе Рәйес Ғәйнислам улы Ҡорбанғоловтың тикшеренеүҙәрен өлгө итеп ҡуйырға мөмкин. «Миңә меңлеләрҙең шәжәрәһе һәм бүтән төрлө документтар буйынса беҙҙең утыҙынсы быуынға, йәғни Ураҙас бейгә тиклемге ата-бабаларыбыҙ билдәле», – тип раҫлай ул Икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының «Башҡорт халҡының демографияһы: үткәндәр һәм бөгөнгө» тигән секцияһында уҡылған докладында[3].

Дим һөйләше территорияһының төньяҡ-көнсығыш төбәгендә – Иглин һәм Нуриман райондарында көҙөй ҡәбиләһе, шулай уҡ (Әҫем буйында) ҡобау-мең ырыуы башҡорт ауылдары урынлашҡан.

Меңлеләр, урындағы боронғо, яҙма тарихҡа тиклемге дәүерҙә йәшәгән ырыу-ҡәбиләләр менән ҡатнашып, ошо ерҙең төп хужалары булып формалашҡан. 1574 йылда батша

---

[1] Раздельное письмо башкир-минцев царю Алексею Михайловичу / Башкирские шежере. Уфа: Башкирское книжное издательство, 1960. 223 – 224-се, 225 – 229-сы биттәр.

[2] *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа: Этнический состав, история расселения. 305-се бит.

[3] II Всемирный курултай башкир. 14–15 июня 2002 года: Документальные материалы. Стенографический отчет. Уфа: Китап, 2002. 484-се бит.

властары башҡорттарҙың үтенесе буйынса Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалырға булғас, ҡәлғә һалынасаҡ урынды, ер өсөн аренда хаҡы түләү шарты менән, меңлеләрҙең ризалығынан сығып һайлаған. Башҡорт иленең боронғо баш ҡалаһы – 1600 йыллыҡ тарихы булған Өфө-II йәки Башҡорт ҡалаһы шулай уҡ меңлеләр территорияһында урынлашҡан.

Дим һөйләше тарихи планда төп меңлеләрҙең һәм көҙөйҙәрҙең һөйләү теле булһа ла, был территорияға төрлө ваҡыттарҙа күп кенә бүтән ырыу һәм ҡәбилә вәкилдәре килеп ултырған. Улар араһында ҡыпсаҡтар, ҡаңнылар, бөрйәндәр, тамъяндар, табындар, ғәйнәләр, ҡатайҙар һ. б. бар. Төрлө ырыу-ҡәбилә атамалары Дим һәм Ырғыҙ буйҙарының топонимияһында ла сағылыш тапҡан. Дим, Сәрмәсән буйында, мең ауылдары менән күрше булып, мәҫәлән, Ҡыпсаҡ-Асҡар, Яңы Ҡыпсаҡ, Ғәйнәямаҡ, Тауҡай-Ғәйнә, Кесе Ғәйнә, Сәтәй-Бөрйән, Тамъян-Таймаҫ (Әлшәй һәм Миәкә райондары), Ҡаңны-Төркәй (Бүздәк районы) ауылдары урынлашҡан. Атаҡлы урыҫ яҙыусыһы, беҙҙең яҡташыбыҙ С. Т. Аксаков (1791–1859) Асылыкүлде үҙенең әҫәрҙәрендә, уның икенсе исеме менән, Ҡаратабын күле тип атаған (Дәүләкән районындағы Буранғол һәм Ҡыҙрас ауылдарының халҡы – XVIII быуат урталарында Асылыкүлдең көньяғына килеп урынлашҡан ҡара табын ырыуы башҡорттары). Һамар һәм Һарытау өлкәләрендәге башҡорт ауылдарының барыһы ла тип әйтерлек этник планда күп составлы. Бында, мәҫәлән, бер үк ауылда бөрйән, табын, ҡыпсаҡ, түңгәүер, үҫәргән, ҡатай, бишул һымаҡ ырыу һәм ҡәбилә вәкилдәрен осратырға мөмкин. Ә инде һөйләш территорияһында барған ҡатмарлы этногенетик процестар иң элек уның лексикаһында сағылыш таба. Профессор Н. Х. Ишбулатов һүҙҙәре менән әйткәндә, «был һөйләшкә күп төрлө халыҡтың теле ҡарағайлыҡтан, эҙмә-эҙлелек, берҙәмлек юҡ»[1].

Дим һөйләше көнбайыштан – түбәнге ағиҙел-ыҡ, көнсығыштан – эйек-һаҡмар һәм өршәк, төньяҡтан ҡариҙел һөйләштәре менән сиктәш. Дим буйы асылда башҡорттар йәшәгән территорияның урталығында урынлашҡан. Төньяҡ-көнбайыш менән дә, көньяҡ һәм көнсығыш башҡорттары менән дә

---

[1] *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 148-се бит.

оҙайлы контакттар һөйләштең лексикаһына һәм морфологияһына һиҙелерлек йоғонто яһаған.

«Һөйләш таралған территория һәм уның сиге, – тип күрһәтә Н. Х. Ишбулатов, – **ç** өнөн ҡулланыу менән билдәләнелә. Башҡорт һүҙҙәрендә **һ** өнө урынында **ç** өнө йөрөй: *çыйыр, çарыҡ, çыу, çыуçаçа, çуған, çибеү, çаçыҡ.* **ç** өнө лә үҙ урынында ҡала: *баç, аçыл, баçа, ҡыçҡа*»[1].

Дим һөйләше башҡорт диалектология фәнендә иң ентекле өйрәнелгән һөйләштәрҙең береһе. Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында уҡ әле Ғәббәс Йәғәфәр улы Дәүләтшин уны үҙ аллы һөйләш булараҡ билдәләй һәм Дим башҡорттарының һөйләше тип атай. Таһир Ғәлләм улы Байышев классификацияһы буйынса, ул – *ç* һөйләше (наречие *ç*). Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыçҡаса инеш» (1958) тигән билдәле мәҡәләһендә хәҙерге дим һәм ҡариҙел һөйләштәре берләштерелеп, дим-ҡариҙел һөйләше тип билдәләнелә. Ләкин артабан башҡорт диалектология фәнендә ул бер генә исем менән – дим һөйләше тип йөрөтөлә. Һөйләш Сәриә Фазулла ҡыҙы Миржанованың «Башҡорт теленең көньяҡ диалекты» («Южный диалект башкирского языка». М.: Наука, 1979) тигән киң билдәле монографияһында тәү башлап махсус өйрәнелде. Урал Фазулла улы Нәҙерғоловтың «Ырғыҙ-Кәмәлек башҡорттары» («Иргизо-камеликские башкиры». Уфа: Китап, 1996) тигән китабы Һамар һәм Һарытау өлкәһе башҡорттарының йәнле һөйләү телен шулай уҡ монографик планда өйрәнеүгә арналған. Нәғим Хәжғәли улы Ишбулатов үҙенең «Башҡорт теле һәм уның диалекттары» (Өфө: Китап, 2000) тигән китабында (148–152-се биттәр) дим һөйләшенең төп фонетик, морфологик һәм лексик үҙенсәлектәрен эҙмә-эҙле билдәләп үтә. Ә 2009 йылда өлкән быуын лексиколог һәм диалектологтарыбыҙҙың береһе Урия Мөхәмәт ҡыҙы Яруллинаның үҙ ваҡытында баçылмай ятып ҡалған хеҙмәте – «Дим һөйләшенең лексикаһы» («Лексика дёмского говора». Уфа, 2009) тигән китабы донъя күрҙе.

Күренеүенсә, дим һөйләше электән үк диалектологтарҙың иғтибарын йәлеп итеп килгән.

---

[1] *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 148-се бит.

С. Ф. Миржанова дим һөйләшендә ҡайһы бер диалекталь үҙенсәлектәр буйынса түбәндәге ике һөйләшсә булғанлығын раҫлай: 1) төньяҡ-көнсығыш, йәғни көҙөй һөйләшсәһе һәм 2) көньяҡ-көнбайыш, йәғни Туҡ һәм Кәмәлек буйы башҡорттарының һөйләү теле.

### *Һөйләштең төп фонетик үҙенсәлектәре*

Дим һөйләшенең төп үҙенсәлектәренең береһе, алда әйтелгәнсә, төп башҡорт һүҙҙәрендә бөтөн позицияларҙа ла ***h*** өнө урынына **ç** өнөн ҡулланыу менән билдәләнә. Бүтән диалекталь билдәләр менән бергә, иң элек ошо билдә буйынса ул үҙ аллы һөйләш буларак айырымлана, ти С. Ф. Миржанова. Был өндө Сәриә Фазулла ҡыҙы интердекталь һаңғырау тартынҡы тип атай. «Башҡорт теленең диалектологик атласы»н төҙөүселәр иһә алғы рәт ҡалын тартынҡы өн (переднедентальный твердый согласный) тип иҫәпләй һәм уны, интердекталь йомшаҡ **ç** өнөнән айырмалы рәүештә, апостроф билдәһе аша күрһәтә: **ç**[1]. Һөйләштә ***h*** өнө бар, әммә ул ғәрәп-фарсы һүҙҙәрендә генә ҡулланыла һәм күп ваҡыт төшөп ҡала: *һауа-ауа, һаман-аман, һөнәр-үнәр, һиммәтле-иммәтле, һуш-уш, һануз-ануз-хануз, Гөлжиһан-Гөлжыйан* (кеше исеме).

Көнсығыш башҡорт һөйләштәренән һәм әҙәби телдән айырмалы рәүештә, дим һөйләшендә **а** өнө һүҙҙең беренсе ижегендә иренләштереп әйтелә: *а̊ҙыҡ, а̊лбаҫты, ба̊бай, ба̊ҡа, ба̊т, ҡа̊ты, ҡа̊ҡы, ҡа̊йҙа, һа̊ман, а̊ғартыу*. Был үҙенсәлек буйынса дим һөйләше көньяҡ-көнсығышта эйек-һаҡмар һөйләшенең эйек-юшатыр зонаһы, төньяҡта ҡариҙел һәм танып һөйләштәренә яҡын тора. Беренсе ижектә **а** өнөнөң иренләшеүе татар теленең урта диалекты минзәлә, ҡаҙан аръяғы һәм тау яғы һөйләштәре өсөн дә характерлы. Бындай күренеш боронғо Волга буйы болғар тел мөхитенә хас үҙенсәлектәр менән бәйле[2].

---

[1] Диалектологический атлас башкирского языка. Уфа: Гилем, 2005. 39-сы бит.

[2] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 174-се бит.

Һөйләштә һүҙҙең нәҙек варианттары йышыраҡ ҡулланыла: *бәшкүнәк* – әҙәби телдә *башкүнәк, өйпәләү – ойпалау, мәгәйен – могайын, беҙәү – быҙау, безәүләү – быҙаулау, сеңәрсәй – сыңарсай, келтембей – ҡылтымбый, никәшеү – ныҡышыу, ләйәкәтле – лайыҡлы.* Ҡайһы бер һүҙҙәр ике сингармоник вариантта ла ҡулланылып йөрөй: *атай-әтәй, серләшеү-сырлашыу, сер-сыр.*

Һүҙ башындағы **б** өнөнә һирәкләп һаңғырау **п** өнө тап килә: *песән* – әҙәби телдә бесән, *палаҫ* – балаҫ, *пәке* – бәке, *пыйала* – быяла, *пысҡы* – бысҡы, *пысыраҡ* – бысраҡ, *пышҡырыу* – бышҡырыу.

Һүҙ башында **т** өнөнөң яңғырауланыу күренеше күҙәтелә: *дамға* – әҙәби телдә *тамға, дары – тары, дарма – тарма, дирән – тәрән, дән – тән, дуғарыу – туғарыу.*

Айырым осраҡтарҙа әҙәби телдәге **е (э)** өнөнә **ө** өнө тап килә: *дөбөт – дебет, сөпрәк – сепрәк, сөй йер – сей ер, ҡыр көйөкләре – ҡыр кейектәре.*

Дифтонгыларҙың монофтонгыларға әйләнеү осраҡтары бар: *мис* – әҙәби телдә *мейес, умас – ыумас, пима – быйма, ҫөрәү/ ҫүрәү/ ҫөйрәү – һөйрәү, өрәтеү/ үрәтеү – өйрәтеү.*

Ҡайһы бер һүҙҙәрҙә һүҙ башындағы **с** өнө **т** өнөнә күсә: *төсө – сөсө, тысҡан – сысҡан, төскөрөү – сөскөрөү.* Был күренеш төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡариҙел һөйләше өсөн дә характерлы.

Дим һөйләше ғәрәп-фарсы һәм урыҫ телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **з** өнөнөң **ҙ** өнөнә күсеүе йәһәтенән төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенә яҡын тора: *ҙаман* – әҙәби телдә *заман, ҙабут – завод, ҙыйарат – зыярат, ҙыйан – зыян, йаҙа – яза, арҙан – арзан, умырҙайа – умырзая, ҡаҙарма – казарма.* Һүҙ башында **з** өнө урынына **ҙ** өнөнөң килеүе минзәлә, урта һәм ҡариҙел һөйләштәрендә лә күҙәтелә.

Һуҙынҡынан һуң **л** һәм **н** өндәренән башланған ҡайһы бер ялғауҙар һәм киҫәксәләр **ҙ** өнөнән башлана. Мәҫәлән: *ҡалаҙа* – әҙәби телдә *ҡалала, Уфаҙа – Уфала, Ташлыҙа – Ташлыла, ҡалаҙан – ҡаланан, бармаҙы – барманы, ҡайҙаҙыр – ҡайҙалыр, кемеҙер – кемелер, атаҫы ҙа – атаһы ла, һәммәҫе ҙә – һәммәһе лә, белмәҫә ҙә – белмәһә лә.*

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Һөйләштә төп килеш формаһы, үҙенең төп мәғәнәһенән тыш, төбәү килеш урынына ла ҡулланыла: *Дәүләкән китте* «Уехал в Давлеканово», *Уфа барып ҡайттым* «съездил в Уфу», *Балны мәгәҙин ҡуя башлаҙылар* «Мёд начали сдавать в магазин».

Көньяҡ диалекттың бүтән һөйләштәренән һәм әҙәби телдән айырмалы рәүештә, эйәлек һәм төшөм килеш ялғауҙары ***-н*** өнөнән башлана һәм *-ның/-нең, -ны/-не* формаһында килә: *атның, çыйырның, Димнең, тауның, ташның; атны, çыйырны, Димне, тауны, ташны.*

*Ал, арт, аç, өç* һүҙҙәрендә ***-ы/-е*** эйәлек ялғауы янына өçтәп, йәнә *-çы/-çе* эйәлек ялғауы ҡушыла: *сынаяҡ аçтыçы, сынаяҡ өçтөçө, мис алдыçы, өй алдыçы, гөнаһаçы/ гөнаһыçы.*

Ҡылымдың шарт һөйкәлеше әҙәби телдәге *-һа/-һә* (һөйләштә *-çа/-çә*) ялғауы менән яһала: *барçа, килçә; барçам, килçәм.* Шул уҡ ваҡытта уның тағы бер нисә төрлө ҡатмарлы варианттары ла бар: *барҙым иçә, барҙыйçәм, барҙыйçәк, барҙыниçәм, барҙыниçәк.*

Әҙәби телдәге *нимә?* һорау алмашына *ней? нәрçә? нәçтә? нейәçтә? нейәрçә?* алмаштары тап килә.

Һөйләштә *ине* ярҙамсы ҡылымы йыш ҡына *эйе* формаһында ҡулланыла: *килгән эйе, барған ийе.*

Сығанаҡ килештәге һүҙҙәр менән *киргеçен/кергеçе* «после», *бирлеге* «с», *алатын* – әҙәби телдә: *алып* «до, до сих пор» бәйләүестәре килә: *кисәнән киргеçен, баянан бирлеге; Ҡыйыҡтан алатын ҡар ҡаплай торған ийе.*

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Дим һөйләшенең төп һүҙлек составы нигеҙҙә дөйөм халыҡ теле менән уртаҡ. Шул уҡ ваҡытта һөйләштең лексикаһы шаҡтай ҡатмарлы. Был күренеш уның ғәйәт ҙур территорияға һуҙылып китеүе, башҡорт теленең бер-береһенән айырымланып торған өс диалекттың да һөйләштәре менән контактҡа кереүе һәм, әлбиттә, һөйләштең, меңлеләр менән бергә, күп кенә бүтән ырыу-ҡәбилә төркөмдәрен берләштереп тороуы арҡаһында барлыҡҡа килгән. Бер яҡтан, ул төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенә яҡын тора.

С. Ф. Миржанова билдәләүенсә, тарихи планда был ике һөйләштең тамырҙары бер үк булырға тейеш. Дим һөйләшенә хас фонетик үҙенсәлектәр элек Түбәнге Ағиҙел-Ыҡ буйы башҡорттарының һөйләү теле өсөн дә характерлы булған. Дөйөм диалекталь үҙенсәлектәр хәҙерге ваҡытта ла морфологияла һәм лексикала, бигерәк тә этнографик лексика ҡатламында күҙәтелә[1]. Мәҫәлән, был ике һөйләш өсөн дә ошондай уртаҡ лексик диалектизмдарҙы билдәләп үтергә мөмкин:

| Дим һөйләше | Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше | Тәржемәһе |
|---|---|---|
| *аҫаба* | *аҫаба* | *«вотчинник»* |
| *аҫалы балаҫ* | *аҫалы балас* | *«узорный палас»* |
| *баҡрас* | *баҡрач* | *«медный половник»* |
| *йарматаш* | *йарпташ* | *«ручная мельница»* |
| *муйынса/муйҫа/ муйынҫа* | *муйынса* | *«украшение из монет надеваемое на шею»* |
| *ҡонайын* | *ҡонадин* | *«нетель»* |

Дим һәм Ҡариҙел буйы башҡорттарының һөйләү телендә ҡариҙел һөйләше аша бүтән төньяҡ (бер яҡтан – ғәйнә, танып, икенсе яҡтан – әй) һөйләштәре өсөн уртаҡ лексик ҡатлам да билдәләнә. Бындай һүҙҙәр йыш ҡына семантик диалектизмдар барлыҡҡа килтерә. Мәҫәлән: *тыраҡтай* – дим һөйләшендә *ҡыҫҡа* «куцый» (о платье); ҡариҙел һөйләшендә – *нәҙек сираҡлы* (ҡыҙ балаға ҡарата) «тонконогая (о девочке)»; әй һөйләшендә – *ҡорбан балығының иң вағы* «маленький лещ».

Дим һөйләшенең көньяҡтан – әйек-һаҡмар һөйләшенең әйек-юшатыр зонаһы, көнсығыштан – өршәк һәм урта һөйләштәргә сиктәш булыуы шул һөйләштәр өсөн уртаҡ һүҙҙәр ҡатламын барлыҡҡа килтергән. Был ҡатламды С. Ф. Миржанова бөтөн көньяҡ диалекттың көнсығыш диалекттан айырымланып торған үҙенсәлекле лексик байлығы тип атай һәм ошондай миҫалдар килтерә: көньяҡ диалектта – арҡалыҡ, көнсығыш диалектта – *һырттыҡ* «чересседельник»; *баған, ҡыуал – һырғауыл, һырғый, шыптағай* «высокий столб для

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 218-се бит.

лазания во время сабантуя»; *бөрләтәү, бөҙөрләтәү, беркәтәү, бүркәтәү – богаҡ* «зоб»; *иҙелмә, ауыҙ иҙелмәçе – телбешмә, бешмә, бешкәк, ауыҙ бешкәге* «ящур»; *йабага, йабаҡ – ҡау, ҡауҙан* «весенняя линька»; *йөҙлөк – ҡаҙна, ҡаҙнаҡ, ширҙек* «облицовка нар»; *малахай – тупый* «мужская шапка» һ. б.

Дим һәм урта һөйләштәр араһындағы лексик уртаҡлыҡтарға миçалдар: *ауыç/ауыçҡал* – әҙәби телдә *алйот*; *бесләк – бысый* (күҙ тураһында); *бетеүле йурган – ҡорама юрган; бибеш/бипеш – себеш; диха, дихайат – ете ят* «родственник седьмого колена»; *әберкә – балитәк* «оборка». Дим һәм ҡариҙел һөйләштәре өсөн уртаҡ лексик диалектизмдар: *аçа/аса* – әҙәби телдә бәç «иней», *диңгеж/дөңгәж/диңгеш* – иңкеш «шмель», *мираж – бирән* «водянка», *пәләк/бәләк – тараҡан, сөңгөлдәк/сөңкөлдәк* – 1) *мыгырҙаҡ* «ворчун», 2) *ҡылансыҡ* (дим, ҡыҙыл) «кокетка», *әгәр – арҙан* «кобель», *мәмешкәк – дунала* «боярышник».

Һөйләштең үҙенә генә хас диалекталь лексика тематик планда хужалыҡ, тормош-көнкүреш, рухи мәҙәниәт, кәсеп һәм шөғөлдәр, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, һауыт-һаба, йортҡура, кешенең анатомияһы, холоҡ-фиғеле, тирә-яҡтағы тәбиғәт, үçемлектәр һәм хайуандар донъяһы, микротопонимия менән бәйле, ул башлыса лексик-семантик һәм фонетик диалектизмдарҙан тора. Дим буйы башҡорттары элек-электән йылҡысылыҡ, ҡымыҙ етештереү менән дан тотҡан, ҡатынҡыҙ бында аçалы балаçтар һуғыу оçталары булараҡ танылыу алған. Төбәктең үҙенә генә хас рухи донъяһы, йолалары, традициялары, фольклор байлыҡтары быуындан быуынға тапшырыла килгән. Был үҙенсәлектәр диалекталь лексиканың ғәйәт бай ҡатламын формалаштырған.

Башлыса дим һөйләшенең үҙенә генә хас лексик диалектизмдар: *арата* – 1) *баçҡыстың арҡыры таяҡтары* «перекладина лестницы», 2) *арбаның аçҡы күкрәге менән үрәсәһен тоташтырган тояҡтары* «лисицы (телеги)»; *билләмә* – әҙәби телдә *биллек «поперечные ремни* (у шлеи)»; *дөдө – 1) телһеҙ, немой, 2) тупаç* «тупой»; *дөйә муйыны – дөйәнең муйын тиреһенән эшләнгән көбө; бөлдөргә – мөлдөрәмә* «темляк»; *сәргәй – ташбаш* «пескарь»; *тыстый – ҡомай* «пескарь»; *çыҙгы, çыҙгыс – ширпы* «спички»; *çыйыр лапаçы – арбаҙ «хлев»; çылапа – әрпеш* «неряха», *çынçыҙ – таçылһыҙ*

«неумелый»; *ҫыулыҡ – ҡултыҡ* «затон», *ҫаҙмырт – һаҙлыҡ* «болотистая местность», *ҫаңғыратыу – шаңғытыу* «оглушить»; *балыҡ ҫаңғыратырға барҙыҡ; ҫары сискә – бәпембә* «одуванчик»; *ҫол – таҫыл* «умение, сноровка», *ҫолло – таҫыллы* «умелый, сноровистый»; *кизеле таҫтымал – сигеүле киндер таҫтамал* «вышитое льняное полотенце»; *ҫоңҡолдауыҡ – һөҙһөт* «удод»; *ҫороҡорт – әре ҡорт* «трутень»; *ҫөйәм – ая* «единица измерения шириною в четыре пальца»; *бесәй бәрәмәсе – бесәй табаны* «просвирняк»; *айаҡ ыуылдығы – балтыр* «икры ног»; *ҫоҫа/ҫуҫа* – 1) *һоҫҡо* «совок», 2) *һоҫа* «челнок»; *пырҙамҫыҙ* – 1) *көсһөҙ, пырҙамҫыҙ ат,* 2) *мәғәнәһеҙ* «бестолковый». *Пырҙамҫыҙ, ҡабара ҙа китә; пыҫылыу – бүҫелеү, һуҙылыу* «растягиваться (о ткани)», *йаулыҡтың осо пыҫылып барып сыға; йалдым – ятыу* «омут»; *әпәй асыҫы – әсетке* «закваска»; *әтәмбәй башҡорт – һуңыраҡ килеп ултырған башҡорт; йеҙә – шаран* «плетневое заграждение, расставленное с двух сторон морды»; *йелей – юртаҡ* «рысак»; *шешәрә – сөсө ҡамырҙан майҙа бешерелгән күмәс; ҫәлбер – муйынса суғы* «кисти нагрудника», *баҡырса – ижау* «половник»; *баһымбаҡ/баҡ-баҡ/бәпем – бәпембә* «одуванчик»; *даҫлау/тәҫләү – тәңкләп һалыу* «сложить аккуратно, по порядку (о вещах)»; *тоҡ-томан – тик торғанда* «вдруг».

Дим һөйләшен географик йәһәттән дә, фонетик, морфологик, айырыуса лексик планда ла көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш, күпмелер дәрәжәлә көнсығыш диалект һөйләштәренең урталығында торған бер зона тип атарға була.

*Һөйләү теле өлгөһө*

*Йегет нисек кәләш тапҡан*

*(Әкиәттән өҙөк)*

Бай кетеүсеҫенән ҫорай: – Нейә бы уахытта алып ҡайттың кетеүҙе? – Бәй, бит йоҡлап киткәм, төш уахытында ҡойаштың байығанын күрҙем, шул төштө йуры, тигән кетеүсе байға. Теге бай йәш кенә булҫа кәрәг инде. – Йуҡ, мин был төштө йурый алмаймын, мына фәлән йерҙә бер төш йурыусы бар, шунда бар ҫин, – тигән, – ул йурыр. Йарар, был сығып китә, теге төш йурыусыға бара. Төш йурыусы мыңа әйтә: «Бы

төшөңнө ҫат миңә, үҙем йуллайым бы төштө», – тей. Йарар, мыңа әйтә: «Үҙемә етәрлек йуллыҡ нейен алам да ҡалғанын бис ҫиңә бирәм дә гитәм». Былар ризалашалар.

Төш йурыусы теге төштө йуллап китә хәҙер. Китә, китә, урманнар үтә, кейемнәре туҙыбөтә. Хәҙер бер урман араҫында бер аланныҡ, асыҡ йерҙә бер пыйала йорт, бәк матур, көҙгөлө шундай, өй араҫында ҫарайлар ҙа бар. Бер бәләкәс кенә йорт була, шуңа барып керә был. Анда була бер әбей. Бы әбей белеп тора тегенең ней өсөн кигәнен. «Улым, мунса кер», – тей, күлмәг-ыштан бирә. Теге әбей әйтә: «Мына ошо быйала йорттоң эсендә бер ҡыҙ бар, тей, ҡойаш ҡыҙы, шундай матур. Шул ҡыҙ өсөн килгәнҫең, – тей. – Аңа керерҫең, анда кергән сағыңда ике дөлдөл булыр, толпар, – тей. – Шуларҙы уңдағыҫын ҫулға, ҫулдағыҫын уңға алыштырып бәйләп кер, – тей, – кергәндә икеҫе ҙә бер төҫ алыр, – тей. – Йара, шунан кергәс тә ҡыҙ ҫиңә ҫикереп торор, сәй утыртыр, урындыҡ бирер, тей. – Ул биргән утырғысҡа утырма, – тей, – икенсеҫенә утыр. Шунан ҫинең ҡулыңны йыуҙырыр, шунан таҫтымал бирер. Ул биргән әйбергә береҫенә ҙә нейтмә, ҫин үҙеңсә эшлә, сәй яҫап бирер, ҫин эсмә, үҙең йаҫаб эс, аның йаҫағанын эсмә», – тей.

Йарар, бы әбей өйрәтеп кертте бит. Бы хәҙер ҡыҙ йанына теге быйала йортҡа керергә бара. Теге толпарларҙы алыштырып бәйләп керҙе. Уңдағын ҫулға, ҫулдағын – уңға. Теге ҡыҙ шундай ҫылыу була инде, ҡойаш ҡыҙы бит. Урындыҡ бирә, аңа утырмай, ҡулларын йыуҙырта, таҫтымал бирә, аны алмай, икенсе таҫтымалға ҫөртә был малай. Сәй яҫай, теге малай үҙе яҫаб эсә. Теге ҡыҙ ҙа асыуы килә башланы инде. Хәҙер ҡыҙ ҫикереп тороп сыға ҙа уңдағы толпарҙы менә ҙә саба. Тегеҫе тегеҫен менә ҙә ҡыҙҙы тота китә. Ҡыҙға барып йетә ҫыуға. Бы ҫыу ҫөт күле була. Барып ҫөт күленә барып төшөп китәләр икеҫе ҙә. Шунда барып төшкәс, теге ҡыҙ туҡтай, шундуҡ әйтә: былай булғас, егет, ҫин минеке, мин ҫинеке булышабыҙ хәҙер.

*1965 йылда Башҡорт АССР-ы Миәкә районы*
*Бикҡол ауылында Вәлиев Ибраһимдан (1909 йылғы)*
*яҙып алынған (Образцы башкирской разговорной речи.*
*Уфа, 1998. 185–186-сы биттәр).*

*Тәржемәһе*

*Как джигит невесту находит*

*(Отрывок из сказки)*

Бай спрашивает у своего пастуха: «Зачем в это время привел стадо?» «Я заснул в полдень и увидел во сне, что солнце закатилось. Растолкуй этот сон», – сказал пастух. Тот бай, видимо, был очень молодым. «Нет, этот сон я не могу растолковать, где-то там есть один толкователь. Ты иди туда, он разгадает». Пастух к тому человеку идет. Толкователь снов говорит: «Продай мне свой сон». «Ладно, – говорит пастух, – я возьму необходимое на дорогу, все остальное тебе оставлю». На том они соглашаются. Пастух снова идет искать разгадку сна. Идет, идет, через леса идет. Одежда вся износилась. Видит, среди леса поляна, на поляне стоит очень красивый стеклянный дом. Зеркальный такой, вокруг сараи и маленький домик. Заходит он туда. Там сидит одна старуха. Она уже знает, зачем он пришел. «Сын мой, в бане помойся, – дает белье и говорит, – вот в этом стеклянном доме есть девушка – дочь солнца. Такая красивая, ради нее ты приехал. Когда будешь заходить к ней, увидишь двух тулпаров. Тулпара, что стоит справа, переведи на левую сторону и привяжи. Оба они одной масти. Как только зайдешь, девушка вскочит навстречу тебе, поставит чай, подаст стул. На поданный ею стул не садись, садись на другой, потом тебе полотенце даст, не бери. Ни одну вещь, поданную ею, не трогай. Чай наливай сам». Так сказала старуха и пастуха отправила к тому стеклянному дому. Юноша все сделал так, как его научила старуха. Зашел в дом и увидел девушку. Девушка такая красивая была, ведь дочь солнца! Она стул подает, юноша на этот стул не садится, полотенце подает, не берет он ее полотенце, другим вытирается. Чай наливает девушка, юноша не пьет ее чай, сам себе наливает. Девушка в гневе. Она выскакивает и садится на тулпара, что справа стоит, и скачет. Юноша садится на другого тулпара и скачет вслед за девушкой. Девушка достигает озера, оно оказывается молочным. Она бросается в озеро, он – за ней. Уже в воде девушка останавливается и говорит: «Раз так, джигит, ты мой, я твоя».

## 3. Өршәк һөйләше

*Биләгән территорияһы, халыҡтың этник составы*

Өршәк һөйләше Башҡортостан Республикаһының Ауырғазы, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы, Стәрлетамаҡ, Әлшәй райондарының нигеҙҙә Өршәк йылғаһы бассейнында урынлашҡан башҡорт ауылдары халҡының йәнле һөйләү теле булараҡ айырымлана. Улар түбәндәге тораҡ пункттар: Ауырғазы районында – Мораҙым, Төрөмбәт, Уҫман (Ҡаҙморон), Нәжметдин (Ҡарағайлы), Юлдаш, Түрҫәгәҙе, Игенсе (Күккәзә), Иҫке Этекәй (Дүртөйлө), Яңы Этекәй (Дүрттояҡ), Миңнебай (Дөйәбатҡан), Өсбәлеш (Туғай), Түбәнге Бәгәнәш (Әбүкән, Яран) һәм Болаш; Дәүләкән районында – Иҫке Мерәҫ, Яңы Мерәҫ, Яңы Йәнбәк (Япар Йәнбәк), Хөсәйен (Өҫәйен), Ҡаҙырғол; Ҡырмыҫҡалы районында – Иҫке Йәнбәк (Тау Йәнбәге), Иҫке Муса, Яңы Муса; Әлшәйҙә – Мырҙағол, Әбделкәрим (Маянған); Стәрлетамаҡ районында – Абдрахман, Яңы Абдрахман (Сумар) һәм Бәгәнәш ауылдары. Халыҡтың этник составы мең ҡәбиләһенең төп ике ырыуынан тора: меркет-меңлеләр һәм өршәк-меңлеләр. Меркет-мең ауылдары Өршәктең үрге һәм урта ағымында, Һыулы Ҡыҙыл, Ауырғазы, Түрҫәгәҙе кеүек вағыраҡ йылға буйҙарында, ә өршәк-меңдәр Өршәктең түбәнге ағымында урынлашҡан. Иҫке һәм Яңы Муса ауылдарында өршәк-меңлеләр менән бергә илекәй-мең һәм төп мең ырыуы аралары бар. Халыҡтың күпселек өлөшө аҫабалар, шул уҡ ваҡытта айырым ауылдарға этәмбәй башҡорттар һәм типтәрҙәр ҙә килеп ҡушылған.

Меркет-мең һәм өршәк-мең башҡорттары әүәлдән мең ҡәбиләһе составында айырым ырыу берәмеге булып, үҙ-ара тығыҙ аралашып йәшәгәндәр. 1667–1671 йылдарҙа меңлеләрҙең, аҫаба халыҡ булараҡ, Дим, Өршәк, Асылыкүл буйҙарындағы биләмә ерҙәрен ун бер ырыу араһында бүлешкән ваҡытта был ике ырыу башлыҡтары ла ҡатнаша. 1917 йылғы революцияға тиклем улар һәр ырыуҙың ауылдары үҙ ерендә һәм үҙ биләмәләрендә Меркет-мең һәм Өршәк-мең улустарына берләшеп йәшәйҙәр. Был иһә Дим буйы менән йәнәш, Өршәк буйында ла үҙенә генә хас йолалар, традицияларҙың, үҙенсәлекле рухи-мәҙәни берҙәмлектең формалашыуында мөһим

роль уйнай. Шуның бер күренеше булараҡ, мәҫәлән, Дим һәм Өршәк буйҙары башҡорттары араһында һәр береһе үҙенсә үткәрелгән йыйындар, тауға сығыу, ҡыҙҙар уйыны һымаҡ күркәм йолалар йәшәп килә. Халыҡтың үҙ инициативаһы менән үткәрелгән был байрам саралары, ауылдан ауылға эстафета рәүешендә тапшырылып, бесән ваҡыты еткәнгә тиклем дауам итер ине. Ә йолалар, традициялар, билдәле булыуынса, халыҡтың үҙ-ара берләшеп, аралашып, ырыуҙаштарҙың нәҫеллек ептәрен, тарихи аңын яңыртып, шулай уҡ йәнле һөйләү теленең бөтөнлөгөн һаҡлап тороуға булышлыҡ итә. Әйткәндәй, Өршәк һәм Дим буйында йыйындар уҙған быуаттың 50-се йылдар аҙағына, Хрущев дәүеренә тиклем үткәрелеп килде. Ә инде революцияға ҡәҙәр айырым улустар составында йәшәгән меркет-мең һәм өршәк-мең ырыуы башҡорт ауылдары Совет осоронда төрлө райондарға (барлығы биш районға) бүлгеләнеү арҡаһында үҙ-ара аралашып йәшәү мөмкинлеген юғалттылар. Өҫтәүенә, улар төпкөлдә, оло юлдарҙан ситтә тороп ҡалдылар. Ә инде шул уҡ ваҡытта, һөйләш үҙенсәлектәренең хатта хәҙерге дәүергә тиклем сағыштырмаса тотороҡлораҡ һаҡланыуы меркет-меңдәрҙең һәм өршәкмеңдәрҙең күбеһенсә нәҡ ана шул төпкөлдә, билдәле кимәлдә айырымланып йәшәүе менән дә бәйле.

Өршәк буйы башҡорттарының һөйләү теле оҙаҡ ваҡыттар диалектологтарҙың иғтибарынан ситтә ҡалып килде. Уны ғәҙәттә Дим һөйләше составына индереп йөрөттөләр. Өршәк буйы ауылдарында диалектологик материалдар тейешенсә йыйылманы. Бары тик уҙған быуаттың 80 – 90-сы йылдарында Ауырғазы районының Төрөмбәт урта мәктәбендә күп йылдар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән Рима Шамил ҡыҙы Алсынбаева урындағы һөйләште махсус өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Беҙҙең етәкселектә ул 2010 йылда «Башҡорт теленең өршәк һөйләше» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. Был хеҙмәттә Өршәк буйы башҡорттарының һөйләү теле үҙенсәлектәре фонетик, морфологик һәм лексик планда ғәйәт тулы яҡтыртыла һәм, шунан сығып, беҙ уны көньяҡ диалект составында үҙаллы һөйләш тип билдәләйбеҙ.

*Фонетик үҙенсәлектәре*

Өршәк һөйләше көньяҡ диалект һөйләштәренең нәҡ урта өлөшөндә сағыштырмаса бәләкәйерәк компактлы бер төбәк булып урынлашҡан. Көнбайыштан ул – дим, көнсығыштан – урта, көньяҡтан эйек-һаҡмар һөйләше менән сиктәш. Шул айҡанлы унда иң элек ошо һөйләштәрҙең өсөһө менән дә уртаҡ һыҙаттар урын алған. Ә инде дим һөйләшенә айырыуса яҡын тороуы был төбәк башҡорттарының теленә махсус иғтибар бирелмәүенә алып килгәндер тип әйтергә була. Ләкин өршәк һөйләше, дим һөйләшенә ни тиклем яҡын тороуға ҡарамаҫтан, барыбер үҙенә генә хас һыҙаттары менән айырымлана.

Өршәк һөйләшендә, дим һөйләшендәге кеүек, әҙәби телдәге **һ** өнө урынына **ç** өнө ҡулланыла, **ç** өнө ҡулланылған һүҙҙәрҙә лә ул үҙ урынында ҡала. Ошо өндө ҡулланыуға ҡарап, Дим һәм Өршәк буйы башҡорттарының теле традицион рәүештә бер үк зона тип иҫәпләнә. Т. Ғ. Байышев уны **ç** һөйләше тип атай. Әммә, бер үк хәреф менән билдәләнһә лә, өршәк һөйләшендәге был өн дим һөйләшендәге кеүек үк өн түгел. Ул йомшаҡ яңғырашлы интерденталь тартынҡы **ç** өнө. Дим һөйләшендәге **ç** өнө үҙенең яңғырашы менән әҙәби телдәге **ç** өнөнән айырылмай. Әҙәби телдә был өн ошолай характерлана: тел осоноң аңҡауға тейеүенән яһалған аңҡау-теш һаңғырау фрикатив тартынҡыһы. Башҡорт теленең диалектологик атласында иһә ул алғы рәт ҡалын тартынҡы өн тип атала. «Өршәк һөйләшендәге **ç** өнө артикуляция урыны һәм ысулы, тауыш ҡатнашлығы йәһәтенән әҙәби телдәге, дим һәм башҡа һөйләштәрҙәге **ç** өнөнөң барыһынан да ҡырҡа айырыла, – тип күрһәтә Р. Ш. Алсынбаева. – **ç** өнө өршәк һөйләшендә ошолай характерлана: тел осо алға сыға, телдең икенсе сите бер ни тиклем ярым түңәрәк формаһын алып, өҫкө ҡаҙыҡ тештәргә тейә. Телдең аҫҡы өлөшө саҡ ҡына күтәрелә. Телдең урта өлөшө аңҡауға табан күтәрелә. Өндө әйткәндә үпкәнән сыҡҡан һауа ағымы башҡа һаңғырау өндәрҙе әйткәндәгенән көслөрәк килә. Һауа ағымы тел аҫтынан да, өҫтөнән дә өрөлөп үтә, тел осон бер аҙ дерелдәтеп, тауыш һыҙғырыбыраҡ сыға»[1]. Был

---

[1] *Алсынбаева Р. Ш.* Уршакский говор башкирского языка. Диссертация на соискание ученой степени кандидата филологических наук (рукопись). Уфа, 2010. 51-се бит.

урында шуны иҫкә төшөрөп үтергә мөмкин: татар тел белгесе У. Ш. Байсура һөйләштәрҙәге өндәрҙе артикуляция урыны һәм ысулы буйынса характерлау яғында тора һәм, өндәрҙең әйтелешендә әҙәби телдән аҙ ғына айырмаларҙы ла үҙ аллы һөйләш тип ҡарау өсөн нигеҙ була ала, тип раҫлай[1]. Өршәк һөйләшендәге **ç** өнө – һөйләште айырымлаусы нәҡ ошондай билдәләрҙең береһе.

Өршәк һөйләшендә, дим һөйләшенән айырмалы рәүештә, **а** фонемаһы һүҙ башында, әҙәби телдәге кеүек үк, иренләшмәгән асыҡ һуҙынҡы өн булараҡ ҡулланыла: *алма, аҙаш, бағана, алйау;* дим һөйләшендә: *а°лма, а°ҙаш, ба°ғана, а°лйау;* әҙәби телдә: *алма, аҙаш, бағана, алйыу*. Дим һөйләшенә хас еңелсә иренләшкән **а** өнө иһә көньяҡ-көнсығышта әйек-һаҡмар һөйләшенең ашҡаҙар һәм стәрле зонаһына, төньяҡта – ҡариҙел һәм танып, төньяҡ-көнбайышта түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләштәренә тиклем тарала.

Һөйләштә һүҙҙең төрлө позицияларында әҙәби телдәге һәм башҡа һөйләштәрҙәге **а** өнөнөң **ы, у** өндәренә тап килеүе күҙәтелә: *сағаҙаҡ* – әҙәби телдә *һағыҙаҡ* «оса», *ахаҡ – аҡыҡ* «сердолик», *алдаҡ – алдыҡ* «вранье», *алабаға – алабуға* «окунь». Киреһенсә, **ы –а, у –а** сиратлашыуы ла булырға мөмкин: *сирут – сират* «очередь», *ырғазымбай – умырзая* «подснежник», *туры – тура* «прямой», *ызғырыу – ажғырыу* «кричать неистово», *былҡыу – балҡыу* «ярко гореть», *таҫтымал – таҫтамал* «полотенце», *йылау – илау* «плакать», *сытыйыу – сытайыу* «морщиться». Р. Ш. Алсынбаева билдәләүенсә, тар әйтелешле һуҙынҡыһының ***а*** һуҙынҡыһы урынына ***ы*** ҡулланылыуы өршәк һөйләше өсөн характерлы үҙенсәлектәрҙең береһе булып тора[2].

Бында шулай уҡ **о, ө, ү** өндәрен ҡулланыуҙа боронғо төрки теле менән уртаҡ фонетик үҙенсәлектәр һаҡланған: *боҫтау – буҫтау* «сукно», *тоҡмас – туҡмас* «домашняя лапша», *соңғолоҡ – һуңғылыҡ* «послед», *ғөмөр – ғүмер* «жизнь», *ҫом – һум* «рубль», *сөпрәк – сепрәк* «тряпка», *төйәү – тейәү* «грузить».

---

[1] *Байчура У. Ш.* Звуковой строй татарского языка, ч. 2. Казань, 1961. 352-се бит.

[2] *Алсынбаева Р. Ш.* Уршакский говор башкирского языка. Автореферат кандидатской диссертации. Уфа, 2010. 11-се бит.

Күп кенә һүҙҙәр алғы рәт **ә** һуҙынҡыһы менән дә, артҡы рәт **а** һуҙынҡыһы менән дә ҡулланыла: *асы/әсе* «горький», *аҡрын/әкрен* «медленно», *аумаҡай/әүмәкәй* «непостоянный, изменчивый, неустойчивый», *сапылдатыу/сәпелдәтеү* «плескать по воде». Был күренеш Кәмәлек буйы башҡорттарының телендә лә күҙәтелә. Р. Ш. Алсынбаеваның уны бер-береһенән бик алыҫта ятҡан ошо ике төбәктә йәшәгән халыҡтың үҙ-ара туғанлыҡ бәйләнештәре менән аңлатыуы ышанислы күренә. Тарихи баҫмаларға таянып, ул ошондай мәғлүмәт килтерә: XVIII – XIX быуаттар араһында меркет-меңдәрҙең Өршәк буйындағы Бәгәнәш-Әбүкән ауылынан 14 ғаилә Һамар губернаһына күсенеп, Кәмәлектең һул ҡушылдығы Селекле йылғаһы буйында Ҡондоҙло тигән ауылға нигеҙ һалалар. Ул ауыл хәҙерге ваҡытта урыҫ телендә Бобров Гай тип йөрөтөлә, халыҡ телендә тағы бер исеме – Бәгәнәш. Алда атап үтелгәнсә, төп Бәгәнәш (Әбүкән, Яран) ауылы Ауырғазы районында урынлашҡан[1].

Баҫымһыҙ тар **ы, е, о** һуҙынҡылары һөйләштә көслө редукцияға бирелә йәки бөтөнләй төшөп ҡала: *нәжгәй* – әҙәби телдә *нәжәгәй* «зарница», *ҡорт* – *ҡорот* «курут (один из видов молочного продукта)», *ҡорс* – *ҡорос* «сталь», *осҡр* – *осҡор* «зоркость глаза», *кәкре* – *кәкере* «кривой», *олгайыу* – *ологайыу* «стареть». Ә **ә, а** һуҙынҡылары тулыһынса редукциялана: *белкей/белки* – әҙәби телдә *бәләкәй* «маленько, маленький», *серкәй* – *серәкәй* «комар», *майлар* – *малайҙар* «мальчики».

Һүҙ башында **ы** өнө төшөп ҡалыусан: *ласын* – *ыласын* «сокол», *сын* – *ысын* «правда», *умас* – *ыумас* «затируха». *Мин әле лә ҫирәкләп умас угылайым* «Я и сейчас изредка готовлю затируху».

Башҡорт теленең урта һәм ҡариҙел һөйләштәрендә һаҡланған *-лт, -мт, -нт, -ңт, -мҡ, -нҡ* диссимилятив өн ҡушылмалары боронғо, реликт характерындағы фонетик күренеш иҫәпләнә. Өршәк һөйләшендә лә айырым һүҙҙәрҙә был өн ҡушылмаларын ҡулланылыу осраҡтары бар. Мәҫәлән: *өҙәңке* – әҙәби телдә *өҙәңге* «стремя», *ашанты* – *ашанды*

---

[1] *Алсынбаева Р. Ш.* Уршакский говор башкирского языка. Автореферат кандидатской диссертации. Уфа, 2010. 12-се бит.

«кушанье», *йыуынтыҡ – йыуынды һыу, йыуындыҡ* «помои», *сәңкеү – сәңгеү* «ныть от холода».

Исемдәрҙең эйәлек, төшөм, сығанаҡ килеш ялғауҙарында ***м, н, ң*** сонор өндәр йоғонтоһонда тартынҡыларҙың прогрессив ассимиляцияһы барлыҡҡа килә: *нд >нн: йанның* – әҙәби телдә *йәндең* «души», *йәнне – йәнде* «душу», *йаннан/ йәннән – йәндән* «от души»; *мд > мн: урамның – урамдың* «улицы», *урамны – урамды* «улицу», *урамнан – урамдан* «с улицы».

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Һөйләштә эйәлек затлы исемдәргә *-ны/-не* төшөм килеш ялғауы ҡушылып, *-çы+ -ны/-çе + -не* формаһында икеләтелгән эйәлек заты ялғауы барлыҡҡа килә: *бала+çы+ны, инә+çе+не*. Был форма «Урал батыр» башҡорт халыҡ эпосында ла ҡулланыла: *Йыртҡыс йәнлекте тотһа/Йәнлек оргасы булһа/ Ирле-бисә икәүһе/Йөрәгене һайлаган.*

Өршәк буйында яҙып алынған халыҡ йырҙарында фәҡәт башҡорт халыҡ классик йырҙарында ғына ҡулланылған *-тин, -дин (-ҙин)* рәүешле сығанаҡ килеш ялғауы ла осрай. Был ялғау «йырҙа эмоциональ биҙәк һәм шиғри нәфислек биреү өсөн хеҙмәт итә», тип күрһәтә профессор Ж. Ғ. Кейекбаев[1].

Р. Ш. Алсынбаева үҙенең хеҙмәтендә Өршәк буйы башҡорттарының йыр репертуарынан ошондай миçалдар килтерә:

Эстәрлеҙин Бәләбәйгә,
Бәләбәйҙин Самарға.
Çанауçыҙ көннәр бар ине,
Ҡалды инде çанарға.

* * *

Ҡыблаларҙин елләр иççә,
Яумай үтәрлек түгел.
Çиңә булған мәхәппәтем
Мәңге бөтәрлек түгел.

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы (Уҡыу ҡулланмаһы). Өфө: БДУ, 2002. 55-се бит.

Ж. Ғ. Кейекбаев билдәләгәнсә, *-тин, -дин* рәүешле сығанаҡ килеш ялғауы хәҙерге төрки телдәренән фәҡәт уйғыр теле өсөн генә хас. «Боронғо уйғыр телендә лә (VIII–XII быуаттар) сығанаҡ килештең ялғауы *-тин, -дин* рәүешендә булған», – ти Ж. Ғ. Кейекбаев һәм уның башҡорт халыҡ классик йырҙарында әле булһа ҡулланылыуын боронғо уйғыр классик поэзияһының башҡорт сәсәндәренә һәм йырсы-ҡурайсыларына көслө йоғонтоһо менән аңлатып була тип иҫәпләй[1].

Сифаттарҙың артыҡлыҡ дәрәжәһе *шыр, зәһәр, йәһәннәм, хәшәрәт, зәрә, хәтәр* һүҙҙәре менән белдерелә: *шыр тоҙ* «слишком соленый», *зерә йахшы* «очень хорошо», *хәтәр уңған* «очень хорошо уродилась (об урожае)».

*Беҙ, һеҙ* зат алмаштарына эйәлек килеш ялғауы ҡушылғанда һүҙҙең тамырындағы ҙ өнө төшөп ҡала: *безең* – әҙәби телдә *беҙҙең* «наш», *ҫезең* – *һеҙҙең* «ваш», *миңә* «мне» зат алмашы, ҡыҫҡарып, *миә* формаһында әйтелә, *быныһы* «этот», *ҡайһылай* «как, каким образом» һымаҡ алмаштар ҙа ҡыҫҡара: *быҫы, ҡаҫылай.*

*Нимә* һорау алмашының *нейә, нәмә, нәҫтә, нәҫтәкәй, нәмәҫтәкәй, нәрҫә, нәрҫәкәй* һымаҡ фонетик варианттары бар. Билдәһеҙлек алмаштары *-ҡай/-кәй* аффикстары ҡушыу юлы менән (*нәрҫәкәй?* «что?»), шулай уҡ, әҙәби телдәге кеүек, *әллә* киҫәксәһе менән (*әллә нәҫтәкәй* «что-то») яһала.

Ҡылымдың әҙәби телдәге *-ыр/-ер* формаһы *-ар/-әр* формаһында ҡулланыла: 1-се затта: *тотарым, тотарбыҙ* – әҙәби телдә: *тотормон, тоторбоҙ* «поймаю, поймаем»; 2-се затта: *тотарҫың, тотарҫыҙ* – *тоторһоң, тоторһоғоҙ* «поймаешь, поймаете», 3-сө затта: *тотар, тотарлар* – *тотор, тоторҙар* «поймает, поймают».

Был күренеш көнсығыш диалекттың әй, ҡыҙыл, мейәс, көньяҡ диалекттың дим һөйләштәрендә лә, Ырымбур, Кәмәлек буйы башҡорттарының телендә лә күҙәтелә. Киләсәк замандың *-ар/-әр* аффиксы менән ҡулланылыуын Р. Ш. Алсынбаева башҡорт һөйләштәре өсөн тарихи күренеш тип иҫәпләй. Юғиһә, ти ул, шул тиклем ҙур территорияға бер үк тел күренеше таралмаған булыр ине! Ғөмүмән, өршәк һөйләшендә

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы (Уҡыу ҡулланмаһы). Өфө: БДУ, 2002. 177–178-се биттәр

ҡылым формаларының боронғо һыҙаттары ғәйәт тотороҡло һаҡланған. Быға миҫал итеп йәнә ҡылымдың *-һыҙ (-ҫыҙ)* ялғауы менән бирелгән ҡыҫҡа формаһын күрһәтергә мөмкин: *иҫәнмеҫеҙ* – әҙәби телдә *иҫәнмеһегеҙ* «здравствуйте»; *бараҫыҙмы? – бараһығыҙмы?* «пойдете (поедете) ли?»; *уҡыусыҫыҙ – уҡыусыһығыҙ* «вы учащиеся». Ҡылымдың *-ҫыҙ/-ҫеҙ* ялғауы менән яһалған ҡыҫҡа формаһы дим һөйләшенең туҡ-соран һөйләшсәһендә лә бар.

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Өршәк һөйләше көнбайыштан – дим, көньяҡтан – эйек-һаҡмар, төньяҡ-көнсығыштан – урта һөйләштәр менән тығыҙ бәйләнеш шарттарында формалашҡан. Шуға күрә был һөйләштәрҙең һәр береһе менән уртаҡ лексик ҡатламдар барлыҡҡа килгән. Өҫтәүенә, дим һөйләшенең төньяҡ-көнбайыш диалект составындағы түбәнге ағиҙел-ыҡ һәм ҡариҙел һөйләштәре менән сиктәш булып, халыҡтың электән үҙ-ара аралашып йәшәүе бигерәк тә тормош-көнкүреш өлкәһендә бик күп уртаҡлыҡтарҙы, яҡынлыҡты барлыҡҡа килтергән. Был яҡынлыҡ дим һөйләше аша өршәк һөйләшенең лексикаһына ла үтеп ингән. Өршәк һөйләше лексикаһында Туҡ-Соран һәм Кәмәлек буйы башҡорттарының һөйләү теле өсөн уртаҡ диалектизмдар ҙа ҙур ғына урын алған, сөнки элекке дәүерҙә был төбәктәр менән үҙ-ара аралашыу ҙа, туғанлыҡ бәйләнештәре лә көслө булған.

Өршәк һәм дим һөйләштәре өсөн уртаҡ диалекталь лексик ҡатлам, әлбиттә, айырымланыбыраҡ тора. Мәҫәлән: *арҡа ҫөйәге* – әҙәби телдә *умыртҡалыҡ* «позвоночник», *гөбө – көбө* «деревянный сосуд для приготовления кумыса, айрана, а также для сбивания масла», *күсер – кейәү егете* «шафер», *таҫлау, таҫлап ҫалыу – тәңкләп һалыу* «сложить аккуратно, по порядку», *ҫумала – ыҫмала* «смола», *ҫөҙгө, ҫөҙгөс – һөҙгөс* «дуршлаг», *арбаҙ – аҙбар* «хлев», *иҙән өрлөгө – иҙән урҙаһы* «половая балка», *түбә өрлөгө, матса – өрлөк* «матица», *ишек яңағы – ишек ягы* «косяки дверные», *тәҙрә тупҫаҫы – тәҙрә төбө* «подоконник», *аралыҡ – мейес арты* «запечье», *барсалы тауар – биҙәкле тауар* «цветастый товар», *ҫаҡал, түшлек/түшлексә – һаҡал* «нагрудник», *күкрәксә – түшелдерек*

«нагрудник с нашитыми разноцветными лентами», *ҫумнык – һумлык тәңкә* «серебряный целковый», *типке – бик* «засов», *көрпә – кәбәк* «отруби, мякина», *баш, ҡур, асытҡы, сөпрә – ҡур* «закваска, солод», *ҡымыҙ асытыу – ҡымыҙ яһау* «заквасить кумыс».

Өршәк һөйләше әлегәсә дим һөйләше составында өйрәнелеп килгәнлектән, уның үҙенә генә хас диалекталь лексиканы айырып күрһәтеү мәсьәләһендә ҡатмарлылыҡтар менән дә осрашырға тура килә. Шул уҡ ваҡытта Өршәк буйы башҡорттарының һөйләү теле лексик планда ла айырымланып тора тип әйтә алабыҙ. Мәҫәлән, был һөйләш өсөн ошондай үҙенсәлекле диалектизмдар характерлы: *алата – алып* «начиная с» (дим һөйләшендә – *алатын*). *Ҡыйыҡтан алата ҡар баҫҡан; нишана алабуга – этеш, шырт балыҡ* «ёрш», *ҫылай – ташбаш* «пескарь», *баҡа ҫейҙеге – ылымыҡ* «тина», *ҡойрыҡ ҫөйәге – ҡоймос* «копчик», *йафан йер – буш ер* «голая или открытая местность», *көйәнсә – йаулыҡты йәйеп йабыныу* «вид завязывания платка», *аҡпаш/аҡбаш – меңьяпраҡ* «тысячелистник», *әсәмәк – ашамһаҡ, әсмәйел* «ненасытный», *нәфис япма* «рига, навес», *шырбай/шырлатан – алдаҡсы, ялғансы* «обманщик, шарлатан», *ҫөҙләк – һөҙләк* «навар мясной», *әпе – йүнһеҙ, телһеҙ* «бестолковый, немой», *шипат – ҡылансыҡ* «кокетливый, безалаберный», *ҡайнашыу – шаяртыу* «подшучивать».

Р. Ш. Алсынбаева билдәләгәнсә, өршәк һөйләшендә синонимдар һәм омонимдар ғәйәт ныҡ үҫешкән. Мәҫәлән: *уҡҫын/әмзә/әтмәкәй/кәзә йыуаҫы* – әҙәби телдә оҫҡон, *болон йыуаһы* «дикий лук», *ырғазымбай/эрғәзембай/умырзыйа – умырзая* «подснежник». Ә инде *ҫөртөү һүҙе* (әҙәби телдә *һөртөү*) *ошондай өс төрлө мәғәнәлә ҡулланыла:* 1) *малдың таба майлар өсөн тотонола торған эс майы,* 2) *урлау, сәлдереү (айыу майын ҫөртөү),* 3) *һөртөү.*

Өршәк һөйләшенең көньяҡ диалект составындағы бүтән һөйләштәр, шулай уҡ төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ, ҡариҙел һ. б. һөйләштәре менән уртаҡ диалекталь лексик ҡатламы түбәндәге таблицала асыҡ күренеп тора (таблица башҡорт теленең диалектологик һүҙлеге һәм диалектологик атласына таянып төҙөлдө):

| Өршәк һөйл. | Дим һөйл. | Әйек-һаҡмар һөйл. | Урта һөйл. | Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйл. | Ҡариҙел һөйл. | Әҙәби телдә |
|---|---|---|---|---|---|---|
| *баҡрас* | *баҡрас* | *баҡрас* | | *баҡрач* | | *ижау «половник»* |
| *бүлтерек* | *бүлтерек, бүлтерәк* | *бүлтерек* | *бүлтерек* | *бүлтерек* | | *көҙгө бәрәс «осенний приплод»* |
| *бәләк* | *бәләк, пәләк* | | | *бәләк* | | *ҡыҙыл тара-ҡан, «тара-ҡан-прусак»* |
| *бәпкә* | *бәпкә* | *бәпкә* | *бәпкә* | *бәпкә* | | *атлама «стропила»* |
| *диңгеж диңгеш* | *диңгеж диңгеш* | | | | *диңгеж диңгеш* | *иңкеш «шмель»* |
| *күсмәкүс* | *күсмәкүс* | *күсмәкүс* | *күсмәкүс* | | *күсмәкүс* | *ҡамҡа, ҡояш апай «божья коровка»* |
| *ҡойо* | *ҡойо* | *ҡойо* | *ҡойо* | *ҡойо* | *ҡойо* | *ҡоҙоҡ «колодец»* |
| *ҡул балаҫы* | *ҡулбала* | *ҡулбала* | *ҡулбала* | *ҡулбала* | | *имсәк бала «грудной ребенок»* |
| *ҡырлыҡ* | *ҡырлыҡ* | | *ҡырлыҡ* | | *ҡырлыҡ* | *алты көлтәнән өйөлгән һоҫлан «суслон из шести снопов»* |
| *ләпәк* | *ләпәк* | *ләпәк* | *ләпәк* | *ләпәк* | | *ләпәкәй «мошкара»* |
| *олауырыу* | *олауырыу* | *олауырыу* | *олауырыу* | *олауырыу* | | *ыйыҡ «ту-беркулез»* |
| *шарлама* | *шарлама шарламаҡ* | | *шарлама* | | *шарлама шарламаҡ* | *шаршы, шарлауыҡ «перекат, водопад»* |
| *ырашҡы* | *ырашҡы* | *ырашҡы* | *ырашҡы* | *ырашҡый* | *ырашҡи* | *рашҡы «мокрый снег вперемешку с дождем»* |
| *энә буры* | *энә буры* | *энә буры* | *энә буры* | *энә буры* | | *энәгараҡ «стрекоза»* |

*Һөйләү теле өлгөләре*

*Ун ике-ун өс йәштән эшкә йегелдек*

Утыҙ дүртенсе (1934) йылдың дикәберендә ошо ауылда тыуғанмын. Дикәберҙең егермеҫендәме шул, элекке ҡартлар сисласын беләме инде. Абзыйым Әхиәр, Мораҙында уҡыны (үҙебеҙҙәге башланғыс мәктәпте тамамлағаннан ҫуң). Риф иҫемне энем бар ине, ул да Мораҙында уҡыны, еҙе йыллыҡ мәктәптә. Беҙҙең бала саҡта инде айаҡта ла юҡ, өҫтә лә. Атайым ҫуғышта өс йыл йөрөп ҡайтты ла трутармияға алып киттеләр. Өсмө, дүртме ай йөрөп ҡайтты.

– Ҡайҙа эшләнегеҙ, апай?

– Сөгөлдөр! Утау утаныҡ. Эшләнек ун ике-ун өс йәштән.

Марстың атаҫы ҫуғыштан ҡайтты ла ташлап сығып китте. Ҡаҙморонға барып керҙе. Марс та йәшләй эшләне.

Абзыйым инде ул ҫабан ҫөрә, тырма тырмата. Марсларҙың өйө ҙур ғына. Кәнсәләр шунда ине. Нисек ҫөрөп еткергәннәрҙер ат беләң. Иген дә үҫә торғайны. Игенне салғы беләң саптыра торғайнылар. Игенне иң элек сабалар, анан көлтә бәйләйләр, анан ҡырлыҡҡа утырталар. Шунан ҫуғалар. Көҙ буйы ҫуғалар, ҡышҡа тиклем.

Алты бала үҫтерҙек Марс ағайығыҙ беләң. Биш малай, бер ҡыҙ. Өс малайыбыҙ ауылда, берҫе Мораҙында, берҫе Себерҙә, берҫе Стәрлелә. Ун биш йейәнебеҙ бар, Аллаға шөкөр.

*2010 йылдың 3 июлендә Ауырғазы районының*
*Юлдаш ауылында 75 йәшлек Көҫәпҡолова Роза*
*Камалетдин ҡыҙынан (ҡыҙ фамилияһы – Ғәзизова)*
*(белеме – дүрт класс) Рәшит Шәкүр яҙып алды.*

*Тәржемәһе*

*Впряглись в работу с двенадцати-тринадцати лет*

Родилась в этой же деревне в декабре тридцать четвертого (1934) года. То ли двадцатого декабря, прежние старики не очень-то и знали числа. Мой брат Ахияр учился в Мурадымово (после окончания местной начальной школы). Был у меня и младший брат по имени Риф, он тоже учился в Мурадымовской семилетней школе. В наши детские годы не

было ни обуви, ни одежды. Отца после того, как только вернулся, три года пробыв на войне, снова забрали в трудармию. Вернулся месяца через три или четыре.

– Где Вы работали, апай?

– На свекле! Ходили на прополку. Работали с двенадцати-тринадцати лет.

Отец Марса, вернувшись с войны, ушел из семьи. Женился на ком-то в Казмуруне[1]. Марс тоже работал с молодости.

Старший мой брат и землю пахал, и бороновал. Дом у родителей Марса был большой. Канцелярия там располагалась. Не знаю, как успевали вспахивать поля на лошадях. И ведь урожай-то был хороший. Хлеба косили (ручными) косами. Хлеба вначале косят, затем вяжут снопы, затем ставят в суслоны. После этого молотят. Молотят в течение всей осени, до самой зимы.

Шестерых детей вырастили вместе с Марсом. Пятерых сыновей и одну дочь. Трое сыновей живут в (родной) деревне, один – в Мурадымове, один – в Сибири, дочь – в Стерлитамаке. У нас растут пятнадцать внуков, слава Богу.

### *«Çеҙ миңә теймәгеҙ, мин çеҙгә теймәйем!..»*

Атайым Ғәббәс Әҡсән улы. Йөҙ ҙә биш йәш йәшәне. Элек беҙ Ҡыҙыл-Өршәктә тора инек. Бер йылды Яңауылға килгәндә өс бүре осраны. Берçе ҙур, балалары беләң. Ун-ун биш аҙымда ғына.

«Çеҙ миңә теймәгеҙ, мин çеҙгә теймәйем, сеҙ миңә теймәгеҙ, мин çеҙгә теймәйем, çеҙ миңә теймәгеҙ, мин çеҙгә теймәйем! – тип тик торған булам, таяғымды шаҡылдатып. – Атам атыу!» – тигән булам. Ҡулда бер ҡара таяҡ ине. Мылтыҡҡа оҡшаған. Шунан Биллеғылысҡа төшөп киттеләр.

«Ярай әле çинән ҡурҡҡаннар, – тинеләр. – Ана бер ҡатынны бүреләр ашап киткән. Оҙон сәсле ҡатын булған. Башын алып килеп, зыяратҡа элеп ҡуйғаннар, таныусы булмаçмы, тип». Элек бит бүре күв ине.

---

[1] *Казмурун* (Ҡаҙморон) – неофициальное название деревни Усманово этого же района.

Ҡырҡ бишенсе йылда һуғышҡа алғайнылар мине. Талбазыға еткәс, кире әйләндек. Күмәг инек. Һуғыш бөткән, тинеләр.

Мин күрҙем инде, балам, асыһын да, сөсөһөн дә. Үзбәгстанда ла йәшәв алдым. Ике баламдың атаһы үзбәк. Дүрт бала тәрбиәләп үҫтерҙем. Ғүмер буйы һыйыр һауҙым. Балаларым Рәсим, Рәсилә (аталары Тимерхан), Хәсиәт, Хәлиҙә (аталары Кәрим). Хәҙер мына, шөкөр, үҙемнең тыуған ауылымда йәшәп йатабыҙ.

*2010 йылдың 8 июлендә Ауырғазы районы*
*Мораҙым ауылында Смакова Мәмниха Ғәббәс ҡыҙынан*
*(1926 йылғы) Рәшит Шәкүр яҙып алды.*

*Тәржемәһе*

*«Вы меня не трогайте, я вас не трону!..»*

Мой отец – Габбас Аксан улы. Прожил сто пять лет. Раньше мы жили в Кызыл-Уршаке[1]. Однажды по пути в Янаул[2] встретилась с тремя волками. Один из них большой, два – поменьше. Оказались в десяти-пятнадцати метрах от меня.

Встала и повторяю одно и то же: «Вы меня не трогайте, я вас не трону, вы меня не трогайте, я вас не трону, вы меня не трогайте, я вас не трону!». При этом громко постукиваю палкой. Говорю: «Иначе стрелять буду!» В руках была у меня почерневшая палка, похожая на ружье. Тогда они отошли и спустились к речке Биллекылыс[3].

«Хорошо, что они побоялись тебя. Вот, говорят, одну женщину волки съели. Женщина была с длинными волосами. Голову ее люди принесли на кладбище и вывесили (на шест), решив, что, может быть, кто-то опознает (погибшую)», – так мне говорили потом. Раньше ведь волков было много.

---

[1] *Кызыл-Уршак* (Ҡыҙыл-Өршәк) – бывшая деревня в Аургазинском районе, расположенная на левом берегу реки Уршак в 2–3 километрах от Старого и Нового Мурадымово.

[2] *Янаул* (Яңауыл) – официально Новое Мурадымово, теперь часть большой деревни Мурадымово Аургазинского района.

[3] *Биллекылыс* (Биллеҡылыс) – речка, правый приток реки Уршак.

В сорок пятом году призвали меня на войну. Из Толбазов вернулись обратно. Много нас было. Сказали, что война кончилась.

Много чего я повидала, сын мой, (было много) и горького, и пресного. Пожила некоторое время и в Узбекистане. У двоих детей отец узбек. Воспитала и вырастила четверых детей. Зовут их Расим, Расиля (отец их Тимерхан), Хасият, Халида (их отец Карим). Теперь вот вместе с детьми и внуками живу в своей родной деревне.

## 4. Урта һөйләш

*Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы.*

*Һөйләштең төп фонетик үҙенсәлектәре.*

*Урта һөйләш эсендәге һөйләшсәләр*

Урта һөйләш Башҡортостан Республикаһының Архангель, Ғәфүри, Ҡырмыҫҡалы райондарында, Ишембай районының төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә, Белорет районының – Инйәр, Иглин районының Ләмәз буйында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләү телен үҙ эсенә ала. Улар табын ҡәбиләһенең ҡумрыҡ, баҙраҡ/бүҙрәк, кәлсер, кесе, дыуан, күрпәс, йомран-табын ырыуҙарына, шулай уҡ ҡыпсаҡтарҙың гәрәй-ҡыпсаҡ һәм тәлтем-ҡыпсаҡ ырыуҙарына, ҡатайҙарҙың бер өлөшөнә ҡараған башҡорттар. Йомран-табындарҙың бер төркөмө элегерәк Ырымбур өлкәһенең Туҡ һәм Соран буйҙарына күсеп ултырған һәм унда, нигеҙҙә, дим һөйләше үҙенсәлектәрен ҡабул иткән.

Һөйләштең төп диалекталь үҙенсәләге *-лт, -нт, -ңт, -мт, -ңҡ, -ңк, -мҡ, -мк* диссимилятив өн ҡушылмаларының ҡулланылыуы менән характерлана. Бында **л, м, н, ң** талғын тартынҡы өндәренән һуң **д** өнө һаңғыраулапып, **т** өнөнә күсә. Мәҫәлән: *һалты* – әҙәби телдә *һалды, Уралта – Уралда, урманта – урманда, урмантан – урмандан, ҡонтоҙ – ҡондоҙ, юлташ – юлдаш.* Шулай уҡ **м, н, ң** тартынҡыларынан һуң яңғырау **ғ, г** өндәре урынына һаңғырау **ҡ, к** өндәре килә: *дамҡа* – әҙәби телдә *тамға, ямҡыр – ямғыр, кемкә – кемгә,*

*һин кенә – һин генә, еңкә – еңгә, саңҡа/саңҡы – саңғы* (һунарҙа ҡулланыла торған махсус эшләнгән саңғы), *таңҡа – таңға.*

Диссимилятив өн ҡушылмалары Асҡын һәм Ҡариҙел райондарында йәшәгән ун (һун) һәм балыҡсы ырыуҙары башҡорттарының теле, йәғни ҡариҙел һөйләше һәм Ғәфүри, Ишембай райондарының Егән буйында урынлашҡан типтәр ауылдарының һөйләү теле өсөн дә характерлы. Был күренеш буйынса урта һәм ҡариҙел һөйләштәренең себер татарҙары, һары уйғырҙар һәм боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларының теленә яҡынлығы бар һәм ул бик үҙенсәлекле боронғолоҡ күренеше тип иҫәпләнә.

Бынан тыш, урта һөйләштә һүҙ башында **б – п** өндәренең тап килеше, йәғни **б** өнө урынына һаңғырау **п** өнөн ҡулланыу шулай уҡ характерлы үҙенсәлектәрҙең береһе иҫәпләнә. Мәҫәлән: *пысҡы* – әҙәби телдә *бысҡы* «пила», *пысаҡ – бысаҡ* «нож», *палта – балта* «топор», пыйала – быяла «стекло», *пысраҡ – бысраҡ* «грязь», *паҙар – баҙар* «базар», *пармаҡ – бармаҡ* «палец», *палтаҡ – балдаҡ* «кольцо», *пажа – бажа* «свояк», *паҡта – баҡта* «весенняя линька, шерсть весенней стрижки», *пелеү – белеү* «знать».

Һүҙ башында **б** өнө урынына **п** өнөн ҡулланыу буйынса урта һөйләш күршеләге егән һәм төньяҡ-көнбайыш диалект составындағы ҡариҙел һөйләшенә, алтай һәм уйғыр телдәре һөйләштәренә, сыуаш һәм себер татарҙары теленә яҡын тора[1]. **Б** өнө шулай уҡ ике һуҙынҡы араһында ла **п** өнөнә күсә: *тупырсыҡ* – әҙәби телдә *тубырсыҡ* «шишка», *ҡапырсаҡ – ҡабырсаҡ* «ракушка», *йапалаҡ – ябалаҡ* «сова».

Һөйләштә һүҙ башында **т** өнө урынына **д** өнөн ҡулланыу күҙәтелә: *дуғай* – әҙәби телдә *туғай* «луг», *дамға – тамға* «тамға, знак, метка», *думар умарта – түмәр умарта* «колодочный улей», *дирән – тәрән* «глубокий», *дүңгәк – түңгәк* «кочка». Шул уҡ ваҡытта айырым осраҡтарҙа һүҙ башында **д, т** өндәре параллель рәүештә килә: *донйа/тонйа* «свет, мир», *дәғә/тағa* «подкова», *домбойоҡ/томбойоҡ* «кувшинка водяная», *дәүәт/тәүәт* «женский нагрудник из монет».

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 106–107-се биттәр.

Һүҙ башында – **h** өнө, бүтән позицияларҙа иһә, шулай уҡ ике һуҙынҡы араһында күп ваҡыт **ç** өнө ҡулланыла: *һикçән* – әҙәби телдә *һикһән, туҡçан – туҡһан, танçыҡ – танһыҡ, ҡорçаҡ – ҡорһаҡ, һыуçау – һыуһау, йаçау – йаһау, гоçор – ҡоһор* «последствие».

Көнсығыш һөйләштәрҙәге һәм ҡариҙел һөйләшендәге һымаҡ уҡ, урта һөйләштә лә **-а/-ә** өндәренә бөткән хәл ҡылымдар менән *ал-* модаль ҡылымы алдынан ике һуҙынҡы араһына **й** өнө өçтәлә, ә **л** өнө төшөп ҡала: *бара-й-алма-йым* – *бара алмайым, тора-й-алмайым – тора алмайым, әйтә-й-алмайым – әйтә алмайым.* Ә **л** сонанты, ғөмүмән, *ал-, һал-, ҡал-*, шулай уҡ һирәклəп *бул-, кил-* ҡылымдарының үткән һәм киләсәк заман формаларында төшөп ҡала: *Йөрөмәгән геше гаманы – Йөрөмәгән кеше ҡалманы; Эй бүлли бул, бүлли бул, бүҙәнәләй түлли бул; бер гулың майҙа бу(л)һын, бер гулың балта бу(л)һын, көл(л)өксәң тулы көл бу(л)һын, итәгең тулы ул бу (л)һын, ҡаҙаның тулы ит бу(л)һын* (еҙем һөйләшсәһе).

Инйәр һөйләшсәһендә һүҙ башында **а** һәм **ҡ** өндәре тамаҡ төбө менән әйтелә: *ҡ<sup></sup>ъа°р – ҡар, ҡъа°рга – карға, ҡъарама – ҡарама, ҡъар(а) эле – ҡара әле.*

Урта һөйләш көньяҡ диалекттың егән, эйек-һаҡмар, дим, көнсығыш диалекттың ҡыҙыл һөйләштәре менән сиктәш урынлашҡан. Һөйләштең көнбайыш өлөшө айырыуса дим һәм өршәк һөйләштәре менән тығыҙ аралашыу процесын кисерә.

Һөйләш нигеҙҙә лексик үҙенсәлектәре буйынса өс һөйләшсәгә бүленә. Улар – инйәр, еҙем һәм ҡырмыçҡалы һөйләшсәләре. Инйәр һөйләшсәһе – Белорет районының ҡатай, Архангель районының бүҙрәк-табын һәм ҡумрыҡ-табын ырыуҙары башҡорт ауылдары өсөн характерлы. Ғәфүри районының кәлсер-табын һәм кесе-табын ырыуы башҡорттарының һөйләү теле – инйәр һөйләшсәһенә, Ҡырмыçҡалы районы йомран-табын һәм дыуан-табын ырыуы ауылдары ҡырмыçҡалы һөйләшсәһенә берләшә. Һөйләшсәләрҙең һүҙлек составы диалекталь синонимдарҙың ғәйәт күп булыуы менән айырылып тора. С. Ф. Миржанова был күренеште урта һөйләштең алда күрһәтеп үтелгән һөйләштәр менән әүҙем бәйләнеш һөҙөмтәһе тип аңлата. Мәçәлән, инйәр һөйләшсәһендә

махсус һораулыҡ буйынса яҙып алынған 90 диалекталь һүҙҙең 50-нән артығырағы, ғөмүмән, бөтөн көньяҡ диалект һөйләштәре өсөн уртаҡ лексик берәмек иҫәпләнә (мәҫәлән: *ҡаҙна* «наличник нар», *ҡәйенһеңне* «младшая золовка»), 32-һе – ҡыҙыл һөйләше (*албар* «хлев», *тәпәс* «цепь», *мышар* «рябина», *ҡойолтороҡ* «неказистый», *туҡрау* «остановиться»), 16-һы – күбәләк һөйләше (*тупый* «шапка мужская», *шәүкәләй* «шапка детская», *ләшә* «снег на деревьях», *әберсә* «малина»), 16-һы – төп урта һөйләш диалектизмдары (*ләс* «водянистый (о хлебе)», *сөңкөлтәк* «ворчун», *мәретеү* «подтаивать (о снеге)», *туш/ тыуыш* «наледь», *йаңҡыҙайаҡ* «земляника») һәм бары тик 7 һүҙ һөйләшсәнең үҙе өсөн характерлы диалектизм булып тора (*ауһар* – әҙәби телдә иҫәр «глупый», *әрҙәмәс – әрһеҙ* «беспардонный»; *һарымай, һарыбаш, аҡпабай – бәпембә* «одуванчик в цвету и после цветения»; *шәкәлшәй/сәкәлсән, мәшәй – йәкәл* «бабка»; *урман кәзәһе – ҡоралай* «косуля»; *әтәрбай – кәрлә* «карлик»; *әтүкәш/өтөкөш алыу* «окунуться в холодную воду перед купаньем»)[1].

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Һөйләштә *-ай/-әй* өндәренә тамамланған ҡәрҙәшлек терминдары, баланың ата-әсәһенә йәки кесе туғандың яҡын оло туғанына өндәшкәндә, *-ый/-ей* формаһында әйтелә: *атый* – әҙәби телдә *атай, әсей – әсәй, апый – апай, агый – агай, бауый – бабай. Атый, мин дә барам бесән сапмаға. Әсей, һөйөнсө, агайым ҡайтып килә!*

**Л, м, н, ң** өндәренә бөткән исемдәргә **т, к, ҡ** өндәренән башланған килеш ялғауҙары ҡушыла:

| Һөйләштә: | Әҙәби телдә: |
|---|---|
| төп килеш – *урман* | *урман* |
| эйәлек килеш – *урмантың(-н)* | *урмандың* |
| төбәү килеш – *урманҡа* | *урманға* |
| төшөм килеш – *урманты* | *урманды* |

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 99–100-сө биттәр.

урын-ваҡыт килеш – *урманта* *урманда*
сығанаҡ килеш – *урмантан* *урмандан*

Эйәлек килештә туғанлыҡ терминдарының 3-сө зат берлек ялғауы ике төрлө – *-йы/-йе* һәм *-һы/-һе* формаһында килә: *атайы/атаһы, ағайы/ағаһы.*

*-ылтырыҡ/-елтерек* аффиксы (әҙәби телдә: *-ылдырыҡ/-елдерек), -лыҡ/-лек, -даҡ/-дәк* аффикстары һымаҡ уҡ, ниндәй ҙә булһа ҡулайламаны йәки бүтән төрлө төшөнсәне белдергән исем яһай: *бауылтырыҡ* – әҙәби телдә *бауырғалыҡ, бауырлыҡ* «подпруга», *бәүелтерек* – *бәүелсәк* «качели», *ҡойолтороҡ* – *ҡойолдороҡ* «неопрятный, замухрышка», *күҙелтерек* – 1) *күҙлек* «очки» (арғаяш, ҡыҙыл һөйләштәрендә шул уҡ мәғәнәлә: *күҙелдерек*), 2) *битлек* «сетка от пчел» (эйек-һаҡмар, ҡыҙыл һөйләштәрендә лә шул уҡ мәғәнәлә), *тәпәлтерек – солоҡ ҡарағайға баҫып тороу өсөн ҡулайлама* «подножка для лазания на бортевое дерево».

1-се һәм 2-се зат алмаштары – *мин, һин* – төбәү килештә *минеңә* һәм *һинеңә* формаһында ҡулланыла.

Эйәлек алмаштары ҡуш ялғауҙар ҡабул итеүсән: *минекенеке, һинекенеке, аныҡыныҡы, беҙҙекенеке, һеҙҙекенеке, аларҙыҡыныҡы.*

Нимә? «что?» һорау алмашының ошондай варианттары бар: *ней? нәҫтә? нәмәҫтә? нейәҫтә? нимәкәй? нейәмә? нәрҫә? Нимәкәй таптың һин анта?* «Что ты нашел там?» Әҙәби телдәге *ниңә?* алмашы урынына *нейә?* «зачем?», *нишләп?* «почему?» алмаштары ҡулланыла. *Нишләп ваҡытынта барып йетмәнең?*

Ҡылымдың хәҙерге заман 2-се зат берлек һәм күплек ялғауҙарында – әҙәби телдәге *-һығыҙ/-һегеҙ* формаһы күп ваҡыт, ҡыҫҡарып, *-ғыҙ/-һыҙ* һәм *-ң* варианттары ғына тороп ҡала: *һин алаң* – әҙәби телдә: *һин алаһың, һеҙ алаһыҙ – һеҙ алаһығыҙ, һин тораң – һин тораһың, һеҙ торағыҙ/тораһыҙ – һеҙ тораһығыҙ.* Ҡылымдың киләсәк заман зат ялғауҙары ла ҡыҫҡара: *ҡалырым* – әҙәби телдә *ҡалырмын, ҡалырың – ҡалырһың, ҡалырығыҙ – ҡалырһығыҙ.* Бынан тыш, һөйләштә -р өнөнә тамамланған ҡылымдарҙың 1-се зат берлек һәм күплек формаһында бер юлы *-р* һәм *-н* элементтары ҡыҫҡара: *барым* – әҙәби телдә *барырмын, керем – керермен. Иртәгә*

*таҡта ебәрем тип ҡалт(ы) инте* («Завтра доски вышлю, сказал он»); *Хаҡын ҡуйып биребеҙ* «Отдадим (продадим), установив цену»[1].

*-а/-ә* һәм *-ып/-еп* ялғаулы хәл ҡылымына *бар-, тор-, утыр (ултыр)-, йат-* ярҙамсы ҡылымдар ҡушып, эш-хәлдең тамамланмаған булыуы белдерелә: *Хаты килеп тора; Тау битләүентә генә һалҡын шишмә сығып йата.* Ә инде хәл ҡылымға *бар-, кил-, ҡал-, һал-, кит-, бөт-* һымаҡ ярҙамсы ҡылымдар шулай уҡ *та/тә* киҫәксәһе ҡушыу юлы менән эш-хәлдең тамамланған булыуы йә иһә ҡыҫҡа ваҡытлы булғанлығы белдерелә: *Күптән күрешмәгәйнек, күңел тулып китте; шул арала барып та йеткән; сығып та гиткән, белмәй ҡалтым.*

Урта һөйләштә *-маҡ/-мәк, -мага/-мәгә* ялғаулы инфинитив киң ҡулланыла: *Шулай булмаҡ кәрәк* «Так должно быть»; *Мин дә барып ҡайтмаҡ бултым әле* «Я тоже решил сходить (съездить) туда»; *Ҡуртымға ер алып, йылҡы малын үрсетмәгә итә* «Взяв землю в аренду, собирается заняться коневодством»; *Ҡунаҡ күрмәгә барҙым* «Ездила, чтобы посмотреть на гостей».

Һөйләш ҡатмарлы *-ыуга/-еүгә* аффикслы (*-ыу* + *-га/-гә*) исем ҡылымының ҡулланылыуы менән характерлы: *Йорт һалыуга агас әҙерләмәккә урмантан диләнкә алтыҡ* «Выписали делянку в лесу для заготовки древесины на постройку дома».

Мөмкинлек сифат ҡылымы *-ҡылай/-келәй* ялғауы менән яһала: *уҡыгылай була* – әҙәби телдә *уҡырга ниәтләнә; көйҙөргөләй хәлдәр була – йән көйҙөргөс хәлдәр була.*

Рәүештәр яһау өсөн *-алатайым/-әләтәйем, -алагайым* һымаҡ ҡатмарлы ялғауҙар ҡулланыла: *яҙалатайым* (яҙа + *-алатайым*): *Яҙалатайым күреп ҡалтым; Күрәләтәйем алтап торган була* – өршәк һөйләшендә: *Күрәләтә алдап торган була; Бушалагайымҡа теләһә ней һөйләп йөрмә* – әҙәби телдә: *Бушҡа теләһә нәмә һөйләп йөрмә.*

Исемдәр, алмаштар, исем ҡылымдар менән *шайы/шәйе, ише, хәҙәре, шикетте, төрлө, тирле, ҡала, ҡарап, гәйре, була, тим* (әҙәби телдә тиклем), *тиң, тиңке, кук* (әҙәби телдә *кеүек*) һымаҡ бәйләүестәр ҡулланылып, сама һәм сағыш-

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 136-сы бит.

тырыу дәрәжәһе белдерелә: *Аның шайы ғына беләбеҙҙер инте; Ҡартатайым ише кешеләр һирәк хәҙер; Шу тирле көслө була икән кеше! (Шул тиклем көслө була икән кеше!)*

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Урта һөйләш көньяҡ диалекттың – дим, өршәк, егән, эйекһаҡмар, көнсығыш диалекттың күбәләк һөйләшсәһе һәм ҡыҙыл һөйләше менән сиктәш һәм, ғөмүмән, башҡорт һөйләштәренең нәҡ уртаһында тип әйтерлек урынлашҡан. Шуның өсөн дә, үҙенең фонетик, морфологик, лексик һыҙаттары буйынса һиҙелерлек айырымланып торһа ла, уның лексикаһында көньяҡ һөйләштәр менән дә, төньяҡ-көнсығыш һөйләштәр менән дә уртаҡлыҡ күҙәтелә.

Инйәр һөйләшсәһенең үҙенә генә хас диалекталь лексика ҡатламында тау-урман зонаһында башҡа яҡ менән ныҡ аралашып йәшәмәгән, үҙенең көнкүреше, кәсептәре, ғөрөфғәҙәте менән айырымланып торған был төбәк халҡының тел үҙенсәлеге тотороҡло һаҡланған. Быға, алда күрһәтелгәндәрҙән тыш, ошондай миҫалдарҙы килтерергә була: *иғәнәтһеҙ* – әҙәби телдә *яһил; мәреү – сигеү; төрткө – һуҡыр сысҡан; балағас – ҡорт ҡунған ағас, солоҡ ағасы; туңнау балы – яҙғы бал; һурнаҡ – баҫҡынсы ҡорт; тата – кирге; ҡыулау – ялҡын; көрмәләнеү – бөрөләнеү; көрпәс/көрпәсәй – ташбаш; көрпәһыу – һорғолт; миҙгә – ниргә; өрпәй – ҡурҡаҡ; әберсә – ҡурай еләге; тупар – ер еләге; тиләкҫеү – ғауғаланыу, ҡуҙғырыу; ҡырсыу – әрсеү; төмәләк – ҡараңғы ер; көтәккә – үтескә; тарһыл төлкө – ҡара төлкө; төтөк үләне/тө-төгүлән – бесәй тарыһы.*

Еҙем һөйләшсәһенең диалекталь лексикаһы, инйәр һөйләшсәһендәге кеүек үк, ҡыҙыл һөйләше менән ауаздаш: *мәреү* – әҙәби телдә *иреү* «таять», *әзәй/әсәй*, шулай уҡ ҡыҙыл һөйләшендә *әзәй – өләсәй* «бабушка по отцу», *сығансаҡ – сәтәкәй* «мизинец», *ҡураныс – ҡаҡса* «худощавый», *шим (бал, май) – тос* «чистый, тяжеловесный (мёд, масло)», *дадан/дәдән умарта – йәшник умарта* «рамочный улей», *тексәймә – бәйләнсек* «назойливый».

Еҙем һөйләшсәһенең үҙенә генә хас лексик диалектизмдар: *сайымсы* – әҙәби телдә *бағыусы* «знахарь», *әлә-һәлә булыу* –

*эңер төшөү, күҙ бәйләнеү* «наступление сумерек», *йәлтәкәй – еңел, төпһөҙ, йүнһеҙ кеше* «человек ненадежный, бездельник», *шаҙыр – яҙғы һыу-күл* «половодье», *әмөкө – йылан балыҡ* «угорь».

Ҡырмыҫҡалы һөйләшсәһендә өршәк, дим, түбәнге ағиҙелыҡ һөйләштәре менән уртаҡ диалекталь лексика ҙур ғына урын ала. Мәҫәлән: *теркәмә* – әҙәби телдә: *әмәйлек* «женское нагрудное украшение из монет», *бәбәк – ҡабаҡ* «веко», *босмаҡ/посмаҡ – мөйөш* «угол», *туҡран тәүбәһе – тумыртҡа тәүбәһе* «ложное раскаяние», *көмбә – бәшмәк* «гриб», *арҡа һабағы – арҡаүҙәк,* өршәк һөйләшендә: *арҡа ҫабағы – умыртҡалыҡ* «позвоночник», *аҫалы балаҫ – биҙәкле балаҫ* «узорчатый палас», *тебейек – тәгәрлек* «чибис», *олаурыу – силсә* «туберкулез», *арый: бер арый – бер мәртәбә* «один раз».

Урта һөйләштең айырым диалектизмдары боронғо төрки теле дәүеренән тороп ҡалған. Уларҙың ҡайһы берҙәре бүтән төрки телдәренең диалект лексикаһы өсөн дә характерлы, тип билдәләй С. Ф. Миржанова һәм шул айҡанлы күп кенә миҫалдар килтерә. Мәҫәлән: *барсалы тауар* – әҙәби телдә *сәскәле тауар* «цветастый материал», барсалау – биҙәкләү «украшать узорами», сыуаш телендә: *пурҫӑн* «шелк», боронғо уйғыр телендә: *барчын* «бархат, дорогая материя», иҫке үзбәк телендә: *барчин* «шелк, вид парчи», *артаҡ* «любимчик»: *Атам артағы түгелһеңдер әле!* «Не выделяй себя, не требуй незаслуженного, подобно отцовскому любимчику», һүрәм һөйләшсәһендә: *атам арҙаҡлыһы* «отцовский любимчик», һары уйғыр телендә: *артаҡ/ардаҡ* «миленький, младенчик, молодой», *дәүә/теүә – дөйә* «верблюд», боронғо төрки телендә шул уҡ мәғәнәлә: *теүә, теүи; өмкә/өмкөл – ятыу, сөмбәй* «омут», төрөк телендә *умк* «глубина», *умкан* «в глубину, глубиной»; *урыҫ-улаҡ – урыҫтар* «русские»: *Урыҫ-улаҡлар ҡаҙып йөрөнө* «Раскапывали русские люди», боронғо төрки телендә: *улаг* «соединение, связь» и т. д.

Урта һөйләштә күп кенә оригиналь фразеологизмдар һәм әйтемдәр яҙып алынған. Мәҫәлән: *бырах туҙҙырыу* – әҙәби телдә *пыр туҙҙырыу; аҡ өҫтөндә ҡара танымау – аҡты ҡаранан айырмау; Ирле геше – ҡорло геше; Аҡсаң булһа, һөйәләр, аҡсаң бөтһә – төйәләр; Оло ғаҙанта бешкән аштың сейе бумай.*

Күренеүенсә, урта һөйләштең лексикаһы ғәйәт үҙенсәлекле. Уның мөһим үҙенсәлектәренең береһе – реликт характерындағы боронғо һүҙҙәрҙең һаҡланып ҡалыуында. Ул һүҙҙәрҙе йыш ҡына бүтән төрки (уйғыр, төрөкмән, төрөк, алтай, ҡырғыҙ, боронғо төрки) телдәре материалдарына таянып аңлатырға кәрәк була[1].

*Һөйләү теле өлгөләре*

*Инйәр һөйләшсәһе*

*Бороңҡо туй*

Зат-ырыуы арыу ғына гешенең ғыҙын тимнәйләр. Анау ауылта фәлән кешенең ғыҙы арыу ғына, эшкә сос, кешегә йағылмаҡлы, шуға башҡоҙа йебәрегеҙ. Йаусы, башҡоҙа бара үҙенең йаҡынынан. Йә атаһы, йә ағаһы. Ҡыҙҙың атаһы белә һөйләшәләр, килешәләр. Ҡыҙҙың атаһы мәһәр һала: илле һум аҡса, бер баш йылҡы, һыйыр, уаҡ мал, бер нисә бот бал, инә туны – гөллөһөн көнөнтә һөйләшәләр. Ҡыҙҙы бер ғат кейентерә кейәү геше. Тәүлә кейәү йағынан ҡыҙ йағына ҡоҙа гилә. Алты-йете өйлө ҡоҙа гилә йыйыңҡа. Кейәү йыуасаһы, бауырҫаҡ, туй, мөсә (һимеҙ һарыҡты һуйыб алып), мөсә һалып тороп кигән тейләр. Туйҙы тереләй эпкиһә, йетәләп, туй ысҡынып ҡасып китә. Туй ғасҡан тейләр.

Ҡоҙаларҙы ярты йултан ҡаршы алалар. Ҡаршы алыусы бер ҡоҙанын тупыйын апҡаса. Тупый алмаға ҡоҙалар сабыша. Йетаманенәһә, тупыйҙы һатыбала солоҡ биреп. Ҡоҙалар төп ҡоҙаға барып төшә. Төп ҡоҙа йыйнау яҫай. Йыйнауға төп ҡоҙа аранын аҫабаһын саҡыра – иң олоһо, иң башы аранын. Ҡунаҡ булалар ике йаҡ та ҡушылып, сәрмә сисәләр, йыуасаны ашайлар. Шуна һуң ҡунаҡларҙы өләшеп алалар өй һайын. Аҙаҡҡы йыйнауҙа бүләкләр бирәләр. Күрниште кейәү күрнише тип, һуңынан бирәләр. Ҡыҙ ғаса. Урманҡа ла йәшенә. Таптырһа таптыра, таптырмаһа йуҡ. Ҡыҙ эҙләгәнтә фис һөрлөгөшөп йәш-үҫкерем сыға.

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 165–167-се биттәр.

Ҡыҙҙы йеңкәләре ғуша. Кейәү ҡәйенйеңкәләргә бүләк бирә. Әбейләргә йыртыш тараталар. Ҡыҙҙы оҙатҡанта сеңнәп баралар әхирәтләре, кейәү аҡса һибепара. Килен артынан килгән йоғо була. Килен бай киһә, бик йоҡло гигән тейләр. Игәт тип килен белән кигән баланы әйтәләр. Ҡырмыҫҡалы йаҡларынта килен артынан кигән игәт мал тейләр ҙәһә.

*Башҡорт АССР-ы Белорет районының Арышпар ауылында (1877 йылғы) Хөснөтдинова Сәмсийыһандан яҙып алынды (Миржанова С. Ф. Южный диалект башкирского языка. М.: Наука, 1979. 255– 256-сы биттәр).*

*Тәржемәһе*

*Старинная свадьба*

Сватают дочь человека из хорошего рода. В такой-то деревне, у такого-то человека дочь хорошая, порядочная, на работу шустрая, к людям приветливая, туда посылайте сватов. Сватом (или первым сватом) едет один из близких. Или отец, или старший брат. С отцом девушки договариваются. Отец девушки ставит выкуп: пятьдесят рублей денег, одного коня, корову, мелкий скот, несколько пудов мёда, шубу для матери – все в это время обговаривают. Девушку с ног до головы одевает жених. Сначала от жениха к невесте приезжают сваты (гости). Из шести-семи домов приезжают сваты на свадьбу. Жениховые гостиницы – баурсак (печеная на масле мелкая сдоба), туй (живой баран) или мёсе (жирная тушка). Даже тушку целую привез, говорят с уважением. Если туй везут в живом виде, на поводу (молодого коня), он иногда, сорвавшись, убегает. «Туй сбежал!» – говорят.

Сватов на полдороге встречают. Один из встречающих у одного из сватов срывает шапку и скачет во весь дух. Сваты бросаются (на своих конях) ему вдогонку. Если не смогут догнать, (хозяин) шапку выкупает, подарив борть. Все сваты останавливаются у главного свата, отца невесты. Он собирает всех и устраивает угощение. На свадьбу он приглашает асабу – старейшину родового подразделения, самого старого, самого главного из рода. Обе стороны, собравшись, угощаются, развязывают свадебный шерстяной мешок, кушают гостинцы.

Потом гостей, разделив между собой, жители деревни увозят к себе по домам. На последнем сборе дарят подарки. Подарок родителям невесты и жениха на право показания лица и разговора со старшими (жених и невеста) преподносят позже. Невеста прячется. И в лес может убежать. Она может так спрятаться, что могут найти, а могут и не найти. На поиски невесты вся молодежь гуртом выходит.

Невесту закрывают с женихом. Невесту с женихом соединяют жены старших братьев ее. Жених одаривает их подарками. Старухам раздают (разорвав) куски материи. Когда провожают девушку-невесту (в деревню жениха), ее подруги голосят, причитают, жених бросает им монеты. У девушки-невестки бывает привезенное с собой богатство (приданое). Если невеста приехала богатая, то говорят, что с большим приданым приехала. Игэтом называют ребенка, который приезжает вместе с невесткой (матерью). В Кармаскалинской стороне говорят, что игэт – это скот, который привозят вместе с невесткой.

*Ҡырмыҫҡалы һөйләшсәһе*

*Тире иләү*

Тирене тоҙло ҡатыҡҡа һалалар, алты-йете көннән ҡатыҡлы тирене йыуалар ҙа тутламаға тышҡа эләләр. Ағастың киртмәсенә эләктереп, урҙаға эләләр. Шуны ирәк тейләр. Бүтән бер хикмәте лә йуғ аның.

*1964 йылда Башҡорт АССР-ы Ҡырмыҫҡалы районы*
*Тирәкле ауылы Ғөбәйҙуллина Ғәфиәнән (1904 йылғы) яҙып алынды*
*(Образцы разговорной речи башкир. Уфа,*
*Башкирское книжное издательство, 1988. 177-се бит).*

*Тәржемәһе*

*Обработка шкуры*

Шкуру замачивают в соленом катыке. Через шесть-семь дней ее вынимают и вешают сушиться на воздухе. Потом, расправив ее, соскабливают специальным скобелем.

## 5. Егән һөйләше

*Биләгән территорияһы,*
*һөйләшкә ҡараған ауылдар*

Егән һөйләше Ғәфүри һәм Ишембай райондарында урынлашҡан типтәр-башҡорт һәм бер төркөм ҡатнаш татар-башҡорт ауылдарының йәнле һөйләү телен үҙ эсенә ала. Һөйләш таралған ареалдың төп өлөшө Ағиҙелдең һул ҡушылдығы – Егән йылғаһы бассейнына тура килә. Шуға күрә беҙ уны егән һөйләше тип атарға булдыҡ. Ғәфүри районында был һөйләшкә ҡараған ауылдар: Игенйылға, Ҡотлоғужа, Бурлы, Байөмбәт, Татар Һаҫыҡкүле, Баҙыҡ, Еҙем-Ҡаран, Туғай, Үтәк, Яңғыҙҡайын; Ишембай районында – Үрге һәм Түбәнге Әрмет, Әрмет-Рәхим, Көҙән, Йәнырыҫ, Ҡыяуыҡ. Уларҙың күпселеге типтәрҙәр, ҡайһы берҙәре мишәрҙәр менән аҫаба башҡорттарҙан торған ҡатнаш ауылдар булараҡ формалашҡан. Был һөйләш вәкилдәре араһында башҡорт халҡының бөйөк улы, исеме бөтөн донъяға билдәле шәрҡиәтсе ғалим Әхмәтзәки Вәлиди, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғәфүри кеүек арҙаҡлы шәхестәр бар. Күренекле сәхнә оҫтаһы, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Таңһылыу Рәшитова, яҙыусылар – башҡорт Корчагины булып танылған әҙип Ибраһим Ғиззәтуллин, шағирәләр Фәүзиә Рәхимғолова, Тамара Искәндәриә, әҙәбиәт белгесе һәм фольклорсы, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Нур Зарипов – Ишембай районының типтәр-башҡорт ауылдарында тыуып үҫкән ижад кешеләре.

Был ауылдарҙың һәр береһенең бай һәм ғәйәт ҡыҙыҡлы тарихы бар. Дөрөҫ, ауыл тарихтары – махсус өйрәнеүҙе талап иткән айырым тема. Әммә диалектология фәне халыҡтың үткәне менән тығыҙ бәйләнештә булыуын яҡшы беләбеҙ. Шуға күрә ҡайһы бер тарихи мәғлүмәттәргә туҡталып үтмәксебеҙ.

Ғәфүри һәм Ишембай райондарындағы типтәр-башҡорт ауылдары табын һәм юрматы башҡорттарының аҫаба ерҙәрендә урынлашҡан. Игенйылға ауылының килеп сығышы тураһында, мәҫәлән, профессор Ә. З. Әсфәндиәров былай тип яҙа:

«Ауылға типтәрҙәр нигеҙ һалған. 1747 йылда уларҙы Бишауыл-Табын һәм Дыуан-Табын улустары аҫаба башҡорттары

үҙ ерҙәренә кереткәндәр. Ете йылдан һуң типтәрҙәр, ер хужалыҡтарына хаҡ түләп, ерҙе үҙҙәренә «ғүмерлек биләмә» итеп беркетеп ҡуйғандар. Бында шулай уҡ яһаҡлы татарҙар ҙа йәшәгән»[1].

Был мәғлүмәттәр 2010 йылдың йәйендә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башҡорт филологияһы факультеты 2-се курс студенттарының диалектологик практика ваҡытында яҙып алған материалдары менән дә бермә-бер тап килеп тора. «Игенйылға бай тарихлы, боронғо ауылдарҙың береһе, – тип яҙҙырған 76 йәшлек уҡытыусы Нәзирә Ишморатова. – Уға 1747 йылда типтәрҙәр нигеҙ һала һәм башта ул Ике йылға ауылы тип йөрөтөлә. Һуңынан Игенйылға тип атала башлай».

Ә бына был текст нәҡ ерле һөйләш үҙенсәлектәрен тулыһынса һаҡлап яҙып алынған булыуы менән айырыуса әһәмиәтле. Уны студенттар шул уҡ практика ваҡытында Туғай ауылында Рәйсә Усман ҡыҙы Әминеванан (1949 йылғы) яҙып алғандар:

«Пеҙнең ауылға Буташ тигән кеше Ырымбур яғынан килеп нигеҙ салған. Пиш пер туған килеп урынлашҡаннар – Хисмәт, Буташ, Абдулла, тағын кеме пулғантыр... Ҡай перәүләр хәҙерге Татарстан яғынан та килгәннәр тей. Туғай тип исем ҡушҡаннар, сөнки пу яҡта таллыҡ, саҙлыҡ пулған. Шушынта инте типтәрләр килгән, тепекәйләр тип тә әйтәләр».

Тарихи сығанаҡтар буйынса, Туғай (Яңы Туғай) ауылына XVIII – XIX быуаттар араһында юрматы ҡәбиләһенең ҡармыш түбәһе башҡорттары нигеҙ һалған. XIX быуат башында улар ауылға типтәрҙәрҙе кереткәндәр. Ә инде 1920 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында бында 216 йортта 1064 типтәр теркәлгән. «Шулай итеп, беҙгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында аҫаба башҡорттар ерһеҙ типтәрҙәргә әйләнгәндәр», – ти профессор Ә. З. Әсфәндиәров[2].

Һәр хәлдә, Туғай ауылы, Үтәк, Яңғыҙҡайын ауылдары һымаҡ уҡ, ҡатнаш типтәр-башҡорт ауылы. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: иң тәүге типтәрҙәр – элекке Булғар һәм Ҡаҙан

---

[1] *Асфандияров А. З.* История сел и деревень Башкортостана: Справочник. Книга третья. Уфа: Китап, 1993. 33-сө бит.

[2] Шунда уҡ. 30-сы бит.

ханлығында йәшәгән, аҙаҡ унан ҡыҫырыҡлап сығарылып, ерһеҙ ҡалған боронғо башҡорттар. Һуңыраҡ был сословиены Волга буйынан башҡорт ерҙәренә килеп һыйынып, бүтән милләт вәкилдәре тулыландырып торған. Ваҡыты-ваҡыты менән төрлө сәбәптәр арҡаһында үҙ илендә аҫаба ерҙәренән ҡолаҡ ҡаҡҡан башҡорттар ҙа типтәргә әйләнгән.

Еҙем-Ҡаран ауылына нигеҙ һалыусы Күрпәс-Табын һәм Кәлсер-Табын улусы башҡорттарына ла, XVIII быуат уртаһында үҙҙәренең аҫаба биләмәләрен Архангель заводы хужаларына һатыу арҡаһында, Дыуан-Табын улусы ерҙәренә типтәрҙәр хоҡуғында килеп урынлашырға тура килә. Артабан был ауылға бер төркөм яһаҡлы татарҙар килеп урынлаша. Еҙем-Ҡаран, шулай итеп, типтәр ауылы булып китә.

Ишембай районындағы Әрмет-Рәхим, Үрге һәм Түбәнге Әрмет, Йәнырыҫ ауылдары ла, нигеҙҙә, ҡасандыр ерһеҙ ҡалып, икенсе ырыу (улус) ерҙәренә килеп ултырған башҡорттар һәм типтәрҙәр ҡатнашлығында формалашҡан. Ҡайһы берҙәренә мишәрҙәр килеп ҡушылып киткән.

Егән буйы типтәр-башҡорт ауылдары халҡының тарихи сығыштары буйынса бер-береһенә яҡын булыуы, оло юлдарҙан алыҫтағы бер төпкөлдә, тау-урмандар араһында бер нисә быуат буйы үҙ-ара аралашып, ойошоп йәшәүе, рухи-мәҙәни, кәсеп-шөғөл, тормош-көнкүреш берҙәмлеге бында телдең боронғолоҡ һыҙаттарының күп кенә бүтән һөйләштәргә ҡарағанда тотороҡлораҡ һаҡланыуына, үҙенсәлекле ерле һөйләштең формалашыуына булышлыҡ иткән. Был һөйләш башҡорт теленең диалекттар системаһында оригиналь урынды алып тора һәм артабан монографик планда, бүтән һөйләштәр һәм әҙәби тел менән сағыштырып, ентекле өйрәнеүҙе талап итә.

### *Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре*

Егән һөйләше тураһында иң тәүге мәғлүмәтте күренекле диалектолог Т. Ғ. Байышевтың 1955 йылда Мәскәүҙә донъя күргән «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың әҙәби телгә мөнәсәбәте» («Башкирские диалекты в их отношении к литера-

турному языку») тигән хеҙмәтендә табабыҙ[1]. Дөрөҫ, был һөйләште ул беҙҙең хәҙерге классификациялағы урта һәм ҡариҙел һөйләштәре менән бергә ҡарай һәм уны, төп фонетик үҙенсәлектән сығып, **п – т** шиүәһе (наречие) тип атай. Уның башҡорт теленең диалектологик картаһында ла һөйләштең таралыу ареалы аныҡ итеп күрһәтеп бирелгән. **П – т** һөйләшен Таһир Ғәлләм улы «күп кенә үҙенсәлектәре менән ғәйәт ҡыҙыҡлы» тип атай. Был һөйләү теле вәкилдәренең күбеһе республиканың урта өлөшөндә, Маҡар (хәҙерге Ишембай), Ғәфүри һәм Белорет райондарында, бер аҙы Иглин, Нуриман, Асҡын һәм Ҡариҙел райондарында йәшәй тип күрһәтә. Билдәле булыуынса, был территория беҙҙең хәҙерге көньяҡ диалект составындағы урта һәм егән һөйләштәренә, шулай уҡ өлөшсә төньяҡ-көнбайыш диалектҡа ҡараған ҡариҙел һөйләше ареалына тап килә. Т. Ғ. Байышев был өс һөйләш өсөн дә характерлы мөһим фонетик үҙенсәлектәрҙе билдәләй (артабан беҙ ҙә үҙ урынында ул күрһәткән үҙенсәлектәргә туҡталып үтәсәкбеҙ, әлбиттә). Шул уҡ ваҡытта һирәклән **ҫ** өнө лә ҡулланыла: *нәҫтә (әллә нәҫтә), төҫ. Ҡойаш пайыған саҡта офоҡта йәшел төҫлө сыҙыҡ күренсә, кеше бәхетле пула.*

Һөйләшкә хас төп фонетик үҙенсәлек, ҡариҙел һөйләшендәге кеүек үк, -*лт, -мт, -нт, -ңт* һәм *-нҡ, -нк, -ңҡ, -ңк, -мҡ, -мк, -рт* ассимилятив өн ҡушылмаларының ҡулланылыуынан тора. Мәҫәлән: *түшелтерек* – әҙәби телдә *түшелдерек, урманта – урманда, ынтыр – ырҙын* (дим, эйек-һаҡмар һөйләштәрендә: *ындыр*); *Яңғыҙҡайын – Йегән пуйынтағы ҡармыш башҡортлары ауылы; Анта-мынта йөрөгәнтә төшөп ҡалған йантауым; инте – инде (Ынтырҙа эшләнем инте); пәрәңке – бәрәңге* (картуф; *Пәрәңкенең пер пото Петровскиҙа пиш тәңкә); ҡараңҡы – ҡараңғы, саңҡы – саңғы, пирте – бирҙе (Пыйыл шәжәрә пәйрәме үткәрҙеләр. Пүләкләр пиртеләр – иң бәләкәй кешегә, иң оло кешегә ауылның).*

Һүҙ башында регуляр рәүештә тиерлек **б** өнө урынына **п** өнө ҡулланыла: *бесән* – һөйләштә: *песән, бесәй – песәй, беҙ – пеҙ, был – пыл/пу, бер – пер, баш – паш, башаҡ – пашаҡ, бала – пала, балта – палта, балыҡ – палыҡ, беләҙек – пелә-*

[1] *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Уфа: Гилем, 2006, 43 – 45-се биттәр.

*ҙек, бәшмәк – пәшмәк, тубырсыҡ – тупырсыҡ, белеү – пелеү, биреү – піреү, бешереү – пешереү, барыу – парыу; Ҡыслыйылға пар, шул Игенйылғаға тоташа парып. Анта ҡысла күп пулған. Анта-пынта парғанта палта тотҡан ҡулына.* Шул уҡ ваҡытта урыҫ теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә **п** урынына **б** әйтелә: *паштет – бастит, пальто – бәлтә, партия – бартия.*

Һүҙ башында бүтән һөйләштәрҙә һәм әҙәби телдә **т** өнө ҡулланылған урында **д** өнө һәм, киреһенсә, **д** урынына **т** өнө ҡулланыла: *тулҡын – дулҡын, тамға – дамға,* ләкин *дүрт – түрт, дарыу – тарыу, тәңгәл – дәңкәл.* Шулай уҡ, ҡариҙел һөйләшендәге кеүек, **с – т** сиратлашыуы бар: *сөскөрөү – төскөрөү, сөсө – төсө.*

Т. Ғ. Байышев, үҙе билдәләгән **п – т** һөйләшенә хас фонетик күренеште аңлатып, түбәндәгесә фараз итә: ул йә сыуаш теленән тороп ҡалған (сөнки күп кенә сыуаштар ҡасандыр ислам динен ҡабул иткән, башҡорттар менән аралашып, уларҙың бер өлөшө башҡортлашҡан), йә иһә был фонетик үҙенсәлек тобол (төмән, бараба) татарҙары теленең йоғонтоһо булыуы ихтимал, ти ул[1]. С. Ф. Миржанова иһә, ҡариҙел һәм урта һөйләштәрҙә һаҡланып ҡалған *-лт, -мт, -нт, -ңт* һымаҡ өн ҡушылмаларының генезисы «берҙәм субстрат күренеш»[2] тигән фекерҙә тора. Субстрат, йәғни был һөйләштәрҙең үҙендә боронғонан тороп ҡалған күренеш булып сыға. Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев, был формалар тарихи яҡтан боронғо төрки Орхон-Йәнәсәй яҙма ҡомартҡыларының теленә барып тоташа, тип иҫәпләгән. Профессор Р. Ғ. Кузеев, был өн ҡушылмалары боронғо уйғыр телендә лә булған, тип күрһәтә.

Бүтән һөйләштәрҙәге, шулай уҡ урта һөйләштәге һәм әҙәби телдәге **һ, ҫ** өндәре урынында, ҡариҙел һөйләшендәге кеүек, **с** өнө килә: *һыу* – һөйләштә: *сыу, һарыҡ – сарыҡ, һыйыр – сыйыр, һаҙлыҡ – саҙлыҡ, ҡыҫала – ҡысла, аҫ – ас, өҫ – өс.* Ләкин *төҫ, паҫма, әллә нәҫтә, ни нәҫтә.*

Һүҙ башында **й – ж** өндәренең сиратлашыуы күҙәтелә: әҙәби телдә: *етте* – һөйләштә *житте, йыйыу – жыйыу, ынйы –*

---

[1] *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Уфа: Гилем, 2006, 44–45-се биттәр.

[2] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа: Китап, 2006. 18-се бит.

*энже, йәй – жәй; Жәй көнө жиләк жыйабыҙ;* ләкин *йәмне, йеңгәй/жиңгәй, йәннәт, йыл, йылы, Йегән/Жигән* (йылға исеме).

Айырым осраҡтарҙа **ҙ – д, б – м,** шулай уҡ **п – ф** сиратлашыуы бар: әҙәби телдә: *бойҙай* – һөйләштә: *бодай, ҙур – дур, Иҙрис – Идрис, Хоҙай – Ходай. Сыусар ҡошо сыу сораған – сыу пиргәнсең, Ходайым, мин сорайым – миңә дә пир бәхет-тәүфиҡ, Ходайым; тупраҡ – туфраҡ, япраҡ – йафраҡ, пәрҙә – фәрҙә, керпек – керфек.*

Ғөмүмән, егән һөйләше нәҡ үҙенең фонетик билдәләре буйынса башҡорт һөйләштәре араһында ғәйәт үҙенсәлекле урында тора.

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Күплек, исем, сифат яһаусы ялғауҙар, бойороҡ ҡылым ялғауҙары тулыһынса көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәрендәгесә, йәғни, *-лар/-ләр, -нар/-нәр, -лыҡ/-лек, -ныҡ/-нек, -лы/-ле, -ны/-не, -ла/-лә, -на/-нә* формаһында килә: *атлар, сарыҡлар, урманнар, көннәр, төннәр, утынныҡ, песәннек, иннек* (мал яба торған ҡура), *ашлыҡ, жиләклек, ташлы, таллы, йәмне, тәмне, башла, йүннә, димнә.*

Көньяҡ диалекттың күршеләге урта һөйләшендәге кеүек үк, бында ла бала ата-әсәһенә йәки кесе туғанына өндәшкәндә, ҡәрҙәшлек һүҙҙәренең аҙағында *-ай* һәм *-әй* бөтөмдәре *-ый* һәм *-ей* формаһында әйтелә: *Агый, әйҙә песән сапмаға;*

*-ҡай, -сай, -саҡ, -ҡас, -анай, -с* иркәләү-кесерәйтеү ялғауҙары, сифаттарға, шулай уҡ исемдәргә ҡушылып, яңы һүҙҙәр яһала: *сыбарҡай, күксәй, ҡолҡас* (әҙәби телдә: *ҡолонсаҡ*), *ҡолос (ҡолонсаҡ), аҡанай, аҡ танаҡай;*

*-са* ялғауы күрһәтеү алмаштарына ҡушылып, күләм-дәрәжә рәүештәрен яһай: *анса (ул тиклем), мынса (быға тиклем), шунса (шул тиклем);*

күрһәтеү алмаштарына *-ңарсы* ялғауы ҡушылып, ваҡыт сиген белдергән рәүеш яһала: *аңарсы, мыңарсы, шуңарсы.*

Алмаштарҙың ошондай варианттары ҡулланыла: *аңа, шуңа, шуңарға; мынау, мыңа, шушы; әллә нинтәй, әллә нәмәкәй, әллә нәҫтә, берәй кем* (әҙәби телдә *берәйһе*), *берәй ҡалай (берәй нисек)* һ. б.

Был күрһәтеү алмашы ике төрлө – *пыл* һәм *пу* формаһында ҡулланыла. Мәҫәлән:

Пыл донйада пулма саран,
Саранныҡлар пигрәк йаман,
Ғәрипләргә иткән йарҙам
Ходай үҙе пирер йарҙам.

Донйалыр пу, донйалыр пу,
Тик уафасыҙ донйалыр пу,
Ҡара сәсне, энже тешне
Гүргә салған донйалыр пу.

*2010 йылдың июлендә Ғәфүри районы Туғай ауылында*
*61 йәшлек Рәйсә Усман ҡыҙы Әминеванан М. Аҡмулла исемендәге*
*Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары*
*яҙып алды.*

Ҡылымдың 2-се зат ялғауҙарында *-һы* элементы ҡулланылмай: *син алаң* – әҙәби телдә: *һин алаһың, сеҙ алағыҙ – һеҙ алаһығыҙ*. Шулай уҡ ҡылымдың киләсәк заман зат ялғауҙары ҡыҫҡара: *киләрем, киләрең, киләрегеҙ*.

*-мага* ялғауы маҡсат хәл ҡылымын белдерә: *Песән сапмаға китте*.

Ҡылымдың йөкмәтеү йүнәлешенең күп кенә ялғауҙары *ҙ* өнөнә бөтә: *ятҡыҙ* – әҙәби телдә *ятҡыр, ҡотҡаҙ – ҡотҡар, үткәҙ – үткәр, күргәҙ – күрһәт*.

Ҡылымдың, күрше дим һөйләшендәге кеүек үк, *-ғаныйы/-гәнейе* тибындағы ҡатмарлы формаһы ҡулланыла: *суҡҡаныйы; Мин йәнә паш баласы булғас, инәй миңә тәүҙән үк сымылтыҡ суҡҡаный инте*. Бынан тыш, ҡылымдың үткән заман ҡатмарлы формалары хәҙерге заман формаһына *-ыйы/-ейе* ярҙамсы ҡылым ҡушыу юлы менән яһала: *торғаннарымы, өләшәҙерейе, сөйләшмәйләрейе*.

Көньяҡ диалекттың бүтән һөйләштәрендәге *белән* (әҙәби телдә *менән*) бәйләүесе *пелән* формаһында әйтелә.

*Лексик үҙенсәлектәре*

Егән һөйләше, урта һөйләш кеүек үк, территориаль йәһәттән барлыҡ башҡорт һөйләштәренең һәм, ғөмүмән, хәҙерге

Башҡортостандың да, Тарихи Башҡортостандың да урталығында урынлашҡан. Шуға күрә уның лексикаһында көньяҡ диалект (урта, дим, өршәк, эйек-һаҡмар һөйләштәре), көнсығыш диалекттың ҡыҙыл, мейәс, әй һөйләштәре, төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡариҙел, түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләштәре менән уртаҡлыҡтар ғәйәт ҙур урын ала. Шул уҡ ваҡытта һөйләштең үҙенә генә хас лексик диалектизмдар ҡатламы ла бар. Уларҙың күпселеге семантик диалектизмдар. Мәҫәлән: *баҡырса – ҡомған, сәйнүк* «медный кумған, чайник»; *сәнеске йеләге, айыу йеләге, бәләкәй агас йеләге* – әҙәби телдә: *ҡурай еләге;* эйек-һаҡмар һөйләшендә шул уҡ мәғәнәлә: *айыу йеләге; йер йикмәге* – әҙәби телдә *бәрәңге/картуф, әжәл бураны – аҡман-тоҡман* (март айында була торған аҙналыҡ буран), *йәлсе, шыҡы – һаран,* урта һөйләштә шул уҡ мәғәнәлә – *шыҡыры; тәктәкәрлек – ҡусҡар, иңкәсәй – ҡамҡа,* һаҡмар, ырғыҙ һөйләшсәләрендә *зиңгәсәй, зәңгәсәй,* өршәк һөйләшендә *йеңгәсәй; бесәй тарысы – алабута, ҡабаҡ – бойҙай ҡабагы; ҡабарыу – үпкәләү, шәк-шәк – сәксәк, мунсала – йыуынгыс.* Туғанлыҡ терминдары: *әнкәй/әнкей/әни/инәй/әннә* – әҙәби телдә *әсәй; әтей – атай; абый – агай, иркәм – һеңлем, нәнәй – әсәй ягынан өләсәй; әңкәй – атай ягынан өләсәй; ҡартатай/ татай – олатай, ҡартинәй/нәни/нәнәй – бабушка; кәртәбаш – оло бала; абыстай/әбей – әсәһенән оло ҡатын кеше, ҡайтармыш туй – кейәү ягында туй.*

Бүтән һөйләштәр менән уртаҡ диалекталь лексика: *гөбөрлө баҡа – гөбөргәйел,* туҡ-соран һөйләшсәһендә лә шул уҡ мәғәнәлә: *гөбөрлө баҡа, ҡутырлы баҡа,* төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрендә, һаҡмар һөйләшсәһендә: *гөбөрлө баҡа – әрмәнде: түш – шәре,* төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрендә, урта урал, әй һөйләштәрендә: *түш/туш,* дим, мейәс, урта һөйләштәрҙә: *тыуыш* – шул уҡ мәғәнәлә; *буҡа – бапаҡ* (балаларҙы ҡурҡытыу өсөн әйтелә торған һүҙ); мейәс, әй һөйләштәрендә шул уҡ мәғәнәлә: *буҡай; Әнә, буҡай гилә!;* ҡариҙел һөйләшендә: *боҡай; эт эсәге – сырмалсыҡ,* өршәк һөйләшендә *эт эсәге* – шул уҡ мәғәнәлә; *шымтый – шым кеше,* урта һөйләштә *шымтый* – шул уҡ мәғәнәлә; *шешәк – икенсе йәштәге һарыҡ, кәзә; Пер йыл пәрәннәмәсә, шешәк тип әйтелә;* туҡ-соран, ырғыҙ һөйләшсәләрендә, урта һөйләштә *шешәк* – шул уҡ мәғәнәлә; *малахай* – бүрек, туҡ-соран, ырғыҙ һөйләшсәләрендә

*малахай* – шул уҡ мәғәнәлә; төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрендә иһә *ҡырма бүрек* мәғәнәһендә ҡулланыла; *көнәркеү – ҡупырайыу,* ҡариҙел, әй һөйләштәрендә: *көнәркеү – әллә кем булыу, бысый икмәк – бешеп етмәгән, уңмаған икмәк,* дим, өршәк, урта, ҡыҙыл, мейәс һөйләштәрендә лә шул уҡ мәғәнәлә: бысый икмәк; *бүртлек/сарҙаҡ – ҡыйыҡ,* һаҡмар һөйләшсәһендә шул уҡ мәғәнәлә: *бүртлек; тыҡсыу – тығыу, тултырыу.* Урта һөйләштә лә шул уҡ мәғәнәлә. Мәҫәлән: *тураҡланған ҡаҙы киҫәктәрен ауыҙына тыҡсыны; ос һыйырым/ҡойаш апай/алла быуай һыйыры – ҡамҡа,* урта урал һөйләшендә шул уҡ мәғәнәлә – *алла быуай сыйыры,* ҡыҙыл, эйек-һаҡмар һөйләшендә – *ҡойаш апай; текмә – ҡойма,* төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрҙә лә *текмә* – шул уҡ мәғәнәлә; *ҡамыраш – әнәле ҡыуаҡлыҡ,* дим, урта һөйләштәрҙә: *ҡамыраш – әнәлек,* дим, урта урал һөйләштәрендә: *ҡамырйемеш*, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрҙә: *ҡамыр жимеше – әнәлек; тайансыҡ мал – килен ҡайны йортона төшкәндә бирелгән мал,* ҡариҙел, урта урал, әй һөйләштәрендә лә шул уҡ мәғәнәлә ҡулланыла; *иннек – индек ҡапҡа* «ворота из нескольких снимающихся жердей», дим, урта, ҡариҙел, эйек-һаҡмар һөйләштәрендә *иннек/иңнек* – шул уҡ мәғәнәлә.

Егән һөйләше башҡорт һөйләштәре араһында ғәйәт үҙенсәлекле урында тора. Үкенескә күрә, әлегәсә уны өйрәнеүгә етерлек иғтибар бирелмәне. Һөйләште, өр-яңы материалдар туплап, бөтөн тулылығында ғилми тикшереү эшен бойомға ашырыу диалектологтарыбыҙ алдында торған бурыс булып ҡала әле.

### *Һөйләү теле өлгөләре*

### *Пеҙнең пәйрәмнәр*

Пыйыл шәжәрә пәйрәме үткәрҙеләр. Пер нисә ғаилә нәҫел ағасын төҙөй инте, туғаннарын парлайлар. Тирә-яҡтан туғаннарын саҡыралар, ҡунаҡлар та килә. Пәйрәм итәләр инте. Пүләкләр пиртеләр – иң бәләкәй кешегә, иң оло кешегә ауылның, кемнең юбилейлары. Иң яҡшы йорт, баҡсаға ҙа пиртеләр.

Ҡорбан пәйрәментә ҡорбан салалар. Сарыҡны перәй оло кешенән салтыралар. Өләшләргә пүләләр, пер өлөшө – ярлы

кешеләргә, икенсе – туғаннарға, үҙеңә... Шунан ҡорбан ашы ашайлар инте.

Сабантуйҙа төрлө ярышлар үткәрәләр, кәнсирт ҡуялар инте. Ат сабыштыралар.

Элек науруз пәйрәме дә үткәрелгән, яҙ көнө инте анысы. Ҡаҙ өмәсенә саҡырғаннар, ҡаҙ суйырға пергәләп. Эшләгәннәр ҙә, күңел дә асҡаннар. Исем ҡушыу, пәбәй туйы. Күп пула икән, санап китсәң.

*2010 йылдың июлендә Ғәфүри районы Туғай ауылында 76 йәшлек Игдисламова Флүрәнән М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенттары яҙып алды.*

*Тәржемәһе*

*Наши праздники*

В этом году провели праздник шежере. Несколько семей составляют родословную, выявляют своих родных. Приглашают со всей округи родственников, приезжают и гости. В общем, празднуют. Дарили подарки – самому маленькому, самому старшему человеку села, тем, у кого юбилей. Награждали и за лучший дом, и за сад.

В праздник жертвоприношения режут жертвенное животное. Делят на части, одну часть раздают людям, другая часть предназначена родственникам и себе. Так угощаются праздничным обедом...

На сабантуях организуют различные соревнования, ставят концерты. Проводят скачки.

Раньше проводили навруз, это уже весной. Приглашали и на праздник гусиного пера для ощипывания гусей. И работали, и веселились. Имянаречение, праздник по случаю рождения ребенка... Много, оказывается, праздников, если начать считать.

## *Игенйылға ауылының йаланнары, ҡырлары*

Үлиҙел буйынан ғына китә Ҡыҙтапҡан йаланы – әйләнәсе белән жимешлек ул – палан анта, муйыл. Пер йөклө хатын жимеш жыйырға тип парған та ҡыҙ бәбәй күтәреп ҡайтҡан.

Шуның өсөн Ҡыҙтапҡан атағаннар. Шунан Хәсән йаланы тигән йалан пар. Анта Хәсән тигән кеше песән сапҡан. Иннек сирәме тигән йалан, тау питләүе бит инте, сабынныҡ, анта жиләк, жимеш үсеп утыра барыбер. Теге йаҡларда Красный Пахар дигән урыс ауылы барыйы элек. Хәҙер урыны ғына ҡалты инте, йалан исеме генә. Рәхмәт йаланы, Иҙел пуйынта ул та, ул Рәхмәтулла тигән кеше анта умарта тотҡан. Поланҡыуаҡ ауыл осонта ғына бит инте, поланнарның төйәге пулған ул. Э-эй, пеҙ сөгөндөр эшләгәнтә сабышып китә торғаннарыйы үргә.

Ҡыслыйылға пар, шул Игенйылғаға тоташа парып. Анта ҡысла күп пулған. Ана шул пуйлауларда Сөйәлтүбә тигән тау пар. Ниә Сөйәлтүбә тигәннәрдер инте. Шул йоморо ғына тау инте ул теге, сөйәл бит инте пер генә пөртөк сыға, шуңа шулай ҡуштылар микән. Әллә Сейәле түбә тигәннәрме? Сөйәлтүбә пуйынта себерткелекләр, әпәт гөлжимешләр була торғаныйы...

Йоморокүл, анта балыҡ тоталарыйы, шунан Ҡышлау күле, Ҡотлоғужа пелән ике арада ғына, ҡыш буйына туңмай тей ул. Шул Ҡышлау күл тирә-яғы ҡыҙыл ҡарағат, ҡара ҡарағат була торғаныйы, шунта жыярға пара торғаныйыҡ...

*2010 йылда Ғәфүри районы Игенйылға ауылында Мозафарова Хәлиҙә Бәҙгетдин ҡыҙынан М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты студенттары яҙып алды.*

III бүлек

# ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ (КӨНБАЙЫШ) ДИАЛЕКТ

## Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү телен башҡорт теленең диалекттар системаһында үҙаллы диалект берәмеге итеп ҡарау мәсьәләһе, үкенескә күрә, оҙаҡ ваҡыттар буйы хәл ителмәйенсә килде. Был иһә ошо ҙур регионда йәшәүсе аҫаба халыҡтың балаларын уларҙың үҙҙәренең милли әҙәби телендә уҡытыу эшен юлға һалыу проблемаһын хәл итеүҙе тотҡарлаусы етди сәбәптәрҙең береһенә әйләнде. Республиканың рәсми даирәләрендә һәм йәмәғәтселек араһында, йәнәһе, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының туған теле татар теле тигән хата ҡараш йәшәп килде һәм ул ғилми нигеҙле булмаған фекерҙең тел практикаһына һәм, ғөмүмән, тел сәйәсәтенә кире йоғонтоһо ғәйәт ҙур булды. Шул уҡ хата статистика мәғлүмәттәренә лә йоғонто яһаны. Дөрөҫ, уҙған быуаттың 30-сы йылдарында республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш райондарында башҡорттарҙы туған башҡорт әҙәби телендә уҡытыуға табан бер ынтылыш булып ала. Мәҫәлән, ул осорҙа Асҡын, Борай, Илеш, Туймазы һ.б. райондарҙа күп кенә башҡорт мәктәптәре асыла. Борай районында, әйтәйек, 1932/1933 уҡыу йылында 2 урта башҡорт крәҫтиән йәштәре мәктәбе, 40 беренсе баҫҡыс башҡорт мәктәбе эшләгән. Ләкин 1930 йылдар аҙағында – 1940 йылдар башында, төрлө һылтауҙар табып, республиканың мәғариф етәкселәре һәм урындағы мәғариф органдары башҡорт ауылдарындағы йөҙәрләгән

мәктәпте татарса уҡытыуға күсерә. Ә инде татар телендә уҡытыу был райондарҙа башҡорт теленең диалект үҙенсәлектәренең юғала барыу процесына килтерә. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының йәнле һөйләү теле үҙенсәлектәре ғәйәт тотороҡло булып сыға – ул бөгөнгө көнгә тиклем үҙенең бик күп мөһим һыҙаттарын һаҡлап алып ҡалған. Шуның өсөн дә башҡорт йәмәғәтселегенә айырыуса уҙған быуаттың 90-сы йылдар башында был регионды башҡорттарын үҙ туған телендә уҡытыу, унда төрлө сфераларҙа башҡорт әҙәби телен ғәмәлгә индереү мәсьәләһен көн тәртибенә ҡуйҙы. Был йәһәттән бигерәк тә Асҡын, Ҡариҙел, шулай уҡ Балтас, Борай, Тәтешле, Мишкә, Краснокама, Яңауыл, Илеш, Дүртөйлө, Баҡалы, Шаран, Туймазы һ. б. райондарҙа башҡорт халҡын һәм уның телен тергеҙеү буйынса күп кенә ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшелде. Шулай уҡ төньяҡ-көнбайыш зонала урынлашҡан ҡалаларҙа башҡорт теленең ҡулланыу сфераһын киңәйтеү һәм башҡорт әҙәби телен уҡытыу йүнәлешендә эштәр алып барыла. Башҡортостанда башҡорт әҙәби телен дәүләт теле буларак уҡытыуҙы ғәмәлгә индереүҙең дә был мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙә роле бик ҙур.

Төньяҡ-көнбайыш диалектты башҡорт йәнле һөйләү теле системаһында ҡарау мәсьәләһен 1940 йылдар аҙағында – 1950 йылдар башында күренекле телсе-диалектолог, башҡорт диалектологияһы буйынса беренсе фән кандидаты Таһир Ғәлләм улы Байышев күтәреп сыҡты. 1949 йылда профессор Н. К. Дмитриев етәкселегендә яҙылған «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың әҙәби телгә мөнәсәбәте» («Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку») тигән кандидатлыҡ диссертацияһында ул беҙҙә өс диалект булғанлығын күрһәтте, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле үҙаллы көнбайыш диалект булыуын нигеҙләне. (Уның был хеҙмәте 1955 йылда Мәскәү дәүләт университеты нәшриәтендә айырым китап итеп баҫтырып сығарылды.)

1954 йылда Т. Ғ. Байышев етәкселегендә Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарына ойошторолған диалектологик экспедиция бай материалдар йыйып алып ҡайтты. Был экспедицияның материалдары төньяҡ-көнбайыш диалектты өйрәнеү һәм уны артабан өр-яңы кимәлдә ғилми

нигеҙләү өсөн мөһим сығанаҡҡа әйләнде. Экспедицияның Т. Ғ. Байышев хәстәрлеге һәм тырышлығы менән төҙөп, ҡулъяҙма том рәүешендә архивҡа тапшырылған ҡиммәтле ғилми отчеты 2008 йылда Өфөнөң «Ғилем» нәшриәтендә айырым йыйынтыҡ булараҡ донъя күрҙе, шуның менән ул материалдар киң ҡатлам уҡыусылар һәм йәмәғәтселек иғтибарына еткерелде. 1964 йылда, алда әйтелгәнсә, ул осорҙа инде сит илдә йәшәгән билдәле тел белгесе, СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Николай Николаевич Поппе башҡорт теленең өс диалекттан торғанлығын раҫлап яҙҙы һәм уның өсөнсөһө итеп нәҡ төньяҡ-көнбайыш диалектын атаны.

Ниһайәт, 1980 йылдар башында күренекле диалектолог Сәриә Фазулла ҡыҙы Миржанова «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» тигән монографияһын тамамланы. Был мөһим хеҙмәт, ун йылға яҡын тотҡарланып ятҡандан һуң, 1991 йылда айырым китап булып баҫылып сыҡты. 2006 йылда Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә уның яңы баҫмаһы донъя күрҙе.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары Башҡортостан Республикаһының Асҡын, Ҡариҙел, Балтас, Тәтешле, Борай, Яңауыл, Краснокама, Мишкә, Илеш, Дүртөйлө, Бөрө, Кушнаренко, Благовещен, Саҡмағош, Туймазы, Баҡалы, Шаран, Бүздәк, Благовар, Бәләбәй, Йәрмәкәй һ. б. райондарында, Пермь крайының Барҙы (Барды), аҙмы-күпме Ҡояҙы, Чернушка, Уйын, Пермь һ. б. райондарында, Татарстан Республикаһының беҙгә күрше Әгерже, Аҡтаныш, Аҙнаҡай, Мөслим, Минзәлә, Сарман, Әлмәт, Бөгөлмә, Баулы, Йотаҙы һ. б. райондарында йәшәй. Был ҙур территория этнографик планда башҡорт халҡының төньяҡ-көнбайыш этнографик өлкәһен барлыҡҡа килтерә. Унда ошондай ырыу-ҡәбилә төркөмдәре билдәле: Ыҡ буйы башҡорттары – байлар ҡәбиләһе (сураш, салағош, ҡалмаш ырыуҙары), бүләр ҡәбиләһе (мышыға, ҡәҙер, бағаҙы ырыуҙары), юрмый ҡәбиләһе, ирәкте ҡәбиләһе, Түбәнге Ағиҙел буйында – йәнәй, гәрә/гәрәй, ҡырғыҙ, йылан, йәлдәк, дыуанай, ҡаңны, ҡаршын, таҙ йәки таҙлар, ыуаныш/маныш, төньяҡта – уран, ғәйнә, ирәкте, танып, балыҡсы, уннар (һуннар), ҡара табын ырыу һәм ҡәбиләләре.

Ғәйәт киң территорияла урынлашҡан был диалект составында бер-береһенән фонетик һәм лексик планда һиҙелерлек айырымланған түбәнге биш һөйләш билдәләнә:

1) ҡариҙел һөйләше,
2) урта урал һөйләше,
3) танып һөйләше,
4) ғәйнә һөйләше,
5) түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле үҙенә генә хас тарихи юл үтеү сәбәпле, башҡорт теленең ҡалған ике диалектынан һәм әҙәби телдән билдәле кимәлдә айырылып тора. Был диалект вәкилдәре йәшәгән территорияға, йәғни Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш зонаһына, XVI быуат баштарында уҡ элекке Ҡаҙан ханлығынан унда боронғо дәүерҙә болғарҙар менән күрше булып йәшәгән башҡорттар ҡыҫырыҡлап сығарыла башлай. Халыҡтың, ерһеҙ ҡалып, яңы урынға килеп урынлашҡан был төркөмө типтәрҙәр сословиеһын барлыҡҡа килтерә. Артабан, 1552 йылда Ҡаҙан ханлығы емерелгәндән һуң, боронғо төньяҡ-көнбайыш башҡорт ерҙәренә Иҙел буйы халыҡтары – татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, мордвалар тулҡын-тулҡын булып ағыла башлай. Батша хөкүмәте мишәрҙәрҙе килтереп ултырта. Был миграция процесы өс быуат ярым дауам итә. Башҡорттар ошо халыҡ вәкилдәре менән тығыҙ аралашып йәшәйҙәр.

Этник йәһәттән ҡатнаш характерҙағы ауылдарҙың булыуы ла ҡыҙыҡлы күренеш. Был осраҡта, ғәҙәттә, боронғо башҡорт ауылына яңы этник төркөмдәр килеп ултыра һәм ауылдарҙа, әйтәйек, башҡорт осо, типтәр осо, ҡаҙанлы, башҡорт нәҫеле, ар нәҫеле, сирмеш нәҫеле, мишәр нәҫеле кеүек аралар әле хәҙер ҙә йәшәп килә. Регионда, үҙ-ара еңел аңлайышлы телдәр булараҡ, башҡорт һәм татар телдәре араһында үҙ-ара йоғонто көслө була. Урындағы башҡорт теле иң элек фонетик планда, ул да булһа бер нисә тартынҡы өн планында (мәҫәлән, **һ**, **ҫ–с**, **с–ч**, **ҙ–з** өндәренең күсеше), татар теленең урта диалектына яҡыная төшһә, татар теле үҙ сиратында шул уҡ фонетика өлкәһендә лә, телмәр мелодикаһы, лексика йәһәтенән дә башҡортлашыу процесын кисерә. Һөҙөмтәлә, башҡорт теле өсөн дә, татар теле өсөн дә билдәле кимәлдә урталыҡтараҡ торған һөйләштәр барлыҡҡа килә. Йәғни, С. Ф. Миржанова

билдәләгәнсә, был яҡ райондарҙа башҡорт һәм татар халыҡ һөйләү теленең сифаттары ҡушылып үрелгән, фин-уғыр телдәренең дә ҡайһы бер һыҙаттарын үҙ эсенә алған бик үҙенсәлекле һөйләү теле формалашҡан. Был процеста элекке мәктәп һәм мәҙрәсәләрҙә – төрки телендә, ә совет осоронда татар телендә уҡытыу ҙа билдәле роль уйнаған. Әммә, шулай булыуға ҡарамаҫтан, төньяҡ-көнбайыш диалект хәҙер ҙә үҙенең төп һыҙаттарын һаҡлап килә. (Оҙаҡ ваҡыттар буйы төньяҡ-көнбайыш диалектын танымай килгән профессор Н. Х. Ишбулатов та аҙаҡ шул уҡ позицияны яҡланы. Ҡарағыҙ: Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000, 172-се бит.) Шул уҡ ваҡытта, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәренә татар теленең йоғонтоһон билдәле кимәлдә таныған хәлдә лә, был күренеште саманан тыш арттырып ҡарау ҙа урынһыҙ. Сөнки, беренсенән, башҡорттар бында төп халыҡ, ер һәм ил хужалары, икенсенән, был яҡ һөйләштәре башҡорт теленең башҡа һөйләштәре менән меңәр йыллыҡ тарихи бәйләнеше, территория берлеге, этник, тел һәм рухи мәҙәниәт берҙәмлеге йәһәтенән тамырҙан бәйле. Башҡорттар өсөн был бер бөтөндөң бары тик үҙенсәлекле бер өлөшө генә. Беҙгә ана шул үҙенсәлектәрҙе өйрәнергә, аңлатырға, бүтән һөйләштәр менән сағыштырып ҡарай белергә генә кәрәк. Шуның өсөн дә профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың башҡорт диалектология фәненең башланғыс осоронда, үкенескә күрә, ашығыслыҡ күрһәтеп, төньяҡ-көнбайыш зонаны татарлашҡан аралыҡ бер һөйләш тип ҡарауы, уның бәләкәйерәк бер территорияла таралған өлөшөн көньяҡ диалект эсендәге айырым бер һөйләш тип кенә баһалауы, уны ла тик тарихи планда ғына башҡорт һөйләше тип иҫәпләүе[1] менән бер нисек тә килешеп булмай. Киреһенсә, Рәсәйҙең Евразия киңлектәрендәге көнбайыштан көнсығышҡа табан меңәрләгән километрға һуҙылған ғәйәт ҙур төрки халыҡтар донъяһының тел үҙенсәлектәренә иғтибар менән ҡараһаң, башҡорт теленә хас тел яңғырашы Татарстан Республикаһының көнсығыш һәм хатта эстәрәк ятҡан райондарынан уҡ башланғанын күрәбеҙ. Бына шул хаҡта ҡыҙыҡлы бер күҙәтеү:

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш. Өфө, 1958, 53–54-се, 58-се биттәр.

«Показательно, что в тюркском мире нет четких границ по этническому, – тип яҙа сәйәсәт фәндәре докторы, Татарстан Республикаһының Рәсәй Федерацияһы Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Н. М. Мириханов. – Если прочертить на карте линию от Москвы к Казахстану, то мы сначала увидим западных татар – мишарей, которые в основном внешне похожи на славян – европейцев и фонетика их речи тяготеет к русскому языку. Дальше, за Волгой, мы попадаем к казанским татарам, во внешности и поведении которых начинает присутствовать восточный колорит, но в речи заметно проявляется угро-финское произношение, характерное для всего Поволжья. В восточных районах Татарстана язык смягчается и постепенно переходит в башкирскую речь, а та, в свою очередь, тоже постепенно (к востоку от Уральского хребта – Р. Ш. ) – в казахскую»[1].

Бында телдең башта башҡорт телмәренә, ә инде уның үҙ сиратында ҡаҙаҡ телмәренә күсеүе тураһындағы һүҙҙәргә әһәмиәт биреп тормаҫҡа ла мөмкин. Сөнки мәсьәләнең исеменән үк күренеүенсә, автор төрки халыҡтарын асылда төрки-татарҙар тигән бер халыҡ итеп ҡарай. Әммә тел үҙенсәлектәренең таралыу ареалдары тураһындағы фекер бик урынлы: башҡорт теленә хас үҙенсәлек Татарстан Республикаһының көнсығыш районларынан, ысынлап та нәҡ элекке Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәре башҡорттарының һөйләү теленән башланып, бөтөн төньяҡ-көнбайыш һөйләштәре аша үтеп сыға, артабан көньяҡ һәм көнсығыш диалекттар һөйләштәренә барып тоташа. Әгәр ҙә шулай булмаһа, мәҫәлән, мәктәптә татар теле уҡытыусылары, был зонала диалект хатаһы тип иҫәпләп, *ҙ, ҡ, ғ* өндәрен төҙәтеү өсөн (*ҙ* өнө, ғөмүмән, башҡорт теле һәм күпселек төньяҡ-көнбайыш һөйләштәре өсөн характерлы) ошондай тиҙ әйтем уйлап сығармаған булырҙар ине: *«Беҙнең ҡыҙыл сыйыр ҡыҙыл яр астында ҡыҙыл быҙау быҙаулаған. Үҙе ҡыҙыл, үҙе үгеҙ, үҙе үҙебеҙнеке»*. Был тиҙ әйтемдәге татар әҙәби теле өсөн, йәнәһе, хата тип иҫәпләнгән

---

[1] *Мириханов Н. М.* Единство в многообразии: тюрко-татары – этническое богатство РФ // Тюркский мир: Сб. научных статей. М.: Инсан, 2004. 38-се бит.

барлыҡ өндәрҙең дә (*ҙ, ҡ, ғ*) башҡорт теленең спецификаһын билдәләүсе өндәр булыуын иҫбатлап тормаҫҡа ла мөмкин.

Миҫалдар быныҡ менән генә сикләнмәй, әлбиттә.

*Төньяҡ-көнбайыш диалект өсөн характерлы үҙенсәлектәр*

1. Фонетика өлкәһендә бүтән диалекттарҙағы һәм әҙәби телдәге **һ, ҫ** өндәре урынында **с** өнө ҡулланыла. **Һ, ҫ – с** тап килешенә миҫалдар: *сағыҙаҡ, сигеҙ/сигез, симеҙ/симез, сарымсаҡ*. **Һ** өнө ғәрәп-фарсы һүҙҙәрендә төшөп ҡалыусан: *әйбәт* – әҙәби телдә *һәйбәт, өнәр – һөнәр, ауа – һауа, аман – һаман, әр – һәр, Ҡарман – Ҡаһарман, маир – маһир*. С. Ф. Миржанова фекеренсә, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрендә тарихи планда ла **һ** өнө бөтөнләй булмаған, ә ул элек, дим һөйләше кеүек үк, **ҫ** диалекты булған.

2. **С** өнө урынында, ҡариҙел һөйләшенән башҡаларында, **с** йәки йомшаҡ **ч’** өнө ҡулланыла: *сабыу/чабыу – сабыу, аҡсарлаҡ/аҡчарлаҡ – аҡсарлаҡ, сағыл/чағыл – сағыл, сабын/чабын – сабын* һ. б.

3. Һүҙ аҙағында *-ай/-әй, -май/-мәй* дифтонгылары регуляр рәүештә, әҙәби телдәге кеүек, киң әйтелешле ***а, ә*** өндәре менән ҡулланыла: *алмай, бармай, килмәйбеҙ, әҙәмгә санамайлар, атай, әтәй, түтәй, йеңгәй*.

4. Түбәнге ағиҙел-ыҡ, ҡариҙел һөйләштәрендә, Минзәлә, Бөгөлмә башҡорттарының һөйләү телендә башҡорт теленең көньяҡ диалект һәм әҙәби тел менән уртаҡ **ҙ** өнө киң ҡулланыла. Бында **ҙ** өнө һүҙ аҙағында, һүҙ уртаһында (ике һуҙынҡы араһында) килгән осраҡтарҙа башҡорт әҙәби теле менән бер үк позицияла: *беҙ, сеҙ, сигеҙ, симеҙ; ҡоҙа, ҡоҙағый, ҡаҙаҡ, боҙай, Иҙел, Баҙы* (гидронимдар) һ. б. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һәм кеше исемдәрендә лә **з** өнө **ҙ** өнөнә күсеүе менән характерлы: *ҙакун – закон, калхуҙ – колхоз, Ҙакир – Закир, Ҙәкиә – Зәкиә, Ҙәйнәп – Зәйнәп, Ҙаһира – Заһира*. Кеше исемдәрендә һүҙ башында **ҙ** өнөнөң артабан **д** өнөнә күсеү осраҡтары бар: *Заһира>Ҙаһира>Даһира*.

5. **К, т** өндәренән башланған бер төркөм һүҙҙәрҙең беренсе ижегендә, башҡорт әҙәби телендәгесә, **ә** өнө килә: *кәм* – башҡорт телендә *кәм*, татар телендә *ким; кәбән* – башҡорт

телендә *кәбән*, татар телендә *кибәк; кәрәк* – башҡорт телендә *кәрәк*, татар телендә *кирәк, кәштә* – башҡорт телендә *кәштә*, татар телендә *киштә, кәңәш* – башҡорт телендә *кәңәш*, татар телендә *киңәш*.

6. Бойороҡ һөйкәлешенең күплектәге 2-се затының *-ң (-ың/-ең)* формаһындағы ҡыҫҡа варианты ҡулланыла: *барың* – әҙәби телдә *барығыҙ, ҡайтың – ҡайтығыҙ, торың – торогоҙ, йөгерең – йүгерегеҙ*. Был күренеш башҡорт теленең көнсығыш диалекты әй, арғаяш һөйләштәре өсөн дә характерлы.

7. Морфология өлкәһендә төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәре күбеһенсә көньяҡ диалектҡа яҡын тора. Мәҫәлән, күплек ялғауҙары бында ла ике төрлө: *-лар/-ләр* һәм **м, н, ң** өндәренән һуң *-нар/-нәр* формаһында килә: *атлар, сыйырлар, таулар, ҡалалар, урманнар, болыннар, көннәр, төннәр*.

Исем һәм сифат яһаусы ялғауҙар шулай уҡ ике төрлө: *-лыҡ/-лек, -ныҡ/-нек, -лы/-ле, -ны/-не* формаһында ҡулланыла: *ташлыҡ, шырлыҡ, ҡомныҡ, утынныҡ, унныҡ, иркеннек, ташлы, ҡомны, тәмне, йәмне*.

Ялғауҙар һәм киҫәксәләр башындағы **л, н** өндәре урынында **ҙ, д** өндәре килә: *ҡалаҙа/ҡалада, ҡалаҙан/ҡаладан* – әҙәби телдә *ҡалала, ҡаланан*.

8. Лексика өлкәһендә төньяҡ-көнбайыш диалекттың төп һүҙлек фонды дөйөм башҡорт халыҡ теленең һүҙ байлығы менән тап килә. Ҡайһы бер һүҙҙәр әҙәби тел формаһында ла ҡулланыла: *кәзә* – башҡорт әҙәби телендә *кәзә*, татар телендә *кәҗә; кәкүк* – шул уҡ тәртиптә: *кәкүк – кәкүк* һәм *күке, ҡомалаҡ – ҡомалаҡ* һәм *ҡолмаҡ*, айырым һөйләштәрҙә *әтәс – әтәс* һәм *әтәч*.

Төньяҡ-көнбайыш диалект өсөн характерлы айырым лексик диалектизмдар ҙа күҙәтелә. Мәҫәлән: *барлы-көрле* (төньяҡ-көнбайыш, шулай уҡ урта урал һөйләше) – *етеш, бай (Ғүмер буйы барлы-көрле йәшәде); йамайаҡ, йамыйаҡ* (төньяҡ-көнбайыш диалект, минзәлә һөйләше, дим һөйләше) – *ағас ороһонан соҡоп яһалған сеүәтә; иркәбай – атай йә иһә әсәйҙең ағаһына өндәшеү һүҙе; иркәттәй – апайға иркәләп өндәшеү һүҙе (Түтәйне балтүтәй, иркәттәй тидер эйек. Тәмне теллейек элек)*.

Ер-һыу атамаларында нәҡ ошо диалекттың һөйләштәре өсөн характерлы тамыр һүҙҙәр, урындағы географик терминдар һаҡланып ҡалғанлығы күҙәтелә. Мәҫәлән: *төҙ/төз* – диал. *йылға тамағы Һөйәнтөҙ,* һөйл.: *Сөйәнтөз* – Асҡын районында 1736 йылда батша ғәскәрҙәре тарафынан яндырылған боронғо башҡорт ауылы; *Уҡтөҙ* – Свердловск өлкәһендә (Екатеринбург ҡалаһының көньяҡ-көнбайышында) элекке йылға исеме, Исәттең уң ҡушылдығы (хәҙер: Патрушиха), шул уҡ гидронимдан икенсел атама – *Уҡтөҙ тауҙары* (Уктусские горы); *әгер* – диал. *«ҡур, ҡурғы»,* урыҫса «дрожжи, закваска; болотистое место» (*Әгер* – Туймазы районында йылға исеме, Сөндөң ҡушылдығы; *Әгертамаҡ* – шул уҡ райондағы ауыл, *Әгерже* – хәҙерге Татарстан Республикаһында ауыл һәм район атамаһы, урыҫса: Агрыз, Агрызский һ. б.).

## 1. Ҡариҙел һөйләше

### *Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар*

Ҡариҙел һөйләше республикабыҙҙың Асҡын һәм Ҡариҙел райондары башҡорттарының һәм ошо төбәктә йәшәгән типтәрҙәрҙең йәнле һөйләү теле иҫәпләнә. Этник планда – боронғо балыҡсы һәм ун (һун) ҡәбиләләре башҡорттары (ундар үҙҙәре һыу-ун, ҡыр-ун, байҡы ырыуҙарынан тора). Һөйләш Ҡариҙелдең урта ағымындағы һәм Төй йылғаһы буйындағы ауылдарҙа таралған. С. Ф. Миржанова билдәләүенсә, был ошондай ауылдар: Асҡын районында – Ҡубияҙ, Урмияҙ (Юрмияҙ), Әүәҙәй, Ҡушкүл, Солтанбәк, Сураш, Яңы Сөйөш, Ҡашҡа, Иҫке һәм Яңы Күскилде, Уршаҙы (Уршиҙе), Ҡамашиҙе һ. б. Ҡариҙел районында: Туйыш (Ташмәсет), Юлдаш (Әлмәш), Ҡоҙаш, Сиҙәш, Яҡуп (Артауыл), Иҫке һәм Яңы Аҡбүләк, Хәлил, Абдулла (Бәрҙәш), Ҡараяр, Йәнсәйет, Маты, Шамрат, Яңы Бәрҙәш, Бертем, Иҫке Бағазы, Болмоҙо, Ураҙбаҡты, Муллаҡай, Әмин һ. б. ауылдар. Был төбәктә, башҡорттар һәм типтәрҙәр менән күрше булып, мишәр (татар), мари, удмурт ауылдары ла урынлашҡан. Мариҙар, удмурттар, үҙ туған телдәренән тыш, урындағы башҡорт һөйләшен дә яҡшы беләләр.

Ҡайһы бер ауылдарҙың этник составында ар, ширмеш (сирмеш) һымаҡ араларҙың булыуы бында ҡасандыр удмурт, мари кешеләренең, килеп ултырып, башҡортлашып китеүе тураһында һөйләй. Ә бына, легенда буйынса, Асҡын районы Ҡубияҙ һәм Урмияҙ ауылдарына нигеҙ һалыусылар Ҡубай һәм Юрмый тигән мариҙар булған тип фараз ителә.

Балыҡсылар һәм уннарҙың килеп сығышы боронғо төрки дәүере һәм унан да боронғораҡ тарихи дәүерҙәргә барып тоташа. *Балыҡ* һүҙе боронғо төрки һәм уйғыр телдәрендә «ҡала» мәғәнәһен белдерә. Шуны иҫәпкә алғанда, балыҡсы тигән этнонимды, беренсенән, үҙенең төп мәғәнәһендә, йәғни «рыболов» (*балыҡ + -сы*) тип, һәм, икенсенән, «строитель городов» тип аңлатырға мөмкин. Ә инде ун (һун), уннар ҡәбиләһе, һыу-ун, ҡыр-ун ырыуҙарының тарихы боронғо төркиҙәрҙең ата-бабалары иҫәпләнгән һундарҙан килә, дөрөҫөрәге, һундар составындағы Орхон йылғаһы бассейнында йәшәгән ун-уғыр, ун-уйғыр тигән уйғыр ҡәбиләләр берекмәһе менән бәйле тип ҡарарға була[1].

### *Һөйләштең фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәре*

Ҡариҙел һөйләшенең төп фонетик үҙенсәлеге боронғо Орхон-Йәнәсәй яҙма ҡомартҡылары өсөн характерлы *-лт, -мт, -нт, -нҡ, -ңҡ, -ңк, -мҡ, -мк, -рт* диссимилятив өн ҡушылмалары ҡулланылыуы менән билдәләнә. Мәҫәлән: *анта* – әҙәби телдә *унда, мынта – бында, урманта – урманда, урманҡа – урманға, бәрәңке* – бүтән һөйләштәрҙә *бәрәңге, бороңҡо – боронғо, Уралта – Уралда, алты – алды, килте – килде, саҡрымҡа – саҡрымға, пазартан – баҙарҙан, барты – барҙы.* Диссимилятив өн ҡушылмаларын ҡулланыу йәһәтенән ҡариҙел һөйләшен көньяҡ диалекттың урта һәм еғән һөйләштәре менән йәнәш ҡуйырға мөмкин. Әммә бында, урта һөйләштән айырмалы рәүештә, *-рт* ҡушылмаһын ҡулланыу ҙа күҙәтелә. Был үҙенсәлек буйынса, ти С. Ф. Миржанова, ҡариҙел һөйләше урта һөйләштән боронғораҡ һәм боронғо төрки яҙма ҡомартҡылары, боронғо уйғыр яҙма теленә тағы ла яҡыныраҡ тора.

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа: Китап, 2006. 15–16-сы биттәр.

Һөйләштә һүҙ башында күпселек осраҡтарҙа һаңғырау **п** өнө ҡулланыла: *патша* – әҙәби телдә *батша, песән – бесән, пысаҡ – бысаҡ; Пашымтағы шәлем пелкейрәк – Башымдағы шәлем бәләкәйерәк*. Был үҙенсәлек буйынса ла ҡариҙел һөйләше урта һәм егән һөйләштәренә яҡын тора. Шунан сығып, Т. Ғ. Байышев был һөйләштәрҙе **п–т** һөйләше тип атаған. Әммә айырым һөйләш итеп билдәләү өсөн бер генә критерий етмәй, әлбиттә.

Бында, танып, дим һәм түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләштәрендәге кеүек үк, һүҙ башында иренләшкән *а* өнө ҡулланыла: *ма°й, а°ҡса, ба°ҡса, А°кпеләк* – әҙәби телдә *Аҡбуләк* (ауыл исеме).

Һүҙ һәм ижек башында күпселек осраҡтарҙа **й** өнө килә: *йер/жир* – әҙәби телдә *ер, йәйәү – йәйәү*. Ләкин, шул уҡ ваҡытта, *жыйыу – йыйыу, жиде – ете, жен – ен, жуйыу – йуйыу*.

Әҙәби телдәге **һ, ҫ** өндәре урынына **с** өнөн ҡулланыу характерлы. Әҙәби телдә *һыйыр, һары, һандуғас, һайыҫҡан,* һөйләштә *сыйыр, сары, сандуғас, сайысҡан,* шулай уҡ әҙәби телдә *таҫтамал, уҫаҡ, баҫыу;* һөйләштә *тастымал, усаҡ, басыу*. Әҙәби телдәге **с** өнөнә лә **с** өнө тап килә: *сәс – сәс* «волосы», *асы – асы* «кислый, горький», *саҡрым – саҡрым* «верста», *сирмеш – сирмеш* «черемис» (этноним), *сапсаҡ – сапсаҡ* «кадка (из цельного куска дерева)». Йәшерәк быуын кешеләренең телендә һирәкләп **с** өнө урынына **ч** өнө ҡулланыу ҙа күҙәтелә: *суйын/чуйын* «чугун», *сын/чын* «правда, истина».

**Ҙ** өнө ҡариҙел һөйләше өсөн характерлы өндәрҙең береһе иҫәпләнә. Ул асылда бөтә позицияларҙа ла актив ҡулланыла: *сеҙ* – әҙәби телдә *һеҙ, сигеҙ – һигеҙ, симеҙ – һимеҙ, ҡоҙа – ҡоҙа, ҡоҙағый – ҡоҙағый*. Шул уҡ ваҡытта айырым осраҡтарҙа һүҙ башында **д** өнөнөң **ҙ** өнөнә күсеүе күҙәтелә: әҙәби телдә *дегәнәк* – һөйләштә *ҙегәнәк* «репей», *Дыуан* – һөйләштә *Ҙуван* (этноним, топоним).

Йәнә ошондай өн сиратлашыуҙары характерлы: **ы–а**: әҙәби телдә *аҡыҡ* – һөйләштә *а°хаҡ* «сердолик», *ҡабыҡ – ҡа°баҡ* «кожура, чешуя», *саңғы – са°ңҡа* «лыжи», *бышҡырыу – пышҡырау* «фыркать, чихать»;

**а–ы:** әҙәби телдә *умырзая* – һөйләштә *умырзыя* «подснежник», *таҫтамал – таҫтымал* «полотенце», *һарауһыҙ – сарыусыҙ* «невоспитанный»;

ФОРМЫ ПОВЕЛИТЕЛЬНОГО НАКЛОНЕНИЯ
В ГОВОРАХ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА




Башҡорт һөйләштәрендә бойороҡ һөйкәлеше
формаларының таралыу ареалдары

**е—ә:** әҙәби телдә *агай-эне* – һөйләштә *агайнә* «группа родственников», *инселәү* «предназначать, завещать» – *инсәләү* «дать слово, обещать», *нескә* – *нәскә* «тонкий»;

**ә—е:** әҙәби телдә *бәләкәй* – һөйләштә *белкей/белекей/белеки* «маленький», *әрекмән* – *эрекмән* «репейник, лопух»;

**ә—и:** әҙәби телдә *илгәҙәк* – һөйләштә *илгиҙәк* «ласковый, общительный», *сәскә* – *сискә/сисәк* «цветок», *сәкмән* – *сикмән* «чекмень», *сәкәләшеү* – *сикәләшеү* «ругаться, сцепиться»;

**у – о, ү – ө:** әҙәби телдә *бутҡа* – һөйләштә *ботҡа* «каша», *һуңғы* – *соңғы* «последний», *күркә* – *көркә* «индюк», *йүгереү* – *йөгөрөү* «бежать»;

**о – у:** әҙәби телдә *һорау* – һөйләштә *сурау*;

**ы, е – о, ө:** әҙәби телдә *ҡыңғырау* – һөйләштә *ҡонҡорау* «звонок», *шыма – шома* «гладкий», *тейәү – төйәү* «грузить», *сепрәк – сөпрәк* «тряпка»;

һүҙ башында **т** – **д** күсеше осраштырғылай: әҙәби телдә *тары* – һөйләштә *дары, тулҡын – дулҡын;*

һүҙ башында **к – г** сиратлашыуы: әҙәби телдә *көбө* – һөйләштә *гөбө*;

**б, п – ф** сиратлашыуы: әҙәби телдә *керпек* – һөйләштә *керфек* «ресница, ресницы», *тупраҡ – туфраҡ* «почва», *ебәк – ефәк* «шелк»;

*-өй* өн ҡушылмаһы **р** өнө алдынан – **ү**, бүтән өндәр алдынан иһә **и**, һирәклән **ү** өнөнә күсә: әҙәби телдә *өйрәк* – һөйләштә *үрҙәк, өйрә – үрә* «суп (без мяса)», *өйрәнеү – үрәнеү* «научиться», *төймә – тимә* «пуговица», *төйҙә – тиҙә* «обух», *һөйләү – сүләү* «говорить».

Килеш ялғауҙары **л, н, д** өндәре урынына **ҙ** өнөнән башлана: *ҡалала – ҡалаҙа, ҡаланан – ҡалаҙан.*

Бойороҡ һөйкәлешенең күплектәге 2-се затында, көнсығыш диалект һөйләштәрендәге һымаҡ уҡ, ҡыҫҡа *-ң (-ың, -ең)* ялғауы ҡулланыла: әҙәби телдә *алығыҙ, бирегеҙ, күрегеҙ* – һөйләштә *алың, бирең, күрең.*

Һөйләштә *ис, кий* раҫлау киҫәксәләре ҡулланыла: *бирҙем ис* – әҙәби телдә *бирҙем дә баһа; килгән кий – килгән шул; Беренсе Яҡуп килеб утырган. Аҡбулат ҡарт кий.*

## *Лексик үҙенсәлектәре*

С. Ф. Миржанова ҡариҙел һөйләшендә көньяҡ һәм көнсығыш диалект һөйләштәре менән уртаҡ, шулай уҡ татар теленең мишәр диалекты менән аралашыу һөҙөмтәһендә формалашҡан лексик ҡатламдар һәм, иң мөһиме, төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәре өсөн характерлы региональ лексик ҡатлам булғанлығын билдәләп үтә. Һөйләштең һүҙлек составының нигеҙен, әлбиттә, барлыҡ тематик төркөмдәрҙә лә ҡулланылыусы дөйөм башҡорт лексикаһы билдәләй. Ул ошондай миҫалдар килтерә: *ағай* «брат», «дядя», *алтыр* – әҙәби телдә *алдыр* «деревянная чаша среднего размера», *арҡа мейе* «спинной мозг», *атинә – ата-инә* «родители», *кесәртке – кеҫәртке*

«ящерица», *көсөгән* – «орёл белоголовый», *лепке* – әҙәби телдә *лепкә* «родничок», *селкәүес* – әҙәби телдә *һелкәүес* «сеяльница» һ. б.

Ҡариҙел һөйләше өсөн нигеҙҙә көньяҡ диалекттың урта һәм дим, бер килке эйек-һаҡмар һөйләштәре менән яҡын дөйөм лексик ҡатлам диалекталь лексиканың боронғораҡ ҡатламына ҡарай тип фараз итергә була: *ашнаҡ/ут яҡҡыс* «летняя кухня», *бағымсы* «ворожея», «предсказатель», *драж/ траж* «черный шмель, шершень», *аса* – дим һөйләшендә *аҫа* «снег на деревьях, иней», *парса* – дим һөйләшендә *барса* «узор, расцветка», *сүпләп суғыу* – дим һөйләшендә *сүпләп ҫуғыу*, урта һөйләштә, эйек-юшатыр һөйләшсәһендә *сүпләп һуғыу*, әй һөйләшендә *сүпләп, суптарҙап һуғыу* «браное, узорное ткачество», *бүлтерек* (төньяҡ-көнбайыш диалектында, дим, урта һөйләштәрендә, һаҡмар һөйләшсәһендә) *көҙгө бәрәс* «осенний приплод овец и коз», *аяҙ – аҡлан* «поляна», *ҡамырлауыҡ – энәлек* «боярышник», *меле – селбәрә, пешек – сайыр, орғасы – ваҡ малдың инәһе, шәрҙәк – бүкән,* ҡыҙыл һөйләшендә *ширҙек – урындыҡ ҡаҙнаһы,* эйек-һаҡмар һөйләшендә *ширлек – эскәмйә, ҡаулан – йылан ҡауы,* ҡыҙыл һөйләшендә *ҡаулан – иҫке үлән, сүл – иттән аҡҡан һары һыу,* ҡыҙыл һөйләшендә *һыу-һүл ваҡыты – яҙғы ҡар ирегән мәл, палтыҙ* – 1) *балдыҙ;* 2) *ҡәйнеш* (арғаяш һөйләшендә *балдыҫ – ҡәйнеш*).

Н. Х. Ишбулатов Асҡын һәм Ҡариҙел башҡорттары һөйләшенең лексика өлкәһендә Борай һәм Яңауыл башҡорттарының һөйләү теленән айырымланып тороуын билдәләүсе ошондай һүҙҙәрҙе миҫал итеп килтерә:

| Асҡын районында | Яңауыл районында | Әҙәби телдә |
|---|---|---|
| *мөгөш* | *почмаҡ* | *мөйөш* |
| *ятма ситән* | *чыбыҡ киртә* | *ситән* |
| *септә* | *чыпта* | *септә* |
| *сапсаҡ* | *кисмәк* | *сапсаҡ* |
| *кереш* | *сигә ҡарамасы* | *кереш* |
| *мөшкәр* | *зур чүкеш* | *балға* |
| *көшөл тысҡаны* | *су ҡомағы* | *көшөл* |

| | | |
|---|---|---|
| *йүрәләй* | *серкәш тейен* | *әлгәнйәк* |
| *аҡ сәпсек* | *чәберчек* | *аҡ сәпсек* |
| *тысҡан* | *бигәнә* | *яғалбай* |
| *сөрәгәй* | *чурағай, бойра* | *сөрәгәй* |
| *ҡызыйғыс* | *тәкәрлек* | *тәгәрлек* |
| *дөңгәж* | *дүңгәж* | *иңкеш* |
| *ҡалҡҡы* | *ҡалҡма* | *ҡалҡыуыс* |
| *кәс таҡта* | *чабала* | *төрән* |
| *шөйтөм* | *ҡысланҡы* | *ҡалдау* |
| *сүсәкәй* | *очло тау* | *сусаҡ* |
| *көрт* | *көрөндө* | *көрт* |
| *көтөк* | *ҡачышкы* | *ҡасыш* |
| *йәнәгә* | *жанағай* | *ҡәйнеш* |
| *кинйә* | *төпчөк* | *кинйә* |
| *ҡайны* | *ҡайната, бейата* | *ҡайны* |
| *ҡайнаға* | *бей ағай* | *ҡайнаға* |

Артабан ул: «Ҡариҙел һөйләше үҙенең күп кенә үҙенсәлектәре менән төньяҡ-көнсығыш һөйләштәренә яҡын килә»[1], – тип билдәләй.

Дөйөм алғанда, ҡариҙел һөйләше үҙенең географик йәһәттән урынлашыуы менән дә, төп фонетик, морфологик, лексик үҙенсәлектәре буйынса ла башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш һөйләштәренең нәҡ урталығында тора, ә көньяҡтан дим һәм урта һөйләштәр менән контактҡа керә. Унда көнсығыш диалекттың – әй һәм мейәс, көньяҡ диалекттың дим, урта һәм егән һөйләштәре менән уртаҡ үҙенсәлектәр ҙур урын ала. Реликт характерындағы *-лт, -мт, -нт, -нҡ, -ңк, -мҡ, -мк* диссимилятив өн ҡушылмаларын ҡулланыу ҡариҙел һөйләшен көньяҡ диалекттың урта һәм егән һөйләштәре менән яҡынайта. Шул уҡ ваҡытта *-рт* өн ҡушылмаһының ҡулланылыуы (*бартым, күртем* – әҙәби телдә *барҙым, күрҙем*) башҡорт теленең барлыҡ һөйләштәре араһында ла үҙенә генә хас бер үҙенсәлек булыуы менән характерлы. Был өн ҡушылмаһы һирәкләп егән һөйләшендә лә күҙәтелә. Мәҫәлән: *ҡунаҡлар та килә (ҡунаҡтар ҙа килә); пүләкләр тә*

[1] *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 175-се бит.

*пиртеләр (бүләктәр ҙә бирҙеләр).* Ә инде әҙәби телдәге **h**, **ç** өндәренә **с** өнө тап килеүе буйынса Асҡын һәм Ҡариҙел башҡорттарының һөйләү теле төньяҡ-көнбайыш диалекттың – урта урал, көньяҡ диалекттың – егән, көнсығыш диалекттың асыуҙы һөйләштәре, шулай уҡ Силәбе өлкәһенең – Ҡоншаҡ, Ҡорған өлкәһенең Сафакүл райондарында йәшәүсе мишәрҙәрҙең һөйләү теле менән бер үк позицияла тора.

Алда әйтелгәнсә, һөйләштең төп һүҙлек составын иһә дөйөм башҡорт теленең лексикаһы тәшкил итә.

*Һөйләү теле өлгөһө*

*Иске Аҡпеләк ауылы тарихы*

Беренсе Яҡуп килеб утырған, Аҡбүләк ҡарт кий. Айаусыҙ урманныҡ, йау булған. Йәйә, уҡ белән суғышҡан башҡырт. Боҙайны сәйнәп ҡаҙ ҡауырсыны йәбештереп, уҡның башағын тәмәке ҡайнатып тығып, ҡаты ныҡ эшләгән уҡны. Башҡыртның жире зур былған. Бертем аулы ҡырҡ саҡрым мынан, Ҡиғазының йөҙ илле саҡрымҡа суҙылған жире элгәре. Бертем йылғасына Ҡиғазыдан килеб утырғаннар. Беҙнең ата-бабалар урыстан, татардан түләткән йерне. Әрбәлүтсиәге сәкле башҡырт үткәрмәгән мишәрне. Аҡбүләктән сыҡҡан Шамырат, Ҡоҙаш, теҙелешеп Йүр(ү)ҙән буйына утырған башҡырт.

Аҡпеләкнең нәселләре: Шәмекәй, Аҡпеләк, Балтин. Шәмекәй нәселен аҙбарынта өс лары булыуынан беләләр. Өс лары булмаса – Балтин.

Тау исемнәре:

Йантыҡ тауы. Әлекен ҡартатайлар ҡайрыҙан үлә эшләгәннәр. Ҡабыҡ соҙғаҡ ясағаннар. Үлә белән тау шуғаннар. Йантаҡ тауынан шуғанта үләсе йантайып китә. Йамаб алғаннар. Салтыба – суғыша торған тау булған байҡылар белән. Байҡы-Йуныс аулы типтәр. Байҡыбаш – мишәр.

*1966 йылда Башҡорт АССР-ы Ҡариҙел районы*
*Аҡбүләк ауылында йәшәүсе Нурдәүләтов Хәйреламандан*
*(1905 йылда тыуған, грамоталы) яҙып алынған*
*(Миржанова С. Ф. Северо-западный диалект башкирского языка.*
*Уфа: Китап, 2006. 73-сө бит).*

Аңлатма:

*Үлә* – 1) ҡабыҡтан яһалған һоҫҡо (совок из лубка коры); 2) ҡабыҡ сана (сани, обшитые корой).

*Тәржемәһе*

*История деревни*

Первым поселился Якуп, это же старик Акбуляк. Дремучий лес был, были войны. Башкиры воевали с луком и стрелами. Луки изготовляли крепкие, прочные. Для того, прожевывая пшеницу, приклеивали гусиные перья, наконечник стрелы, перед тем, как вдеть его, пропитывали табачным соком. У башкир земля была огромная. Деревня Бартым в сорока километрах отсюда, у кигазинцев на сто пятьдесят километров была протянута в прошлом. На берега Бартыма переселились из Кигазов. Нашим предкам обязаны были платить за землю русские, татары. До революции башкиры не пускали мишарей (на свои земли). Из Акбуляка отделились Шамратово, Кудашево, вдоль по Юрюзани расселялись башкиры.

Родовые подразделения от Акбуляка: Шамекай, Акбуляк, Балтины. Род Шамекая определяли по наличию трех ларей для зерна. Если нет трех ларей, то это Балтины.

Названия гор:

Гора Янтык. В прошлом деды наши мастерили сани, обшитые корой. Изготовляли также совки из лубка коры. На санях из коры катались с горы. Когда катались с горы Янтык, сани наклонялись. (Отсюда и название Янтык – «наклонная (гора)».) А если с горы Ямады катались, рвалась обшивка саней. Приходилось латать. Получается «латали, латаная (гора)».

Салтуба – это гора, у которой дрались с байкинцами. Байки-Юнусово – деревня тептярская, в Байкибаше живут мишари.

## 2. Урта Урал һөйләше

*Һөйләштең территорияһы,*
*халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы*

Урта Урал башҡорттарының йәнле һөйләү телен (нигеҙҙә уның төньяҡ зонаһын) беҙ урта урал һөйләше тип атайбыҙ.

һөйләш Свердловск өлкәһенең көньяҡ райондары, Башҡортостан Республикаһы Мәсетле районының төньяҡ өлөшөндәге территорияла таралған. Этнографик планда Урта Урал башҡорттарының күпселеген өпәй ҡәбиләһе билдәләй: һөйләү теле йәһәтенән өйрәнелгән ике тиҫтәнән артыҡ ауылдың 12-һендә өпәйҙәр йәшәй. Был ауылдар Свердловск өлкәһенең Түбәнге Һирге (Нижнесергинский), Красноуфимск (Красноуфимский), Әртә (Артинский) һәм Башҡортостан Республикаһы Мәсетле районының төньяҡ өлөшөндә (Абдулла, Борғатъя, Оло һәм Бәләкәй Аҡа, Оло Ҡыҙылбай, Әжекәй ауылдары) нигеҙҙә Өфө (Ҡариҙел) йылғаһының үрге ағымында урынлашҡан. Революцияға тиклем улар элекке Пермь губернаһының Красноуфимск өйәҙе составында булған. Өпәйҙәрҙән тыш, был төбәктә йәнә һыҙғы, ҡошсо, шулай уҡ ғәйнәләрҙең, типтәрҙәрҙең бер өлөшө йәшәй. Урта Урал башҡорттары йәшәгән ареалдың көньяҡ зонаһында Силәбе өлкәһенең Нязепетровск районы, Йәткүл (Еткуль) ауылы башҡорттары – терһәк, һеңрән, ҡара ҡатай ырыу-ҡәбилә вәкилдәре ғүмер итә. Свердловск өлкәһендә башҡорт ауылдары Көңгөр татарҙары, мишәрҙәр менән аралаш урынлашҡан. Мәсетле районындағы айырым мишәр-башҡорт ауылдарының (Оло һәм Бәләкәй Аҡа һ. б.) һөйләү теле шулай уҡ башҡорт теленең урта урал һөйләшенә ҡарай.

Урта Урал башҡорттары оҙаҡ ҡына ваҡыттар Урал алды башҡорттарынан территориаль йәһәттән айырымланып йәшәйҙәр, ә Урал аръяғы башҡорттарынан уларҙы Урал һырттары айырып тора. Ошо рәүешле этностың төп өлөшөнән айырымланып йәшәү һәм этник составтың төрлө булыуы, шулай уҡ татарҙар менән аралашыу һөйләштең ғәйәт ҡатмарлы күренеш булып формалашыуына килтерә.

Урта Урал башҡорттарының һөйләү телен тәү башлап монографик планда тикшереүсе билдәле башҡорт диалектологы М. И. Дилмөхәмәтов был һөйләште ҡайһы бер мөһим үҙенсәлектәре буйынса (тартынҡыларҙың сиратлашыуы, исем яһаусы һәм форма яһаусы аффикстар, күплек ялғауҙары) ике зонаға – төньяҡ һәм көньяҡ лингвистик зоналарға бүлеп өйрәнде[1]. Әммә, яңынан ентекләберәк ҡараһаҡ, был ике

[1] *Дильмухаметов М. И.* Говор среднеуральских башкир. Уфа: Гилем, 2006.

зонаны бер һөйләшкә берләштереүҙең урынһыҙ булғанлығына төшөнөргә мөмкин. Сөнки төньяҡ зона үҙенең төп фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәре менән төньяҡ-көнбайыш диалектҡа, ә инде көньяҡ лингвистик зона көнсығыш диалектҡа ҡарай. Хеҙмәттең йомғаҡлау өлөшөндә автор үҙе лә шул уҡ фекергә килгән. Был хаҡта ул шулай тип яҙа: «Көньяҡ зона халҡының теле көнсығыш диалекттың әй һөйләшенә ҡарай. Ә Йәткүл ауылында йәшәүселәрҙең һөйләү теле көнсығыш диалекттың арғаяш һөйләшенә яҡын тора, шул уҡ ваҡытта унда салйоғот һөйләшенә хас һыҙаттар ҙа күренеп ҡала. Төньяҡ зона теле күрше һөйләштәр менән сағыштырғанда үҙенең спецификаһы йәһәтенән башҡорт теленең бөтөн кимәлдәрҙә лә, айырыуса лексикала һаҡланып ҡалған бик күп боронғо һыҙаттарын туплаған айырым һөйләш тип ҡаралырға мөмкин»[1].

## *Фонетик үҙенсәлектәре*

Күренекле фольклор белгесе һәм яҙыусы, профессор Кирәй Мәргән уҙған быуаттың 60-сы йылдар башында Урта Урал башҡорттары араһында экспедицияла йөрөй һәм шул хаҡта «Йыр дәфтәре» тигән китабында юлъяҙмалар баҫтырып сығара. Был һөйләш вәкилдәрен ул, **с** һәм **ч** өндәрен ҡулланыуҙан сығып, ике төркөмгә бүлеп күрһәтә, уларҙы *с-ләшкән* башҡорттар һәм *ч-ләшкән* башҡорттар тип атай. Әммә башҡорт әҙәби телендәге **с** өнө урынында **ч** өнөн ҡулланыу төбәктең төньяҡ-көнбайыш тарафындағы ауылдар – нигеҙҙә Красноуфимск районындағы Бәйәктөҙ (Усть-Баяк), Урта Боғалыш (Средний Бугалыш), Һыҙғы (Сызги), Әртә районындағы Әжеғол (Азигулово) ауылдары өсөн генә характерлы. Ул төбәктә *чаңға* (*саңғы* «лыжи»), *чәч* (*сәс* «волосы»), *чәчәү* (*сәсәү* «долго, мучительно кашлять») тибындағы **с** > **ч** күсеше мәктәптә башҡорт балаларына туған тел урынына татар әҙәби телен уҡытыу йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән. (Үҙ сиратында шул уҡ Красноуфимск, Әртә райондарындағы татарҙарҙың телендә айырым ауылдарҙа, киреһенсә, башҡорт теле йоғонтоһонда

[1] *Дильмухаметов М. И.* Говор среднеуральских башкир. Уфа: Гилем, 2006. 122-се бит.

**ч** өнө урынына **с** өнөн ҡулланыу күҙәтелә: *сәй, бысыраҡ.*) Бында шулай уҡ ҡалын **ж** өнө урынында йомшаҡ **җ** өнө ҡулланыла: *җәй* (*йәй* «лето»), *кинҗә* (*кинйә* «последыш»).

Һөйләштең төп фонетик, морфологик, лексик үҙенсәлектәре М. И. Дилмөхәмәтовтың алда телгә алынған «Урта Урал башҡорттарының һөйләше» («Говор среднеуральских башкир») тигән хеҙмәтендә ғәйәт тулы яҡтыртылған. Китаптың был бүлеге нәҡ ана шул хеҙмәткә таянып яҙылды, фактик материал да шунан алынды. Беҙ, әлбиттә, урта урал һөйләше тигән билдәләмәне, алда әйтелгәнсә, унда тикшерелгән ике зонаның төньяҡ өлөшөнә ҡарата ҡулланып эш итәбеҙ. Ә инде көньяҡ зона артабан көнсығыш диалект һөйләштәре составында өйрәнелергә тейеш.

Урта урал һөйләшенең төп фонетик үҙенсәлектәре һуҙынҡылар өлкәһендә өндәрҙең төрлө позициялағы үҙгәрештәре менән бәйле. Мәҫәлән, тар һуҙынҡыларҙың киң һуҙынҡыларға алмашыныуы, тип күрһәтә М. И. Дилмөхәмәтов, Урта Урал башҡорттары теленең характерлы үҙенсәлектәренең береһе булып тора. Шуны ла әйтергә кәрәк: был өн күсештәре йыш ҡына тарыраҡ ареал, хатта бер йәки бер нисә ауыл өсөн характерлы. Шуға күрә бындай осраҡтарҙа йәйә эсендә айырым ауыл исемдәрен күрһәтеп барырға тура килде. Икенсе яҡтан, теге йәки был өн сиратлашыуҙары башҡорт теленең бүтән һөйләштәрендә лә күҙәтелә. Быға иһә *саг.* (сағыштырығыҙ) тигән иҫкәрмә менән һирәкләп миҫалдар килтерә барҙыҡ. (Йәйә эсендә көньяҡ зонаға ҡараған ауылдарҙың исемдәре лә күрһәтелде.)

Иң элек һүҙҙең төрлө позицияһында **а** өнөнөң әҙәби телдәге **ы, у** өндәренә тап килеү осраҡтарын күрһәтеп үтергә мөмкин:

**а – ы** тап килеүе: *аласын* (Араҡай) – әҙәби телдә *ыласын* «сокол», *чаңга* (Урта Боғалыш) – *саңғы* «лыжи», саг. *саңга* (дим), *саңҡа* (урта) – *саңғы* «лыжи».

Шул уҡ ваҡытта айырым һүҙҙәрҙә, киреһенсә, **ы** өнөнөң **а** өнөнә күсеүе лә күҙәтелә: *ҡыугасы* (Араҡай) – *ҡаугасы* < *гаугасы* «скандалист»; *һыуа* (Шөкөр, Үрмәкәй) – *һауа* «воздух»; *умырзыйа* – *умырзая* «горицвет, подснежник»; *тастымал* – *таҫтамал* «полотенце»; *туры* – *тура* «прямо»; саг. *умырзыйа* (ҡыҙыл, әй), *умырҙыйа, умырзыйа* (әйек-һаҡ-

мар) – *умырзаяя* «горицвет»; *таҫтымал* (ҡариҙел) – *һөлгө* «полотенце с вышивкой или узорной тканью на концах», *таҫтымал* (өршәк) – *таҫтамал* «полотенце».

**у – а** тап килеүе: *аҡлау* (Әжекәй) – *уҡлау* «скалка для раскатывания теста»; *бастау* (Аҡабаш, Үрмәкәй, Әжекәй), *пастау* (Араҡай, Урта Боғалыш, Бәйәктөҙ) – *буҫтау* «сукно»; *алабаға* (Үрмәкәй) – *алабуға* «окунь», *алабаға* (көньяҡ зона, дим) – *алабуға* «окунь».

Киң һуҙынҡы **ә** һүҙҙең төрлө позицияһында **э/е, ө, и** тар һуҙынҡылар урынында ҡулланыла, йәғни

**ә – э (е)** тап килеүе: *эйе* (Үрмәкәй, Бәйәктөҙ) – *эйе* «да»; *селпәрәмә* (Тәкә, Абдулла), *сәрпәрәмә* (Оло Ҡыҙылбай) – *селпәрәмә* «вдребезги»; *кәсәртке* (Ҡорғат, Аҡабаш, Абдулла, Бәйәктөҙ, Әжекәй) – *кеҫәртке* «ящерица»; *мәрйән* (Шөкөр, Бәйәктөҙ, Оло Ҡыҙылбай) – *мәрйен* «коралл, бусина»; *мейә* (Теләш, Шөкөр) – *мейе* «мозг»; *үрмәкчә* (Урта Боғалыш) – *үрмәксе* «паук»; сағ.: *һәмәк* (Йәткүл) – *һемәк* «кран, носик»; *әрәкмән* (Әптрәк) – *әрекмән* «лопух»; *сәү* (Юлдаш, эйекһаҡмар һөйләше) – *сеү* «тише, перестань»;

**ә – ө** тап килеүе: *гәрләүек* – *гөрләүек* «ручей, поток дождевых и талых вод»; *әндәшеү* (Бәйәктөҙ), *әндәшеү/эндәшеү* (Шөкөр), *әндәшеү* (төньяҡ-көнсығыш һөйләштәр) – *өндәшеү* «окликать, окликнуть, откликаться, откликнуться, подавать голос, подать голос»;

айырым осраҡтарҙа **и** өнөнөң **ә** өнөнә күсеүе күҙәтелә: *кәрәм* (Аҡабаш) – *кирәм* «ремень, веревка, при помощи которой пчеловоды-бортники взбираются на высокое бортевое дерево»; *тәстә* (Шөкөр) – *тиҫтә* «десяток»; *сәҙәп* – *һиҙәп* «мелкая пуговица»; сағ.: *тәҫтә* (урта) – *тиҫтә* «десяток»; *һәҙәп* (көньяҡ зона) – *һиҙәп, һәҙәбүлән* (әй) «алтея»; *әңгеш* (Әптерәй, арғаяш һөйләше) – *иңкеш* «шмель»;

**э(е) – ө** тап килеүе: *эйәләү* (Бәйәктөҙ) – *өйәләү* «заваливаться, завалиться (о лошадях, когда они, валяясь по земле, попадают спиной в выемку и не могут встать)»; *эндәү* (Аҡабаш) – *өндәү* «уговаривать, агитировать, звать»; *эндәшеү* – *өндәшеү* «окликать, подать голос»; *кетеү* (Аҡабаш) – *көтөү* «стадо»; *мехәпәт* – мөхәббәт «любовь»; *беткән* – *бөткән* «закончившийся»; сағ. *эн* (ҡыҙыл, мейәс) – *өн; эндәү* (ҡариҙел, танып) – *өндәү, өндәшеү* (дим, ҡариҙел) – *өндәшеү*;

**э(е) — и** тап килеүе: *эрләү – иләү* «прясть»; *эреү – иреү* «таять, растаять»; *эшетеү – ишетеү* «слышать, услышать»; *шепкән* (Урта Боғалыш, Бәйәктөҙ, Оло Ҡыҙылбай) – *шипкән* «рыжик (растение)»; *чегән* (Бәйәктөҙ) – *сегән* (Шөкөр, Араҡай, Үрмәкәй) – *сиган* «цыган»; сағ.: *эрләү* (дим, ҡариҙел, урта) – *иләү; шепкән* (урта) – *шипкән; сегән* (эйек-һаҡмар, мейәс, ҡыҙыл) – *сиган*;

айырым осраҡтарҙа **э(е) — ә** сиратлашыуы күҙәтелә: *эмәйҙек* (Аҡабаш, Урта Боғалыш) – *әмәйҙек* «женское нагрудное украшение»; *бесей – бесәй* «кошка»; *тәбешәк – тәпәшәк* «низкий»; *тилберән орлоҡ* (Бәйәктөҙ) – *тилебәрән* «белена, дурман»; *белекей/белкей/белеки/белки* (Шөкөр, Араҡай, Үрмәкәй) – *бәләкәй* «маленький»; *Мәсегүт – Мәсәгүт* (ауыл атамаһы). «**Э(е) — ә** сиратлашыуы, – тип билдәләй М. И. Дилмөхәмәтов, йәнә көнсығыш диалекттың – әй, арғаяш, көньяҡта – дим, урта, төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡариҙел һөйләштәре өсөн характерлы».

Һөйләштә **и** һуҙынҡыһы айырым осраҡтарҙа әҙәби телдәге **ә, э (е), ы** өндәре урынында килә: *шикәр* (Бәйәктөҙ, Урта Боғалыш) – *шәкәр* «сахар», *фирештә – фәрештә* «ангел»; *жийәү* (Бәйәктөҙ) – *йәйәү* «пешком»; *бипей* (Теләш) – *бәпкә* «гусенок, утенок»; *чичкә* (Урта Боғалыш, Бәйәктөҙ), *сискә – сәскә* «цветок», *тирән/тәрән – тәрән* «глубокий»; *мәсит* (Теләш) – *мәсет* «мечеть»; *билмин* (Оло Ҡыҙылбай) – *билмән* «пельмени»; *иҙа сигеү* (Теләш) – *ыҙа сигеү* «мучаться», *ҡарсига – ҡарсыга* «ястреб»; *сагылдыриҡ* (Үрмәкәй, Бәйәктөҙ) – *согалдыриҡ* (Шөкөр) – *һагалдырыҡ* «тесьма, лента у женского платка, которая служит завязкой»; *ыуылдыриҡ* (Үрмәкәй) – *ыуылдырыҡ* «икра».

Һөйләштә **о—у, ө—ү** һәм, киреһенсә, **у—о, ү—ө** тап килеүе күҙәтелә: *оҡлау* (Абдулла, Бәләкәй Аҡа, Оло Ҡыҙылбай, Бәйәктөҙ) – *уҡлау* «скалка для раскатывания теста»; *соҡоу – суҡыу* «клевать (о гусе)»; *ҡоңғоҙ* (Араҡай) – *ҡуңыҙ* «жук»; *шолай* (Шөкөр) – *шулай* «так»; *йохаланыу – юхаланыу* «подхалимничать»; *бостау* (Оло Ҡыҙылбай) – *буҫтау* «сукно»; *тоҡмас* (Бәйәктөҙ, Әжекәй, Һыҙғы) – *туҡмас; өйтөбә* (Бәйәктөҙ) – *түбә, өй түбәһе* «крыша»; *мөкләк* (Бәйәктөҙ), сағ.: *мүкләк* (ҡариҙел, дим) – *туҡал* «комолый, безрогий (о корове, козе и т. д.)»; *сөпрә* (Шөкөр, Урта Боғалыш, Әже-

кәй) – *супрә* «дрожжи, закваска»; *хөкөмәт* (Шөкөр) – *хөкүмәт* «правительство»;

*буғырҙаҡ* (Үрмәкәй), *буғырҙаҡ/боғарҙаҡ* (Шөкөр) – *боғарҙаҡ* «дыхательное горло, трахея»; *тума халыҡ* (Аҡҡол) – *тома* (әй, ҡыҙыл) «неграмотный»; сағ.: *буғарҙаҡ* (дим, ҡариҙел, танып), *буғырлаҡ* (урта) – *боғарҙаҡ* «дыхательное горло, трахея»;

*күпшә* (Шөкөр, Урта Боғалыш, Бәйәктөҙ) – *көпшә* «купырь»; *үгетләү* (Шөкөр) – *өгөтләү* «уговаривать»;

**о – у, у – о** сиратлашыуы тарихи күҙлектән боронғолоҡ һыҙаты иҫәпләнә. Был үҙенсәлек айырыуса көнсығыш диалекттың әй һөйләше өсөн характерлы.

Тартынҡылар өлкәһендә түбәндәге үҙенсәлектәр билдәләнә: һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында **б** өнөнә **п** өнө тап килеү күренеше бар: *псән* (Урта Боғалыш, Оло Ҡыҙылбай, Теләш), *пчән* (Бәйәктөҙ) – *бесән* «сено»; *псаҡ* (Урта Боғалыш, Оло Ҡыҙылбай), *пчаҡ* (Бәйәктөҙ) – *бысаҡ* «нож»; *пима* (Әжекәй) – *быйма* «валенки»; *мәҡәппәтле* (Үрмәкәй) – *мөхәббәтле* «симпатичный». Был күренеш арғаяш, ҡариҙел, танып, дим, өршәк, урта, егән һөйләштәрендә лә күҙәтелә.

Һүҙ һәм ижек башында, күп кенә бүтән һөйләштәрҙәге кеүек үк, **м – б** тап килеүенә миҫалдар: *майтаҡ* (Шөкөр, Әжекәй, Аҡабаш), сағ.: *майтаҡ* (ҡариҙел, танып) – *байтаҡ* «изрядно, значительно, гораздо»; *мында* – *бында* «здесь»; *мынау* – *бынау* «этот»; *мынауы* – *бынауы* «этот»; киреһенсә, **б – м** тап килеүе лә осрай: *боронсаҡ* – *морондоҡ* «намордник»; *бис* (Бәләкәй Аҡа) – *мейес* «печь»; *борондоғинәй*, сағ.: *морондоғинәй* (көнсығыш диалект), *морондығинәй* (дим, ҡариҙел, танып) – *морондоғинәй* «посаженая мать невесты»; *буйынса* (Шөкөр, Аҡабаш, Араҡай) – *муйынса* «женское нагрудное украшение, надеваемое на шею»; *ҡубыҙ* (Шөкөр, Аҡҡол) – *ҡумыҙ* «кубыз (щипковый музыкальный инструмент)».

Һүҙ башында һәм һүҙ уртаһында әҙәби телдәге **п** өнөнә **ф** өнө тап килеү осраҡтары: *фәрҙә* – *пәрҙә* «занавес», *ҡалфаҡ* (Урта Боғалыш) – *ҡалпаҡ* «женский головной убор»; *туфраҡ* (Шөкөр, Ҡорғат) – *тупраҡ* «почва». Әммә *Өпө* – *Өфө* (гидроним), *Өпәле* – *Өфәле* (ҡала), урыҫса *Уфа, Уфалей*.

Башҡорт теле һөйләштәрендә *-нт, -мт, -ңк, -лт* диссимилятив өн ҡушылмалары боронғо төрки яҙма ҡомартҡылар

дәүеренән һаҡланып ҡалған һирәк күренештәр рәтендә тора. Был күренеш иң элек ҡариҙел, егән, урта һөйләштәр өсөн характерлы. Ундай боронғо өн ҡушылмаларын беҙ өпәй башҡорттарының телендә лә осраттыҡ, ти М. И. Дилмөхәмәтов һәм ошондай миҫалдар килтерә: *ашанты* (Әртә-Шигер), дим һөйләшендә *ашанды – аҙыҡ, ашамлыҡ* «еда, кушанье»; *ҡомтоҡ* (Аҡабаш) – *сәйгүн* «чайник»; *маңҡай* (Әжекәй) – *маңлай* «лоб»; *килте – килде* «пришел», *йыл та – йыл да* «каждый год», *артабанты – артабан* «дальше, в дальнейшем», *анта – унда* «там», *Пирмтә – Пермдә* «в Перми».

Һөйләштә **һ** һәм **ҫ** өндәре айырым һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла. Мәҫәлән: *дөрөҫ* (Шөкөр, Үрмәкәй) «правильный, точный»; *туҫтаҡ* (Тәкә, Аҡабаш, Әртә-Шигер) «деревянная чашка (для питья кумыса)»; *бәҫ* (Тәкә, Ҡорғат, Абдулла) «иней»; *һуҡыр себен* (Тәкә) «мошкара»; *ҡыр кәзәһе* (Тәкә) «косуля». Ә дөйөм алғанда, әҙәби телдәге **һ, ҫ** өндәренә **с** өнө тап килә: *сыйыр – һыйыр* «корова», *сарыҡ – һарыҡ* «овца», *сәҙәп – һиҙәп* «пуговица (мелкая)», *усаҡ/аусаҡ – уҫаҡ* «осина».

Бәйәктөҙ, Һыҙғы, Әжеғол ауылдарының, йәғни, Кирәй Мәргән әйткәнсә, *ч-ләшкән* башҡорттарҙың һөйләү телендә әҙәби телдәге **с** өнөнә регуляр рәүештә **ч** өнө тап килә: *чаңғы – саңғы* «лыжи», *чирәм – сиҙәм* «целина», *чәй – сәй* «чай», *ҡарчыға – ҡарсыға* «ястреб», *чәч – сәс* «волосы», *чичкә – сәскә* «цветок». Ошо уҡ төбәктәге Урта Боғалыш башҡорттарының телендә иһә **с** өнөнөң **ч** өнөнә күсеүе айырым һүҙҙәрҙә генә күҙәтелә: *чаңға, ҡарчыға, чәч, әммә сирәм – сиҙәм, селпәрәмә, сәй, сөсө, ҡысҡыс – ҡыҫҡыс* «шипцы (для углей)».

Красноуфимск һәм Әртә райондарындағы был дүрт ауыл халҡының телендә шулай уҡ һүҙ һәм ижек башында әҙәби телдәге **й** өнөнөң йомшаҡ **җ** өнөнә күсеүе характерлы: *җыйын – йыйын* «народный праздник», *җәй – йәй* «лето», *җил – ел* «ветер», *җән – йән* «душа», *җен – ен* «бес», *кинҗә – кинйә* «последыш, младший», *җиҙе/йеҙе – ете* «семь», *ҡалҗа/ҡалйа* «кусок мяса». Әммә һөйләштең күпселек өлөшөндә әҙәби телдәге **й** өнөнә ҡаты **ж** өнө тап килә: *жылыу – йылыу* «полынья», *жәйәү – йәйәү* «пешком», *буржаҡ – буръяҡ* «мутный». Айырым осраҡтарҙа **ж** һәм **й** өндәре параллель ҡулланыла: *жән/йән – йән* «душа», *жир/йер* «земля», *жыйын/йыйын – йыйын*.

Ә ҙ һәм з тартынҡыларын ҡулланыуҙа бөтөнләй эҙмәэҙлелек күҙәтелмәй. Мәҫәлән: *ҡыз – ҡыҙ* «девочка, девушка», ләкин *ҡоҙа* «сват», *мөгөҙ* «рог», *аҙаҡ* «после, потом», *иҙән/изән* «пол», *утыҙ/утыз* «тридцать». Һүҙ башында ҙ – д тап килеү осраҡтары бар: *ҙан – дан* «слава, известность, знатность»; *ҙанны кеше* (Әжекәй) – *данлы кеше* «знатный человек»; *ҙәү* – ҡайһы бер бүтән һөйләштәрҙә *дәү – ҙур* «большой».

Дөйөм алғанда, урта урал һөйләше үҙенең фонетик үҙенсәлектәре буйынса төньяҡ-көнбайыш диалекттың – ҡариҙел, көнсығыш диалекттың – әй, мейәс, арғаяш, көньяҡ диалекттың урта, егән, дим, өршәк һөйләштәренә яҡын тора.

*Морфологик үҙенсәлектәре*

Урта урал һөйләшендә, әй, урта, ҡыҙыл һөйләштәрендәге һәм Һарытау өлкәһе башҡорттарының телендәге кеүек үк, билдәһеҙ килеш формаһы төбәү килеш функцияһында ҡулланыла: әҙәби телдәге *Силәбегә киткән* урынына – *Силәбе киткән* «уехал в Челябинск».

Һөйләштә *-ҡай/-кәй* аффиксы һүҙ яһаусы һәм форма яһаусы аффикс булып тора: *ҡәйнекәй* (Әжекәй, Оло Ҡыҙылбай ауылдары) – *ҡәйнеш* «шурин (младший брат жены)», *инәкәй* (Үрмәкәй ауылы) – *өләсәй* «бабушка»; *-ҡай/-кәй*, форма яһаусы аффикс булараҡ, бер нисә мәғәнә белдерә: 1) иркәләү мәғәнәһе: *балаҡай* «детка», *кейәүкәй* «зятек», *киленкәй* «сношенка», *әтекәй/ әткәй* «папенька», сағ.: *әткәй* (урта һөйл.) «папенька»; 2) иркәләү-кесерәйтеү мәғәнәһе: *әпәкәй* (Teләш), *әпәк, әпәкәй* (көнс.диал.) «хлебушко»; билдәһеҙлек мәғәнәһе: *бер ирекәй* «какой-то мужчина», *бер бисәкәй* «какая-то женщина», *бер кешекәй* «какой-то человек».

Зат алмаштарының төбәү, урын-ваҡыт, сығанаҡ килеш ялғауҙары әҙәби телдәге ошондай уҡ ялғауҙарҙан айырымлана. Мәҫәлән, төбәү килештә: *минеңә, мейә – миңә; синеңә, сийә, сиңә, аныңа, аңа;* урын-ваҡыт килештә: *минеңдә, миндә; синдә, аныңда, анда;* сығанаҡ килештә: *минән, синән, аныңдан, анан.*

Бойороҡ ҡылымдың *-ың/-ең* 2-се зат күплек формаһы әҙәби телдәге *-ығыҙ/-егеҙ* формаһына ҡарағанда киңерәк ҡулланыла: *тороң – торогоҙ* «вставайте», *килең – килегеҙ*

«приходите», *йәң – йәгеҙ* «давайте». Бойороҡ ҡылымдың был ҡыҫҡа формаһы башҡорт теленең төньяҡ-көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрендә, татар теленең бөрө, байҡыбаш, эскен һөйләштәрендә, себер татарҙары диалектында бар, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәре өсөн ул әҙәби тел нормаһы иҫәпләнә.

Бүтән һөйләштәрҙән айырмалы рәүештә, бында *-дағын/-дәген, -ҙағын/-ҙәген* көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре бар: *ҡайттым дағын* «пришел ведь», *бирҙем дәген* «отдал же» (Әжекәй ауылы). Шулай уҡ *ҡый, кий, кей* раҫлау киҫәксәһе ҡулланыла: *Кәзәкәй күп ашамай ҡый* (Урта Боғалыш ауылы) «Коза ведь много не ест».

Изафет бәйләнешле ҡушма һүҙҙәр аффиксһыҙ ҡулланыла: *тел бистә – тел биҫтәһе* «болтун, болтунья, говорун, говорунья»; *өй баш – өй башы* «крыша дома»; *сыу сәпсек – аҡ сәпсек* «трясогузка»; *ҡайын йеләк/ҡайын жиләк – ҡайын еләге* «земляника»; *ат ите – йылҡы ите* «конина».

### *Лексик үҙенсәлектәре*

«Урта Урал башҡорттары теленә хас лексик байлыҡтың төп өлөшөнә дөйөм башҡорт һүҙҙәре тура килә, – тип билдәләй М. И. Дилмөхәмәтов. – Шуның менән бергә һөйләштең лексик составында специфик диалектизмдар һәм башҡорт теленең бүтән һөйләштәре менән уртаҡ һүҙҙәр ҙур урын алып тора. Күп осраҡта улар этнографик лексикаға, ландшафт, ботаника менән бәйле һүҙҙәргә, шулай уҡ кешенең характерын һәм анатомияһын сағылдырыусы һүҙҙәргә ҡарай»[1].

Һөйләштең үҙенә генә хас һәм бүтән һөйләштәр менән уртаҡ һүҙҙәр ҡатламдарын М. И. Дилмөхәмәтов лексиканың тематик төркөмдәренә бүлеп өйрәнгән. Түбәндә Урта Урал башҡорттары теленең үҙе өсөн генә характерлы лексик ҡатламына туҡталып үтәбеҙ.

*Этнографик лексика.* Был төркөм йорт ҡаралтылары, халыҡтың туҡыусылыҡ шөғөлдәре, аш-һыу әҙерләү, йорт кәрәк-ярағы һәм йыһаздары, һауыт-һаба, кейем-һалым, эш ҡоралдары менән бәйле һүҙҙәр ҡатламынан тора:

---

[1] *Дильмухаметов М. И.* Говор среднеуральских башкир. Уфа: Гилем, 2006. 87-се бит.

*астырма* – асылмалы тәҙрә «створчатое окно»: *Астырмағыҙ бармы, асығыҙ әле;*

*өй* (Үрмәкәй, Урта Боғалыш) – *иҫке, туҙған өй* «старый, ветхий дом»; *май бүрәнә* (Үрмәкәй) – *түбә өрлөгө* «балка потолочная»; *өйкәртә – ишек алды* «двор»; *сәгәү* (Араҡай ауылы) – *бүрәнәне ҡайырып күтәртеү өсөн тотонолған күҫәк* «рычаг из дерева»; *урам күпере* (Үрмәкәй ауылы) – *ябыулы ишек алдына йәйелә торған иҙән* «пол, настланный во дворе»;

*дәгәрсәк йеп* (Үрмәкәй), сағ.: *тәгәрмәс йеп* (мейәс) – *кәтүк еп* «катушечные нитки»; *ҡойроҡ бағана* (Үрмәкәй), сағ.: *ҡойроҡ сөй* (әй) – *ирештең артҡы сөйө* «хвостовой колышек в ткацком станке»; *жиле* (Үрмәкәй) – *ireш буйы* «длина основы от передней палки до заднего шпиля при домашнем ткачестве»; *сеп* (Үрмәкәй, Әжекәй) – *кәләпләнгән еп* «основанная нитка для тканья»; *сүмәләбаш* (Үрмәкәй ауылы) – *алынмалы ҡолға башы* «верхняя часть прямой прялки, которая обычно вынимается»; *палас* (Әртә-Шигер, Әжекәй, Һыҙғы ауылдары), сағ.: *палаҫ* (дим) – *сепрәк балаҫ* «тряпичный самотканый половик»;

*кәтермәс* (Борғатъя) – *шөкәрә* «сухарь»; *сәтләүек* (Оло Ҡыҙылбай) – *бауырһаҡ* «баурсаҡ»; *тош/баллы тош* (Оло Ҡыҙылбай, Бәйәктөҙ, Һыҙғы) – *бауырһаҡ* «баурсак»; *әүен ботҡа* (Һыҙғы) – *игенде урып-һуғып бөткәс бешерелә торған бутҡа* «каша, сваренная в честь окончания уборки урожая»;

*арсы* (Шөкөр) – *ҡыҙҙы оҙата торған арба* «повозка, на которой сопровождают невесту»; *кейәү иптәше* (Әжекәй, Бәйәктөҙ) – *кейәү егете* «шафер жениха»; *озатҡыс* (Шөкөр, Араҡай), *озатҡыч* (Әжекәй, Һыҙғы) – *арсый* «провожатый (сопровождающий невесту в дом жениха после свадьбы)»; *айаҡсы* (Теләш), сағ.: *айаҡсы* (ҡыҙыл, мейәс, урта, өршәк) – *көрәгәсе* «тамада»;

*бүкән: артлы бүкән* (Шөкөр) – *артлы ултырғыс* «стул»; *йоморо бүкән* (Шөкөр) – *артһыҙ ултырғыс* «табуретка»; *мистөбә* (Әжекәй) – *мейес башы* «лежанка на печи»; *өлгө* (Үрмәкәй ауылы) – *ҡорама* «вещи, сшитые из лоскутьев»; *тирәс, лампа тирәсе* (Үрмәкәй) – *абажур* «абажур»;

*бөшкерик* (Үрмәкәй), *мөшкерик* (Араҡай) – *буранка* «воронка»; *ортустаҡ* (Аҡабаш) – *ағас сеүәтә* «деревянная

чашка средней величины»; *сынтустаҡ* (Урта Боғалыш) – *сынаяҡ* «чашка (чайная)»; *ташламайаҡ* (Һыҙғы ауылы) – *бал сеүәтәһе* «чашечка для раздачи мёда»; *таштабаҡ* (Араҡай ауылы) – *төрлө ҙурлыҡтағы фарфор табаҡ* «чашки различной величины из фарфора»; *тыш/тустаҡ тыш* (Шөкөр, Аҡабаш, Үрмәкәй, Араҡай ауылдары), *туҫтаҡ тышы* (Мәләкәҫ) – *сынаяҡ аҫты* «блюдце»; *эс/туҫтаҡ эс* (Шөкөр, Аҡабаш, Үрмәкәй, Араҡай), *тустаҡ эче* (Урта Боғалыш) – *сынаяҡ өҫтө* «чашка (чайная)»; *үрәтабаҡ* (Үрмәкәй) – *ҡоштабаҡ* «большая тарелка»;

*бөтөн ойоҡ* (Әжекәй) – *оҙон ҡуныслы ойоҡ* «шерстяные чулки-самовязки»; *керпек* (Шөкөр, Араҡай, Аҡкол) – *бала-итәк* «оборка»; *элдек* (Шөкөр, Һыҙғы) – *иңербау* «шнурки, которыми завязывается ворот рубашки»;

*бала сана* (Теләш) – *бәләкәй сана* «маленькие санки»; *салғы кендеге* (Үрмәкәй) – *салғы тотҡаһы* «рукоятка косы»; *турбиса* (Оло Ҡыҙылбай) – *тәгәрмәс көпсәге* «ступица».

*Туғанлыҡ терминдары: инәкәй* (Үрмәкәй) – *әсәйҙең әсәһе* «бабушка по матери»; *ҡәйнәней* (Бәйәктөҙ, Һыҙғы) – *ҡәйнә* «свекровь»; *ҡәртәтей* (Урта Боғалыш, Әжекәй, Һыҙғы), *ҡәртәтей/картәтей* (Бәйәктөҙ) – *олатай* «дедушка»; *сибәр ҡыҙ* (Әртә-Шигер ауылы) – *ҡәйенһеңле* «золовка (младшая сестра мужа)»; *сибәр ул* (Оло Ҡыҙылбай, Әртә-Шигер) – *иренең кесе ир туғаны* «младший брат мужа»; *суҡ* (Шөкөр) – *зат* «родовое подразделение»; *улбала – иренең кесе ир туғаны* «младший брат мужа».

*Тәбиғәт күренештәре менән бәйле һүҙҙәр: беснәк* (Аҡкол) – *епшек ҡар* «мокрый снег»; *зәйхар* (Шөкөр) – *ялағай* «зарница»; *йабалаҡ* (Ҡорғат, Аҡабаш, Абдулла), *йағылбай* (Әжекәй, Урта Боғалыш, Һыҙғы) – *нәжәғәй* «зарница»; *йаҡты йондоҙ* (Әжекәй), *йаҡты йондоҙ* (Әртә-Шигер), *йаҡты йолдыҙ* (Әжеғол) – *эңер йондоҙо* «вечерняя звезда»; *Иләк йондоҙ* (Оло Ҡыҙылбай, Әртә-Шигер), *Иләк йолдыҙ* (Әжеғол) – *Өлкәр* «Стожары».

*Үләндәр, үҫемлектәр, ағастар донъяһы менән бәйле һүҙҙәр: аҡсарлағүлән* (Бәләкәй Аҡа) – *аҡһырғаҡ* «чемерица»; *дегәнәк-йемеш* (Бәйәктөҙ, Әжеғол) – *дунала* «боярышник»; *ҡуйан-ҡолаҡ* (Бәйәктөҙ) – *монар көпшәһе* «болиголов», *сабынтәтәй* (Бәләкәй Аҡа) – *һабын үләне* «мыльнянка»; *самауыртәтәй*

(Үрмәкәй) – *томбойоҡ сәскәһе* «цветок лилии водяной»; *шәңгәтәтәй* (Араҡай, Аҡабаш, Бәйәктөҙ) – *аҡ сәскә* «ромашка»; *сыргалы гөл* (Бәйәктөҙ) – *тамсы гөл* «фуксия»; *эт сыбыгы* (Әжекәй) – *гөлйемеш* «шиповник»; *бурейүкә* (Бәләкәй Аҡа) – *агыулы йүкә* «волчье лыко, волчьи ягоды».

*Кешенең анатомияһы һәм ауырыуҙары менән бәйле һүҙҙәр: арҡасүмес* (Әжекәй, Оло Ҡыҙылбай), *йелкә ҡапҡасы* (Оло Ҡыҙылбай) – *соңҡа* «бугор затылочной кости»; *бетекей кеше* (Шөкөр) – *кәүҙәгә бәләкәй кеше* «человек низкого роста»; *кәтермәк* (Әртә-Шигер) – *богарҙаҡтың ҡулсалары* «кольца дыхательного горла»; *сеңкә* (Әжекәй) – *зәңге* «цинга»; *теш төбө* (Теләш) – *сирса* «десна»; *тәпәс* (Әжекәй, Һыҙғы, Теләш) – *тәбәнәк* «человек низкого роста»; *әжемек* – *бөркәнсек* «рубашка (оболочка плода в утробе)»: *Бала әжемек менән тыуса, бәхетле була.*

*Кешенең характерын белдереүсе һүҙҙәр: бесемей* (Абдулла) – *ыгыш* «копуша»; *дөмисәр* (Ҡорғат) – *ҡыҙыу кеше* «вспыльчивый»; *ҡупаннаҡ* (Араҡай) – *ҡурҡаҡ* «трус»; *ҡылҡойроҡ* (Шөкөр) – *юха* «очень хитрый, корыстный человек, подстрекающий других совершать зло»; *ҡытмыр* (Аҡабаш, Бәйәктөҙ) – *бөтмөр* «аккуратный, расторопный в работе»; *лыбыжгы* (Һыҙғы) – *ыгыш* «копуша»; *нәзәркә* (Теләш, Оло Ҡыҙылбай, Урта Боғалыш, Бәйәктөҙ), сағ.: *нәзберек* (дим) – *һайланыусан (талымлы)* «разборчивый в пище»; *тулдыр* (Теләш, Ишәле, Мәләкәҫ, Әжеғол, Әртә-Шигер), *тулдыр/тултыр* (Шөкөр, Аҡабаш, Үрмәкәй, Араҡай) – *ахмаҡ* «глупый, бестолковый».

*Эш-хәрәкәт менән бәйле һүҙҙәр: аңҡылыу* (Борғатъя) – *һыуһын ҡаныу* «утолиться (о жажде)»; *быраңҡытыу: ҡарны быраңҡытыу* (Әжеғол) – *борҡотоу* «вздымать кверху снег»; *дөйөү* (Өфө-Шигер) – *елеү* «нестись, понестись, мчаться, помчаться»; *зыҡ төшөү* (Араҡай) – *зыҡ ҡубыу* «шуметь, расшуметься»; *ирешеү* (Шөкөр) – *тейеү, ҡагылыу* «трогать, прикасаться», *ҡамсап тотоу* (Бәйәктөҙ) – *ҡыҫып тотоу* «держать, прижимая к себе»; *ҡылыҡсыратыу* (Аҡкол) – *ирештереү* «дразнить, передразнивать»; *майышыу* (Һыҙғы) – *бөгөлөү* «изгибаться, гнуться (о тонком железе)»; *пылтырашыу* (Әжекәй, Урта Боғалыш) – *боҙолошоу* «поссориться»; *пылтырау* (Әжекәй) – *буталыу* «перемешаться (о бумаге)»; *тас-та-*

*раф: тас-тараф итеү* (Һыҙғы) – *әрәм-шәрәм итеү* «расходовать неэкономно, разбазаривать»; *әүрәләп тороу* (Әртә-Шигер) – *икеләнеп аптырап тороу* «сомневаться, усомниться».

*Ҡош һәм бөжәк исемдәре: йар ҡарлығачы* (Бәйәктөҙ) – *аҡ сәпсек* «трясогузка»; *май сыпсығы* (Аҡабаш) – *ҡарабаш турғай* «синица»; *сәберик/сәберсек* (Үрмәкәй, Аҡабаш), *сәберсек* (Абдулла, Әжекәй, Оло Ҡыҙылбай, Әртә-Шигер), *сәберчек* (Урта Боғалыш), *чәберчек* (Һыҙғы), *чәперчек* (Әжекәй) – *аҡ сәпсек* «трясогузка»; *туҡмаҡбаш* (Урта Боғалыш) – *бесәй башлы өкө* «сова»; *өйсыпсыҡ* (Үрмәкәй) – *турғай* «воробей»;

*аллабабай шебеше* (Абдулла, Ҡорғат, Оло Ҡыҙылбай, Һыҙғы), *аллабабай себеше* (Ишәле, Тәкә, Аҡабаш, Әжекәй) – *ҡамҡа* «божья коровка»; *дөңгө*: *ҡорт дөңгөсө* (Бәйәктөҙ) – *ҡорт ҡаяуы* «жало (у пчел, ос и т. д.)»; *ҡойашҡорт* (Бәйәктөҙ, Әжеғол), *ҡойашымбаҡ* (Шөкөр, Аҡабаш, Үрмәкәй, Араҡай, Әртә-Шигер, Әжеғол) – *ҡамҡа* «божья коровка» *(Ҡойашымбаҡ, ҡойашымбаҡ! Алтын балдаҡ биремен, көмөш балдаҡ биремен* (Әжеғол) – «Свети, мое солнышко, свети, мое солнышко! Золотое колечко дам, серебряное колечко дам); *оҙонайаҡ* (Шөкөр), *озонайаҡ* (Араҡай, Әжеғол) – *серекәй* «комар».

Урта Урал башҡорттарының телендә һөйләштең үҙе өсөн характерлы һүҙҙәр менән бергә башҡорт теленең бүтән һөйләштәре менән уртаҡ лексик диалектизмдар ғәйәт ҙур урын алып тора. Был мәсьәләне ентекләп тикшергәндән һуң, М. И. Дилмөхәмәтов урта урал һөйләшенең күпселек осраҡта көнсығыш диалекттың барлыҡ һөйләштәре, көньяҡ диалекттың дим һәм урта, төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡариҙел һәм танып һөйләштәре менән уртаҡ позицияла тороуы тураһында һығымта яһай[1].

Урта урал һөйләшендә шулай уҡ күрше халыҡтар менән аралашыу һөҙөмтәһендә Волга буйы һәм Пермь фин-уғыр, татар телдәре һәм уларҙың айырым һөйләштәренән (иң элек мишәр диалектынан), урыҫ теленән үҙләштерелгән диалекталь һүҙҙәр урын алған. Мәҫәлән: һөйләштә *өмөжө*, удмурт телендә *эмезь*, муҡшы-мордва телендә *инези*, эрзя-мордва телендә

[1] *Дильмухаметов М. И.* Говор среднеуральских башкир. Уфа: Гилем, 2006. 110-сы бит.

*инзей*, тау-мари диалектында *ынгыж – ҡурай еләге* «малина»; һөйләштә *түней, түни,* коми-зырян теленең сыктывкар эргәһе диалектында *тюни*, шул уҡ телдең ижма диалектында *теньгей – быйма* «валенки»; һөйләштә (Үрмәкәй, Урта Боғалыш, Бәйәктөҙ) *ҡул арҡасы,* татар телендә *ҡул арҡасы – ҡул һырты* «тыльная сторона ладони»; *баш көн* (Шөкөр, Аҡабаш), *башкен* (мишәр диалектында), *башкен/баш көн* (чистополь һөйләшендә) – *дүшәмбе* «понедельник»; һөйләштә *кәбен* (Үрмәкәй, Бәйәктөҙ), *кәбен* (ноҡрат, глазов, пәрәңге, балтасы һөйләштәре) – *никах* «бракосочетание»; *шартайаҡ* (Үрмәкәй, Шөкөр) – *хоккей уйынының бер төрө* «вид травяного хоккея»; *шартайаҡ* (тархан, мәләкәс, чистополь һөйләштәре) – *хоккей таяғы* «клюшка». Башҡорт-фин-уғыр, башҡорт-татар, башҡорт-мишәр лексик параллелдәре күберәк көнкүреш лексикала һәм кешенең характеры менән бәйле һүҙҙәр ҡатламында урын алған. Ә инде башҡорт-урыҫ лексик параллелдәре, бүтән һөйләштәрҙәге кеүек үк, халыҡ тормошоноң күп төрлө сфераларына үтеп ингән. Йәнле һөйләш шарттарында русизмдар башҡорт теленең фонетик закондарына әүҙемерәк яраҡлаштырыла. Мәҫәлән: һөйләштә *трах* – «тракт», *сосноҡ* (Урта Боғалыш) – «чеснок»; *касалка* (Әжекәй) – «качалка»; *эшкәп* (Аҡабаш) – «шкаф»; *орошшо* (Әжекәй) – «роща»; *көҙрә* (Бәйәктөҙ) – «кудрявый»; *зимнәмир* (Әжеғол) – «землемер»; *йүреш* (Шөкөр) – «ёрш»; *матса* (Оло Ҡыҙылбай), сағ.: дим, әй, урта һөйл. *матса* – «матица».

Урта Урал башҡорттарының һөйләү теле айырыуса фонетик һәм лексик һыҙаттары йәһәтенән башҡорт теленең үҙенсәлекле һөйләштәренең береһе булып тора.

### *Һөйләү теле өлгөһө*

### *Туй йоласы*

Минең ҡыҙым була икән, килә ҡоҙа: «Менә сиңә мин ҡоҙаға килдем, ҡоҙа-ҡоҙағый булырға килдем. Шул кеше малайына синең ҡызыңны сурый. Мин килдем башҡоҙа булып». «Мин ҡыҙыма әйтмийенсә белмим әле, – тей ата, – ҡыз нишлей». Шунан инде ҡыҙға ата-инә әйттерә йат кешенең артынан. Сурый: «Теләге йуҡмы минең ҡызныҡы?» – тей.

«Әтейемнәр риза булса, ризамын, әтейемнәр ҡайҙа биргән – мин шунда, әтейемнәрнең ризалығын алам», – тиҙе ҡыз.

Сураған кеше ҡызның атасына килә: «Бабай, мин сураға-нейем ҡызыңнан, теләсә нишләсеннәр, тей». Мин барам -барам, тип тормый инде ҡыз кеше. Тағы ҡоҙа килә: «Йә, ҡоҙа, нишлейбеҙ, давай күнешәбеҙме, давай күнешик». Өйҙәге ҡоҙаға әйтә: «Ҡайсан киләбеҙ, ҡоҙа, никахҡа?» Өйҙәге ҡоҙа әйтә: «Дүшәмбе көн килегеҙ, уҡытырбыҙ», тей.

Шунан инде ҡоҙалар килде. Өйҙәгеләр көтөп тора бешереп-төшөрөп. Өйҙәгеләр кеше жыйа. Шунан инде ҡоҙалар утыра. Ҡызны китереп утырталар йанға. Никах уҡытҡан йанға. Шунан инде сурый: «Ҡызым, без биргән йергә ыризасынмы?» «Әтей, инәй, ыризамын. Мин сезнең ыризалығыгыздан башҡа бер ҡайа ла киталмим». Шунан инде ҡыз сығып китә. Инде мулла килә. Мулла утыра уыл өйбашта көтөп никах уҡырға. Мулла сурый атасынан, инәсенән: «Ҡыздан сураҙығыҙмы?» – тей. Атасы әйтә: «Сураҙыҡ, мин ыриза тип әйтте», – тей.

Шунан инде никахҡа жыйдылар, ишекне бикләҙеләр. Бер кем дә керәлмей. Шунан инде утырҙылар никахҡа. Ҡыз белән йегет йуҡ. Ун бишләп кеше утыра өстәл тирәләрендә. Мулла бабай никах уҡый. Шунан инде бабайға хәйер. Әтейгә күлмәк. Өстәл йанына утырғаннарға нәсел-нәсәбенә шәл, ҡалғаннарға йыртыш жыртып бирә ҡыз биргән ҡоҙағый. Бәхилләп бирә инде, буш сығармый. Инде ҡайттыҡ никахтан, уҡып бөттөк, таралдыҡ.

Инде ҡызйеңгә килә икәү. Ҡызйеңгә хәзер кейәүне ат белә барыбала. Өйҙә бер кем дә йуҡ. Артабанты, ҡызйеңгә буйынса, соғалдырыҡ таға, артабанты кейәүне китерәләр ат белә. Шунан инде ҡапҡа бикләнә. Теләсә кем биклей. Йарар. «Асың-асың!» Хәйер сурыйлар, тей ҡызйеңгә. Кейәү төгө бикләгән кешегә бер тәңкә аҡса бирә. Аның ғөрөфө шундый. Шунан күтәрмәгә менә кейәү белә ҡызйеңгә, тағы ишек бик-ләнә. Кейәү аҡсаны соҡой кесәҙән. Аҡса мында тунна. Артаба ишек асылып китә. Тағы бер тәңкә аҡса бирә. Керҙе инде кейәү. Шаршауға кереп утырҙы инде кейәү белә ҡыз. Ҡызның алдына бетекей бала утырҙы. Кейәү аңа аҡса биреп сығарҙы. Инде ҡызйеңгәләр самауыр ҡойоп ҡыз белә кейәүгә сәй эсерәләр. Ҡызйеңгәләргә сәй эсергәне өсөн сынайаҡ төбөнә хәлдән килгәнсә аҡса сала кейәү. Инде ҡызйеңгәләр ҡайтты,

сәй эстек. Инде кейәү өс кис ҡуна ҙа ҡайта. Артаба кейәү тағы дүрт ҡабат килә ҡыз йаңға. Инде алырға итәләр бу ҡызны күсереп. Инде малайныҡы атасы-инәсе бужар ҡуйарға килә. Уахыт сүләшә. Ҡасан алабыз, тей. Ҡызныҡы атасы-инәсе йорт күрергә китә. Анын артаба ҡызның инәсе өстәлгә клейүңкә жәйә, тастымал элә. Инде ҡайтып килделәр ата-инә ҡызныҡы, йорт күреп килделәр. Инде ҡыҙға бужар ҡуйҙылар. Инде инәй белә малай ҡызны алырға киттеләр. Ҡызныҡы атасы-инәсе кеше жыйа ашҡа. Ике ҡоҙағыйны, ҡызны, кейәүне бөтә кеше саҡырып йөрөтә. Ул саҡырған кешеләр ҡыҙға бүләк бирә. Нимәстә хәленән килә – табаҡмы анда, биҙрәме. Инде ҡоҙағый белә кейәү ҡыз алырға ике кискә килә. Артабанты ике кис ҡундылар.

Инде ҡыз китә. Атлар килә ҡыңғырау тағып йаңғыр-йоңғор. Атлар әзер тора. Атлар кейемне, бик матур. Атларның жүгәннәренә ҡулйаулыҡлар бәйлейләр матур итеп шикләп. Йарар инде ҡызлар сеңнәп-йеңнәп йебәрҙеләр:

Әтекәйемнең мөрйәсе
Йәшел кирбес булсасы.
Әтекәйемнең йортларынан
Китмәс йола булсасы.
Күтәрмәң бейек менәргә,
Күтәрмәң ҡыйыҡ төшәргә.
Әнекәйем, нишләйем суң? –
Уаҡыт китте китәргә.

Ҡыз утырып сығып китте. Малай алып ҡайта үҙенең ата йортона. Анда көтөп торалар ҡапҡаны асып. Мылтыҡ аталар, атлар бик өркә, бик ҡурҡа. Ҡыҙ гөпкөп (шәп, геүләп) барып төшә. Атлар туҡтаҙы. Оҙатҡыс киленне күтәреп төшөрә лә мендәргә бастыра. Инде ҡызны керттеләр, әйберләрне керттеләр кейәүнең йортона. Анда ҡызны йебәргәндә лә, ҡызны көткәндә лә халыҡ күп була. Кейенешеп йөгөрөп йөрөйләр, ирмәк була. Әтейне аҙаҡ, туй төшкәс, арлы-бирле булғас, кейәү барып ала ат белә.

Килен төштө. Сыу йулына алып киттеләр. Сыу йулын үрәтеп. Артларынан балалар бара. Сыу буйында килен аларға элдек бирә. Оҙатып килгән ике кешегә йаулыҡ бирә.

Инде кейәү кеше жыйа күмәскә хатыннарны, бабайларны. Инде бабайларға күмәстә бүләк таратталар. Нәсел-нәсәпләрен жыйалар. Күмәс, анан сәй, анан аш була. Бабайлар бүләк алғанға ҡыҙға ҡайсысы аҡса сала, ҡайсысы сарыҡ әйтә, ҡайсы ҡаз әйтә.

Ирләр сыҡты, әбейләр жыйыла. Шул уҡ аш әбейләргә ҙә. Әбейләр шул саҡ аҡса салалар ҡыҙға. Ҡызның инәсе әбейләргә алсепрәк, йаулыҡ, түшелдерек тарата. Ҡызны озатып килә бәрәү ирле-бисәле.

Инде күмәскә килгәннәр оҙатҡансы саҡырып йөрөтәләр инде.

Алар туйға ҡатыша бит. Ҡайсысы өс кис ҡуна, ҡайсысы дүрт кис. Туйның шәбе дүрт кис була. Ирләр эсебөрөй. Хатыннар ашҡа йөрөй башҡа. Йетте уахыт ҡайтырға оҙатҡысларға. Әтей ҡайтты, инәй ҡайтты.

*1973 йылда Свердловск өлкәһе Түбәнге Һирге районы*
*Шөкөр ауылында Әминева Вәхидәнән яҙып алынған*
*(Дильмухаметов М. И. Говор среднеуральских башкир.*
*Уфа: Гилем, 2006. 128– 130-сы биттәр).*

## 3. Ғәйнә һөйләше

### *Ғәйнә башҡорттары, уларҙың йәшәгән территорияһы, гәйнәләрҙең йәнле һөйләү теле*

Ғәйнәләр – башҡорт халҡының ғәйәт үҙенсәлекле, күп һанлы һәм боронғо ҡәбиләләренең береһе. Улар, нигеҙҙә, Пермь крайының көньяғында – Барҙы (Барды), Чернушка, Ҡояҙы, Уҫы, Пермь, Октябрь, Нытва, Уйын һ. б. райондарында, шулай уҡ крайҙың үҙәге – Пермдә, Чайковский, Березники ҡалаларында йәшәйҙәр. Ғәйнәләрҙең төп өлөшө Барҙы районының 53 ауылында компактлы төркөм булып урынлашҡан[1]. Был ауылдарҙың Тулва йылғаһы бассейнында урынлашы-

[1] Әйткәндәй, күршеләге Свердловск өлкәһенең Әшит районында Ғәйнә исемле башҡорт ауылы бар (этник составы буйынса оло ҡошсо һәм мул-гәйнә ырыуҙарынан тора). Башҡортостан Республикаһының Әлшәй һәм Миәкә райондарының Ғәйнәямаҡ, Тауҡай-Ғәйнә һәм Бәләкәй Ғәйнә ауылдарының халҡы ла сығыштары менән ғәйнәләр.

уынан сығып, ғәйнә башҡорттарын Тулва башҡорттары тип атау осраҡтары ла бар. Ҡәбилә үҙе дүрт ырыуҙан тора: тол-ғәйнә, тор-ғәйнә, бисер-ғәйнә, мул-ғәйнә. Пермь крайы башҡорттарының һөйләү теле, ҡәбилә исеме менән, ғәйнә һөйләше тип атала. Ғәйнәләр этнографик планда күрше төбәктәрҙә йәшәүсе балыҡсы, уран, һун, танып ҡәбиләләре менән бергә башҡорттарҙың төньяҡ-көнбайыш этнографик төркөмөн барлыҡҡа килтерә. Башҡорттарҙың был төркөмөнөң хужалыҡ итеү нигеҙен боронғо замандарҙан уҡ малсылыҡ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ менән бергә игенселек тәшкил итә. Ә инде XVIII быуаттың беренсе яртыһынан башлап ғәйнәләр һәм, ғөмүмән, төньяҡ башҡорттары араһында мәғдәнселек, тау сәнәғәте менән шөғөлләнеү ғәйәт киң тарала. Улар араһында руда белгестәре, атаҡлы рудопромышленниктар династиялары, Рәсәй тарихында билдәле эҙ ҡалдырған йәмәғәт эшмәкәрҙәре үҫеп сыға. (Хәйер, башҡорттар Уралда борон-борондан мәғдәнселек өлкәһендә маһир булғандар. Пермь крайындағы Соҡсон ҡалаһының исеме лә шул уҡ шөғөл менән бәйле: башҡорт телендә *соҡсон* – «копаться, рыться» мәғәнәһен белдергән *соҡсоноу* һүҙенән, йәғни «тот, кто копается» тигән һүҙ.) Хәҙерге Пермь крайының Пермь районы (Тарихи Башҡортостандың Уҫы даруғаһы Мул-Ғәйнә улусы) Ҡуян ауылы башҡорто Исмәғил Тасимов, мәҫәлән, Рәсәйҙә тау эшенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, 1773 йылда уның инициативаһы менән Санкт-Петербургта Рәсәйҙәге тәүге юғары техник мәктәп – Тау училищеһы асыла (артабан Тау институты итеп үҙгәртелә). Ғәйнә башҡорттарынан йәнә бер рудасы һәм йәмәғәт эшмәкәре, Уҫы даруғаһы Ғәйнә улусы Барҙы ауылында тыуған Туҡтамыш Ишбулатов 1767–1769 йылдарҙа Уложенный комиссия депутаты була, комиссияға Өфө провинцияһы башҡорттарының наказдарын төҙөп тапшыра. 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ғәйнәләрҙән Батырҡай Иткинин, Әбдей Әбдиев, Әҙиғот Темәсов, Ҡарабай Әшминов, Мөҡсин Медияров баш күтәреүселәрҙең күренекле етәкселәре булып танылалар. Башҡорт әҙәбиәт белгестәре билдәләүенсә, бөйөк шағир Ғабдулла Туҡайҙың әсәһе ғәйнә башҡорто булған. Был факт ғәйнәләрҙең генетик йәһәттән көслө боронғо ҡәбилә булғанлығын раҫлап тора. Ғәйнә башҡорто Шәрифйән Ҡаҙнабаевҡа Бөйөк Ватан һуғышында

күрһәткән батырлыҡтары өсөн Советтар Союзы Геройы тигән юғары исем бирелгән.

Антропология йәһәтенән ғәйнә башҡорттары араһында ике тип билдәләнә: башлыса ирҙәр өсөн характерлы көньяҡтан сыҡҡан понтий тибы һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн хас урал тибы, тип күрһәтә антрополог Р. М. Йосопов[1].

Тарихи риүәйәттәр буйынса, ғәйнәләрҙең ата-бабалары Тулва йылғаһы бассейнына монголдарға тиклемге дәүерҙә үк Минзәлә яҡтарынан күсенеп килгәндәр, Болғарҙан, тархандар араһынан сыҡҡандар[2]. Бында «Болғарҙан сыҡҡан» тигәнде, мәҫәлән, профессор Ә. З. Әсфәндиәров иҫәпләүенсә[3], «болғарҙарҙан сыҡҡан» тип аңлатыу дөрөҫ булмаҫ ине. Һүҙ Болғар дәүләтендәге башҡорттар тураһында бара тип ҡарарға кәрәк. Ә Болғар ханлығында болғарҙар менән бергә башҡорттар ҙа халыҡтың билдәле бер өлөшөн тәшкил иткәнлеге яҡшы билдәле. Тимәк, ғәйнәләрҙең формалашыуында Болғар ханлығынан сыҡҡан башҡорт тархандары нәҫеле, урындағы фин-уғырҙар һәм, антропологик материалдар менән раҫланыуынса, Урта Азиянан сыҡҡан ырыуҙар ҡатнашҡан. Был процеста шулай уҡ көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ-көнбайыш башҡорт ырыуҙары (юрматылар, меңлеләр, үҫәргәндәр, ҡыпсаҡтар, бөрйәндәр) ҡатнашҡанлығы ла билдәле[4].

Ғәйнәләр, күпселек бүтән башҡорт ырыу һәм ҡәбиләләре кеүек, 1557 йылда үҙ ирке менән Урыҫ дәүләтенә ҡушыла һәм үҙҙәренең ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын раҫлаусы жалованный грамота ала. Уларҙың аҫаба биләмәләре Каманың ике яғынан миллиондарса дисәтинә ерҙәрҙе үҙ эсенә ала. XVIII быуат аҙағында иһә Ғәйнә улусы ҡарамағында 292470 дисәтинә ер тороп ҡала.

Пермь крайында (элек – Пермь өлкәһе) башҡорттарҙың иҫәбе 1970 йылда – 47812 кеше, 1979 йылда – 48752, 1989 йылғы мәғлүмәттәр буйынса – 52326 кеше тәшкил иткән. 1989 йылда 14193 кеше башҡорт телен туған тел тип күрһәт-

---

[1] *Юсупов Р. М.* Гайнинские башкиры / Башкиры-гайнинцы Пермского края. Уфа: Гилем, 2008. 7 – 8-се биттәр.

[2] Шунда уҡ. 8-се бит.

[3] *Асфандияров А. З.* История сел Пермской и Свердловской областей. Уфа: Китап, 1999. 8-се бит.

[4] *Юсупов Р. М.* Шунда уҡ. 11-се бит.

кән. 2002 йылғы Бөтөн Рәсәй халыҡ хисабын алыу һөҙөмтәләре буйынса, крайҙың ҡала һәм ауылдарында 40740 башҡорт иҫәпләнә. 1989 йылдан һуңғы осорҙа Пермь башҡорттарының һан яғынан кәмеүен, ғәҙәттә, тотош Рәсәйҙә барған демографик кризис сәбәптәре менән аңлаталар. Ләкин бында тағы бер фактор – ассимиляция күренештәре лә халыҡтың һан яғынан үҫешенә кире йоғонто яһағанлығын әйтеп үтергә тура килә. Пермь крайы һәм, ғөмүмән, Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәүсе башҡорттарҙың милли үҙаңын, туған телен һаҡлау һәм үҫтереү айырыуса етди мәсьәлә булып тора. Шуны ғына әйтеү ҙә етә: 2000 йылға тиклем элекке Пермь өлкәһенең (шулай уҡ күрше Свердловск өлкәһенең) бер генә мәктәбендә лә башҡорт балаларына башҡорт әҙәби телен өйрәнеү мөмкинлеге булдырылмаған. Пермь башҡорттарына үҙ милләтенең туған теле урынына татар әҙәби телен уҡытыу, әҙәби китаптарҙы һәм ваҡытлы матбуғатты Ҡаҙандан алдырыу һ. б. факторҙар халыҡтың бер өлөшөн татарлаштырыуға алып килгән.

Һуңғы дәүерҙә халыҡтың милли үҙаңы уяна, туған телгә, башҡорт рухи мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу арта бара. Был йүнәлештә Пермь крайы башҡорттарының ҡоролтайы ғәйәт ҙур эш алып бара. Башҡортостан Республикаһы һәм Пермь крайы араһында милләт-ара мөнәсәбәттәр, фәнни-техник һәм мәҙәниәт өлкәһендәге хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ярашлы, йыл һайын төрлө саралар – һабантуйҙар, башҡорт мәҙәниәте көндәре, фәнни-ғәмәли конференциялар үткәрелә. Был эштәрҙе артабан да дауам итергә кәрәк.

Пермь башҡорттары үҙҙәренең һөйләү телен үҙенсә айырым бер тел тип иҫәпләйҙәр. Өлкәндәр фекеренсә, был борондонан ҡалған башҡорт теле: «Донжа йаратылғандан бир(ле) безнеке шушы тел. Ата-баба ничек сүләшкән, бездә шул тел»[1]. Йәки: «Тел безнең үзебезнең. Татар да теүел, башҡорт та теүел. Ҡаты, йаматай безнеке тел, башҡорт теле беле сүләшәбез»[2].

---

[1] 1985 йылда Пермь өлкәһе Уҫы районы Уймужбаш (Ольховка) ауылында 80 йәшлек Ғатаулла Моталлаповтан яҙып алынған / Башҡорт һөйләштәренән үрнәктәр. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988. 204-се бит.

[2] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 208 – 209-сы биттәр.

«Ысынлап та, – ти С. Ф. Миржанова, – Пермь башҡорттарының теле ғәйәт үҙенсәлекле, ул башҡорт һәм татар телдәре диалекттарынан боронғо тел һыҙаттарының һаҡланған булыуы менән айырылып тора. Был күренеш беренсе сиратта грамматика һәм фонетика өлкәһендә сағылыш таба»[1].

Ғәйнә һөйләшен тәү башлап уҙған быуаттың 70-се йылдарында филология фәндәре докторы С. Ф. Миржанова өйрәнә. 1991 йылда уның «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» («Северо-западный диалект башкирского языка») тигән монографик хеҙмәте донъя күрә (2-се баҫмаһы 2006 йылда нәшер ителде). Ғәйнә башҡорттарының һөйләү теленә арналған тикшеренеү бында айырым бүлек итеп бирелгән.

### *Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре*

Фонетика өлкәһендә, тип билдәләй С. Ф. Миржанова, баҫымлы ябыҡ ижектәге киң һуҙынҡыларҙың тарайыуы, йәғни **а, ә** өндәре урынына **ы, е, и** өндәренең килеүе ғәйнә һөйләшенең мөһим диалекталь үҙенсәлектәренең береһе булып тора: *алый* – бүтән һөйләштәрҙә *алай* «вон какой»; *былый* – әҙәби телдә *былай* «вот такой»; *шулый* – *шулай* «такой»; *тағын* – *таған* «качели»; *ҡырыу* – *ҡырау* «изморозь»; *жейеү* – *йәйәү* «пешком»; *береү* – *берәү* «один».

Айырым осраҡтарҙа һүҙ аҙағында баҫымлы ижектә тар әйтелешле **ы** өнө урынында **а** өнө ҡулланыла: *ағаҡ* – әҙәби телдә *аҡыҡ* «сердолик»; *ҡабаҡ* – *ҡабыҡ* «кожура, скорлупа»; *ҡабыҡ* «луб»; *чаңға* – *саңғы* «лыжи», *жылау* – *йылыу* «полынья». Һүҙ башында **а** – **ы** сиратлашыуы: *алачын* – *ылачын* «сокол», *манда* – *бында* «здесь», *аңғай* – *ыңғай* «постоянно, сразу», *ыраҡы* – *араҡы* «водка», *ыйаҡ/айаҡ* – *аяҡ* «нога». Ҡайһы берҙә **а** өнөнөң тар әйтелешле **ы** өнөнә күсеүе һүҙҙең барлыҡ ижектәренә лә тарала: *ылып* – *алап* «котомка из лубка или бересты», *ыны* – *ана* «вон».

Һүҙҙең уртаһында баҫымлы ижек алдынан **ы** – **а** өн күсеше: *атыҡайым!* – *атаҡайым!* «батюшки»; *ҡашыға/ҡашиға* – *ҡашаға* «перед, выступ печи», *таштыбаҡ* – *таштабаҡ*

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 209-сы бит.

«тарелка»; *тамыша – тамаша* «зрелище»; *ҡарғылар – ҡарғалар* «вороны».

Һөйләштә киң әйтелешле алғы рәт **ә** һуҙынҡыһы ҡайһы бер һүҙҙәрҙә **е, и** тар һуҙынҡылар урынында килә: *әнәй* – әҙәби телдә *инәй*, көньяҡ диалекттың юшатыр һөйләшсәһендә *әнкәй* «мать»; *дәстә – тиҫтә* «десяток»; *дәгәнәк* – һөйләштә «шиповник»; әҙәби телдә *дегәнәк* «лопух»; *тәңкәгә тейеү,* урта һөйләштә *тәңкәгә тейеү,* әҙәби телдә *теңкәгә тейеү* «надоесть, надоедать».

Тар һуҙынҡыларҙан һуң баҫымлы ижектәрҙә, киреһенсә, **ә** өнө **е** өнөнә күсә: *белен/беле* – бүтән һөйләштәрҙә *беләң*, әҙәби телдә *менән* «с» бәйләүесе; *кибен/кебен – кәбән* «стог», *мәктеп – мәктәп* «школа»; *чибер – сибәр* «красивый». Шулай уҡ **и** өнөнөң ҡыҫҡа **е** өнөнә күсеү осраҡтары бар: *эсәр – иҫәр* «глупый»; *нендей – ниндәй* «какой»; *кесәк/ксәк – киҫәк* «часть, кусок»; *кеске – киҫкес* «резчик, клещи для резки сахара».

Һүҙ аҙағында киң әйтелешле **ә** һуҙынҡыһы урынында тар **и** һуҙынҡыһының ҡулланылыуы: *чекмин/чепкин – сәкмән* «чекмень»; *кәбин – кәбән* «копна»; *бели/беле – менән* «с»; *крин – керән* «хрен»; *печин* «трава» – әҙәби телдә *бесән* «сено»; *түгерик – түңәрәк* «круглый».

Һуҙынҡылар өлкәһендә шулай уҡ **и<а** (*чумир* – лит. *сумар* «клецки»), **и<ы** (*минча/мынча* – әҙәби телдә *мунса* «баня»), **и<е** (*бәлиш – бәлеш,* ымлыҡ; *дүрткил – дүрткел* «прямоугольный, квадратный») һ. б. өн сиратлашыуҙары бар.

Ә инде *кәрәк* «надо, надобность», *кәртә* «изгородь, жердь», *кәштә* «полочка»; *шәкәр* «сахар» кеүек бер төркөм һүҙҙәрҙә **ә** өнө, әҙәби телдәгесә, үҙгәрмәйенсә ҡулланыла.

Һуҙынҡылар өлкәһендәге протезалар ҡайһы берҙә һүҙҙәрҙең көтөлмәгән үҙгәрештәрен барлыҡҡа килтерә: *озур/ озор/ узыр/усыр* – әҙәби телдә *ҙур* «большой»; *эчәй – сәй* «чай»; *эшәп – шәп* «замечательный».

Тартынҡылар өлкәһендә ғәйнә һөйләше иң элек түбәндәге өндәрҙе ҡулланыу планында характерлана:

әҙәби телдәге **с** өнөнә регуляр рәүештә йомшаҡ **ч** өнөнөң тап килеүе: *чын* – әҙәби телдә *ысын* «истина»; *чичҡан – сысҡан* «мышь»; *балыҡчы – балыҡсы* «рыбак»; *күгерчин – күгәрсен* «голубь»; *чөчкөрөү – сөскөрөү* «чихать». Әммә

һөйләштә әҙәби телдәге **с** өнөнөң йомшаҡ вариантын ҡулланыу күренеше лә бар. Был бигерәк тә ҡылымдың *-ғас/-гәс* ялғауы менән яһалған шарт һөйкәлеше формаһында һәм ҡайһы бер бүтән осраҡтарҙа күҙәтелә: *али булғас* – әҙәби телдә *улай булғас* «в таком случае»; *айаҡтан йаҙғас* – *аяҡтан яҙғас* «коли лишился ног»; *налук салғас* – *налог һалғас* «когда обложили налогом»; *әтәй үлгәс* – *атай үлгәс* «когда умер отец»; *бүтәнсә/ бүтәнчә* – *бүтәнсә* «иначе, по-другому»; *эс* – *эс* «нутро»; *сана/чана* – *сана* «сани»; *сираҡ* – *сираҡ* «голень»; *күстәнәсләр* – *күстәнәстәр* «гостинцы»; *насар* – *насар* «плохой»;

төрки сығышлы һүҙҙәрҙә әҙәби телдәге **һ, ç** өндәренә дөйөм төрки **с** өнөнөң тап килеүе: *суу* – әҙәби телдә *һыу* «вода»; *син* – *һин* «ты»; *сез* – *һеҙ* «вы»; *сүз* – *һүҙ* «слово»; шул уҡ ваҡытта, көнсығыш һәм көньяҡ диалект һөйләштәрендәге кеүек, башҡорт теле өсөн специфик **ç** өнө телмәр динамикаһында ҡулланылған осраҡтар ҙа бар: *Ике ат аçрайдыҡ* – әҙәби телдә *Ике ат аçрай инек; Çарапул* – *Сарапул* (ҡала атамаһы);

һүҙ башында күпселек осраҡта әҙәби телдәге **й** өнөнә йомшаҡ **җ** өнөнөң тап килеүе: *донҗа* – әҙәби телдә *донъя* «мир»; *җийын* – *йыйын* «большое собрание, съезд народа, племени»; *җаурын* – *яурын* «плечо»; *җите* – *ете* «семь»; *җигәрле* – *егәрле* «быстрый, деятельный». Ләкин шул уҡ ваҡытта *йер/жир* – *ер* «земля», *йәннек* – *йәнлек* «дичь, зверь», *йән* – *йән* «душа». *Белмим, йәнем, ағысын* – *Белмәйем, йәнем, унынын* «Того я не знаю, душа моя».

Һөйләштә йәнә түбәндәге өн сиратлашыуҙары характерлы:

**п – б** тап килеүе: *патша* – әҙәби телдә *батша* «царь»; *палан* – *балан* «калина»; *пытпылдыҡ* – *бытбылдыҡ* «перепел»; *Парты/Барҙы/Барды* – ойконим. Әҙәби телдәге яңғырау **б** тартынҡыһына һаңғырау **п** тартынҡыһының тап килеүе, тип күрһәтә С. Ф. Миржанова, сыуаш һәм күп кенә көнсығыш себер телдәренең спецификаһын сағылдыра, яҡындан аралашыусы телдәрҙән иһә был күренеш мари теле һәм мишәр диалектының ц-лашҡан һөйләштәрендә күҙәтелә[1]. Шуны ла

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 222-се бит.

әйтергә кәрәк: был үҙенсәлек буйынса ғәйнә һөйләше башҡорт теленең ҡариҙел, урта, егән һөйләштәренә яҡын тора. Ундай күренеш урта урал, дим һ. б. һөйләштәрҙә лә бар;

**д/ҙ – з** тап килеүе: *Мәндәлә/Мәнзәлә* – әҙәби телдә *Минзәлә*, түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшендә *Мәнҙәлә/Минҙәлә* – ойконим; *дәһәр/зәәр* «яд»; *Дөлхизә – Зөлхизә* – антропоним. Һөйләш шарттарында *Елпачиха* (башҡортса Ялпаҡ тигән кеше исеменән) ойконимында тәүге ижектәге **е** өнөнөң үҙгәрешен күҙәтеү бик ҡыҙыҡлы: *Елпачиха* > *Йалпачиха* > *Далпачиха* > *Ҙалпачиха*.

Һөйләштә башҡорт теле өсөн характерлы интерденталь **ҙ** өнө интервокаль положениела һәм сонор өндәр менән йәнәшә торғанда ҡулланыла: *ҡоҙа* «сват», *ҡоҙағый* «сватья», *ҡоҙоҡ* «прорубь», *ҡаҙаҡ* «гвоздь», *Иҙел/Идел/Изел – Кама йылғаһы; Барҙы/Парты, Уҙик/Удик* – ойконимдар, *әрҙәнә/әрдәнә – утын* «поленница дров», *пәрҙе/пәрте – бәрҙе* «хариус»[1].

Һуҙынҡыларҙың редукцияһы, протеза, эпентеза, уртала йә аҙаҡта өндәрҙең төшөп ҡалыуы йә, киреһенсә, өр-яңы өндәр өҫтәлеү кеүек фонетик күренештәр киң таралған. Һөҙөмтәлә, теге йәки был һүҙҙең әйтелешендә көтөлмәгән үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Мәҫәлән: *белекей/белкей* – әҙәби телдә *бәләкәй* «маленький»; *артаба – артабан* «дальше»; *зәәр – зәһәр* «прекрасно»; *белмәм – белмәйем* «не знаю»; *борлоп килә – боролоп килә* «идет обратно»; *сөртмәә – һөртөргә, һөртмәгә: Айыу май сөртмәә шәп, сөртмәә кәрәг ул; мей – мейе «мозг», йоҡ – йоҡо* «сон»; *ыризыҡ/ырызыҡ/ырзыҡ – ризыҡ* «пища»; *озур/озор/узыр – ҙур* «большой»; *Уҡуйаҙы – Ҡояҙы (Ҡуяды)* – ойконим; *икә – икән* «оказывается»: *Патшасы кем икә бу илнеке? Йерләрегез кем икә. Беҙгә торма йер бирең* (әҙәби телдә: *Батшаһы кем икән был илдең? Ерҙәрегеҙ күп икән. Беҙгә торорға ер бирегеҙ); сайы – һайын* «чем больше, по мере того, как и т. д.»: *Байыҡҡан сайы байығалар; Хәҙер ауыл сайы кылуп (Байыҡҡан һайын байығалар; Хәҙер ауыл һайын клуб).*

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 223-сө бит.

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Грамматика өлкәһендә изафеттың 2-се формаһындағы һүҙбәйләнештәрҙә эйәлек категорияһының аффиксһыҙ белдерелеүе ғәйнә һөйләшенең мөһим үҙенсәлектәренең береһе булып тора. Мәҫәлән: *аугыс ай* – әҙәби телдә *август айы, тау баш – тау башы, Тол баш – Тол башы, Таныб ауыл – Танып ауылы*. Бындай һүҙбәйләнештәр килеш менән үҙгәргәндә лә эйәлек аффикстары ҡулланылмай: *Уфа йаҡта* – әҙәби телдә *Өфө яғында, Уфа йаҡтан – Өфө яғынан, Тол башта – Тол башында, йул ҡырда – юл ҡырында*.

Һөйләштә *-ныҡы/-неке* һәм *-ның/-нең* эйәлек аффикстарының береһе урынына икенсеһенең ҡулланылыуы шулай уҡ характерлы үҙенсәлектәрҙең береһе. Мәҫәлән: *Бу ҡызныҡы әтие – Был ҡыҙҙың атаһы; Мыныҡы сеңленеке малайныҡы уланы – Бының һеңлеһенең малайының уланы; безнеке ауыл – беҙҙең ауыл; Кунгурныҡы патша – Көнгөр батшаһы; патшаныҡы йорт – батшаның йорто* һәм киреһенсә: *ҡайсы ауылның?* – әҙәби телдә *ҡайһы ауылдыҡы?; Мин дүртенче йылның – Мин дүртенсе йылғы*.

Ғәйнә һөйләшендә һүҙ төркөмдәренән ҡылым һүҙьяһалыш формалары буйынса айырыуса үҙенсәлекле. Ҡылым һөйкәлештәрен, ҡылым дәрәжәләрен, ҡылымдың аналитик формаларын әҙәби тел һәм бүтән һөйләштәр, бүтән төрки телдәр менән сағыштырып өйрәнеү башҡорт теленең тарихы өсөн ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яһарға мөмкинлек бирә. Хәбәр һөйкәлештәренең ҡатмарлы үткән заман формалары, мәҫәлән, үҙенең яһалышы менән әҙәби телдән һәм бүтән һөйләштәрҙән айырылып тора. Әгәр ҙә әҙәби телдә төп ҡылым үҙгәрешһеҙ ҡалып, *ине* ярҙамсы ҡылым зат ялғауҙары менән үҙгәрһә, ярҙамсы ҡылым *-ей/-ый* < *-ейе/-ыйы* формаһында ҡулланыла. Миҫалдар: *Иможбаш тип сүләшәләрей* – әҙәби телдә *Өймөжбаш тип һөйләшәләр ине* «Раньше говорили Уймужбаш»; *Чебеш күкәй йыйдырайы баса – Тауыҡ күкәйен йыйҙыра инеләр шикелле* «Заготовляли, кажется, куриные яйца»; *Йылан шәбей, үүлеп торалaрый – Йылан шәп (күп) ине, өйөлөп торалар ине «Змей было много, комком сплетенные висели бывало»*.

Уртаҡ ҡылымдың *-ма/-мә* һәм *-маға/-мәгә* формалары тарихи яҡтан бер-береһенә бәйле булыуы менән дә ҡыҙыҡлы.

Сөнки *-мага/-мәгә* формаһы *-ма/-мә* аффиксына йүнәлеш килештең *-га/-гә* аффиксын ҡушыу юлы менән барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән, ошондай һөйләмдә был формаларҙың икеһе лә йәнәш ҡулланылған: *Артышнын ботагын төтәсләмә, чапчаҡларны төтәсләмәгә, үгә ҡыстырып ҡуйма алалар* – әҙәби телдә *Артыштың ботагын төтәҫләр өсөн, сапсаҡтарҙы төтәҫләр өсөн, өйгә ҡыҫтырып ҡуйыр өсөн алалар* «Ветки можжевельника берут для того, чтобы коптить, коптить кадушки, и чтобы повесить в доме». Уртаҡ ҡылымдың *-мага/-мәгә* формаһы шулай уҡ көньяҡ диалекттың урта һөйләше өсөн характерлы *(Бесән сапмага китте* – *Бесән сабырга китте* «Ушел косить сено»). Ғәйнә һөйләшендә *-мага/-мәгә* формаһының урталағы **ғ** өнөнөң төшөп ҡалыуы айҡанлы барлыҡҡа килгән *-маа/-мәә* варианты ла ҡулланыла: *Бу патшага пармаа булды. Бүләкләр алпармаа кәрәк ҡый* – *Был батшага барырга булды. Бүләктәр алып барырга кәрәк тә баһа* «Он (этот) решил пойти к царю. Надо же с подарками идти».

Әҙәби телдәге *менән*, күпселек һөйләштәрҙәге *белән* «с» бәйләүесе бында *былы/беле/бели/белен* формаларында килә: *Әрмәнша бабай белен Ғәйнетдин бабай* – *ҡарилар* – әҙәби телдә *Әрмәнша бабай менән Ғәйнетдин бабай* – *ҡарыйҙар* «Арманша-бабай и Гайнетдин были знатоками Корана». Шулай уҡ бәйләүестәрҙең сайы (әҙәби телдә *һайын*), *сымаҡ/семәк/сыман/семән* – *һымаҡ, күек/кеүек/кебек* тибындағы варианттары, бәйләүес функцияһында ҡулланылған *чүрәсендә, чирәдә, тошонда* «около» һымаҡ һүҙҙәр бар.

Һөйләштә әҙәби телдәге *да баһа/ҙа баһа/ла баһа/та баһа,* бит «ведь, же» көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре функцияһында *ҡый/ҡы/ҡу/ке/кәй/кә* киҫәксәһе ҡулланыла. Был киҫәксә (*ҡуй/гуй/ҡый* формаһында) йәнә көнсығыш диалекттың арғаяш, салйоғот, мейәс һөйләштәре өсөн характерлы. Ғәйнә һөйләшендә иһә ул, *ана* «вон» алмашы менән ҡушылып, *ыны ҡый/ыны ҡы/ны ҡы/аны ҡы/әне ке* («вон, ведь, видишь ли») һымаҡ ҡатмарлы модаль һүҙҙәр яһай: *Ыны ҡый Хәтимә әбей бар, у да миңке туган* «Вон ведь есть старуха Хатима, она тоже мне родственница»; *Анда әйтелгән кә* – *Унда әйтелгән дә баһа* «Там же сказано».

Бүтән һөйләштәрҙән айырмалы рәүештә, ғәйнә һөйләшендә әҙәби телдәге *икән* «оказывается» тигән мәғәнәлә *маса/баса* модаль һүҙе ҡулланыла: *Бар әлей булса, ҡычҡырып сурарсың – йөздән узғанмы маса, түгелме маса* – әҙәби телдә: *Бар, улайһа, ҡысҡырып һорарһың – йөҙҙән уҙғанмы икән, юҡмы икән* «Иди, если уж так, погромче расспрашивай – ей сто лет или за сто перевалило». Ә инде *икән* «оказывается» һүҙенең *икә* формаһындағы ҡыҫҡа вариантын ҡулланыу күҙәтелә: *Патшасы кем икә бу илнеке? – Батшаһы кем икән был илдең?* «Кто же царь в этой стране?»

*Маса/баса* һүҙе башҡорт әҙәби телендә *да баһа/ҙа баһа/ла баһа/та баһа* ҡатмарлы көсәйтеү-раҫлау киҫәксәһе составында һаҡланған, тип күрһәтә С. Ф. Миржанова. *Баса* һүҙенең «опять, еще, тоже» мәғәнәһендә ҡырғыҙ телендә, *бас* – шул уҡ мәғәнәлә монгол телендә, 1) «после, следом»; 2) «и, еще, а также» мәғәнәһендә боронғо төрки телендә ҡулланылғаны билдәләнгән[1].

### *Лексик үҙенсәлектәре*

Ғәйнә һөйләше үҙе өсөн генә характерлы диалекталь һүҙҙәр ҡатламының бай һәм оригиналь булыуы менән айырылып тора. Шул уҡ ваҡытта ғәйнәләрҙең һөйләү теле лексикаһы төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡайһы бер бүтән һөйләштәренә ҡарағанда башҡорт әҙәби теленә яҡыныраҡ тора, йәғни һөйләштең төп лексик фондын дөйөм башҡорт теле лексикаһы билдәләй. Мәҫәлән: *атай* «отец», *агай* «старший брат», *абышҡа* «пожилой муж; мужик, ранее женатый», *багыу* «смотреть», *балаҡорт* «молодая пчелиная семья»; *бала йылга* «ручей»; *ҡарагай* «сосна»; *ҡарагат* «смородина»; *шыршы* «ель»; *тумыртҡа* «дятел»; *кәкүк* «кукушка»; *ҡумалаҡ* – әҙәби телдә *ҡомалаҡ* «хмель»; *зелпе* «бересклет»; *ҡазайаҡ* – «папоротник»; *ҡолга* «прялка»; *олтан* «подметка»; *тозлоҡ* «навар»; *ҡыуырлыҡ* – әҙәби телдә *ҡур* «закваска, солод»; *сыҡтау* «плач, всхлип, всхлипывание» *(Көчләп бирсәләр, ҡыз сыҡтый – Көсләп бирһәләр, ҡыҙ һыҡтай)*; *төтәсләү* –

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 261-се бит.

*төтәҫләү* «обкуривать»; *чолоҡ чабыу – солоҡ сабыу* «выделывание борти»; *түшелдерек* «тряпочный нагрудник»; *әр гиз – һәр гиз* (иҫк., китап һүҙе) «всегда, все время, постоянно». *Ҡарчыға лай тигән ай йаман ҡош ҡош ҡундырмый әргиз тирәккә* «Скверная птица, называемая ястребом, не позволяет сесть на дерево другим птицам»; *оторо – киреһенсә, уның һайын* «напротив, наперекор».

Көньяҡ, көнсығыш диалекттар, төньяҡ-көнбайыш диалекттың бүтән һөйләштәре менән уртаҡ лексик ҡатламдар бар. Көньяҡ диалект менән уртаҡ диалектизмдар ғәйнәләрҙең юрматы, кесе табын, кәлсер-табын, үҫәргән һ. б. ырыу һәм ҡәбиләләр менән боронғо этник-тарихи бәйләнештәре күҙлегенән сығып аңлатыла. Ә көнсығыш диалект менән тап килгән диалекталь лексика территориаль контакттар һөҙөмтәһендә формалашҡан һәм башҡорт теленең көнсығыш һөйләштәренең дөйөм региональ лексик ҡатламын барлыҡҡа килтерә[1]. Мәҫәлән: *бөкәй* (ғәйнә, төньяҡ-көнбайыш һөйләштәр) – *боҡай/буҡай* (әй, мейәс) – әҙәби телдә *бапаҡ* «бука» (слово, которым пугают детей); *зим/жим май* (ғәйнә) – *шим май* (төньяҡ-көнсығыш һөйләштәр) «чистый, ядреный жир»; *тырҡыш* (ғәйнә, ҡариҙел, урта урал, әй, арғаяш) – *бысраҡ* «грязный, грязнуля»; *ҡонжороҡ* (ғәйнә) – *ҡиндырыҡ, ҡынйыраҡ* (әй) – әҙәби телдә *ҡынйыраҡ* «вид кожаной обуви на мягкой подошве с коротким холщовым голенищем»; *оҙан/озан* (ғәйнә, урта урал, әй) – *ҡор* «тетерев», *оҙан* (арғаяш, мейәс) – *ата ҡор* «косач»; *чара* (ғәйнә) – *сара* (урта урал, әй, мейәс) – *ҙур ағас табаҡ* «большая чаша, выдолбенная из дерева»; сағ.: сыуаш, алтай телдәрендә *чара,* хакас телендә *сара,* монгол телендә *цар* – шул уҡ мәғәнәлә.

Һөйләштә татар теленең мишәр һөйләше, сыуаш теле менән уртаҡ диалектизмдар, С. Ф. Миржанова фекеренсә, боронғораҡ дәүерҙәге аралашыуҙарҙан тороп ҡалған булырға кәрәк. Һөйләштең үҙе өсөн генә характерлы диалектизмдарҙың бер өлөшө Көнсығыш Себер төрки телдәре менән боронғо бәйләнештәрҙе сағылдырыусы һүҙҙәрҙе тәшкил итә: *аргыш ҡоҙа* «второй по степени гость после родителей невесты

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 264–265-се биттәр.

и жениха, который сопровождает их на свадьбе, сидит рядом с ними»; хакас телендә *аргыс* 1) «товарищ»; 2) «помолвка», *аргыстас* «сопровождать»; яҡут (саха) телендә *аргыс* «спутник, попутчик»; алтай, шор телдәрендә *аргыш* «товарищ». Шулай уҡ сыуаш һәм башҡа төрки, боронғо төрки телдәренә бәйле диалектизмдар ҙа бар: *иләсә* (ғәйнә, мейәс һөйл.) – *бейәләй* «рукавицы», сыуаш телендә *алса* – шул уҡ мәғәнәлә, *ала, ал* «рука», боронғо төрки телендә *эл* «рука, кисть руки». Бынан тыш, урындағы һәм күрше фин-уғыр телдәренән, урыҫ һөйләштәренән алынған диалектизмдар ҙа осрай: *бәлтәкә* – әҙәби телдә *босҡаҡ; бәлтәкә бүрек – босҡаҡ бүрек* «пояркова шапка»; коми телендә *баля* «ягненок, овца»; диал. «мех», удмурт телендә *пиле* «ягненок», төньяҡ манси телендә *паля* «баран, овца»; сағ.: татар телендә *бәти* «ягненок», сыуаш телендә *патака, путек* «ягненок, козленочек»[1].

Этностың төп өлөшөнән бер ситтәрәк йәшәгән ғәйнә башҡорттарының үҙенә генә хас кәсеп һәм шөғөлдәре, ҡырыҫ тәбиғәт шарттарына яраҡлашып хужалыҡ итеү үҙенсәлектәре, рухи мәҙәниәттең, боронғо йола һәм традицияларҙың сағыштырмаса тотороҡло һаҡланыуы һөйләштең диалекталь лексикаһының үҫеүенә булышлыҡ иткән. Шуның менән бергә һөйләү теленең эске ресурстары, фонетика өлкәһендә, әйтәйек, өндәрҙең күп төрлө сиратлашыуы, морфологияла иһә үҙенә генә хас һүҙьяһалыш формаларының ҡулланылыуы был йәһәттән ғәйәт ҙур роль уйнаған. Һөйләштә семантик диалектизмдар һәм диалекталь омонимия һиҙелерлек үҫешкән.

Һөйләштең үҙе өсөн характерлы диалектизмдар араһында тәбиғәт күренештәре, үҫемлектәр донъяһы, хужалыҡ-көнкүреш, кәсеп һәм һөнәрҙәр, йорт кәрәк-яраҡтары, кешенең анатомияһы һәм физиологияһы, буй-һыны, холоҡ-фиғеле, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре менән бәйле һүҙҙәр ҡатламы ҙур ғына урын алып тора. Мәҫәлән: *зәрәтә* – әҙәби телдә *зәржә* «сныть» (весенняя съедобная трава); *жылау – йылыу* «полынья»; *жырмалаҡ, жырынды – йырғанаҡ* «овраг»; *печтек – шыршы үлән* «хвощ полевой»; *бетекәй – бәләкәй* «маленький»; *печин – үлән* «трава»; *т'ити, чичкә – сәскә* «цветок»; *түз* –

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Гилем, 2006. 268 – 269-сы биттәр.

1) *төп, агас төбө* «основание, корень, пень»; 2) *йылга тамагы* «устье реки»; *Тол түзендә Әрмәнша баба кала* «У устья Тулвы Арманша-бабай и остался»; ҡариҙел һөйләшендә *түз – йылга тамагы* «устье реки»; *шырамта – йүкә йыугыс* «мочало»; *мөр, мөрөк – бөрө* «почки»; *көчөк: тал көчөк* «почки вербы»; *үсем, ыуак кайын – саука* «березовая колка»; *сал/саз жимеш* «клюква»; *шартлама – ер еләге* «клубника»; сағ.: *шартлама* (урта урал), *шартлама* (әй) – шулай уҡ *ер еләге* «клубника»; *колон тойак/үгәйнә – үгәй инә үләне* «мать-и-мачеха»; *кузгәлдәш/кузелдәш/кузле кадак – һукыр кесерткән* «пустырник»; *кулжифәк – тәлмәрйен ебәге* «улотрикс»; *таш ыулыгы – таш мүк* «водоросль»; *ашкан сыир – тешәү һыйыр (өс йәшлек быҙауламаган һыйыр)* «трехлетняя неотелившаяся корова»; *көлөкөй – колон* «жеребенок»; *бозоу – быҙау* «теленок»; *бала бәрән – һарык бәрәсе* «ягненок»; *кәжә бәрән/кәзә бала – кәзә бәрәсе* «козленок»; *каз бала – каҙ бәпкәһе* «гусенок»; *мөлөк – сүмесбаш* «головастик»; *кондога/сагыҙак – һагыҙак* «оса»; *ком йылан – йылан балык* «угорь»;

*ашйабыу* – әҙәби телдә *ашъяулык* «скатерть»; *сөртөү/тастымал – таҫтамал* «полотенце»; *чиншак сөртөү – сынайак таҫтамалы* «полотенце для посуды»; *шырамта* (ғәйнә, урта урал) – *йүкә йыугыс* «мочалка»; *ырауда/ыруда – урҙа* «шест для подвешивания вещей»; *сәли – сәңгелдәк* «колыбель»; *ушабаш – мейес нигеҙенең сыгып торган өлөшө* «дощатый выступ основы печи»; *жәйелмә – 1) ике якка асылмалы тәҙрә* «двустворчатое окно»; 2) *һабан тургайы* «жаворонок»: *Жәйелмәләр килгән, жәй была; сырак – йорт «дом»: Әрмәнша кайта боролоп үҙ сырагына;*

*баш сүәк, төбә сүәк* – әҙәби телдә *баш һөйәге* «череп»; *түбә үрмә – урай* «завиток на макушке»; *клиш/кылыйш – кауак* «перхоть»; *кул арка – кул һырты* «наружная сторона руки»; *эс-корамта, эс-курамта – эс-карын* «ливер, внутренности»; *тобок/тубык паш – тубык капкасы* «коленная чашечка»;

*самкый/самка/самкы – тупаҫ* «тупой»: *Абдулла абзый угата самкый; пештек – тиктормаҫ* «непоседливый, озорной»; *жылыу – шыуыу* «кататься»; *жиңәрле – егәрле* «проворный»: *Бик жиңәрле ул; жүкәләү – ялагайланыу* «льстить»; *жыйын – урам* «улица»; *тынык – ял* «отдых»: *Әҙерәк тынык тырыб алам әле тиливизырҙан; жәүер – ара* «родовое подразделение»; *пешелдәү – бышылдау* «шептать».

С. Ф. Миржанова билдәләүенсә, һөйләштең лексик-семантик спецификаһы фразеологизмдарҙа, тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙә, мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙә лә сағылыш таба. Улар, ғәҙәттә, халыҡтың тарихы, телдәге боронғолоҡ күренештәре, мәжүсилек йә иһә йолаларға мөнәсәбәте булып, нығынып ҡалғандар. Мәҫәлән, *дархан йату* («бездельничать, быть довольным от ничегонеделания») тигән фразеологик берәмек ғәйнәләрҙең ата-бабаларының борон Болғар дәүләтендә айырым хеҙмәттәре өсөн өҫтөнлөк менән файҙаланып, тарханлыҡ дәрәжәһе алыуы менән бәйлелер тип фараз итергә була. Шуның өсөн дә улар Пермь крайына аҫабалыҡ хоҡуғында киң, иркен ерҙәргә хужа булып килеп ултырғандар, ә урыҫтар уларҙы кенәздәр, ер хужалары тип белгәндәр. Мәҫәлән, Шишмә районының тамырҙары бейҙәргә барып тоташҡан Дим буйының аҫаба башҡорт ауылдарының ҡарттарын да күрше урыҫ ауылдарында элегерәк «башкирин-князь» тип атай торған булғандар; *ҡарадан ҡараға чығу* «распространиться, стать известным народу» боронғо төрки telendә *ҡара* «масса, толпа, простой люд, чернь, подданные правителя, народные массы, народ», әҙәби телдә: *ҡара халыҡ* «чернь»; *фарман туҙыу* – әҙәби телдә: *пыр туҙыу* «находиться в сильном возбуждении, неистовствовать»; *колонҡорбанныҡ – малтыуар имен үрсеһен өсөн салынған ҡорбан (кәртә-ҡура төҙөгәндә тауыҡ салып бағана төбөнә ҡанын һибеү йәки күмеп ҡалдырыу йолаһы)* – старинный обычай жертвоприношения (при постройке хлева, сарая под основание столба закапывают зарезанную курицу либо окропляют столб кровью); *ҡолон-ҡорбанныҡ күтәреү* «приносить дар хозяину земли и вод».

*Һөйләү теле өлгөләре*

*Башҡолтай (Кече Мүл) ауылы*

Безне башҡырт тип йөрткәннәр. Элек үзләренең былған йерләре. Ырыу, ҡәбилә ишелмей ансы.

– Был ауылға нисә йылдар була?

– Майтаҡ ҡына, өч йөз йыллар была. Жирләре күп былған башҡыртның. Шуңа аларны кенәз тип йөрөткәннәр урыслар.

– Исеме ҡайҙан килә?

– Ҡалтай дигән кеше былған. Аның ике улы была. Оло мулла, Кече мулла. Безең аул элке исеме Кече Мүл. Кайаныва тигән аул бар, йыраҡ түүл мынан. Аны Оло Мүл дип йөрткәннәр. Ҡалтай дигән аулда Ҡалтай үзе торған. Сәвит былгач, без Башҡырт-Ҡолтай, ә тегесе Урыс-Ҡолтай булып китте. Безең аул башлап утырған Изел буйында, Нижний Мулда. Без татар түүел, башҡырт, нәстәйәши башҡырт.

– Ә татарҙар булдымы?

– Былды. Казаннан килгеләделәр, тегүче, киезтек басучы. Аулда жәүерләр: ҡуй ан жәүере, Дүсмит жәүере. Аулныҡы тамғалар: кәләп, сәнәк, күлсә. Айыу Ғафур күп пелә, аңа кереп чыҡмаға йарый. Безең бабайлар элег әйткән: «Мында дәжал килмәс, Болғар йаҡын, тигән. Шошпо йердә торма ҡушҡаннар. Без Пирем халҡы кебег әйтмейбез. Ҡаты, йаматай сүләшәбез, башҡырт теле беле сүләшәбез.

*1975 йылда Пермь өлкәһе (хәҙер Пермь крайы)*
*Пермь районы Башҡолтай ауылы Сәйдәшев Әмирҙән*
*(1888 йылғы) яҙып алынған.*

*Тәржемәһе*

*Деревня Башкир-Култаево*

Нас называли башкирами. Раньше у них были свои земли. Что такое род, племя – не слышали об этом.

– Сколько лет со времени основания деревни?

– Порядочно, около трехсот лет будет. Земли было много у башкир, поэтому русские их называли князьями.

– Откуда произошло название деревни?

– Был человек по имени Калтай. У него было два сына. Оло (старший) мулла и кече (младший) мулла. Старое название нашей деревни Кече Мул. Отсюда недалеко есть деревня Каяново. Её называли Оломул. В Калтаево жил сам Калтай. После установления Советской власти мы стали называться Башкир-Култаево, а та деревня – Русское Култаево.

Наша деревня первоначально поселилась на Каме, в Нижнем Муле. Мы не татары, мы башкиры, настоящие башкиры.

– Татары были?

– Были. Приезжали из Казани, портные, пимокаты. В деревне родовые подразделения: заяц и род Дусмета. Тамги: кәләп «сновалка», вилы, кольцо. Медведь-Гафур много знает, к нему можно зайти.

Наши деды в далеком прошлом сказали: «Здесь опасность не достанет, сюда свирепый не дойдет, Булгар близок» – и велели здесь жить.

Мы не говорим как пермские (татары), наш язык грубый, неотесанный (т.е. народный – ред.), язык у нас башкирский.

*Күземйар (Байауыл) тарихынан*

Элек Меңгәжи тауға ике брат килеб утырған. Берсе Байғолдой, берсе Хужайар. Элек Эсмәғилефләр күп былған. Зат озурайса, ҡыз алмаға ҡыйын була теп, фамилжаны үзгәрткәннәр. Затны узырайтмағаннар. Алмаға-итмәгә ҡыйын була теп, Акаефлар булып киткән. Байғолдойдан – Байауыл, Хужайардан Күземйар булып киткән. Без башҡырт, безне Ҡазан ғына ғәйнә тей, без чын башҡырт. Сабантуй пируай Мәңгәжи тауда былды, бороңғосы. Как йер-су ҡордойсә, сабантуй была. Мәңгәжи тауда жийын. Удиктә дә, бездә дә была. Барда жийыны была. Өч әтнә алда была. Элек салаттан сосла йасағаннар. Тәмне была, ҡуйы, ҡып-ҡызыл. Ҡымыҙ, буза бездә йуҡ, былмады. Андыйны белмәм (белмәйем). Ҡарадан ҡараға (кешенән кешегә) эшетелерей. Хәҙер ҡолаҡ та насар эшеткәс, ҡыйын. Миңке сыир бар. Сарыҡ та бар. Уланнарға пумык былсын. Курмы әҙерләйемей. Ҡан отора нығыраҡ ойой, эшләмәсәң. Хәҙер инде миңке уахытымды узғырҙым.

*1973 йылда Пермь өлкәһе Барҙы районы*
*Куземьяр ауылы Аширов Низамдан*
*(1895 йылғы) яҙып алынған.*

*Тәржемәһе*

*Из истории села Куземъярово (Байаул)*

Давно на Мангажи-гору два брата пришли и обосновались, один Байголдой, один Хужаяр. Раньше Исмагиловых было много. Если род увеличивается, трудно бывает подобрать невест, жениться, выйти замуж становится труднее, поэтому

сменили фамилию. От Исмагиловых отделились Акаевы, а от Байголдоя стало Байаул, от Хужаяра – Куземьярово. Мы башкиры, нас только казанцы называют гайна. Мы истинные башкиры. Весенний праздник сабантуй (т.е. жиен – ред.) сначала проводится на Мангажи-горе, старинный жиен. Как только земля от снега высыхает, на Мангажи-горе жиен. И в Удике, и у нас проводится. Есть еще жиен в Барде, проводится он на три недели раньше.

Раньше из проросшей ржи делали сусло, сладкий напиток, густой, красный. Кумыса и бузы у нас не было. Про них не знаю, не слышал. От людей доходили бы слухи, если бы делали кумыс, бузу. Сейчас трудно, уши плохо слышат. У меня есть корова и овцы. Стараюсь помочь сыновьям. Готовлю корм. Если не работаешь, не двигаешься, ноги-руки немеют. Сейчас уж мое время прошло.

## 4. Танып һөйләше

### *Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы*

Был һөйләш төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәре араһында башҡорт диалектология фәнендә сағыштырмаса ентеклерәк өйрәнелгән булыуы менән айырылып тора. Уны тәү башлап филология фәндәре докторы С. Ф. Миржанова ғәйәт киң планда өйрәнде. Үҙенең 1991 йылда донъя күргән «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты» («Северозападный диалект башкирского языка», Уфа, 1991) тигән монографияһында ул ошо диалект составына ингән барлыҡ һөйләштәр тураһында ла айырым-айырым бүлектәр баҫтырып сығарҙы. Ә инде 2008 йылда З. Ф. Зәйнәшева «Танып һөйләшенең тел үҙенсәлектәре» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. З. Ф. Зәйнәшева үҙе ошо һөйләштең вәкиле, Борай районында тыуып үҫкән, әммә мәктәптә татар телендә белем алып, аҙаҡ Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты татар-урыҫ бүлексәһен тамамлап, оҙаҡ йылдар Өфө мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләгән башҡорт кешеһе. Танып һөйләшен өйрәнгәндә беҙҙең өсөн был хеҙмәттәрҙең икеһе лә төп ҡулланма булып тора. Был темаға арналған

баҫмалар араһында, шулай уҡ күренекле ғалимә, педагогия фәндәре докторы, профессор М. Ғ. Хәйруллинаның «Тамырҙарыбыҙ тәрәндә: Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары. Уларҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге» (Өфө, 2002. 65 бит) тигән брошюраһында тупланған мәҡәләләре лә иғтибарҙы йәлеп итә. Был автор ҙа туған теле йәһәтенән танып һөйләше вәкиле. Ул да шул уҡ Борай районында (элекке Өфө губернаһы Бөрө өйәҙенең Баҡалы ауылында) тыуып үҫкән танып ҡәбиләһе башҡорто. М. Ғ. Хәйруллина уҙған быуаттың 90-сы йылдар башында төньяҡ-көнбайыш диалектын һәм шул диалектта һөйләшеүсе башҡорттарҙың үҙ халҡының милли әҙәби телендә уҡытыу хоҡуғын яҡлап сығыш яһаусы ҡыйыу фекерле һәм арҙаҡлы ғалимдарыбыҙҙың береһе булды. Был мәсьәләлә ул ҡайһы бер татар телселәренең башҡорт телендәге өсөнсө диалектты танымаҫҡа тырышыусы уйҙырмаларын фашлап, әҙмә-әҙле принципиаль позицияла торҙо, үткәндәге хаталарҙы төҙәтеп, башҡорт халҡының телен һәм милли рухын тергеҙеү эшенә ҙур өлөш индерҙе. Уның үҙ һөйләше, үҙенең туған теле тураһындағы дәлилдәре ысынлап та ышаныслы булды. Был хаҡта ғалимә ошолай тип яҙҙы:

«Мин бала саҡтан, инә һөтө менән көнбайыш башҡорттары диалектында һөйләшеп үҫкәнмен. Минең тыуған ауылым Баҡалы – төп башҡорт ауылы. Ауыл ҙур ғына өс урамдан тора ине, шуның икеһе башҡорт урамы тип, өсөнсөһө типтәр осо тип йөрөтөлә ине. Тирә-яҡта ла башҡорт ауылдары бар ине: Кәшкәләү, Ҡарағош, Дауытлар, Таҙлар, Киҙгән, Һәйтәк, Имән, Борай, Ҡарайерек һ. б. Был төбәктә йәшәгән халыҡтар үҙҙәренең милләтен башҡорт тип, шул яҡтың төп халҡы тип белә: был диалект уның ҡанына һеңгән, күңеленәятҡан, һәр кем уны үҙенең туған теле, йәнле һөйләү теле тип ҡарай»[1].

М. Ғ. Хәйруллинаның үҙҙәренең йәнле һөйләү теле һәм уның башҡорт теле диалекттар системаһында һөйләш берәмеге булыуына инандырыусы үҙ тормош тәжрибәһе менән бәйле күҙәтеүҙәре лә ғәйәт фәһемле. «Беҙҙең диалекттың башҡорт теленең диалекты икәнлегенә мин тағы ла бер дәлил килтерә алам, – тип яҙа ул. – Бөрө педагогия техникумын тамамлағас,

[1] *Хәйруллина М. Ғ.* Тамырҙарыбыҙ – тәрәндә: Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, уларҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге. Өфө, 2002. 34–35-се биттәр.

уҡытырға Яңауылға тәғәйенләнгәйнем. Яңауылдың 1-се урта мәктәбендә ике йыл (1935–1937) тарих, тел һәм әсә теле менән әҙәбиәтенән ошо үҙебеҙҙең диалектта уҡыттым. Унан һуң Ҡаҙан педагогия институтының татар теле бүлексәһенә уҡырға индем. Ләкин минең һөйләү телемде татарҙар аңламай ине. «Һинең һөйләүең татар теле түгел», – тип, минән көләләр ине. Бер йыл тигәндә мин татар телен ентекләп, һәр яҡтан төплө итеп өйрәндем, татар теленең һүҙлек составын үҙләштерҙем, татар телендә сығыш яһарға оҫтарып алдым. Әммә, әйткәнемсә, бының өсөн миңә ул телде ныҡлап өйрәнергә тура килде. Был факт төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле башҡорт теленең диалекты икәнлеген тағы ла бер тапҡыр раҫлай»[1].

Танып һөйләше территориаль йәһәттән Балтас, Борай, Мишкә, Бөрө, Дүртөйлө, Тәтешле, өлөшләтә Асҡын райондары башҡорт һәм башҡорт-типтәр ауылдарының һөйләү телен берләштерә. Төньяҡтан ул – ғәйнә, көнсығыштан – ҡариҙел, көнбайыштан түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләштәре менән сиктәш булып урынлашҡан. Был һөйләш – Тере Танып, Әри һәм Йоҡ йылғалары буйҙарында йәшәгән танып (аҫ танып), ирәкте, ҡаңны һәм таҙ/таҙлар ҡәбиләләре башҡорттарының йәнле һөйләү теле булып тора. Башҡорттар – бик боронғо халыҡтарҙың береһе, Көньяҡ Урал регионының аборигендары. Ә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары башҡорт этносының айыруса боронғо һәм бик ҙур компоненттарының береһе тип иҫәпләнә. Ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының ата-бабалары Көньяҡ Уралда Геродот дәүерендә үк, йәғни, беҙҙең эраға тиклем V быуатта уҡ йәшәгән тип раҫларға була. Мәҫәлән, Геродоттың атаҡлы «Тарих» китабында телгә алынған плешивый агриппейҙарҙы фәндә хәҙерге башҡорттар составындағы таҙлар ҡәбиләһенә тап килә тигән ҡараш бәхәс тыуҙырмай. Ә таҙ, таҙлар, алда әйтелгәнсә, танып (аҫ танып), ирәкте ҡәбиләләренең һөйләү теле менән бергә, танып һөйләшенең нигеҙен тәшкил итә. Таҙлар ҡәбиләһе ауылдары Тере Таныптың урта ағымы буйында урынлашҡан. Был этник төркөм йәнә ҡаҙаҡтар, нуғайҙар, үзбәктәр, төрөкмәндәр, Төньяҡ

---

[1] *Хәйруллина М. Ғ.* Тамырҙарыбыҙ – тәрәндә: Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, уларҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге. Өфө, 2002. 35-се бит.

Алтайҙағы ҡомандылар араһында ла билдәле. XIII быуатта йәшәгән ҡыпсаҡ кенәздәренең береһе Таҙ исемле булған[1]. Ошо урында башҡорт әкиәттәрендә йыш телгә алынған Таҙ батыр исемен дә иҫкә төшөрөргә мөмкин. Был этнонимдың әкиәт персонажы исеменә әйләнеүе уның шулай уҡ бик боронғо булыуы тураһында һөйләй. Таҙлар – төрлө төбәктәрҙә урынлашҡан күп кенә ауылдар составында ырыу, ара исеме (микроэтноним) булараҡ та ғәйәт киң таралған. Был үҙенсә бер феноменаль күренеш. Башҡортостанда, Борай районындағы Иҫке һәм Яңы Таҙлар ауылдарынан тыш, тағы ла өс Таҙлар ауылы бар. Улар Ҡырмыҫҡалы, Ейәнсура райондарындағы Таҙлар ауылдары һәм Дим буйындағы хәҙерге Дәүләкән ҡалаһына ҡушылып киткән элекке Таҙлар ауылы.

З. Ф. Зәйнәшева хеҙмәтендә билдәләнеүенсә, танып һөйләше боронғо башҡорт теле нигеҙендә формалашҡан һәм үҙенең боронғолоҡ һыҙаттарын тотороҡло һаҡлаған һөйләштәр иҫәбендә тора. Был фекерҙе иң элек һөйләштең морфологияһы һәм лексикаһына, шулай уҡ фонетик үҙенсәлектәренә ҡарата ла әйтергә була. Төбәктең төп халҡы, тип яҙа ул, башҡорт теленең беренсе ҡыпсаҡлашыу дәүеренән һуң формалашҡан диалектында һөйләшә. Һөйләштәге айырым үҙенсәлектәрҙең боронғо орхон-йәнәсәй яҙма ҡомартҡылар теле, хәҙерге телдәрҙән – әзербайжан, ҡаҙаҡ, сыуаш, төрөкмән, яҡут (саха) телдәре менән тап килгәнлеген күрһәтә. Һөйләштең диалект системаһында, бер яҡтан, көнсығыш диалект (әй, арғаяш) һәм, икенсенән, көньяҡ диалект (дим) һөйләштәре менән уртаҡ һыҙаттар күҙәтелә.

## *Фонетик үҙенсәлектәре*

Һөйләштә **а** фонемаһы ике вариантта ҡулланыла: һүҙ башында һәм һүҙҙең беренсе ябыҡ ижегендә был өн иренләшә һәм *а°ур* (әҙәби телдә *ауыр*), *ма°л* (әҙәби телдә *мал*), *Ҡа°рыш* (гидроним һәм ойконим, әҙәби телдә *Ҡарыш*) формаһында әйтелә. Шул уҡ позицияла иренләшкән *а°* өнө көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарҙың әй, арғаяш, эйек-һаҡмар, дим һөй-

---

[1] *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа. М.: Наука, 1974. 355 – 356-сы биттәр.

ләштәре өсөн дә характерлы. Бүтән позицияларҙа **а** фонемаһы иренләшмәй.

Һуҙынҡылар өлкәһендә йәнә ошондай сиратлашыуҙар билдәле:

**а – ә:** һөйләштә – *йан*, әҙәби телдә – *йән* «душа»; был үҙенсәлек ҡыҙыл һәм әй һөйләштәрендә лә күҙәтелә;

**ә – е, ө – ә:** *тәтелдек* (танып) – әҙәби телдә *тәтелдәк; белеки/беләкәй/бәлки/бәлтек/бәләкәй* – *бәләкәй*; күбәләк һөйләшсәһендә – *беләкәй*;

**й – и:** *йылау* (танып) – әҙәби телдә *илау* «плакать». **И** өнө һүҙ башында һәм һүҙҙең беренсе ижегендә боронғо әйтелешендә һаҡланған: *тигәнәк* (танып) – *дегәнәк* (әҙәби телдә) «репей»;

**и – ы, и – ә:** *Жиһан* (танып) – әҙәби телдә *Йыһан* «вселенная», *чичкә/чәчкә* (танып), *сискә/сәскә* (әй, урта, эйек-һаҡмар), *сисәк* (салйоғот) «цветок» – *сәскә* (әҙәби телдә);

**о – ы, ы – о:** *боғау* (танып, арғаяш, эйек-һаҡмар) – *бығау* (әҙәби телдә) «путы»; *оңғай* (танып) – *ыңғай* (әҙәби телдә) «положительно»;

**о – у, ө – ү** (һүҙҙең башында һәм уртаһында): *ботау* (танып, әй) – *бутау* (әҙәби телдә) «мешать»; *йөгерү* (танып), *йөгөрөү* (өршәк) – *йүгерeү* «бежать, бегать»; **о – у** тап килеше боронғо руна яҙмаларындағы диалекталь билдәләрҙең һаҡланып ҡалыуы менән аңлатыла;

**ө – о, о – ө:** *дөнъя* (танып) – әҙәби телдә *донъя* «мир, вселенная»; *гомум* (танып) – *гөмүм* (әҙәби телдә) «вообще»;

**ө – е:** *төйәү* (танып) – *тейәү* (әҙәби телдә) «грузить, загружать»;

**у – ы:** *маймул* (танып, арғаяш, өршәк), *маймун* (ҡариҙел) – *маймыл* (әҙәби телдә) «обезьяна».

Әҙәби телдә һүҙ башында **ы** өнө менән ҡулланылған һүҙҙәрҙә был өн ҡыҫҡара: *чыҡ* (танып), *сыҡ* (арғаяш) – *ысыҡ* (әҙәби телдә) «роса».

Төньяҡ-көнбайыш диалекттың ҡайһы бер һөйләштәрендә, көнсығыш диалекттағы кеүек үк, ирен гармонияһы һаҡланмай: *борын* (танып) – *борон* (әҙәби тел).

Танып һөйләше нигеҙҙә монофтонгылар ҡулланылыуы менән характерлы. Монофтонгылаштырыу башҡорт теленең әй, эйек-һаҡмар, урта, дим һөйләштәрендә, шулай уҡ нуғайбәк

(керәшен татарҙары), татар теленең урта диалекты тау яғы һөйләштәрендә күҙәтелә. Монофтонгыларға миҫалдар:

*өй>ү: үрә* (танып, әй) – *өйрә* (башҡорт, татар әҙәби телдәре) «похлебка»;

*ыу>у: угыҙ* (танып, дим), *огуҙ* (боронғо төрки теле) – *ыуыҙ* (әҙәби тел) «молозиво»;

*ый>и: пима* (танып), *бима* (урта) – *быйма* (әҙәби тел) «валенки»;

*ой>о: бодай* (танып), *боҙай* (дим, өршәк, урта) – *бойҙай* (әҙәби тел) «пшеница»;

*оу>у: посу* (танып) – *боҫоу* (әҙәби тел) «таиться»;

*ау>у: ҡуаҡ* (танып) – *ҡауаҡ* (әҙәби тел) «перхоть»;

*(э) ей>и: иләшеү* (танып) – *эйәләшеү* (әҙәби тел) «привыкать»;

*әй>и: песи* (танып, дим) – *бесәй* (әҙәби тел) «кошка»;

*оу>и: бөти* (танып, эйек-һаҡмар), *битиг* (боронғо төрки теле) – *бетеү* (әҙәби тел) «омулет, оберег, талисман»;

*йа>а: ашаулыҡ* (танып) – *ашйаулыҡ* (әҙәби тел) «скатерть».

Шул уҡ ваҡытта айырым һүҙҙәрҙә дифтонгылаштырыу күренеше күҙәтелә:

*а>ый: ҡыйлану* (танып, әй) – *ҡыланыу* (әҙәби тел) «кокетничать»;

*и>ей: нейә?* (танып, әй) – *ниңә?* (әҙәби тел) «почему?»; *мейә* (танып, әй) – *миңә* (әҙәби тел) «мне».

Һөйләштә тартынҡылар үҙҙәренең яһалышы (яңғырашы) йәһәтенән әҙәби телдәге тартынҡылар менән бер үк төрлө. Бында айырма тик йомшаҡ **ж, ч** өндәренең ҡулланылыуына һәм интерденталь **ҫ** өнөнөң бөтөнләй булмауына ҡайтып ҡала. Айырым һүҙҙәрҙә **ҙ** өнө урынына **з** өнө ҡулланыла: *Изел, изән* (әҙәби телдә *иҙән*), *ҡазаҡ* (әҙәби телдә *ҡаҙаҡ*).

Һүҙ башында **б** өнө урынында **п** өнө килә: *пумала* (танып, арғаяш, салйоғот) – *бумала* (әҙәби тел) «помело»; *печән* (танып), *песән* (дим) – *бесән* (әҙәби тел) «сено». Интервокаль позицияла, киреһенсә, **п** өнө урынына **б** өнө килеү осраҡтары бар: *тәбәшәк* (танып, урта, дим, мейәс, төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәре) – *тәпәшәк* (әҙәби тел) «низкий». Айырым һүҙҙәрҙә **м – б** сиратлашыуы билдәле: *мөрө/бөрө* (танып) – *бөрө* (әҙәби тел) «почка».

**Б – в** сиратлашыуы: *балчыҡ* (танып) – *валсыҡ* (әҙәби тел) «крошка»;

**б – у, ү:** *кебек* (танып) – *кеүек* (әҙәби тел) «похожий».

Танып һөйләшендә, көнсығыш диалекттағы, дим һәм ҡариҙел һөйләштәрендәге кеүек үк, һүҙ башында **т** өнөнөң яңғырауланыуы күҙәтелә: *дары* – әҙәби телдә *тары* «просо». Шул уҡ ваҡытта күпселек һүҙҙәрҙең әйтелешендә был йәһәттән әҙәби тел нормаһы һаҡлана: *тилбәрән* – әҙәби телдә *тилебәрән* «белена»;

**д – ҙ** сиратлашыуы: *адаш* – әҙәби телдә *аҙаш* «тезка»;

**д – н:** *яңыдан* – әҙәби телдә *яңынан* «заново»;

**д – г:** *дегә-дегә* – әҙәби телдә *геле-геле* (междометие подзывания гусей);

**т – д:** *тигәнәк* – әҙәби телдә *дегәнәк* «репей»; *дисбе* – әҙәби телдә *тиҫбе* «четки»;

**т – ҙ:** *атна* – әҙәби телдә *аҙна* «неделя»;

**т – с:** *төчө*, ҡариҙел һөйл. *төсө* – әҙәби телдә *сөсө* «пресный»; *төчкөлтем* – әҙәби телдә *сөскөлтөм* «пресный»; **т – с** сиратлашыуы уйғыр һәм сыуаш телдәре диалекттары өсөн дифференциациялау үҙенсәлеге булып тора;

**с – ҫ, с – һ:** *сүрәт* (танып, әй, урта) – *һүрәт* (әҙәби тел) «рисунок»; *асаба* (танып, урта) – *аҫаба* (әҙәби тел) «вотчинник»; *сом* – әҙәби телдә *һум* «рубль»; *тупса* – әҙәби телдә *тупһа* «порог»; *алсыз-йалсыз* – әҙәби телдә *алһыҙ-ялһыҙ* «не переставая, беспрестанно, без устали».

Һөйләштә әҙәби телдәге **һ** өнө айырым осраҡтарҙа төшөп ҡала: *уш* – әҙәби телдә *һуш* «чувство, сознание», *Әдиә* – әҙәби телдә *Һәҙиә* (ҡатын-ҡыҙ исеме); *ауа* – әҙәби телдә *һауа* «воздух».

Әҙәби телдәге **с** өнө урынында йомшаҡ **ч** өнө ҡулланыла: *муча* – әҙәби телдә *мунса* «баня».

Тулы прогрессив һәм регрессив ассимиляция күренешенә миҫалдар: *ашаулыҡ/ашшаулыҡ* – әҙәби телдә *ашъяулыҡ* «скатерть»; *чимечкә* – һөйләштә *симешкә* «семечки».

### *Морфологик үҙенсәлектәре*

Морфология өлкәһендә *-лыҡ/-лек, -ныҡ/-нек* аффикстары продуктив иҫәпләнә. Шулай уҡ *-ҡай/-кәй* (*көләкәй* «жере-

бенок»), *-аҡ/-әк, -ыҡ/-ек* (*ләпек* «уличная грязь»), *-ма/-мә* (*төрмә* «разновидность пирога»), *-ҡаҡ/-кәк* (*батҡаҡ* «непролазная грязь»), *-ҡыч/-кеч, -ғыч/-геч* (*төртөнгеч* «бродяга»), *-ҡа/-кә* (*лыпыҡа* «грязнуля»), *-аш/-әш, -ыш/-еш* (*уҙыш* «соревнование»), *-ҡач + ай/-кәч + әй* (*апыҡачайым* «обращение к младшим себя»), *-чаҡ/-чәк/-чек* (*алачаҡ* «то, что должны тебе»), *-ушҡа/-үшкә* (*хәчтерүшкә* («тот, кто имеет жалкий вид»), *-ман/-мән* (*әрекмән* «репей»), *-ған/-гән* (*Себергән* – гидроним), *-аҡ/-әк* (*бәләк* «скалка для белья») аффикстары ҡулланыла.

Сифат яһаусы ялғауҙар: *-лы/-ле, -ны/-не, -сыз/-сез, -ыҡ/-ек, -әк, -ылтыҡ/-елтек, -ыш/-еш, -мыш/-меш* (уғыҙ телдәренә хас аффикс: *чуҡынмыш* «сообразительный»; *ҡырҡмыш тай* «жеребенок» (стригунок), *-ыу/-еү, -ым/-ем, -ма/-мә, -малы/ -мәле* (*шаҡ ҡатмалы* «сногсшибательный»), *-лыҡай/-лекәй* (*шәплекәй* «проворненький»), *-ҡаҡ/-кәк, -ғаҡ/-гәк* (*йәбешкәк* (танып, дим) «прилипающий»), *-ҡан/-кән, -ған/-гән* (*пешмәгән* «недотепа»).

Ер-һыу атамаларында көнсығыш диалектҡа хас *-ты/-те, -ҙы/-ҙе, -ды/-де* тибындағы ялғауҙар осрай: *Мағашты/ Мағашлы, Әштәнде, Асауҙы, Игәтте.*

Сифаттар яһалышында йәнә *-тай, -тәш, -тек, -мәт, -мач, -пет* кеүек диалекталь ялғауҙар ҡулланыла: *йаматай* – әҙәби телдә *ямаҡай* «плохой», *йәнтәш* – әҙәби телдә *йәнле* «покладистый», *белтек* – әҙәби телдә *бәләкәй* «маленький», *әрпет* – әҙәби телдә *әрпеш* «неряшливый, неопрятный».

Зат алмаштары төбәү килештә **-ә, -ңа** ялғауҙары менән ҡулланыла: *мин – мейә* (әҙәби телдә *миңә*), *син – синә, сейә* (әҙәби телдә *һиңә*), *аңа* (әҙәби телдә *уға*). Танып һөйләше был үҙенсәлек йәһәтенән мейәс һөйләшенә, әй һөйләшенең дыуанмәсетле һөйләшсәһенә, әзербайжан, төрөк телдәренең диалекттарына яҡын тора. Бынан тыш, тағы ла ошондай формалар ҡулланыла: төбәү килештә – *мейәргә, миңәргә* «мне», *сейәргә, синәргә* «тебе», *аңарга* «ему»; сығанаҡ килештә – *мейәрдән, миңәрдән* «от меня», *сейәрдән, синәрдән* «от тебя», *аңардан* «от него»; урын-ваҡыт килештә – *мейәрдә, миңәрдә* «у меня», *сейәрдә, синәрдә* «у тебя», *аңарда* «у него».

Һорау алмашының ошондай бик күп варианттары бар: *нәмә? нәмәкәй? нәрсә? нәрсәкәй? нәмәстәкәй? нимәстәкәй?*

*ней? нейәрсә? нәстә? нәстәкәй? нәмәрсә? нәмәрсәкәй? нәмәстә? нейәмәстә? нейәмәстәкәй?* (әҙәби телдә *нимә? нәмә?*) Был йәһәттән танып һөйләшенең әй һөйләшенә яҡын булыуын билдәләргә мөмкин.

Хәл рәүештәре күпселек осраҡта бүтән һөйләштәр менән уртаҡ специфик башҡорт һүҙҙәренән тора: *түтә* «прямо, кратко», *угата* «чересчур», *йәтрәк* «быстренько», *майтаҡ* – әҙәби телдә *байтаҡ* «порядочно, достаточно», *тоҡ-томалға* «ни с того, ни с сего», *кәнде, кәндей* «точно, именно»: *Кәнде тау битенән йулы бар* «Точно по склону горы есть дорога».

Ҡылымдың хәбәр һөйкәлешенең ваҡытты белдереүсе формалары ныҡ үҫешкән. Хәҙерге заман икенсе зат күплек ялғауының ҡыҫҡа варианты *-сыз/-сез* аффиксы менән яһала: *барасыз, китәсез* (әҙәби телдә *бараһығыҙ, китәһегеҙ*); әҙәби телдәге *-һығыҙ/-һегеҙ* формаһындағы кеүек үк, *-сығыз/-сегез* ялғауҙары ла ҡулланыла: *Ҡайа барасығыз?* «Куда идете?»; *Китәсегез дәме инде?*

Ҡылымдың дауамлы хәҙерге заман формаһын белдереүсе *-ыңҡыра/-еңкерә* аффиксы ҡулланыла.

Ҡылымдың хәҙерге заманды белдереүсе *-май/-мәй* формаһы әҙәби телдәге ялғау менән тап килә: *Йаныңа бармай, ишетмәйем.* «Не подойдя ближе к тебе, не услышу».

Күптән үткән заманды белдереүсе формаларҙың ике төрө ҡулланыла: 1) *-гайны/-гәйне;* 2) *-ганейе/-гәнейе.* Был формаларҙың тәүгеһе әҙәби тел формаһы менән тап килә: *Өс басыуга бүленә торгайны* «(Пашня) разделялась на три поля»; икенсе форма төньяҡ-көнбайыш һөйләштәр өсөн характерлы: *Магазингә барганейем* «Ходил(а) в магазин».

Ҡушма ҡылымдар *алыу, ятыу, утырыу* һымаҡ ярҙамсы ҡылымдар ҡулланып яһала. Төп ҡылым **-ып/-п** хәл ҡылымы формаһында ҡулланыла: *барып йата* – көньяҡ диалектта *бара йата* «идет туда», *килеп йата* «идет сюда» – көньяҡ диалектта *килә йата* «идет сюда».

Һөйләштә *бит, ис/ич* «ведь»; *лабаса, ласа/ләсә* «ведь же» киҫәксәләре әүҙем ҡулланыла. Һөйләштең төньяҡ төбәгендә, һирәкләп көньяғында ла *ҡый, кей, кәй* киҫәксәләрен ҡулланыу күҙәтелә: *Йырганаҡ ҡына әйе бит; Мында йуҡ ласа; Мынысын мында салдыҡ ҡый; Әйттем ич* «Сказал же». Ә *ич/ис* киҫәксәһе бары тик танып һөйләше өсөн генә характерлы.

*Лексик үҙенсәлектәре*

Танып һөйләшенең лексикаһы, тип билдәләй С. Ф. Миржанова, үҙенең тамырҙары менән дөйөм башҡорт халыҡ теле лексикаһына туранан-тура бәйләнгән. Һөйләштә ҡулланылыусы лексик ҡатламдарҙың, ти ул, көнсығыш һәм көньяҡ диалект һөйләштәре менән уртаҡ булыуы характерлы. Һөйләш территорияһының көньяҡ өлөшөндә иһә (Тәтешле районының Бул-Ҡайпан, Бәҙрәш, Аҡсәйет, Еремйә ауылдары) ғәйнә һөйләше менән уртаҡ һыҙаттар билдәләнә: *тимергәк арба* «телега-ходок», *бөкә* «пирожки», *таҡыл* «рубанок», *шырамта* «мочалка» һ. б. Бынан тыш, танып һәм ғәйнә һөйләштәре бербереһе менән тарихи яҡтан да тығыҙ бәйләнгәндәр һәм ғәйнәләрҙең һөйләү телендә үҙ сиратында танып, ҡариҙел һәм башҡа һөйләштәр менән уртаҡ лексик ҡатлам урын алған[1].

Шул уҡ ваҡытта һөйләштә башҡорт этносының формалашыу тарихы менән бәйле бик күп специфик һыҙаттар булғанлығы күренә, тип билдәләй З. Ф. Зәйнәшева.

Һөйләштең лексикаһы башҡорт халыҡ теленең төп һүҙлек фондына нигеҙләнеп формалашҡан. Шуның менән бергә төньяҡ-көнбайыш һөйләштәрҙә уларҙың үҙҙәре өсөн генә характерлы специфик зональ лексика айырымланып тора. Лексик диалектизмдар лексиканың түбәндәге тематик төркөмдәрендә йыш күҙәтелә:

тәбиғәт күренештәрен билдәләүсе, метеорология, ландшафт менән бәйле һүҙҙәр һәм терминдар: *ләпек* – әҙәби телдә *батҡаҡ* «грязь», *тымызыҡ*, ҡариҙел һөйләшендә *тымыйыҡ* – әҙәби телдә *тымыҡ* «тихий, спокойный (день)»; *зәүзә* «месяц май»: *Зәүзә тыумай йәй булмай, ҡауыс туумай ҡыш булмай* «Пока не родится май, не наступит лето, пока не наступит ноябрь, не наступит зима»; *әбей чәче* – әҙәби телдә *ҡылған* «ковыль»; *шарлама* (танып, ҡариҙел, дим, өршәк, урта һөйләштәрҙә) – әҙәби телдә *шаршы* «перекат»; *гәрҙән* – әҙәби телдә *ҡыртыш* «дёрн»; *әрпет (буран)* – әҙәби телдә *ҡырма (буран)* «липкий буран» һ. б.;

үҫемлектәр донъяһы менән бәйле терминдар: *андус* – әҙәби телдә *андыҙ* «девясил»; *бүтәкә* – *бүтәгә* «мятлик кистевид-

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа: Китап, 2006. 110-сы бит.

ный»; *дәлгә, тәлкә* – әҙәби телдә *тәлгәш* «гроздь»; *лыс* – әҙәби телдә *ылыҫ* «хвоя»; *сыршы* – әҙәби телдә *шыршы* «ель», *йорт үләне* – әҙәби телдә *бәпкә үләне* «спорыш»;

хайуандар донъяһы менән бәйле диалекталь лексика өлкәһендә киң ҡулланылыштағы һүҙҙәрҙең фонетик һәм морфологик варианттары ҙур урын алып тора: *әрлән* – әҙәби телдә *ирлән, алйырҙан* «хомяк»; *бөгөлйән/бөгөлс'ән* – әҙәби телдә *бөгәлсән* «овод»; *ҡысна* – әҙәби телдә *ҡыҫала* «рак»; *доңғож* – өршәк һөйләшендә *диңгеж* – әҙәби телдә *иңкеш* «шмель»; *өн* – әҙәби телдә *өң* «логово»; шул уҡ ваҡытта хайуандар донъяһы менән бәйле күп кенә терминдар ҡушма һүҙҙәрҙән яһала: *атат/атәт* < *ата эт* – әҙәби телдә *арҙан* «кобель»; *ҡусы тейен* – әҙәби телдә *әлгәнйәк* «бурундук», *су тычҡаны* – әҙәби телдә *көшөл* «крыса водяная».

Лексиканың туғанлыҡ терминдары, тормош-көнкүреш, аш-һыу, кейем-һалым, кеше һәм уны характерлаусы һ. б. һүҙҙәр ҡатламында ла күп кенә диалектизмдар осрай: *әтәй* – әҙәби телдә *атай* «отец»; *инәй* (танып һөйл., көнсығыш диалектта, дим, өршәк, урта һөйләштәрҙә) – әҙәби телдә *әсәй* «мать»; *бианай* – әҙәби телдә *ҡәйнә* «свекровь»; *лаҡан* «ушат»; *диңгеҙ – нигеҙ* «фундамент дома»; *кәберкә* «запечье»; *әчә* «противный человек»; *тез* – әҙәби телдә *тубыҡ* «колено».

Һөйләштә яҙып алынған фразеологизмдар, мәҡәлдәр, әйтемдәр, һынамыштар: *Бәхетлененң ҡунагы дөрөн-дөрөн* «К хорошему человеку гости приходят дружно»; *Ил күреүе илле сум, йел йотоуы – җитмеш сум* «Повидать свет – пятьдесят рублей, наглотаться ветра – семьдесят рублей»; *Имән яфрагын ҡоймаса, ирләргә ауыр, ҡайын яфрагын ҡоймаса, ҡатыннарга ауыр* «Если дуб вовремя не сбрасывает листья, год для мужчин тяжелый, если береза не сбрасывает (вовремя) листья, тяжело для женщин»; *Тора белгәнгә донйа мамыҡ, тора белмәгәнгә – тамуҡ* «Если умеешь жить, мир покажется пухом, не умеешь жить – покажется адом».

Ғөмүмән, танып һөйләшенең һүҙлек составы барлыҡ тематик ҡатламдар буйынса ла дөйөм башҡорт лексикаһына нигеҙләнгән. Бынан тыш, һөйләштә көньяҡ диалекттың дим һәм урта һөйләштәре менән күптәнге территориаль контакттар булғанлығын күрһәтеүсе диалекталь ҡатлам билдәләнә. Ә инде көнсығыш диалект һөйләштәре менән уртаҡ диалекталь

ҡатламды ғәйәт боронғо, субстрат ҡатлам тип иҫәпләргә була. Башҡорт теленең көньяҡ-көнсығыш һөйләштәре менән уртаҡ ҡатлам иһә танып башҡорттарының көньяҡ-көнсығыш башҡорт ҡәбиләләре менән әүәлге тарихи-этник бәйләнештәре булғанлығын дәлилләп тора. Шуның менән бергә танып һөйләшендә уның бары тик үҙенә генә хас специфик лексика һаҡланып ҡалғанлығы билдәле. Был специфик диалектизмдарҙың бер өлөшө уғыҙ телдәре һәм төрки телдәренең уғыҙ диалекттары, сыуаш теле, шулай уҡ боронғо төрки яҙма ҡомартҡылар теле лексикаһы менән ауаздаш. Ундай уртаҡлыҡ танып һөйләше лексикаһында боронғолоҡ һыҙаттарының һаҡланыуы менән аңлатыла[1].

## *Һөйләү теле өлгөләре*

## *Илекәй белән Ҡолой-Балтас*

Илекәйләр башҡортлар. Күсеп тә китәләрейе Түбән Сәүкейазға. Элгәре Илекәйне Искауыл тиб йөрттөләр. Балтасны Ҡолой тейләр эйе. Ҡолой белән Илекәй йер өсөн ҡиышҡан, суғышҡаннар. Икесе көрәшкән саҡта Илекәй айаҡ салған, хәрәмнәшеп йеңгән Ҡолыйны. Илекәй сүзе дөрөс булған, дөрөс былса да, хәрәмнәшкән. Үләр саҡта Илекәй әйткән: йерсуымны хәрәмнәшеб алдым. Мине икенсе йергә күмең, үзебезең йергә күммәгез, тигән. Арның арйағына күмгәннәр, бер мөгөшкә. Ҡәбер хәзер дә бар.

*1977 йылда Башҡорт АССР-ы Балтас районы*
*Иҫке Балтас ауылы Фәтҡуллин Фәтхинурҙан*
*(1900 йылғы) яҙып алынған.*

## *Тәржемәһе*

## *Илекей и Кулуй-Балтас*

Илекеевцы – башкиры. Они и уезжали раньше в Нижнее Саукиязово. Раньше Илекеево называли Старой деревней. Балтас называли Кулуево. Кулуй и Илекей из-за земли спо-

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа: Китап, 2006. 134–135-се биттәр.

рили, дрались. Когда вдвоем боролись, Илекей подставил ногу, нечестным путем победил (свалил) Кулуя. Правда была на стороне Илекея, но, тем не менее, Илекей боролся нечестно.

Перед смертью Илекей сказал: «Свои земли-воды получил в нечестной борьбе. Меня похороните отдельно, на нашу землю не хороните». Похоронили на той стороне реки Ар, в укромном месте. Могила и сейчас есть.

### *Имән ауылы тарихынан*

Без башҡыртлар, төптән башҡырт килгән. Типтәр булмады, бетнәй башҡырт. Безен ата-бабалар, зүрәтәйләр килгән Йүрүзәннән, Бәрҙәш, Шамырат яҡларынан. Шуның өсөн безең Имән башҡырт исемен күтәрә. Имәннең йерләре күп булған. Пслəк байары йере, Патлуп мишәрләре, Насарлар, Кизгән, Ишмәмәт, Нөркә йерләре безеке булған. Имән ҡарт, Әмер ҡарт, Усман ҡарт килеп утырған. Алар теләсә ҡайа утырып йөрөгән тип сүләй эйе әтәй. Ул менә, балам, элгәре башҡыртта йер күп булған. Изел, Ағизел, Ҡаризел буйлары башҡыртныҡы былған. Башҡырт элег-электән суғышып йөрөгән уҡ пелә. Безнен Йыҡ тауда акуплар бар. Бүрәнәләре булған таутүбән тәгәрәтеп йебәрергә. Йыҡ таудан уҡ пелә атышып йатҡаннар. Ҡансиәрдәге Торатауға тәкле атышҡаннар. Инәй сүләй иде, ҡартәтәй усал булған, ҡамсысы сөйдә генәйе, дип. Элгәре бит йөзгә йеткән кеше. Имәндә нәселләр: мотошлар, сапалар, памайлар, тартайлар, ҡәрмәннәр.

*1972 йылда Башҡорт АССР-ы Балтас районы Имән ауылы Садретдинов Сабирҙан (1897 йылғы) яҙып алынған.*

### *Тәржемәһе*

### *Деревня Имяново*

Мы башкиры. Коренные башкиры, тептярей не было, настоящие башкиры. Наши предки, деды, пришли с Юрюзани, со стороны Бердяша, Шамратова. Поэтому наша деревня называется башкирской. Земли песлякского боярина, подлубовских мишарей, земли Начарова, Кизгянова, Ишмаметова, Норкеева были исконно нашими. Первоначально обосновались

здесь старики Имян, Амир, Усман. Они кочевали там, где хотели. Так рассказывал отец.

Это вот, дитя мое, раньше у башкир земли было много. Долины Камы, Белой, Уфы принадлежали башкирам. Башкиры издавна воевали с луком, стрелами. На нашей горе Ик есть окопы. Бревна старые, специально тесались, чтобы с горы удобно было спускать. С Ик-горы стреляли стрелами. До Кансияровского Торатау перестреливались.

Мать рассказывала, дедушка (ее отец) был человеком с тяжелым характером, плеть его всегда висела на гвозде. Раньше ведь люди до ста лет доживали.

Родовые подразделения деревни Имян: мотош, сапа, памай, тартай (дергач), Кармановы.

## 5. Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше

*Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы*

Башҡортостан Республикаһының төньяҡ-көнбайыш һәм көнбайыш төбәгендәге Яңауыл, Краснокама, Ҡалтасы, Илеш, Баҡалы, Саҡмағош, Кушнаренко, Благовар, Бүздәк (урта һәм төньяҡ өлөшө), Шаран, Туймазы, Бәләбәй, Йәрмәкәй, Бишбүләк (Дим буйынан башҡа өлөшө) районрарындағы башҡорт ауылдары халҡының һөйләү теле түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше тип билдәләнә. Әлшәй һәм Миәкә районрарындағы ҫарайлымең һәм ғәйнә ырыуҙары башҡорттарының йәнле һөйләү теле шулай уҡ ошо һөйләшкә ҡарай.

Күрше Татарстан Республикаһының Әгерже, Аҙнаҡай, Аҡтаныш, Минзәлә, Мөслим, Сарман, Октябрь, Туҡай (элекке Саллы), Алабуға, Лениногорск (элекке Песмән), Әлмәт, Бөгөлмә, Баулы, Йотаҙы һ. б. районрарында йәшәгән башҡорттар һәм башҡорт-типтәрҙәр хаҡында тарихи һәм этнографик әҙәбиәттә бай материал тупланған булыуына ҡарамаҫтан, был төбәктә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙең һөйләү теле әлегә тиклем бик аҙ өйрәнелгән. С. Ф. Миржанова хәҙерге Татарстан Республикаһы башҡорттарының һәм башҡорт-типтәрҙәрҙең телен төньяҡ-көнбайыш диалекттың түбәнге ағиҙел-ыҡ һөй-

ләше ареалына инә тип күрһәтә[1]. (Был төбәк революцияға тиклем Өфө, Һамар, Вятка, Ҡаҙан губерналары составындағы Минзәлә, Бөгөлмә, Сарапул һәм Алабуға өйәҙҙәре булараҡ билдәле. 1920 йылда ул яңы ойошторолған Татарстан АССР-ы составына индерелә.) Һөйләш исеме был региондың ҙур йылғалары – Ағиҙел һәм Ыҡ гидронимдарынан сығып бирелгән.

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының – йәнәй, гәрәй, уран, йәлдәк, ҡаршын, ҡырғыҙ, ҡаңны, шәмшәҙе, юрмый, байлар, бүләр ырыу һәм ҡәбиләләренең йәнле һөйләү теле булып тора. Был һөйләш зонаһында шулай уҡ меңлеләрҙең – ҫарайлы-мең, ҡобау-мең, табындарҙың ирәкте ырыуҙарына, балыҡсылар, ҡатайҙар, әйлеләргә ҡараған ауылдар бар. Башҡорт ырыу һәм ҡәбилә атамалары был ҙур этнолингвистик территорияның топонимияһында сағылыш тапҡан. Мәҫәлән: Иҫке Ҡатай, Яңы Ҡатай, Юрмый (Баҡалы районы), Ҡыпсаҡ, Һеңрән, Иҫке Ҡырғыҙ, Яңы Ҡырғыҙ (Илеш), Тамъян, Иҫке Ҡалмаш, Яңы Ҡалмаш, Ҡалмашбаш (Саҡмағош), Батырша-Ҡобау, Кәпәй-Ҡобау, Ҡаҙаҡлар-Ҡобау, Теләкәй-Ҡобау (Бүздәк), Иҫке Тамъян, Яңы Тамъян (Шаран) ауылдары. Татарстан Республикаһындағы ауылдар: Меңнәр (Аҡтаныш районы), Тамъян, Юғары Табын, Түбәнге Табын (Мөслим), Салағуш (Әгерже), Төрөкмән, Ҡалмаш (Аҙнаҡай), Сураш (Сарман), Байлар (Әлмәт), Иҫке Байлар, Яңы Байлар, Юғары Байлар, Тауаҫты Байлар (Минзәлә), Ҡамбар (Туҡай), Шәм-Балыҡсы, Болон-Балыҡсы (Апас), Масҡара (Күкмара), Иҫке Өпәй (Сүпрәле). Татарстан топонимияһында башҡорт теленә мөнәсәбәтле ер-һыу атамалары үҙенсәлекле ҡатламды тәшкил итә.

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше төньяҡтан һәм төньяҡ-көнсығыштан – ғәйнә, танып, көнсығыштан – дим һөйләштәре, көнбайыштан татар теленең урта диалекты менән сиктәш урынлашҡан. Территориаль йәһәттән ул башҡорт һөйләштәре араһында айырыуса киң ареалда таралған һөйләштәр рәтендә тора. Түбәнге Ағиҙел-Ыҡ буйы башҡорттарының һөйләү теле үҙенең диалекталь билдәләре буйынса күршеләге дим һөйләшенә, шулай уҡ танып һәм ғәйнә һөйләштәренә яҡын булыуы менән характерлы.

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Китап, 2006. 137-се бит.

*Фонетик үҙенсәлектәре*

Алда, төньяҡ-көнбайыш диалект өсөн характерлы үҙенсәлектәрҙе билдәләп үткәндә, беҙ түбәнге ағиҙел-ыҡ, ҡариҙел һөйләштәрендә элекке Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәре (хәҙерге Татарстан Республикаһының көнсығыш райондары) башҡорттарының һөйләү теләндә башҡорт теленең көньяҡ диалекты һәм әҙәби тел менән уртаҡ позицияла ҙ өнөнөң ҡулланылыуын күрһәтеп үткәйнек. Бында төрки сығышлы һүҙҙәрҙә ҙ өнө һүҙҙең һәм ижектең аҙағында, һүҙ уртаһында (ике һуҙынҡы араһында) ҡулланыла: *беҙ, сеҙ; беҙнең, сеҙнең; беҙгә, сеҙгә; симеҙ, сигеҙ; өҙәңге, ҡоҙа, ҡоҙағый, ҡаҙаҡ, боҙай, Иҙел, Баҙы, Минҙәлә/Миндәлә* (йылға, ҡала исемдәре), *ҡыҙыл, быҙау*. Йәнә шуны иҫкә төшөрөп үтәйек: был төбәктәге башҡорт ауылдарында башҡорт балаларын татар әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә өйрәтеү өсөн, элегерәк, совет дәүерендә, татар теле уҡытыусылары ошондай тиҙ әйтем уйлап сығарғандар: *Беҙнең ҡыҙыл сыйыр ҡыҙыл яр астында ҡыҙыл быҙау быҙаулаған. Үҙе ҡыҙыл, үҙе үгеҙ, үҙе үҙебеҙнеке.* Тиҙ әйтемдәге татар теле өсөн «хата» тип иҫәпләнгән **ҡ, ғ**, айырыуса ҙ тартынҡыларының нәҡ башҡорт теленең специфик өндәре булыуы ап-асыҡ күренеп тора, әлбиттә. Һөйләштең тағы бер үҙенсәлеге: башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һәм кеше исемдәрендә **з** өнө регуляр рәүештә **ҙ** өнөнә (һүҙ башында ҡайһы бер осраҡтарҙа **д, дҙ** өнөнә) күсә: *ҙаман* – әҙәби телдә *заман, ҙакун – закон, ҙавут – завод, калхуҙ – колхоз, мәҙин – мәзин, ҙыйарат – зыярат, Ҙакир – Закир, Ҙәки – Зәки, Ҙәкиә – Зәкиә, Ҙәйнәп – Зәйнәп, Ҙифа – Зифа, Ҙаһира – Заһира, дҙимнәмир – землемер, Даһира < Ҙаһира < Заһира.*

Һөйләштә һүҙ һәм һирәкләп ижек башында әҙәби телдәге һәм көньяҡ диалекттағы **й** өнө урынында йомшаҡ **җ** өнө килә. Әммә параллель рәүештә **й** менән һөйләшеү ҙә күҙәтелә: *җаҡ* – әҙәби телдә *яҡ*: *Ил җагынан, Башкириядан, Әйбеләктән килгән типтәрләр; мөрҗә – мөрйә, җәннек – йәнлек, җәнәй/йәнәй – йәнәй, җир/йер – ер: Беҙнең йәнәй яҡларында, Кама аръягында да җирләр былды; Беҙнең анда бер йер, мында бер йер, йергә тамга салынган, көрәк белән саласың да китәсең.*

Төп башҡорт һүҙҙәрендә **с** өнө урынында йомшаҡ һаңғырау **щ** өнө килә, ҡайһы берҙә **тч** аффрикатаһы формаһында ла

ишетелә. Был өндәрҙе яҙыуҙа **ч** хәрефе менән билдәләйбеҙ: *чаҡрым* – әҙәби телдә *саҡрым, мич – мейес, ачыткы – асыт-ҡы, агач – агас, пчән – бесән, чирле – сирле, чирмеш – сирмеш* (этноним), *Мәчтей – Мәстей* (ойконим).

Шул уҡ ваҡытта **с** өнөнөң әҙәби телдәге позицияһы һаҡ-ланыу осраҡтары ла күҙәтелә: *Мал асраҙы беҙнең ауыл. Мал да иген. Бүтәнсә кәсебе булманды. Сит ауыл байы ҙа килеп сәскән* (Илеш районы, Тәжәй ауылы). Һөйләштә **ç** өнөн ҡул-ланыу осраҡтары ла бар: *бәç* «иней», *Çарапул – Сарапул* (ҡала); *Ике ат аçрайдыҡ – Ике ат аçрай инек.*

Һуҙынҡылар системаһында **а** өнөнөң ныҡ иренләшкән булыуы, ҡариҙел һәм дим һөйләштәрендәге һымаҡ, түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенең дә үҙенсәлеген күрһәтеүсе һыҙат булып тора. С. Ф. Миржанова был өндө үҙенең яңғырашы менән **а** өнө ишетелә биреп кенә ҡалған киң **о** өнө тип атай һәм уны яҙыуҙа **оа** формаһында билдәләйбеҙ: *оаҙаш* – әҙәби телдә *аҙаш* «тезка», *оабый – агай* «старший брат», *оахирәт – әхирәт* «подруга». Беренсе ябыҡ ижектә **а** өнө тағы ла нығыраҡ иренләшә, **ә** инде **у, ү** ябыҡ ирен фонемалары менән йәнәш килгәндә бөтөнләй урыҫ телендәге **о** өнө һымаҡ әйтелә: *ҡоу-шоу* – әҙәби телдә *ҡаушау* «растеряться», *йоуҙ – яуыз* «злой, вредный», *ҡоуҙан – ҡаулан* «прошлогодняя сухая трава»[1].

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшендә, әҙәби телдәге кеүек үк, һуҙынҡыларҙың ирен гармонияһы законы тулыһынса һаҡ-лана: *бороңго – боронго* «древний», *ҡортчолоҡ – умартасы-лыҡ, ҡортсолоҡ* «пчеловодство», *сөт өстөсө – һөт өçтө* «сливки».

Сингармонизм күренеше һөйләштә һүҙҙәрҙең ҡалын вари-анттарын ҡулланыу планында ҡыҙыҡлы ғына үҙгәрештәрҙе барлыҡҡа килтерә. Һөҙөмтәлә, әҙәби телдә һәм бүтән һөй-ләштәрҙә нәҙек яңғырашлы күп кенә һүҙҙәр ҡалын вариантта ҡулланыла: *игар* – әҙәби телдә *игәр* «охотничья собака», *паке – бәке* «ножик карманный», *хасис – хәсис* «презренный», *шишма/шишмә – шишмә* «родник», *была (белән) – менән* «с, со, вместе»: *Беҙнең халыҡны атлары-суҡалары была күтә-реп кесәләренә салганнар, тей.* Һүҙбәйләнештәрҙә һәм ҡушма һүҙҙәрҙә: *а̊ул была – ауыл менән* «всей деревней», *киласы*

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (фор-мирование и современное состояние). Уфа: Китап, 2006. 142-се бит.

*йылға – килдһе йылға* «на будущий год». Географик атамаларҙа: *Шулған/Шүлгән* (Тәтешле районындағы ауыл исеме), *Бурытау – Бүретау* «волчья гора» (Илеш районындағы тау атамаһы). Һүҙҙәрҙең һәм һүҙбәйләнештәрҙең быңдай ҡалын варианттары тик түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшендә генә күҙәтелә. Башҡорт теленең бүтән һөйләштәре һәм татар теленең һөйләштәре өсөн характерлы булмаған был үҙенсәлек, тип күрһәтә С. Ф. Миржанова, сит телдең, әлеге осраҡта фин-уғыр телдәренең йоғонтоһо менән аңлатыла. Һүҙҙәрҙең йомшаҡ әйтелешле диалекталь варианттары һирәк күҙәтелә.

Редукция, һуҙынҡы өндәрҙең төшөп ҡалыуы, ижектәрҙең ҡыҫҡарыу күренештәре киң таралған. Һуҙынҡыларҙың редукцияһы телмәр динамикаһында һүҙ башында (асыҡ һәм ябыҡ ижектәрҙә), шулай уҡ һүҙ уртаһында, һүҙҙең аҙағында ла булырға мөмкин. Мәҫәлән: *лыс* – әҙәби телдә *ылыҫ* «хвоя», *тчө* (*төчө* урынына) – *сөсө* «пресный», *тырпша – турпыша* «дерюга», *шәр – шәре* «наледь». Өндәрҙең ҡыҫҡарыуы: *белмәм < белмәйем: Бүләкнең ике баласы былған тейләрейе. Берсе Ҡайсәр, икенчесен белмәм* (Илеш районы, Тәжәй ауылы) – *Бүләктең ике балаһы булған, тиҙәр ине. Береһе Ҡайсар, икенсеһен белмәйем.*

С. Ф. Миржанова түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшендә боронғо төрки теле дәүеренән тороп ҡалған реликт характерындағы бик оригиналь диалекталь күренештең – *-мт, -лт, -нт, -рт* диссимилятив өн ҡушылмалары ҡулланылыуын асыҡлаған. Уның раҫлауынса, был өн ҡушылмалары, ғәҙәттә, оноҡшаш һүҙҙәрҙә *-лт, -рт* формаһында килә: *йалҡылтау* – әҙәби телдә *ялҡылдау* «блистать, пламенеть», *йемелтәү – емелдәү* «мерцать»; *йолдоҙ йемелтәй – йондоҙ емелдәй* «звезда мерцает»; *шатыртау – шатырлау* «трещать»; *дөбөртәү – дөбөрләү* «греметь, громыхать»; *күк дөбөртәй* «гром грохочет». Бүтән осраҡтарҙа *-мт, -нт, -рт* өн ҡушылмалары: *балтырған гөпшәҫе* «борщевик», *йарымтыҡ* «человекообразное, мифическое существо, стопы которого якобы направлены назад», *әртәнә – әрҙәнә,* татар телендә *әрдәнә* «поленница, штабель дров». Диссимилятив өн ҡушылмалары айырым осраҡтарҙа теге йәки был һүҙҙең төп формаһының вариантын барлыҡҡа килтерә: *балтаҡ/балдаҡ* «кольцо», *маңҡай/маңғай* «лоб», *фунтамин/фундамин* «фундамент».

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенең *-мт, -лт, -нт, -рт* диссимилятив өн ҡушылмалары, ти С. Ф. Миржанова, көнсығышта – ҡариҙел һәм көньяҡта урта һөйләштең төп диалекталь үҙенсәлеге булып иҫәпләнә, ул һөйләштәр тарихи үткән дәүерҙә түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше менән контактта булғандар һәм бер бөтөн этнолингвистик ареаль барлыҡҡа килтергәндәр[1]. Көньяҡ диалект составындағы урта һөйләшкә күрше булып урынлашҡан егән һөйләше лә шул уҡ ареалға ҡарай тип иҫәпләргә мөмкин.

*Морфологик үҙенсәлектәре*

Килеш ялғауҙарында **ң** өнө урынында **н** өнөн ҡулланыу күренеше бар. Мәҫәлән, эйәлек килештә, *-ның/-нең* формаһынан тыш, ялғауҙың, дим һөйләшендәге кеүек, *-нын/-нен* варианты ла урын ала: *улымның/улымнын, ҡаланың/ҡаланын*. Ғөмүмән, эйәлек килеш менән бергә төшөм һәм сығанаҡ килеш ялғауҙары ла дим һөйләше менән тап килә: *улымны, ҡаланы, улымнан, ҡалаҙан.*

Һөйләштә һүҙьяһалыш йәһәтенән изафеттың беренсе төрөнә ҡарағанда икенсе төрө киңерәк ҡулланыла һәм был йәһәттән ул ғәйнә һәм танып һөйләштәренә ҡарағанда әҙәби телгә яҡынырaҡ тора[2]. Мәҫәлән, эйәлек мөнәсәбәтендәге ике исемдән торған ҡушма һүҙҙәр: *ҡолаҡ алҡасы,* бүтән һөйләштәрҙә *ҡолағалҡа* «серьги», *бал ҡалағы* – әҙәби телдә *балғалаҡ* «чайная ложка, ложечка»; *нәсел тамғасы – нәҫел тамғаһы* «родовая тамға»; *эмей баласы – имсәк бала* «грудной ребенок»; *мүк йеләге – мүк еләге* «клюква»; *Йабалаҡ ауылы – Ябалаҡ ауылы, Ҡыҙлар тауы, Ҡалмырҙа ҡалҡыуы* (топонимдар).

Исем яһаусы *-лыҡ/-лек* аффиксы менән параллель рәүештә *-лауыҡ/-ләүек* аффиксы ҡулланыла: *ҡамырлауыҡ/ҡамырлыҡ, ҡамыр йемеше* – әҙәби телдә энәлек «боярышник», *йарлауыҡ – яр, ярлау* «обрыв».

*-лауыҡ/-ләүек* аффиксы, ти С. Ф. Миржанова, ҡариҙел, дим һ. б. һөйләштәрҙә билдәле, әммә ул көньяҡ диалекттың

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Китап, 2006. 155-се бит.

[2] Шунда уҡ. 142-се, 157-се биттәр.

урта һөйләшендә айырыуса киң ҡулланыла. Был иһә түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенә хас специфик диалекталь күренештәрҙең урта һөйләш һәм башҡорт теленең бүтән һөйләштәре менән уртаҡ булыуын дәлилләүсе тағы бер факт булып тора[1].

*Лексик үҙенсәлектәре*

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше, бер яҡтан, башҡорт теленең ғәйнә, ҡариҙел, дим һөйләштәре менән сиктәш булһа, икенсе яҡтан, көнбайышта татар теленең урта диалекты һөйләштәре менән тығыҙ контакт шарттарында формалашҡан. Өҫтәүенә, һөйләш территорияһы этник йәһәттән күп составлы: был зонаға, аҫаба башҡорт ерҙәренә, нигеҙҙә, Ҡаҙан ханлығы ҡолағандан һуң Волга буйынан, шулай уҡ Рәсәйҙең эске төбәктәренән ғәйәт күп бүтән халыҡ вәкилдәре килеп һыйынған. Һөҙөмтәлә, күпселек башҡорт ауылдары бында татар, мишәр йә иһә урыҫ, мари, сыуаш, удмурт ауылдары менән күрше булып, аралаш урынлашҡан. Ҡатнаш ауылдар ҙа барлыҡҡа килгән. Төбәктәге ҡайһы бер башҡорт ауылдарында хәҙер ҙә Башҡорт осо, Типтәр осо, Ҡаҙан осо һымаҡ микро-топонимдар осрай. Мәҫәлән, Бүздәк районындағы Кәпәй-Ҡобау, Илеш районындағы Иҫке Ҡырғыҙ ауылдарында нәҡ ошондай остар бар. Урындағы башҡорт һәм татар, мишәр ауылдарында айырым нәҫелдәрҙең (араларҙың) тамырҙары сирмештәргә (мариҙар), арҙарға (удмурттар) барып тоташыу күренештәрен дә осратырға мөмкин. Тимәк, түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше һәм, ғөмүмән, төньяҡ-көнбайыш диалект территорияһында этностар күптән инде үҙ-ара тығыҙ аралашып, бер-береһенә йоғонто яһап йәшәгәндәр, бында үҙенә генә хас ассимиляция процестары ла барған.

Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәре тураһында, алда әйтелгәнсә, оҙаҡ ваҡыт, айырыуса совет осоронда, ҡапма-ҡаршылыҡлы фекерҙәр йәшәп килде. Был мәсьәләлә күренекле диалектолог һәм лексикограф Т. Ғ. Байышев һәр ваҡыт ныҡлы позицияла торҙо: үҙенең хеҙмәттәрендә ул башҡорт теленең өсөнсө – көнбайыш (хәҙергесә –

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа: Китап, 2006. 157-се бит.

төньяҡ-көнбайыш) диалектын бай фактик материалдарға таянып өйрәнде[1], башҡорт теленең тулы диалектологик картаһын төҙөнө, ошо төбәк райондарына диалектологик экспедициялар ойоштороҙо, ғүмере буйы был төбәк башҡорттарын башҡорт әҙәби теленә ылыҡтырыу, мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыуҙы яҡлап сығыш яһаны, ошо мәсьәләне үҙәккә ҡуйып, илдең һәм республиканың власть органдарына хаттар яҙҙы. Ләкин, үкенескә ҡаршы, ул осорҙа ғалим фәнебеҙҙә яҡлаусыһыҙ тороп ҡалды. Шуға күрә Ғәзим Шафиҡовтың һүҙынан уны «башбирмәҫ ғилми Робинзон»[2] тип атауы бер ҙә осраҡлы түгел. Ә республикала төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына ҡарата совет осоронда татарлаштырыу сәйәсәте алып барылды. Татарстанда иһә әле хәҙер ҙә башҡорттар йәшәгән райондарҙа хатта бер генә башҡорт мәктәбе лә асылмаған. Өҫтәүенә, башҡорт диалектологияһы фәнендә өсөнсө диалект мәсьәләһенә асыҡлыҡ индереү оҙаҡҡа һуҙылды. Был йәһәттән, диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе өйрәнеүҙең ғилми нигеҙен эшләү планында һис һүҙһеҙ ҡиммәтле хеҙмәт булыуына ҡарамаҫтан, Ж. Ғ. Кейекбаевтың 1958 йылда Башҡорт дәүләт университетының Ғилми яҙмаларында баҫылып сыҡҡан «Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш» тигән ҙур күләмле мәҡәләһе өр-яңы ҡатмарлыҡтар килтереп тыуҙырҙы. Сөнки ғалим төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының йәнле һөйләү телен айырым диалект тип раҫлауға ҡаршы төштө, бары тик был диалект зонаһының бер өлөшөн генә көньяҡ диалект составында айырым бер һөйләш – башҡорт һәм татар телдәре араһында торған төньяҡ-көнбайыш һөйләше тип атаны. Шунан сығып, Ж. Ғ. Кейекбаев башҡорт теле диалекттарының ике генә – көньяҡ һәм көнсығыш диалекттарҙан торған классификацияһын тәҡдим итте. Был, әлбиттә, ерле һөйләштәрҙең үҙенсәлектәрен тулыраҡ өйрәнмәйенсә үтә ашығыс эшләнгән «һығымта» ине. Артабан башҡорт диалектологтарының шул ваҡыттағы яңы быуыны күп кенә

---

[1] *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. М.: Издательство МГУ, 1955; Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты. 1954 йылғы диалектологик экспедицияның отчеты. Өфө: Ғилем, 2008.

[2] *Шафиков Г. Г.* Непокорное одиночество научного Робинзона/Дыхание жгучее истории. Уфа: Китап, 1998. 100–144-се биттәр.

йылдар буйы ошо ҡараш сиктәренән ситкә сыға алмайынса ыҙаланды. Башҡорт дәүләт университетында хатта 1990 йылдар аҙағына тиклем «Башҡорт диалектологияһы» курсы буйынса әлеге шул ике генә диалект өйрәнелде, өсөнсө диалекттың бер өлөшөн, йәнәһе, аралыҡ һөйләш тигән булып билдәләй ине профессорыбыҙ. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһынан сыҡҡан интеллигенция вәкилдәренең ризаһыҙлығын ишетеүсе лә, ата-әсәләрҙең, уҡыусы балаларҙың: «Ни эшләп беҙҙе үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә уҡытмайһығыҙ?» – тигән һорауына яуап биреүсе лә булманы. Фәндә профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың абруйы ҙур ине, һәм ул хәҙер ҙә бик ҙур, ә был осраҡта арҙаҡлы ғалимдың диалектология фәненең артабанғы үҫеше, халҡыбыҙҙың туған телен һаҡлау мәсьәләһендә зыяны ла ҙур булды. Ни генә тиһәң дә, асы хәҡиҡәт был.

Профессор Ә. Ә. Юлдашев 1968 йылда Фрунзе (хәҙерге Бешкәк) ҡалаһында үткәрелгән төрки телдәре диалектологияһы мәсьәләләренә арналған ғилми конференцияла «Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты һәм уның әҙәби телгә мөнәсәбәте» тигән темаға доклад менән сығыш яһай. Бында ла өсөнсө диалект мәсьәләһе хәл ителеп бөтмәй: төньяҡ-көнбайыш диалект үҙенең төп айырғыс критерийҙары буйынса башҡорт әҙәби теленән һәм шундай уҡ кимәлдә көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарҙан алыҫ тора (уларға ҡаршы тора). Шуның өсөн төньяҡ-көнбайыш диалекттың башҡорт милли теленә ҡарау йәки ҡарамауы, уның хәҙерге торошо күҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә, үтә бәхәсле булып ҡала, ти ғалим[1]. Әммә, үтә бәхәсле тиһә лә, күренекле төркиәтсенең башҡорт теленең өсөнсө диалект мәсьәләһен ҙур ғилми конференцияның программаһына индереп, һис юғы уға иғтибар бүлеүе барыбер әһәмиәтле була. Нәҡ ошо осорҙа, XX быуаттың 60-сы йылдар аҙағы – 70-се йылдар башында, «урындағы һөйләштәрҙе тәрәнерәк өйрәнеү һәм яңы диалекталь материалдарҙы билдәләү эше дауам итә. Һөйләштәрҙе монографик планда фронталь өйрәнеү диалекттарҙы клас-

---

[1] *Юлдашев А. А.* Северо-западный диалект башкирского языка в его отношении к литературному языку / Вопросы диалектологии тюркских языков. Фрунзе, 1968. 78-се бит.

сификациялауға корректировкалар индерергә мөмкинлек бирә»[1]. Артабан филология фәндәре докторы Н. Х. Мәҡсүтова тарафынан тулыландырылған классификацияла, ниһайәт, Т. Ғ. Байышев көнбайыш диалект тип атаған өсөнсө диалект үҙ урынын алды. Элекке СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының (хәҙер Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең) Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында башҡорт диалектологияһы буйынса ғилми тикшеренеүҙәр нәҡ ошо өс диалект базаһында дауам итте. Төньяҡ-көнбайыш диалекты һәм уның составындағы һөйләштәрҙе монографик планда өйрәнеү бурысын күренекле диалектолог, филология фәндәре докторы С. Ф. Миржанова үҙ өҫтөнә алды. Был хеҙмәттең тәүге баҫмаһы 1990 йылда донъя күрҙе[2] һәм ул ғилми йәмәғәтселек тарафынан юғары баһаланды.

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенең лексик үҙенсәлектәрен тикшереп, С. Ф. Миржанова уның һүҙлек составында түбәндәге ҡатламдарҙы билдәләй: башҡорт һәм татар теленең үҙе өсөн генә характерлы һүҙҙәр; төньяҡ-көнбайыш төбәктең бөтөн һөйләштәре өсөн дә характерлы һүҙҙәр (был зонаның башҡорт һәм татар һөйләштәре өсөн дөйөм ареал лексика); һөйләштең көньяҡ һәм көнсығыш диалект һөйләштәре менән уртаҡ диалектизмдар (бында һәр ике диалектҡа хас үҙенсәлектәр менән характерланыусы дим һәм урта һөйләштәр бәйләнеш күпере ролен үтәй). Ә инде көнсығыш диалект тибындағы лексика нигеҙҙә төньяҡ районлар аша үтә. Мәҫәлән, көнсығыш диалектизмдарҙың күп өлөшө Яңауыл районында күҙәтелә. Һөйләштең төньяҡ зонаһы (Яңауыл, Татарстан Республикаһының Әгерже районлары) ғәйнә һөйләшенә сиктәш урынлашҡан һәм унда шуға күрә ғәйнә башҡорттарының һөйләү теле менән уртаҡ айырым лексик үҙенсәлектәрҙең булыуы тәбиғи хәл[3].

Һөйләштең үҙе өсөн характерлы лексикаға туҡталып үтәйек. С. Ф. Миржанова был төр диалект лексикаһын ике төркөмгә бүлеп күрһәтә. Беренсе төркөмдә ул һөйләштең үҙенә

---

[1] *Максютова Н. Х.* Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. Уфа: Китап, 1996.

[2] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа, 1990.

[3] *Миржанова С. Ф.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 180–183-сө биттәр.

генә билдәле һүҙҙәр һәм төп башҡорт һүҙҙәре нигеҙендә яһалған диалектизмдар тип атай. Бында, ғәҙәттә, ҡушма һүҙҙәр өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән: *айаҡ сауыты* – әҙәби телдә *аяҡ кейеме* «обувь», *аҡ чәчкә – меңьяпраҡ* «тысячелистник», *арыҡ/ариҡ таҡта – баҫма* «мосток, помост», *ат башы, ат башчысы – кейәү егете* «товарищ жениха», *жиләпәй/жилхый – елғыуар* «ветреный, вертопрах», *кипәнә* – дим һөйл. *күпкәк* «брюхан с толстым животом», әҙәби телдә *кәпәйеү* «вздуваться, раздуваться (о животе)», *көчәңгеч – тулғаҡ* «схватки родовые», *мүшке, мөшкәр – һуҡыр себен* «мошкара», *тешекәй – инә һарыҡ* «овца, овцематка», *сиртмә ҡойроҡ – сәпсек* «трясогузка», *чүмеч күте – сүмесбаш* «головастик», *шатала сөйәге – шайтан ашыҡ* «щиколотка», *ыҙбау иҙеү бауы – үңербау* «завязка ворота рубашки мужской», *әпипапа/сары папай – бәпембә* «одуванчик в цвету».

Икенсе төркөм – семантикаһы хәҙерге тел күҙлегенән аңлайышһыҙ лексик диалектизмдар: *ачырғалануу* – әҙәби телдә *өҙгөләнеү* «переживать, болеть, терзаться душой», *бисрәктәй – әзмәүерҙәй* «здоровенный, большой», *бистә* – дим һөйл. *биҫтә – киҫкә* «лежебока, тяжелый на подъем, ленивый», *жәмәлкә – йырғанаҡ* «овраг, вымытые водой ложбины» (Ҡалтасы районы), *күшәүер – ялҡау* «лентяй», *лыпыртыҡ – әрпеш* «грязнуля», *сегәрчин – ҡарағас* «лиственница», *әрәшә/әшәрә – ҡара ҡарлуғас* «стриж», *ауыл әжәрәсе* «деревенский стриж»[1].

Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше семантик диалектизмдарҙың, тармаҡ лексикаһында лексик-семантик һәм фонетик-грамматик диалектизмдарҙың ғәйәт киң таралыуы менән характерлы. Һөйләштә малсылыҡ, ботаника, туғанлыҡ терминдары, айырыуса хужалыҡ-көнкүреш лексикаһына ҡараған диалект һүҙҙәре актив ҡулланыла. Фразеологияла дөйөм халыҡ теленә ҡараған тәрән мәғәнәле һүҙбәйләнештәр менән бергә һөйләштең үҙенә генә хас фразеологик берәмектәр иғтибарҙы йәлеп итә: *арт(ы)* – әҙәби телдә *ата йорто, тыуған ауыл* «отцовский дом женщины» *(Артҡа китте, Йосопҡа); артына китеү* «поехать в отчий дом»; *дыңғыр ташы – ныҡ* «крепкий,

---

[1] *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (формирование и современное состояние). Уфа, 1990. 184–185-се биттәр.

крепыш»; *Жәмәғән йауы – Ҡырым сиреүе* «множество людей, народу», *тәрхәндә жөрөү* – ғәйнә һөйл. *дархан жатыу – иркенлектә, сәхрәлә йөрөү* «жить привольно, свободно», *ырҡым бирмәү – иғтибар итмәү* «не обращать внимания».

## Һөйләштең һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттың лексикаһы буйынса ҡайһы бер һығымталар

Алда күрһәтеп үтелгәнсә, түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләшенә хас диалекталь лексика бер нисә ҡатламдан тора. Был ҡатламдар үҙҙәре генә лә һөйләштең һәм, ғөмүмән, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәренең, йәнәһе, татар теленең башҡорт теленә бер нисә быуат буйы дауам иткән «көслө йоғонтоһо» (йәки хатта «көсәйә барыусы йоғонтоһо») арҡаһында «тулыһынса ассимиляцияға бирелеүе» тураһындағы үтә ашығыс әйтелгән тезистарының[1] ысынбарлыҡҡа бөтөнләй тура килмәүен дәлилләп тора. Диалектологик материал, ентекләберәк тикшерә башлаһаң, башҡорт һәм татар телдәренең һөйләштәре араһындағы үҙ-ара йоғонто яһау процесының бер яҡлы ғына, бер яҡтан көслөрәк йәки көсәйә барыуы шарттарында ғына барыуы мөмкин булмағанлығын раҫлап тора. Дөрөҫ, сәйәсәт, мәҙәниәт, уҡыу-уҡытыу өлкәһендә бер яҡтың оҙаҡ ваҡыттар буйы икенсе яҡ тарафынан баҫым яһау шарттарында йәшәргә мәжбүр ителеүе тураһында беҙ яҡшы беләбеҙ. Мәҫәлән, совет осоронда Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында башҡорт балаларын татар телендә уҡырға мәжбүр итеү – шундай сәйәсәттең бер өлөшө. Ләкин төньяҡ-көнбайыш башҡорттары шундай шарттарҙа ла үҙҙәренең йәнле һөйләү теле лексикаһының тамырҙан килгән нигеҙен, төп, мөһим үҙенсәлектәрен һаҡлап алып ҡалыу, уны артабан да үҫтереү, байытыу менән бергә, был йәһәттән татар теле һөйләштәре лексикаһының тарихи үҫешендә лә үҙенең тәрән эҙен ҡалдырған. Фонетика, морфология өлкәһендә лә был телдәрҙең үҙ-ара йоғонтоһо бер яҡлы ғына булмаған.

---

[1] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш. 42–43-сө биттәр; Юлдашев А. А. Башкирский язык /Языки народов СССР: Тюркские языки. М.: Наука, 1966. 191-се бит; Шул уҡ автор. Диалекты башкирского языка // Диалекты тюркских языков. М.: издательская фирма «Восточная литература», 2010.

Мәҫәлән, әгәр ҙә фонетика өлкәһендә башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалект һөйләштәре өсөн (ҡариҙел һөйләшенән башҡаларында) татар теле менән уртаҡ йомшаҡ **җ** һәм фрикатив **ч** өнө характерлы булһа, татар теленең урта диалектында **ҡ, ғ** увуляр тартынҡылары, ә минзәлә һөйләшендә иһә, шуға өҫтәп, алғы рәт **ҙ** өнө, әлбиттә, фәҡәт башҡорт теле өсөн характерлы күренештәр. Иренләшкән **а** өнөн ҡулланыу йәһәтенән дә татар теленең урта диалекты башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш һәм көньяҡ диалекттың айырым һөйләштәренә яҡын тора. Шуның өсөн дә билдәле татар дәүләт эшмәкәре һәм сәйәсмән Н. М. Мирихановтың алда телгә алып үткән һүҙҙәре бик тапҡыр һәм урынлы әйтелгән тип иҫәпләргә була. Иҫкә төшөрөп үтәйек: «Татарстандың көнсығыш райондарында, – тип яҙҙы ул, – тел йомшара һәм әҙмә-әҙле башҡорт телмәренә күсә бара» («В восточных районах Татарстана язык смягчается и постепенно переходит в башкирскую речь»). Ә бит һүҙ бында боронғо Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттары йәшәгән һәм, беренсе сиратта, минзәлә һөйләше таралған регион тураһында бара.

Билдәле башҡорт диалектологы, филология фәндәре докторы Н. Х. Мәҡсүтова үҙ ваҡытында «Татар теленең диалектологик һүҙлеге»ндәге (Ҡаҙан, 1969) минзәлә, бөрө, ғәйнә һөйләштәренә хас диалектизмдар тип теркәлгән лексик материалды барлап, бик фәһемле күҙәтеүҙәр яһағайны. Һүҙлектә ул Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш өлөшөндәге алда атап үтелгән татар һөйләштәре өсөн лексик диалектизмдар тип билдәләнгән 150-нән артыҡ һүҙҙең дөйөм башҡорт лексемалары булыуын күрһәтеп бирҙе. Бына шундай һүҙҙәргә миҫалдар: *абышҡа* «муж», «вдовец, разведенный», *азман (аҙман)* «беспутный», *аймаҡлап* «совместно», *аҡман-тоҡман* «поздний весенний буран с мокрым снегом», *ардаҡлы (арҙаҡлы)* «уважаемый, почитаемый, почетный», *ашҡаҡ* «голень», *бүлемтек* «раздел, разделенный», *ирмәк, мәрәкә* «забава», *йарҡа* «полено», *йурамал* «в шутку», *йыбытҡы* «нерасторопный», *ҡалтаҡай (ҡалтағай)* «лыжи», *ҡарый* «старец», *ҡашаға* «карниз печи», *кәнтәй* «самка», *менән, ман* «с», *тарма* «конопля», *терке* «сосна», *тоҡсай* «мешочек», *торомбаш* «головешка», *тупый* «женский головной убор», *тырҡыш* «грязнуля», *тыртайыу* «обидеться», *тәк-*

*ләү, тәкләп төрөү* «порядком положить вещи», *төндөк* «отдушина», *уғата* «слишком, чересчур», *ыҡтымат* «аккуратный» һ. б.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының (шул иҫәптән Татарстан Республикаһы территорияһында ҡалған башҡорттарҙың) һөйләү телендә татар теле менән үҙ-ара әүҙем йоғонто яһау шарттарында иң элек фонетика өлкәһендә үҙгәрештәр булып үткән. Бер үк ваҡытта, әлбиттә, был процеста фин-уғыр (мари, удмурт), күпмелер дәрәжәлә сыуаш телдәре лә ҡатнашҡан. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, «диалектологик материалдарҙан күренеүенсә, был территория халҡының телен, берҙәм лингвистик массив булараҡ, башҡорт теленең көнбайыш диалекты»[1] тип иҫәпләй алабыҙ. Был региондағы татарҙарҙың һөйләү теле, боронғо замандарҙан ошонда йәшәгән төп халыҡ араһына һәм аҫаба башҡорт ерҙәренә күсеп килгән халыҡ булараҡ, башҡорт теле ерлегендә формалашыуын, этник һәм тел процестарында был факторҙың да роле ҙур булғанлығын иҫәпкә алмайынса мөмкин түгел. Шуның өсөн дә, Н. Х. Мәҡсүтова билдәләүенсә, татар теленең минзәлә, бөрө һ. б. һөйләштәрендә башҡорт теленең диалекттар системаһына ҡараған характерлы күренештәр бар, уларҙың нигеҙендә башҡорт теле өсөн характерлы диалектизмдар ята[2]. Татар диалектологы Ф. С. Баязитованың бер хеҙмәтендә, минзәлә һөйләшендә татар теле лексикаһының боронғо ҡатламы тип, ошондай башҡорт һүҙҙәре килтерелә[3]: *абыз, абыҙ; ардаҡлау* (башҡорт әҙәби телендә *арҙаҡлау*), *асаба* (башҡорт әҙәби телендә *аҫаба*), *божал, булйал* (ҡариҙел һөйләшендә *булйал – ваҡыт* «срок»: *Булйал ҡуйып, кейәү алып та ҡайтты), эчегү (эсегеү), ҡонажын (ҡонажын), ҡуд (ҡуҙ), ҡаданас (ҡаҙанас), тау итү (тау итеү), тоҡсай (тоҡсай), сырға (һырға), ширт (шырт), чәрик башмаҡ (сарыҡ башмаҡ)*. Был һүҙҙәр, «айырым фонетик үҙгәлектәр менән, функциональ һәм семантик планда башҡорт теле лексемалары

---

[1] *Мәҡсүтова Н. Х.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 12-се бит.

[2] Шунда уҡ.

[3] *Баязитова Ф. С.* Древний пласт лексики мензелинского говора / Исследования по исторической диалектологии татарского языка. – Казань, 1982. 3–8-се биттәр (Цитата Н. Х. Мәҡсүтованың алда күрһәтелгән хеҙмәте буйынса).

менән бер бөтөнлөктө тәшкил итә»[1]. Шуның өсөн дә Н. Х. Мәҡсүтованың татар диалекттарында уларҙың боронғо торошо өсөн характерлы типик билдәләрҙе асыҡлау өсөн материалдарҙы Себер, Кавказ, Урта Азия төрки телдәре лексикаһы кимәлендә сағыштырып та, эргәләге башҡорт теле материалдарын урап үтеү, белмәмешкә һалышыу күренештәре менән килешмәүе хаҡында белдереүе бик урынлы[2].

Профессор Ә. Ә. Юлдашев үҙенең «Башҡорт теле» тигән хеҙмәтендә башҡорт һәм татар телдәре лексикаһының ғәжәп ҡыҙыҡлы (асылда феноменаль) бер үҙенсәлегенә иғтибар иткән. «Хәҙерге башҡорт теле үҙенең лексикаһы буйынса, – тип яҙҙы ул, – татар теленән дә, бүтән төрки телдәренән дә ныҡ айырылып тора. Йәнә шундай үҙенсәлек әһәмиәтле: татар теле лексикаһында булған һүҙҙәрҙең барыһын да башҡорт телендә табып була, әммә башҡорт телендә иһә татар телендә булмаған һүҙҙәр бихисап» («Знаменательна еще одна особенность: в то время как в татарской лексике трудно найти слова, которого не было бы в башкирской, в башкирском языке масса слов, которых нет в татарском»)[3]. Был тезисты дауам итеп, ул лексиканың төрлө тармаҡтарынан, төп төрки тамырлы һүҙҙәрҙән төп төрки һүҙ яһаусы ялғауҙар ярҙамында яһалған лексемаларға, башҡорт телендә үҙенсәлекле семантик үсеш алған төп төрки һүҙҙәренә, шулай уҡ татар телендә лә, ҡасандыр башҡорт теле менән аралашҡан бүтән төрки телдәрендә лә осрамаған монголизмдарға миҫалдар килтерә. Башҡорт лексикаһы, уның нигеҙендә төп төрки һүҙҙәре ятһа ла, бүтән төрки телдәре лексикаһынан тағы ла нығыраҡ айырымлана, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала ғалим һәм, тарихи үсеш дәүерендә башҡорт һәм татар телдәре араһындағы үҙ-ара йоғонто мәсьәләһенә тағы бер тапҡыр туҡталып, йәнә ошондай һығымтаға килә: «Башҡорт лексикаһы татар лексикаһының барлыҡ тип әйтерлек үҙенсәлекле һыҙаттарын да үҙенә һеңдергән, әммә шул уҡ ваҡытта үҙенең спецификаһын һаҡлап алып ҡалған, ә был иһә татар телендә урын алмаған» (*«Башкирская лексика впитала почти все отличительные черты татарской*

---

[1] *Мәҡсүтова Н. Х.* Күрһәтелгән хеҙмәт. 16–17-се биттәр.

[2] *Мәҡсүтова Н. Х.* Шул уҡ хеҙмәт. 16-сы бит.

[3] *Юлдашев А. А.* Башкирский язык / Языки народов СССР: Тюркские языки. М.: Наука, 1966. 190-сы бит.

*лексики, но в то же время сохранила свою специфику, не представленную в татарском языке»*)[1]. Ысын мәғәнәһендә феноменаль күренеш тә баһа был! Ләкин, шул уҡ ваҡытта, Ә. Ә. Юлдашевтың был мөһим күренеште башҡорт һәм татар телдәренең бер нисә быуат буйы барған аралашыу процесында, йәнәһе, «оҙаҡ ваҡыт татар теленең башҡорт теленә көсәйә барған йоғонтоһона бәйле» тип аңлатыуы менән бер нисек тә килешеп булмай, сөнки был урында: «Әгәр ҙә ул тиклем бер яҡлы ғына (?) һәм көсәйә барған йоғонто булған тиһәк, башҡорт теле шул уҡ лексика өлкәһендә нисек итеп, ассимиляцияға бирелмәү генә түгел, ә, киреһенсә, үҙенең милли спецификаһын тулыһынса һаҡлап алып ҡалған, өҫтәүенә, уны татар теленән ингән һүҙҙәр иҫәбенә лә байыта барған, үҫтереүгә өлгәшкән һуң?» – тигән һорау тыуа. Бында мин иң элек башҡорт теленең, әйтәйек, шул уҡ лексика өлкәһендә ҡатмарлы тарихи дәүерҙәр аша ни тиклем тотороҡло, үҙенә генә хас үҫеш юлы үткәнлеген, үҙ-үҙен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн ғәжәп итерлек эске көсө, рухи ҡеүәте булғанлығын күрәм. Ә бит башҡорттарҙың Рәсәй империяһында ҡатлы-ҡатлы милли һәм социаль иҙеү шарттарында йәшәүҙәренә һәм, күренекле урыҫ тарихсыһы академик М. К. Любавский һүҙҙәре менән әйткәндә, «тарихтың бер ниндәй ауыр һынауҙарына ҡарамайынса, үҙенең этник йөҙөн, милли мираҫын һаҡлай алған һәм хатта килгән ят ҡәүемдәрҙең ғәйәт ҙур өлөшөн үҙенә һеңдергән»[2] халыҡ булыуы фәндә яҡшы билдәле. Ә инде тағы ла боронғораҡ дәүерҙәр буйынса билдәле белгес, археолог С. А. Плетнева башҡорттарҙың ата-бабаларының дөйөм үҫеш кимәле буйынса күрше дәүләттәр мәҙәниәттәренә яҡын торған юғары үҫешкән мәҙәниәте тураһында яҙа. Кавказ алды аландары һәм боронғо башҡорттар тураһында ғалимәнең ошондай һүҙҙәре бар: «Уларҙың үҫеше аныҡ йүнәлеш буйынса барған, һәм бер ниндәй катаклизмдар ҙа был ныҡлап формалашҡан дала цивилизацияларын юҡҡа сығара алмаған» (*«Как и аланы, они имели глубокие корни в древности и традиции их сохранились до наших дней… Развитие*

---

[1] *Юлдашев А. А.* Башкирский язык / Языки народов СССР: Тюркские языки. М.: Наука, 1966. 191-се бит.

[2] *Тольц Б. С.* Материалы М. К. Любавского по истории Башкирии // Из истории феодализма и капитализма в Башкирии. Уфа, 1971. 227-се бит.

*их текло по определенному руслу, и никакие катаклизмы не могли уничтожить эти вполне сложившиеся степные цивилизации. Политическое подчинение народа какому бы то ни было государству не могло существенно изменить многовековые культурные традиции»*)[1].

Телде һәм диалекттарҙы, һөйләштәрҙе тикшергәндә тарих фәненә мөрәжәғәт итеүҙең әһәмиәте, зарурлығы тураһында айырымлап әйтеп тороу мотлаҡ түгел, сөнки тел яҙмышы – шул уҡ халыҡ яҙмышы ул. Халыҡ тарихы тел тарихы, рухиәт, мәҙәниәт тарихы менән бергә үрелеп бара, үҫә, үҙгәрә, бер үк яҙмыш юлдары буйлап хәрәкәт итә.

Әле күҙәтеп үткән фекерҙәр һәм, әйтергә мөмкин, концепциялар дөйөм халыҡ теленә һәм уның айырылғыһыҙ өлөшө булған диалекттарға, һөйләштәргә ҡарата ла тап килеп торғандай. Алда ҡарап үтелгән түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше һәм, ғөмүмән, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты тураһында ла шул уҡ һүҙҙе әйтергә мөмкин. Йәғни, алда билдәләп үтелгәнсә, беренсенән, ул региондағы башҡорт һөйләштәренең төп лексик фондын бүтән башҡорт һөйләштәре өсөн дә характерлы бай һәм үҙенсәлекле һүҙҙәр ҡатламы тәшкил итә. Был күренеш төньяҡ-көнбайыш диалекттың башҡорт теле диалекттар системаһының айырылғыһыҙ бер өлөшө булыуын дәлилләп тора. Икенсенән, ундағы татар һөйләштәре өсөн диалекталь лексика тип иҫәпләнгән һүҙҙәр ҡатламының бер өлөшө дөйөм башҡорт лексемалары булғанлығы асыҡланды. Шуларҙан сығып, төньяҡ-көнбайыш диалектты башҡорт халыҡ һөйләү теле системаһында боронғо замандарҙан бирле үҙенең милли йөҙөн, төп лексик фондын һаҡлап, татар, мишәр, мари, удмурт телдәре менән аралашыу шарттарында төрлө үҙгәрештәр аша үткән үҙенсәлекле диалект берәмеге итеп иҫәпләү ысынбарлыҡҡа тура килә тип иҫәпләргә кәрәк.

Дөйөм алғанда, башҡорттар Көньяҡ Урал регионының аборигендары, был территориялағы мең йыллыҡтар төпкөлөндәге боронғо цивилизацияларҙың вариҫтары. Уларҙың рухи һәм матди мәҙәниәте, шулай уҡ, әлбиттә, теле боронғо дәүерҙән бирле тотороҡло үҫеш юлын үткән, артабан татар

---

[1] *Плетнева С. А.* Раздел «Заключение» // Степи Евразии в эпоху средневековья. Отв. редактор тома С. А. Плетнева. М.: Наука, 1981. 238–239-сы биттәр.

теленеӊ урта диалекты урындағы башҡорт һәм Волга буйы булғар теле ерлегендә формалашҡан.

Башҡорт теленеӊ диалекттарын һәм һөйләштәрен (фонетик, морфологик, лексик һәм стилистик планда) тағы ла тәрәнерәк өйрәнеү диалектология фәненеӊ мөһим бурысы булып ҡала әле. Был проблема менән шөғөлләнеүселәр алдында башҡорт теленеӊ боронғо торошон, шул иҫәптән уныӊ фонетикаһы менән бәйле үҙенә генә хас күренештәрҙе асыҡлау, татар һәм Волга буйы фин-уғыр телдәренән тыш, әйтәйек, болғар теле менән аралашыу, көнсығыш төрки телдәренә яҡын билдәләрҙе барлау һәм ентекле анализлау өсөн киӊ мөмкинлектәр асыласаҡ.

*Һөйләү теле өлгөләре*

*Аш-сыу әзерләү*

Элек табикмәк, ҡоймаҡ, төрмә саладырыйыҡ орлоҡтан, ҡауыннан, дары йармасы белән эшләйҙерейек, ҡамыр ашларыннан төрмә салаҙырыйыҡ эремчек белән, боламыҡ, бутҡа, ҡыстыбый, аӊа нәмәҙәй булса ҙа. Элек гел дары, борай ботҡасы, солоно ҡайнатып төйөп, йарма ташында йарабыҙ, бик тәмне була анын бутҡасы. Боҙай ҙаты ҙа йуғыйы, шул әле генә ҡалҡты. Борай ике тошло йәлпәгерәк, арпа күбег инде, тач арпа инде. Уӊышы әҙ тейләр, кибәге күп, аӊа бит беркеп тора, туҡмачлары шартлап тора, боҙайдан да тәмне. Чәчкән йерләр бардыр, сыуыртып чығаралар кибәген, ҡабағ эченән, кибәге ныҡ ҡалын түгел, тошо ҡаты, тере, ҡаты кибәкле. Ҡарабоҙай барыйы элек, аны бик чәчәләрейе, бу тирәҙә йуҡ бит.

*1980 йылда Башҡорт АССР-ы Краснокама районы*
*Иҫке Аткул ауылы Муллаярова Сәлиха Әхмәттаһир ҡыҙынан*
*(1910 йылғы) яҙып алынған.*

*Тәржемәһе*

*Приготовление пищи*

Раньше пекли блины, оладьи, пирожки с начинкой из конопляных семян, тыквы и с пшеном, творогом. Варили кашу из муки, полбы или из другой крупы. Пекли кыстыбый.

Каша из овсяной крупы также бывает вкусной. Овес размельчали ручной мельницей. Пшеницы тогда не было. Ее начали сеять недавно. Полба, она плоская, зерна мало, а мякины много, поэтому ее не сеют, говорят, неурожайная. На вкус она гораздо вкуснее, чем пшеница. Возможно, в некоторых местах и сейчас сеют. Раньше сеяли и гречиху, сейчас в наших краях ее не стало.

### *Аш-сыу*

Солоно пешерәбез, аны киптерәбез, аны сыуыртабыз, тартабыз тегермәндә, аңа арыш та ҡушабыҙ. Май, тоз салабыз да болғатабыз да ашайбыҙ, аны талҡан дибез. Боламыҡ та болғаттыҡ, ҡайнар сыуға шулай май салып он болғатып ашай торғаныйыҡ. Ҡәдерле булмады кешенең тамағы элек. Итне без ашҡа ғына саладырыйыҡ, пилмәнне урыс ашы дидерейек, әле әллә нәмәләр пешеребетәләр. Сүс орлоғон төйәдерейек. Дары йармасы белән орлоҡ төрмәсе пешерәдерейек, дарыны төйәдерейек, аның ботҡасы кезгелдәп кенә торадырыйы. Ҡыстыбайын пешерәдерейек, аны оннайдырыйыҡ. Элек соло йыуачасы пешерделәр. Эпей кебек соло белән изәләрейе, арыш белә басаларыйы. Шул йыуача.

*1980 йылда Башҡорт АССР-ы Ҡалтасы районы Ҡалмыябаш ауыл Советы Солтанай ауылы Ғәбдерәева Мәшүдә Солтангәрәй ҡыҙынан (1904 йылғы) яҙып алынған.*

### *Тәржемәһе*

### *Пища*

Овес варили, его сушили, очищали от шелухи, размалывали на мельнице, при этом добавляли и рожь. В полученную массу дожили масло, солили, перемешивали и ели. Это называется талкан. И мучную кашу варили: клали масло и муку в кипяченую воду, варили, помешивая, и ели. Раньше не питались изысканно. Мясо мы варили только для супа. Пельмени считали русской едой. Сейчас разные блюда готовят. Раньше мололи конопляные семена. Добавляя пшенную крупу, пекли конопляные пирожки. Пшенную крупу растирали и варили

кашу, которая по консистенции напоминала холодец, была очень вкусной. Кыстыбый пекли. Для него из крупы делали муку. Сейчас не готовим. Раньше из овсяной муки пекли хлеб: на закваску брали овсяную муку, а тесто замешивали ржаной мукой. Такой хлеб называли йыуача.

## ДИАЛЕКТТАРҘЫ ҺӘМ ҺӨЙЛӘШТӘРҘЕ ӨЙРӘНЕҮ ӨСӨН МАТЕРИАЛДАР ЙЫЙЫУ МЕТОДТАРЫ ҺӘМ АЛЫМДАРЫ

Диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе өйрәнеү өсөн иң элек диалектологик материалды йыйыу эшен юлға һалыу, уның ғилми нигеҙле методикаһын булдырыу мөһим роль уйнай. Башҡорт диалектологияһы фәнендә был йәһәттән ғәйәт бай тәжрибә тупланған. Диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе өйрәнеү методикаһы мәсьәләһен беҙҙә тәү башлап атаҡлы төркиәтсе ғалим профессор Н. К. Дмитриев күтәреп сыға. 1928 йылда «Белем» журналында донъя күргән «Башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһенә»[1] тигән мәҡәләһендә ғалим диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе һәр береһен махсус өйрәнеү һәм артабан уларҙы үҙ-ара сағыштырыу бурысын ҡуя, шул нигеҙҙә башҡорт теленең диалектологик картаһын төҙөү мөмкин буласаҡ, ти ул. Картала диалекттарҙың сиктәре административ бүленеш сиктәре менән тап килеп тормаҫҡа ла мөмкин, тип билдәләй. Теге йәки был диалектҡа характеристика бирер өсөн, беҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға ярашлы, һүҙҙәрҙе һәм фразаларҙы яҙып алырға, уларҙың урындағы әйтелешен (мәҫәлән, һеҙ тип әйтеләме, *һеҫ* типме) асыҡларға кәрәк. Һүҙҙәрҙе, урындағы әйтелешен билдәләр өсөн, ғәҙәттәге әңгәмә барышында яҙып алырға тәҡдим ителә. Төрлө быуын вәкилдәре араһындағы телмәр үҙенсәлеген күҙәтеү өсөн бер үк ауылда йәшәгән оло кешеләрҙең, балаларҙың һәм урта йәштәгеләрҙең телен айырым-айырым өйрәнеү ҙә ҡыҙыҡлы һығымталар яһарға мөмкинлек бирәсәк. Шул уҡ ваҡытта урта йәштәге кешеләрҙең

---

[1] *Дмитриев Н. К.* Башҡорт телен өйрәнеү мәсьәләһенә // Белем. 1928, № 7 – 8. 86–90-сы биттәр, № 9. 64–67-се биттәр. Шул уҡ мәҡәлә урыҫ телендә: К вопросу об изучении башкирского языка // Вопросы башкирской филологии. М.: издательство АН СССР, 1959. 17–23-сө биттәр.

телендә диалект үҙенсәлектәре теүәл генә сағылмаҫҡа ла мөмкин, сөнки, әгәр ҙә күпмелер ваҡыт ситтә йөрөп ҡайтҡан булһалар, уларҙың телмәре барыбер аҙмы-күпме үҙгәрә, сит йоғонтоға бирелә.

Н. К. Дмитриев диалект лексикаһын махсус анкеталар таратыу методы менән йыйыу мәсьәләһенә лә туҡталып үтә. Ләкин был ысул бик үк ышаныслы түгел, иң яҡшыһы – материалды урынға үҙең сығып йыйыу тип күрһәтә. Һүҙҙәрҙе яҙып алғанда бик иғтибарлы булырға, боҙоп, үҙ белдегең менән үҙгәртеп яҙыуға юл ҡуймаҫҡа өндәй. «Беҙ һәр бер өндө үҙенә генә хас билдә менән яҙырға тейешбеҙ», – ти. Атаҡлы төркиәтсенең ошондай һүҙҙәре лә фәһемле: «Яҙған ваҡытта, һүҙҙе уның хәҙерге телдәге яҙылышынан түгел, ә нисек әйтелә, шунан сығып эш итергә кәрәк. Яҙма тел (орфография) диалект үҙенсәлектәрен юҡҡа сығара, ә беҙгә һүҙҙең тере әйтелеше кәрәк». «Нисек ишетәһең, шулай яҙ» тигән принципҡа ҡоролған былдай яҙылышты (фонетик принцип) транскрипция тип атайҙар. Транскрипцияның бер нисә системаһы билдәле. Улар араһында Парижда эшләнгән халыҡ-ара транскрипция бар. Әлбиттә, һәр кем үҙенең транскрипцияһы буйынса ла эшләргә мөмкин, әммә ул транскрипция системалы булырға тейеш.

Мәшһүр төркиәтсенең был күрһәтмәләре башҡорт диалектологияһының бөтөн артабанғы үҫеш юлында бик ҙур роль уйнаны һәм ул идеялар беҙҙең хәҙерге фәнебеҙ өсөн дә һис һүҙһеҙ әһәмиәтле. Башҡорт телен өйрәнеү, уның диалекттары һәм һөйләштәре буйынса материалдар йыйыу эшендә тәүге осорҙа, әлбиттә, профессор Н. К. Дмитриевтың алда ентекле ҡарап үтелгән мәҡәләһе төп ҡулланма булып хеҙмәт итә. Был темаға яҙылған тәүге диссертацияларҙа уҡ диалекттар һәм һөйләштәр әҙәби телдән һәм бер-береһенән фонетик, грамматик һәм лексик критерийҙарҙан сығып айырымлана. Артабан профессор Ж. Ғ. Кейекбаев үҙенең 1958 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт теле һәм уның диалекттары» тигән мәҡәләһендә был критерийҙарҙы ҡулланыу принциптарын тағы ла камиллаштыра. Мәҫәлән, шул принциптар буйынса беҙ, алда күреп үтеүебеҙсә, диалекттарҙы бер-береһенән нигеҙҙә фонетик һәм морфологик билдәләр буйынса айырымлап йөрөтәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта, әлбиттә, ниндәйҙер кимәлдә лексик билдәләрҙе лә иҫәпкә алабыҙ. Ә инде һөйләштәрҙең бер-береһенән айырым-

ланыуы өсөн фонетик һәм лексик үҙенсәлектәр төп критерий булып иҫәпләнә. Һөйләшсәләр ҙә шул уҡ үҙенсәлектәргә ҡарап айырымлана. Әммә был осраҡта ла өҫтәлмә рәүештә урындағы йәнле һөйләү телен характерлай торған лексик ҡатламды билдәләүгә лә иғтибар бирелә.

Уҙған быуаттың 50-се йылдар аҙағынан башлап башҡорт теле һөйләштәренән материалдар йыйыу махсус һораулыҡтар, анкеталар, программалар буйынса алып барыла. Мәҫәлән, башҡорт һөйләштәренең һүҙлеген әҙерләү эштәрен планлаштырыу айҡанлы СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында «Башҡорт теленең һүҙлек составын йыйыу өсөн һораулыҡ» нәшер ителә. Артабан, белеүебеҙсә, 1967, 1971, 1987 йылдарҙа башҡорт һөйләштәренең өс томдан торған һүҙлеге эшләнеп бөтөп, донъяға сығарыла. (Ул томдарҙа көнсығыш, көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттарҙың һүҙлек составы айырым-айырым яҡтыртыла.) Артабан, ошо өс том бергә тупланып, «Башҡорт теленең диалектологик һүҙлеге» эшләнә. Фәнебеҙ үҫешендә бер ваҡиға булырҙай был лексикографик хеҙмәт 2002 йылда Башҡортостандың «Китап» нәшриәтендә донъя күрҙе.

Һөйләштәрҙе һәм диалекттарҙы, лексика менән бергә, фонетика, морфологияны ла күҙ уңында тотоп, тулыраҡ планда өйрәнеүгә арналған ҡулланмалар араһында шул уҡ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары тарафынан төҙөлгән «Башҡорт теле һөйләштәренән материалдар йыйыу өсөн» тигән һораулыҡ (1961) һәм «Башҡорт теленең диалектологик атласы өсөн мәғлүмәт йыйыу программаһы» (1973) ғилми-методик йәһәттән хәҙерге ваҡытта ла ҡиммәтен юғалтмаған. Башҡорт теленең диалекттарына һәм һөйләштәренә арналған тикшеренеүҙәр, диалектологик атласты төҙөү һымаҡ киң ҡоласлы эштәр артабан нәҡ ошо программаларға таянып алып барыла. Һөҙөмтәлә XXI быуатҡа башҡорт диалектологияһы фәне үҙ алдында торған күп кенә ҡатмарлы проблемаларҙы хәл итеп, күп йәһәттән өлгөрөп еткән фән тармағы булараҡ аяҡ баҫты. Шул проблемаларҙың иң мөһиме – беҙ хәҙер, ниһайәт, халҡыбыҙҙың йәнле һөйләү телен бөтөн тулылығында, бер генә диалектты һәм бер генә һөйләште лә һанға һуҡмауға юл ҡуймайынса, өйрәнә башланыҡ. Өсөнсө, төньяҡ-көнбайыш диалект мәсьәләһен хәл итеү менән бергә, башҡорт диалект-

тарының классификацияһында быға тиклем һәр ваҡыт ситтә ҡалдырылып килгән асыуҙы, егән, өршәк, урта урал һөйләштәре үҙенең тейешле урынын алды.

Алда күрһәтеп үтелгән программаларҙан тыш, һуңғы осорҙа юғары уҡыу йорто студенттарына диалектологик практика осоронда материалдар йыйыу өсөн ҡулланмалар ҙа баҫылып сыҡты. Шулар араһында Р. З. Шәкүров һәм Н. Х. Ишбулатов төҙөгән «Башҡорт диалектологияһы: контроль эш яҙыу өсөн күрһәтмәләр»ҙе (Өфө, 2003), А. Ә. Камалов менән М. И. Дилмөхәмәтов әҙерләгән «Башҡорт теленән диалект материалдары йыйыу өсөн методик тәҡдимдәр»ҙе («Методические рекомендации по сбору диалектного материала башкирского языка», Уфа, 2003) һәм Л. М. Хөсәйенованың «Башҡорт диалектологияһы: Диалектологик материалдар йыйыу буйынса программа»ны (2-се баҫма. Стәрлетамаҡ, 2009) күрһәтеп үтергә мөмкин. Был ҡулланмалар, әлбиттә, алда күрһәтеп үтелгән академик программаларға нигеҙләнеп төҙөлгән һәм, уларҙың төп положениеларын билдәләп, Л. М. Хөсәйенова, әйтәйек, түбәндәгесә аңлатма биргән:

«Тәҡдим ителгән программа дүрт өлөштән тороп, тел ғилеменең төп бүлектәрен – фонетиканы, морфологияны, лексиканы һәм, тупланған материалдың таралған территорияһын асыҡ күрһәтеү маҡсатында, микротопонимияны үҙ эсенә ала. Синтаксис буйынса мәғлүмәт микротопонимия бүлегенең һорауҙарына яуап биргәндә (ер-һыу исемдәренә бәйле легендаларҙы, тайралар, шәжәрәләр, йырҙарҙы яҙып алыу) сағылыш табасаҡ, сөнки легендаларҙы диалект (һөйләш) телендә үҙгәртмәй яҙып алыу мотлаҡ».

Күренеүенсә, диалектологик материалдар йыйыуҙың төп маҡсаты бында асыҡ билдәләнгән. Әммә, шул уҡ ваҡытта, «Микротопонимика» тигән бүлекте һәм программала шул темаға арналған бүлекте киңерәк планда – «Урындағы тарих һәм топонимия» тип алғанда дөрөҫөрәк булыр ине.

Диалектологик практикала ҡатнашасаҡ студенттар «Башҡорт диалектологияһы» предметын һәм тәҡдим ителгән программаны ентекләп өйрәнергә, ундағы методик күрһәтмәләрҙе яҡшылап үҙләштерергә тейештәр, сөнки, мәҫәлән, «Мәғлүмәт туплаусыға ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр», «Диалекталь берәмектәрҙе транскрипциялау үҙенсәлектәре» һымаҡ методик характерҙағы бүлектәр менән ныҡлап танышмайынса,

программала билдәләнгән бурыстарҙы уңышлы хәл итеү мөмкин булмаясаҡ.

Киләсәктә был типтағы ҡулланмаларҙы тағы ла камиллаштырырға, өлгәшелгән ыңғай яҡтарҙы дөйөмләштәреп, өрәңынан баҫмаға әҙерләргә кәрәк буласаҡ. Мәҫәлән, М. И. Дилмөхәмәтов менән А. Ә. Камалов әҙерләгән методик күрһәтмәлә лексик материал йыйыу өсөн ҡушымта рәүешендә 11 пункттан торған темалар исемлеге бирелгән. Лексиканы йыйыу һәм өйрәнеү барышында бындай тематик принципты ҡулланыу һис һүҙһеҙ ыңғай күренеш буласаҡ.

Диалектологтар алдында йәнә ошондай мөһим талап торғанлығы тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк: белгестәр, ғәҙәттә, тикшеренеүҙәр үткәреләсәк район (төбәк) тураһында алдан хәбәрҙар булырға, уның тәбиғәте, тарихы, географияһы, халҡы, тел үҙенсәлектәренә арналған белешмәләр, мөмкин булғанда, ғилми әҙәбиәт менән танышып сығырға тейештәр. Был талап диалектологик практикаға барыусы студенттарға ла ҡағыла.

Диалектологик практика тамамланғандан һуң студенттар алдында ерле һөйләш буйынса үҙҙәре йыйған материалды аҡ ҡағыҙға күсереп, системаға килтереү, анализлау һәм, шунан сығып, ғилми отчет яҙыу бурысы тора. Практика һөҙөмтәләренә арнап, факультет етәкселәре һәм уҡытыусылар ҡатнашлығында махсус конференция үткәрелә. Ә инде студенттарҙың ғилми отчеты титул битендә кәрәкле бөтөн мәғлүмәттәр ҙә күрһәтелеп, еренә еткереп эшләнгәндән һуң башҡорт теле кафедраһы архивына тапшырыла.

Башҡорт диалектологияһы, башҡорт тел белеменең айырым бер тармағы булараҡ, артабан да үҫә, тәрәнәйә барасаҡ. Башҡорт теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен тағы ла ентеклерәк өйрәнеү, уларҙы фонетик, грамматик һәм лексик планда бер-береһе менән һәм бүтән төрки (шулай уҡ, бәлки, төрки булмаған телдәр менән дә) сағыштырып тикшеренеүҙәр үткәреү, халыҡ теле, археология, этнография, мифология, топонимия мәғлүмәттәренә таянып, халҡыбыҙ тарихының боронғо дәүерҙәре менән бәйле һорауҙарға ла яуаптар табыу мөмкинлеге тыуасаҡ, сөнки халыҡ теле – халыҡтың тарихи хәтере, уның мәңгелек рухи хазинаһы, сөнки тел – ысын мәғәнәһендә энциклопедик мәғлүмәттәр сығанағы, халыҡ күңеленең тере һыуы, йәншишмәһе ул.

## БАШҠОРТ ДИАЛЕКТОЛОГИЯҺЫ БУЙЫНСА ӘҘӘБИӘТ

### I. Ғилми баҫмалар


1. *Аҙнабаев Ә. М., Аҡбулатова Р. Т., Шәкүров Р. З.* Башҡорт телендәге диалектизмдарҙың тарихи нигеҙе: юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: БДПУ нәшриәте, 2014. 120 бит.

2. *Аҙнағолов Р. Ғ.* Диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. 145 бит.

3. *Аҙнағолов Р. Ғ.* Ерле һөйләш шарттарында башҡорт телен өйрәтеү методикаһы. Өфө: Китап, 2006. 150 бит.

4. *Азнагулов Р. Г.* Языковые особенности оренбургских башкир/ Автореферат кандидатской диссертации. М.: Институт языкознания АН СССР, 1972. 17 с.

5. *Алсынбаева Р. Ш.* Уршакский говор башкирского языка/ Автореферат кандидатской диссертации. Уфа: БГУ, 2010. 25 с.

6. *Баишев Т. Г.* Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Под редакцией чл.-корр. АН СССР проф. Н. К. Дмитриева. М.: Изд-во МГУ, 1955. 112 с.; 2-е изд. Уфа: Гилем, 2006. 132 с.; 8 с. илл.

7. Башкирская диалектология: Говоры юго-востока Башкирии. Отв. ред. А. Г. Баишев, Н. Х. Ишбулатов. Уфа, 1963. 210 с.

8. Башкирский диалектологический сборник. Под редакцией Т. М. Гарипова, Н. Х. Ишбулатова, А. А. Юлдашева. Уфа, 1959. 224 с.

9. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты: 1954 йылғы диалектологик экспедиция отчеты. Өфө: Ғилем, 2008. 372 бит.

10. *Гарипов Т. М.* Диалектные словари башкирского языка// Исследования и материалы по башкирской диалектологии. Уфа, 1981. С. 114–118.

11. Грамматика современного башкирского литературного языка. Отв. ред. д. ф. н. А. А. Юлдашев. М.: Наука, 1981. С. 6–11; 25–27.

12. *Дильмухаметов М. И.* Говор среднеуральских башкир / Автореферат кандидатской диссертации. Уфа: БГУ, 1980. 24 с.

13. *Дильмухаметов М. И.* К вопросу о взаимоотношении лексики башкирских диалектов и литературного языка // Материалы и исследования по лексике башкирского языка. Уфа, 1990. С. 37–42.

14. *Дильмухаметов М. И.* Говор среднеуральских башкир. Уфа: Гилем, 2006.

15. *Дмитриев Н. К.* К вопросу об изучении башкирского языка// Вопросы башкирской филологии. М., 1959. С. 17–23.

16. *Дмитриев Н. К.* Отчет о работе лингвистико-фольклорного подотряда Башкирской экспедиции Академии наук СССР за 1928 г. // Башкирский диалектологический сборник. Уфа, 1959. С. 53–88.

17. *Зайнашева З. Ф.* Языковые особенности таныпского говора башкирского языка/ Автореферат кандидатской диссертации. Уфа: БГУ, 2008.

18. *Ишбердин Э. Ф.* Диалекты как источник обогащения литературного языка//Башкирская литература и литературный язык на современном этапе. Уфа, 1975. С. 99–105.

19. *Ишбирҙин Э. Ф.* Башҡорт телендә **һ, ç, ҙ** өндәре тураһында // Төрки тел ғилеменең көнүҙәк мәсьәләләре тураһында. Ғилми йыйынтыҡ. – Өфө: БДУ, 2002. – 115–126-сы биттәр.

20. *Ишбулатов Н. Х.* Кизильский говор // Башкирская диалектология. Уфа, 1963. С. 10–63.

21. *Ишбулатов Н. Х.* К вопросу о сравнительном изучении башкирских диалектов // Вопросы методологии и методики лингвистических исследований. Уфа, 1966.

22. *Ишбулатов Н. Х.* О принципах составления диалектологического словаря // Башкирская лексика. Уфа, 1966.

23. *Ишбулатов Н. Х.* Лексические связи башкирского языка и его диалектов с финно-угорскими языками // Вопросы финно-угорского языкознания, вып. IV. Ижевск, 1967.

24. *Ишбулатов Н. Х.* Данные диалектов языка к вопросу об этногенезе башкир // Археология и этнография Башкирии, т. IV. Уфа, 1970.

25. *Ишбулатов Н. Х.* Диалекты и говоры башкирского языка // Вопросы башкирского языкознания. Уфа, 1972. С. 82–130.

26. *Ишбулатов Н. Х.* Башкирская топонимия в ее отношении к диалектам башкирского языка // Ономастика Поволжья – 3. Уфа, 1973. С. 313–316.

27. *Ишбулатов Н. Х.* Сравнительное исследование диалектов башкирского языка / Автореферат докторской диссертации. Уфа: БГУ, 1975.

28. *Ишбулатов Н. Х.* Башҡорт теле һәм уның диалекттары. Өфө: Китап, 2000. 212 бит.

29. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш // Ғилми яҙмалар. Башҡорт филологияһы серияһы / Башҡорт дәүләт педагогия университеты, III сығарылыш, № 2. Өфө, 1958. 27 – 81-се биттәр.

30. *Кейекбаев Ж. Ғ.* Башҡорт теленең диалекттары тураһында // Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға. Өфө, 1960. 3–31-се биттәр.

31. *Киекбаев Дж. Г.* Некоторые вопросы изучения башкирских и татарских диалектов // Памяти В. А. Богородицкого. Изд-во Казанского ун-та, 1961. С. 361–371; то же в сб.: Исследования и материалы по башкирской диалектологии. Уфа, 1981. С. 8–19.

32. *Максютова Н. Х.* Восточный диалект башкирского языка (в сравнительно-историческом освещении). Ред. д. ф. н. К. М. Мусаев. М.: Наука, 1976. С. 292.

33. *Максютова Н. Х.* Формирование и современное состояние говоров восточного диалекта башкирского языка (Сравнительное исследование) / Автореферат докторской диссертации. Баку: Институт языкознания им. Насими АН АзССР, 1980. 34 с.

34. *Максютова Н. Х.* Диалектологический атлас башкирского языка / Итоги и задачи // Ареальные исследования в языкознании и этнографии: Тезисы. Уфа: БФАН СССР, 1985. С. 111 – 112.

35. *Максютова Н. Х.* Ареалы некоторых диалектных явлений башкирского языка // Исследования и материалы по башкирской диалектологии. Уфа, 1981. С. 20 – 36.

36. *Максютова Н. Х.* Лингвогеографическое изучение башкирского языка (Диалектологический атлас) 1973–1983 гг. Препринт доклада на заседании Президиума БФАН СССР. Уфа, 1983. 19 с.

37. *Максютова Н. Х.* Башкирские говоры, находящиеся в иноязычном окружении. Уфа: Китап, 1996. 288 с.

38. *Мәҡсүтова Н. Х.* Башҡорт теленең диалекттары // Башҡортостан: ҡыҫҡаса энциклопедия. Баҫманың баш мөхәррире Р. З. Шәкүров. Өфө, 1997.

39. *Миржанова С. Ф.* Кубалякский говор башкирского языка / Автореферат кандидатской диссертации. Уфа: БГУ, 1967.

40. *Миржанова С. Ф.* Некоторые вопросы исторической диалектологии башкирского языка // Всесоюзная тюркологическая конференция: Тезисы докладов и сообщений. Алма-Ата, 1976.

41. *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка. Отв. ред.д.ф.н. А. А. Юлдашев. М.: Наука, 1979. 272 с.

42. *Миржанова С. Ф.* Башҡорт әҙәби теле һәм төньяҡ-көнбайыш һөйләштәре // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1983, № 2. 50–53-сө биттәр.

43. *Миржанова С. Ф.* Южный диалект башкирского языка (в сравнительно-историческом освещении). Автореферат докторской диссертации. Баку, 1984. 48 с.

44. *Миржанова С. Ф.* Северо-западный диалект башкирского языка (Формирование и современное состояние). Уфа, 1991. 296 с.; изд. 2-е. Уфа: Китап, 2006. 296 с.

45. *Надергулов У. Ф.* Язык башкир Саратовской и Куйбышевской областей // Автореферат кандидатской диссертации. Уфа, 1981. 24 с.

46. *Надергулов У. Ф.* Иргизо-камеликские башкиры. Уфа: Китап, 1996. 128 с.

47. *Надергулов У. Ф.* Мензелинские башкиры (этнолингвистическая характеристика) // Профессор Дж. Г. Киекбаев и проблемы алтаистики: Тезисы докладов и сообщений научной конференции. Уфа, 1991. С. 63–64.

48. Образцы башкирской разговорной речи. Ред. д.ф.н. Н. Х. Максютова. Уфа, 1988. 224 с.

49. *Сабирьянова С. Г.* Наименования пищевых продуктов в башкирских говорах. Уфа, 2010.

50. *Сафин М. Х.* Мензелинские башкиры // Ватандаш. 1988, № 11. С. 156–163.

51. *Хисамитдинова Ф. Г.* Диалектная система башкирского языка // Актуальные проблемы диалектологии языков народов России: Материалы X региональной конференции (Уфа, 21–23 сентября 2010 года). Уфа, 2010. С. 225–230.

52. *Хөсәйенова Л. М.* Диалект теле һәм әҙәби тел // Ватандаш. 2002, № 11. С. 125–128.

53. *Хөсәйенова Л. М.* Башҡорт диалектологияһы: уҡыу ҡулланмаһы. – Стәрлетамаҡ: СДПА, 2011. 160 бит.

54. *Хәйруллина М. Ғ.* Туған тел һәм уны төньяҡ-көнбайыш райондарҙа өйрәнеү проблемалары // Башҡортостан уҡытыусыһы. 1997, №№ 1, 7; 1998, № 10.

55. *Хәйруллина М. Ғ.* Тамырҙарыбыҙ – тәрәндә: Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, уларҙың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге. Ғилми мөхәррире – профессор Р. З. Шәкүров. Өфө, 2002. 64 бит.

56. *Шакуров Р. З.* Башкирская диалектная лексика в топонимии Южного Урала и Предуралья // IX конференция по диалектологии тюркских языков: Тезисы докладов и сообщений. Уфа, 1982. С. 51–53.

57. *Шакур Р.* Курс башкирской диалектологии в вузах Башкортостана // Истоки духовности: Исследования. Публицистика. Уфа: Гилем, 2009. С. 230–236.

58. *Шакуров Р. З.* Северо-западный диалект и проблема определения его места в системе разговорного языка башкир // Актуальные проблемы диалектологии языков народов России: Материалы X региональной конференции (Уфа, 21–23 сентября 2010 года). Уфа, 2010. С. 245–251.

59. *Шакуров Р. З.* Еще раз о классификации диалектной системы башкирского языка // Актуальные проблемы диалектологии языков народов России: материалы XI межрегиональной конференции (Уфа, 19–21 октября 2011 года). Уфа, 2011. С. 198–201.

60. *Шәкүр Р.* Башҡорт теленең диалекттар системаһы һәм уны классификациялау мәсьәләһе // Быуаттар аманаты: Тикшеренеүҙәр, мәҡәләләр. Өфө: Китап, 2002. 218–222-се биттәр.

61. *Юлдашев А. А.* Язык тептярей / Автореферат кандидатской диссертации. М.: МГУ им. М. В. Ломоносова, 1950. 165 с.

62. *Юлдашев А. А.* Говор тептярей Учалинского района БАССР // Академику Владимиру Александровичу Гордлевскому. К его семидесятипятилетию. М.: Изд-во АН СССР, 1953. С. 329–342.

63. *Юлдашев А. А.* К изучению говоров башкир Туймазинского района БАССР // Башкирский диалектологический сборник. Уфа, 1959. С. 141–149.

64. *Юлдашев А. А.* Северо-западный диалект башкирского языка и его отношение к литературному языку // Вопросы диалектологии тюркских языков. Фрунзе, 1968. С. 67–71.

65. *Юлдашев А. А.* Диалекты башкирского языка // Диалекты тюркских языков. М., 2010.

66. *Юсупов Х. Г.* Асинский говор башкирского языка / Автореферат кандидатской диссертации. М.: Институт языкознания АН СССР, 1955. 15 с.

67. *Якупов Р. И.* Тептяри: Историко-этнологические очерки. К проблеме генезиса этничности. М.: Старый сад, 2001. 268 с.; илл., карты.

68. *Яруллина У. М.* О некоторых морфологических особенностях говора дёмских башкир // Из наблюдений над башкирскими говорами. Уфа, 1963.

69. *Яруллина У. М.* К изучению категории наклонения глаголов в башкирских диалектах (На материале дёмского говора) // Вопросы категории времени и наклонения глагола в тюркских языках. Баку, 1968. С. 182–188.

70. *Яруллина У. М.* Лексика дёмского говора. Отв.редактор д.ф.н., проф. Ф. Г. Хисамитдинова. Уфа, 2009. 168 с.

## II. Анкеталар, һораулыҡтар, һүҙлектәр, программалар, методик күрһәтмәләр

71. Анкета. Башҡорт теле һөйләштәренән материалдар йыйыу өсөн. Төҙөүселәре: Н. Х. Ишбулатов, Н. Х. Мәҡсүтова, С. Ф. Миржанова. Яуаплы ред. Н. Х. Ишбулатов. Өфө, 1961. 56 бит.

72. «Башҡорт диалектологияһы» курсының программаһы. Төҙөүсеһе проф. Р. З. Шәкүров. Өфө: БДПИ, 1999. 39 бит; Шул уҡ программа. Тулыландырылған 2-се баҫмаһы. Өфө: БДПУ, 2013. 48 бит.

73. Башҡорт диалектологияһы: Контроль эш яҙыу өсөн күрһәтмәләр. Төҙөүселәре: проф. Р. З. Шәкүров, проф. Н. Х. Ишбулатов. Өфө: Башҡортостан Республикаһының Милли музейы. Өфө, 2003. 16 бит.

74. Башҡорт теленең диалектологик атласы өсөн материалдар йыйыу программаһы. Төҙөүсеһе Н. Х. Мәҡсүтова. Өфө, 1973. 32 бит.

75. Башҡорт теленең һүҙлек составын йыйыу өсөн һораулыҡ. Төҙөүселәре: Н. Х. Ишбулатов, З. К. Ишмөхәмәтов, С. Ф. Миржанова, У. М. Яруллина. Өфө, 1959.

76. Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге. I том. Көнсығыш диалект. Ред. Н. Х. Мәҡсүтова, Н. Х. Ишбулатов. Өфө, 1967. 300 бит; II том. Көньяҡ диалект. Ред. Н. Х. Мәҡсүтова. Өфө, 1971. 327 бит; III том. Көнбайыш диалект. Өфө, 1987. 232 бит.

77. Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге. Төҙөүселәре: М. И. Дилмөхәмәтов, У. Ф. Нәҙерғолов, С. Ғ. Сабирйәнова, Ғ. Ғ. Гәрәева. Өфө: Китап, 2002. 432 бит.

78. Диалектологический атлас башкиского языка. Составители: Н. Х. Максютова, С. Ф. Миржанова, У. Ф. Надергулов, М. И. Дильмухаметов, С. Г. Сабирьянова, Г. Г. Гареева. Уфа: Гилем, 2005. 232 с.; 169 карт.

79. Методические рекомендации по сбору диалектного материала башкирского языка. Составители: А. А. Камалов, М. И. Дильмухаметов. Уфа: Изд-во БГПУ, 2003. 32 с.

80. *Хөсәйенова Л. М.* Башҡорт диалектологияһы: Диалектологик материалдар йыйыу буйынса программа. 2-се баҫма, тулыландырылған. Стәрлетамаҡ: Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы, 2009. 36 бит.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Баш һүҙ** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .3

**Инеш** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .6

Диалектология фәне тураһында дөйөм төшөнсә. Уның өйрәнеү объекты, бурыстары һәм маҡсаттары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .6

Диалектологияны өйрәнеүҙең әһәмиәте. Диалекттар һәм әҙәби тел. Диалектология һәм бүтән фән тармаҡтары . . . . . . . . . . . . . . . . . .11

Диалект шарттарында һәм хәҙерге ҡала мәктәптәрендә әҙәби телде уҡытыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .16

Башҡорт теленең һәм диалекттарының бүтән төрки телдәренә мөнәсәбәте . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .22

Башҡорт теленең диалекттарын өйрәнеү тарихы . . . . . . . . . . . .26

Башҡорт теленең диалекттар системаһы һәм уны классификациялау мәсьәләһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .33

Башҡорт теле диалекттарының һәм һөйләштәренең хәҙерге классификацияһы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .36

Башҡорт телендә диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе айырымлай торған үҙенсәлектәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .38

**Башҡорт теленең диалекттары һәм һөйләштәре**

*I бүлек.* **Көнсығыш диалект** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .41

Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Диалекттың төп фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Көнсығыш диалект составындағы һөйләштәр

1. *Әй һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .49

Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Дыуан-мәсетле һөйләшсәһе
Лағыр һөйләшсәһе

Лапаҫ һөйләшсәһе
Петрушка (бөтөрөшкән) һөйләшсәһе
Әй һөйләшенең йәнле һөйләү теле өлгөһө

2. *Мейәс һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 58
Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар
Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре

3. *Ҡыҙыл һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 63
Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар
Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

4. *Асыуҙы (йәки Учалы) һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 71
Типтәрҙәр тарихынан мәғлүмәттәр. Асыуҙы (Учалы) типтәр-башҡорт ауылдарының килеп сығышы
Төп фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

5. *Арғаяш һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 79
Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

6. *Салйогот (салйот) һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 86
Биләгән территорияһы, халыҡтың этник составы
Һөйләштең иң мөһим фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

*II бүлек.* **Көньяҡ диалект** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 94
Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы

1. *Әйек-һаҡмар (йәки төп көньяҡ) һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . 97
Дөйөм мәғлүмәттәр
Фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөләре

2. *Дим һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 106
Биләгән территорияһы, халыҡтың этник составы
Һөйләштең төп фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

3. *Өршәк һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 118
Биләгән территорияһы, халыҡтың этник составы
Фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөләре

4. *Урта һөйләш* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 131
Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Һөйләштең төп фонетик үҙенсәлектәре
Урта һөйләш эсендәге һөйләшсәләр
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөләре

5. *Егән һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 142
Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар
Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөләре

*III бүлек.* **Төньяҡ-көнбайыш (көнбайыш) диалект** . . . . . . . . . . . . 153
Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Төньяҡ-көнбайыш диалект өсөн характерлы үҙенсәлектәр

1. *Ҡариҙел һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 161
Биләгән территорияһы, һөйләшкә ҡараған ауылдар
Һөйләштең фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

2. *Урта Урал һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 169
Һөйләштең территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөһө

3. *Ғәйнә һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 186
Ғәйнә башҡорттары, уларҙың йәшәгән территорияһы,
ғәйнәләрҙең йәнле һөйләү теле
Һөйләштең фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөләре

4. *Танып һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 203
Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләү теле өлгөләре

5. *Түбәнге ағиҙел-ыҡ һөйләше* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 216
Биләгән территорияһы, халыҡтың ырыу-ҡәбилә составы
Фонетик үҙенсәлектәре
Морфологик үҙенсәлектәре
Лексик үҙенсәлектәре
Һөйләштең һәм төньяҡ-көнбайыш диалекттың лексикаһы
буйынса ҡайһы бер һығымталар
Һөйләү теле өлгөләре

Диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе өйрәнеү өсөн
материалдар йыйыу методтары һәм алымдары . . . . . . . . . . . . . . . 235

Башҡорт диалектологияһы буйынса әҙәбиәт . . . . . . . . . . . . . . . . . 240

Автор хаҡында биографик белешмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 253




Башҡорт ырыуҙары һәм ер биләмәләре картаһы
(С. И. Руденконың «Башкиры: историко-этнографические очерки»
китабынан. М.-Л., 1955)




Башҡорт теленең 1955 йылда Т. Ғ. Байышев төҙөгән диалектологик картаһы

## Автор хаҡында биографик белешмә

Рәшит Шәкүр – башҡорт тел һәм әҙәбиәт белеме, топонимика өлкәһендә күренекле белгес, билдәле шағир, публицист һәм йәмғәт эшмәкәре.

Рәшит Шәкүр (Рәшит Закир улы Шәкүров) 1937 йылдың 11 ғинуарында Башҡорт АССР-ының Әлшәй (хәҙер Стәрлетамаҡ) районы Яңы Абдрахман ауылында крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Күршеләге Ауырғазы районы Мораҙым ете йыллыҡ мәктәбен (1952), Октябрьский нефть техникумын (1956) тамамлай. Өс йылдан артыҡ әрме хеҙмәтендә йөрөп ҡайта, Башҡортостан радиоһында хәбәрсе булып эшләй. 1965 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын ҡыҙыл диплом менән тамамлай, оҙаҡ йылдар «Совет Башҡортостаны» (хәҙерге «Башҡортостан») гәзите редакцияһында, ғилми учреждениеларҙа, Башҡортостан Яҙыусылар союзында төрлө вазифалар башҡара, «Башҡорт энциклопедияһы» ғилми нәшриәтенең директоры була. 1998–2012 йылдарҙа М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында башҡорт теле кафедраһы профессоры булып эшләй.

Р. Шәкүр – төрлө жанрҙа яҙылған өс тиҫтәгә яҡын китаптың, йәнә 400-ҙән артыҡ ғилми хеҙмәттең авторы. Уның исеме республикабыҙҙа энциклопедия төҙөү эштәренә нигеҙ һалыусы булараҡ киң билдәле. 1996 йылда уның мөхәррирлегендә 50 мең тираж менән урыҫ телендә «Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедияһы» донъя күрҙе. 1997 йылда был капиталь хеҙмәт башҡорт телендә нәшер ителде һәм республикабыҙ йәмғәтселеге тарафынан быуат китабы тип баһаланды.

Башҡорт поэзияһында Рәшит Шәкүрҙең үҙ моңо, үҙ юлы, үҙенә генә хас тауышы бар. «Йөрәгемдә – ҡояш» (1970) тигән тәүге шиғри йыйынтығы менән үк ул үҙен көслө рухлы, талантлы шағир итеп танытты. Артабан уның «Тауҙарым, далаларым» (1982), «Заманалар

юлында» (1988), «Малин-ҡала» (1997), «Сәңгелдәгем – сал дала» (2003), «Ыласындар оса бейектә» (2007), «Ынйы бөртөктәре» (2007), «Ғүмер көҙө» (2012) исемле шиғырҙар, йырҙар һәм поэмалар йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты. Р. Шәкүрҙең шиғырҙарына биш тиҫтәгә яҡын йыр яҙылған. Айырым әҫәрҙәре, урыҫ теленән тыш, украин, ҡаҙаҡ, төрөк, сыуаш, болгар, немец телдәренә тәржемә ителде.

Милли әҙәбиәтебеҙ тарихын өйрәнеүҙә лә Р. Шәкүрҙең өлөшө ғәйәт ҙур. Уның бөйөк башҡорт шағиры Мифтахетдин Аҡмулланың тормошон һәм ижадын өйрәнеүгә арналған «Шиғриәт йондоҙо» тигән монографияһы юғары баһаға лайыҡ. Китап урыҫ телендә өс тапҡыр – 1981, 1996 һәм 2006 йылдарҙа ҙур тираждар менән баҫылды һәм әҙәбиәт һөйөүселәрҙең оло ихтирамын яуланы. Ғалим шулай уҡ 6 томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»н яҙыуҙа һәм мөхәррирләүҙә, башҡорт әҙәбиәте буйынса дәреслектәр яҙыуҙа ҡатнашты.

Көньяҡ Урал һәм Урал алды топонимияһын өйрәнеүсе буларaҡ, Р. Шәкүрҙең исеме фәндә киң билдәле. Фәндең был тармағы буйынса уның «Ерҙең хәтер китабы» (1984), «Географик атамалар эҙенән: Дим буйының топонимияһы» (1986), «Исемдәрҙә – ил тарихы» (1993) тигән хеҙмәттәре студенттар, аспиранттар, тыуған яҡты өйрәнеүселәр өсөн өҫтәл ҡулланмаһына әйләнде. Ул шулай уҡ «Башҡорт АССР-ының топонимдар һүҙлеге»н (1980, 2002) төҙөүселәрҙең береһе.

1996 йылда Р. Шәкүрҙең, фольклористика өлкәһендә күп йыллыҡ тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәһе буларaҡ, «Сыңрау торналар иле» исемле мәҡәләләр һәм очерктар йыйынтығы баҫылып сыҡты. Музыка белгесе Фәрит Камаев менән берлектә ул 1988 йылда атаҡлы башҡорт халыҡ ҡурайсыһы Кәрим Дияровтың репертуарынан «Сал Уралдың моңдары» тигән йырҙар, көйҙәр һәм йыр-көй тарихтарын туплаған ҡиммәтле йыйынтыҡ әҙерләп баҫтырҙы. «Арҙаҡлы башҡорттар» (1998, 2005) исемле ғилми-биографик очерктар йыйынтығы уҡыусылар араһында популярлыҡ яуланы.

1998 йылда «Көньяҡ Урал һәм Урал алды башҡорт топонимияһын тарихи-стратиграфик һәм ареаль тикшереү» тигән темаға ҙур уңыш менән докторлыҡ диссертацияһы яҡланы.

Рәшит Шәкүр 1989–1991 йылдарҙа «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең рәйесе булды, республикабыҙҙың мөстәҡиллеге өсөн көрәштә алғы сафта барҙы. 1988–2015 йылдарҙа ул – Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара ағзаһы, 1999–2011 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Президенты эргәһендәге Административ-территориаль ҡоролош комиссияһы ағзаһы, 2004–2011 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте эргәһендәге Топонимика хеҙмәте

рәйесе булды. 2002 йылдан – Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) башҡарма комитеты ағзаһы.

Р. Шәкүр – Башҡортостан Республикаһы Дәүләт гимнының (Рауил Бикбаев менән берлектә) авторҙашы.

Шағир һәм ғалим Рәшит Шәкүр – Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Мифтахетдин Аҡмулла, Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева исемендәге премиялар лауреаты, Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Халыҡ-ара төрки академияһы академигы. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә индергән хеҙмәттәре өсөн 2007 йылда ул Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде.

2011 йылдың декабрендә уға Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайының (конгресының) «Башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәтен үҫтереүгә индергән күренекле хеҙмәте өсөн» йәмәғәт премияһы тапшырылды. 2018 йылда Рәшит Шәкүргә «Өфө ҡалаһының почетлы гражданы» тигән исем бирелде.

Учебное издание

**Шакуров** Рашит Закирович
(Рашит Шакур)

**БАШКИРСКАЯ
ДИАЛЕКТОЛОГИЯ**

*(на башкирском языке)*

Уҡыу баҫмаһы

**Шәкүров** Рәшит Зәкир улы
(Рәшит Шәкүр)

**БАШҠОРТ
ДИАЛЕКТОЛОГИЯҺЫ**

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *А. В. Иҙелбәкова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Л. Ф. Саниева, Г. Р. Попова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.05.2020. Форматы 60×84 $^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы.
BTSchoolBook гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма таб. 14,88. Шартлы буяу отт. 15,35. Иҫәп-нәшер таб. 12,10.
Тиражы 3650 дана. Заказ 1.0062.20.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

«Башҡортостан» республика нәшриәте – Башҡортостан Республикаһының
«Республика Башкортостан» нәшриәт йорто
дәүләт унитар предприятиеһы филиалы.
450079, Өфө, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.